В последнее время современное обучение немыслимо без применения ресурсов Интернета. Сеть Интернет несёт громадный потенциал образовательных услуг. Это и электронная почта, и поисковые системы, которые универсальны для использования, как на уроке, так и во внеурочное время.

Применение интернет технологий в преподавании литературы способствуют совершенствованию практических умений и навыков, позволяют эффективнее организовать самостоятельную работу и индивидуализировать процесс обучения, повышают интерес к урокам словесности, активизируют познавательную деятельность учащихся [5]. Использование интернета возможно на разных этапах. В распоряжении современного учителя русского языка и литературы имеются программные, программно-аппаратные, технические средства и устройства, которые обеспечивают сбор, накопление, сохранение, обработку информации и предоставляют доступ к информационным ресурсам компьютерных сетей [3].

Возможности использования сети Интернет на уроках литературы заключаются в следующем:

1. Свободный поиск Интернет-ресурсов по заданной теме;

2. Изучение конкретного Интернет-ресурса по методическим указаниям учителя;

3. Использование Интернет-ресурса в качестве дидактического средства на уроке;

Поиск информации в Интернете может сопровождать такие виды учебной работы, как написание рефератов, сбор материала по теме, иллюстрирование своих текстов материалами из Интернета. Таким образом, творческий подход позволяет максимально эффективно использовать в своей работе богатый инструментарий, представляемый современными компьютерными технологиями [2].

Здесь вариантов работы может быть много:

1. Обзорная лекция с использованием Интернет-ресурсов (предполагает свободную Интернет-навигацию учителя). Апробировано мною на уроках литературы для проведения уроков- лекций. Вводные уроки по изучению жизненного и творческого пути писателя Камиля Зиганшина провожу в форме виртуальной экскурсии. Большой интерес вызвало у учащихся заочное знакомство с Камилем Фарухшиновичем, его постоянное путешествие по России (Дальний Восток, Восточная Сибирь, Полярный и Южный Урал, Кавказ) и труднодоступным, редко посещаемым местам планеты (Гималаи, Непал, Танзания, о. Занзибар, Боливия, Патагония, Кения, Огненная Земля, Перу, Эквадор, Бразилия, вулканы Чили, Аргентины, африканский вулкан Килиманджаро с масаями и национальными парками). Фото- и видеообъекты создают наглядное представление о жизненном пути Камиля Зиганшина, о специфике его творчества [2].

2. Режим «Справочного бюро». Довольно часто в процессе урока возникают ситуации, при которых просто необходимо воспользоваться справочной информацией. И «живой Интернет» позволяет понять, что все знания мира – рядом.

Распространение компьютерных технологий очень часто называют в ряду причин падения интереса школьников к чтению. И Интернет чаще воспринимается как враг литературного образования. Однако, оказывается, сегодня интернет - ресурсы могут стать хорошим подспорьем на уроках – и для учителя, и для школьников. Не говоря уже о том, что современный литературный Интернет может стать настоящей пищей для души. Важно только правильно искать [4].

Анализ проблем, связанных с осмыслением влияния интернет-коммуникаций на развитие личности, процессов воспитания и обучения школьников; определение соотношения технологического и этического аспектов владения цифровыми технологиями; целей и форм взаимодействия педагога с обучающимся в условиях цифровизации; технологии организации учебной деятельности с использованием цифровых инструментов позволяют говорить об актуальности разработки научно-методического сопровождения

преподавания русского языка и литературы с использованием цифровых образовательных ресурсов [3]. Среди методов исследования ведущим становится метод контент-анализа открытых баз данных педагогов и филологов-исследователей, разнообразных форм педагогической коммуникации в интернет-пространстве, в которую вовлечены и в разной степени интегрированы группы специалистов различных направлений, где учителя русского языка и литературы позиционируют себя как экспериментаторы. Однако анализ источников подтверждает, что учителя-филологи недостаточно владеют информацией о том, какие цифровые образовательные ресурсы (ЦОР) существуют и как можно их применять на уроках русского языка и литературы. Требуют исследования вопросы влияния интернет-коммуникаций на развитие личности, процессы воспитания и обучения школьников; разработки научно обоснованной стратегии педагогического сопровождения учителя и ученика при обучении русскому языку и литературе в условиях цифровизации; выбор наиболее эффективных форм взаимодействия педагога с обучающимся; разработки технологии организации учебной деятельности с использованием цифровых ресурсов при обучении русскому языку и литературе; проектирования качественного образовательного медиаконтента. обозначенных проблем связано и с исследованием современного речевого пространства школы в аспекте изучения целесообразности и эффективности использования информационно-коммуникационных и информационно-коммуникативных технологий при обучении русскому языку и литературе [5].

Информационные интернет – ресурсы полезны при сборе дидактического материала к уроку, а отобранные материалы могут быть представлены на уроке, например, биографические справки, монография писателя.

При этом Интернет позволяет дополнять школьные учебники по литературе, предоставляя ученику право выбирать точку зрения или формировать свою. Учитель может формировать собственную базу данных, а ученик – свою.

Интернет-библиотеки помогут учителю справиться с дефицитом текстов при подготовке учащихся к уроку литературы и в течение самого урока.

В работе над художественными текстами в школе большой интерес представляют разные формы интерпретаций художественного текста, сопоставляя которые с эстетическим впечатлением учащихся, учитель может пробудить активность читательской рефлексии. При этом Интернет предоставляет самые разные варианты интерпретаций литературных произведений [6, 3].

Информатизация образовательного процесса позволяет использовать интернет-источники в режиме онлайн («здесь и сейчас»), непосредственно на уроке. Но сама логика обращения к информационным интернет-ресурсам должна быть продумана заранее.

Естественно, что все формы использования информационных возможностей интернет - ресурсов предугадать нельзя и, следовательно, описать способы обращения к ним на уроке затруднительно, тем не менее некоторые из них могут быть заранее спрогнозированы [3].

Интернет – наиболее динамично развивающаяся сегодня информационная среда. Характер, целеполагание и качество профессиональных интернет- ресурсов весьма различны, как и состав представленных в них материалов. Поэтому педагогическая наука, с одной стороны, будет искать способы адаптации новых мультимедиа технологий к уже имеющимся в арсенале учителя методикам, а с другой – искать новые оригинальные способы вовлечения компьютерных технологий в урок [5].

Рассмотрим пример. Нам часто приходится готовить для учащихся проверочные работы, в частности связанные с анализом фрагментов литературного текста. Например, самый простой вид такой работы – узнавание героя по словесному портрету, речевой характеристике, особенностям поведения. Чтобы подготовить класс к такой работе, да ещё и по вариантам, нужно потратить много времени. Умение работать с электронными текстами серьёзно облегчает задачу: в сетевой библиотеке находим текст, выбираем из него нужные для работы фрагменты, копируем их, потом вставляем в электронный документ и распечатываем необходимое количество копий. Подготовка таких работ занимает немного времени. А в результате можно иметь целый комплект проверочных и диагностических работ по всем темам курса. Таким же способом можно готовить и раздаточные материалы к урокам – фрагменты текстов для анализа, стихотворения, цитаты из критических и литературоведческих книг.

Посмотрим, что получает педагог при работе с электронными материалами.

1. «Всё своё – всегда с собой» устройства хранения информации (USB -накопитель), и под рукой у учителя могут быть все его рабочие материалы: тексты произведений, конспекты, фрагменты ученических работ, графические изображения ит. д.

2. «Конспект за 5 минут». Быстрая компиляция любых текстов. Открываем новый файл в Microsoft Word, копируем материалы из разных источников, вставляем в новый документ – получаем необходимый «здесь и сейчас» материал. Из имеющихся материалов можно легко делать проверочные работы для учеников. Например, многие учителя практикуют проверку знания текста произведения через быстрые тесты, проводимые на уроках.

3. «Отсутствие конспектов». Как известно любому учителю, в обычном классе соседствуют ученики аудиального и визуального типов восприятия. Первым проще воспринимать материал на слух, вторым удобнее, если он представлен графически. Сегодня количество подростков-визуалов значительно больше, чем учеников, способных слушать и слышать [4].

Работа на уроке часто сводится к тому, что от ученика требуется динамическое переключение восприятий и действий (сейчас слушаем, затем обсуждаем, потом записываем). Даже старшеклассникам трудно не терять нить урока и при этом фиксировать его ход письменно, в виде конспекта, который мы часто предлагаем им вести. Записывая слова, они теряют общий смысл, логику, эмоциональный настрой. Между тем существование электронных версий материалов, которые по окончании урока все ученики могут получить от учителя (в электронном виде или в распечатках – не важно), могло бы позволить ученикам сфокусировать внимание на самом ходе урока, на словах учителя и высказываниях одноклассников и работать более продуктивно [6].

Сегодня достаточно часто можно услышать мнение о том, что бумажная книга как информационный носитель себя изживает, что через некоторое время её существование будет определяться скорее не функциональной, а культурно-исторической ролью. Чтобы избежать споров, в которых так или иначе выражаются личные пристрастия, попробуем на рациональном уровне сравнить особенности бумажной и электронной книги [3].

**ЛИТЕРАТУРА**


1. Ахметшин, М.А. Охотник, инженер, писатель… [К.Ф. Зиганшин] // Истоки. – 2005. – 2 февраля. – с.15.
2. Бикбаев, Р. Писатель Зиганшин остается связистом: в совершенстве владея языком культуры, он объединяет людей с окружающими миром: на соискание премии им. Салавата Юлаева / Р. Бикбаев // Республика Башкортостан. - 15 августа.
3. Бородина, О.В. Мультимедийные обучающие и презентационные программы как средство обучения: проблемы и перспективы / О. В. Бородина, А.В. Липатов // Инновации в образовании. – 2019
4. Галяутдинов, А. «Огненное кольцо Земли»: К. Зиганшин – участник кругосветного путешествия: стартовала 900-дневная кругосветная экспедиция. Рассказ К. Зиганшина о путешествии //Истоки.-2011.-3 августа
5. Караваев, Н. Л. Реализация системно-деятельностного подхода в условиях информационно-образовательной среды с применением образовательных технологий / Н. Л. Караваев, Т. Н. Суворова // Информатика и образование. – 2017 – № 8 – С. 38-43.
6. Шишова, А.А. Электронные ресурсы в помощь школьникам.// Современная библиотека. – 2019 – № 1 – С. 44.


.© Валиева Э.Р., Алибаев З.А., 2023

**УДК 81.26**

*Вахитова Т.Ф., канд. филол. наук, ст. преп.,*
*Аманбаева А.,студент*
*Мырзабаева Д., студент*
*АРУ им. К. Жубанова, г. Актобе, Республика Казахстан*

# КАЗАХИЗМЫ В РУССКОМ ЯЗЫКЕ: ЛИНГВОКУЛЬТУРОЛОГИЧЕСКИЙ АСПЕКТ

**Аннотация.** Авторами статьи раскрываются понятия билингвизма, переключения кода, рассматриваются факторы влияния родного языка на второй язык. Описываются особенности функционирования русского языка в Казахстане, дается характеристика национального варианта русского языка.

**Annotation.** The authors of the article reveal the concepts of bilingualism, code switching, consider the factors of influence of the native language on the second language. The features of the functioning of the Russian language in Kazakhstan are described, the national variant of the Russian language is characterized.

**Ключевые слова:** язык, русский язык, казахизмы, билингвизм, коммуникация, языковая картина мира.

**Key words:** language, Russian language, Kazakhisms, bilingualism, communication, language picture of the world.

Исторически сложившийся на территории Казахстана казахско-русский билингвизм оказал влияние на русскую речь и способствовал формированию национального варианта русского языка, который Журавлёва Е.А. [1, 17] назвала русским языком Казахстана. Однако не все ученые (А.Д. Дуличенко) разделяют мнение о функционировании национальных разновидностей русского языка, считая, что в данном случае целесообразнее говорить о регионализации лексической системы русского языка за пределами российского ареала [2, 115]. Мы солидарны с подходом Журавлёвой Е.А. и назовем упомянутое явление региональным вариантом русского языка, представляющего собой гибрид, появившийся в результате влияния государственного казахского языка и вкрапления казахизмов в русскую речь. Вопросы вариативности языка поднимались в работах многих исследователей: Р.А. Будагова, Ю.Д. Дешериева, В.К. Журавлева, В.А. Звегинцева, Н.Б. Мечковской, Г.В. Степанова, А.Д. Швейцера, Т.Р. Белла, В. Лабова и др.

Наиболее ярко своеобразие различных форм языка проявляется в лексическом ярусе языка, имеющего, как известно, подвижный характер и подверженного изменениям. Введение слов из казахского языка в русский дискурс обусловлено языковыми контактами, возникшими в давние времена. Употребление казахизмов в русской речи позволяет передать национальный колорит и получить представления об особенностях языковой картины мира казахского народа.

Подавляющее большинство казахизмов не нуждается в комментариях или переводе, поскольку в русскую речь входят единицы казахского языка разной степени освоенности, как безэквивалентные, так и эквивалентные. Данные национально-культурные единицы входят в разные тематические группы: обычаи, обряды и праздники (*Наурыз, тусау кесу, той, бата*), наименования административных органов и должностей (*акимат, мажилисмен, мугалим, бастык*), одежда (*чапан, орамал, кажекей*), еда (*кумыс, баурсак, казы*), родственные отношения (*апа, агай, келин, бауырым*).

Билингвизм в Казахстане закреплен на государственном уровне, что нашло отражение в Конституции страны, согласно которой русский язык в качестве официального языка употребляется наравне с государственным в органах исполнительной власти и других учреждениях.

Явление перехода от одного языка к другому в письменной или устной коммуникации получило наименование переключение или смешение кода. Это происходит неосознанно при одинаковом уровне владении двумя языками. Например, *Пожелай мне удачи. Да-да, **ак жол саган** («счастливого пути тебе»)*. Описываемая ситуация может возникнуть при отсутствии эквивалента в неродном языке: *Родители сегодня в магазине купили большое **корпе*** («постельная принадлежность, одеяло из верблюжьей шерсти, обшитое из лоскутов ткани национальными узорами»).

В результате наших наблюдений за коммуникативным поведением билингвальной личности были записаны следующие фразы:

- Жақсы *результат* (вместо казахского *нәтиже*) болсын! (Пусть будут хорошие результаты!);
- Мен кеттім *библиотекаға* (вместо казахского *кітапхана*) (Я пошел в библиотеку);
- Что твой *бай* (муж) сказал?;
- Пусть *бала* (ребенок) будет здоров!;
- Ее поступок – самый настоящий *ұят* (позор);
- Мне *ақша* (деньги) скинь.

Приведенные примеры характеризуют принадлежность билингва к субординативному типу, когда две языковые системы билингва «смешиваются», что может порождать разного рода интерферентные ошибки под влиянием Я1 на Я2. При этом, как пишет известный психолингвист Н.В. Дмитрюк, фрагмент казахской языковой картины мира переносится в русскую, способствуя возникновению интеркультурем [3, 207].

В речевой практике казахстанских билингвов можно проследить возникновение окказиональных слов, образованных гибридным способом: на основе казахского корня с добавлением русских аффиксов. Приведем ряд примеров:

- *поусекать – посплетничать* (от каз. *өсек* – сплетня),
- *рахатизм – удовольствие* (от каз. *рахат*),
- *давай пока, на хабаре* (*хабар* с каз. – новость, сообщение),

- *мамбетизм* (*мамбет – у*ничижительное прозвище казахов – урожеенцев сельской местности, не имеющих культуры поведения),
- *бастыки* (начальники),
- *бешбармачить* (от основы *бешбармак* – главное национальное блюдо казахского народа),
- *кыздарочки, с праздником!* (*кыздар* – девочки, девушки),
- *званда* (от русского корня *звон* с присоединением казахского суффикса –да).

Стоит отметить, что подобные окказиональные лексические единицы употребляются преимущественно представителями молодого поколения в устной речи с целью придать своему диалогу определенную коннотативную окраску и продемонстрировать стремление к взаимодействию языков и культур. Автор статей о специфике билингвизма и полилингвизма С.Т. Саина подтверждает наши предположения и считает, что «в семейно-бытовом, дружеском общении казахский язык чаще доминирует в двуязычной речи билингвов, русский язык выполняет функцию экспрессивного, вспомогательного, по отношению к казахской части, средства. Пропорции двух языков зависят от социальных компонентов конкретной ситуации (возраст, образование, социальное положение и т.д.)» [4, 68].

Таким образом, переключение языкового кода может использоваться как динамичный ресурс для выражения взаимопонимания коммуникации в этническом двуязычном обществе. В социокультурной практике современного Казахстана смешение кода объясняется не как проявление речевой неграмотности, а как специфический семиотический ресурс.

## ЛИТЕРАТУРА

1. Журавлёва Е.А. Вариативность лексической системы: русский язык как полинациональный язык: автореф. дис. … д-ра филол. наук / Е.А. Журавлева. – Алматы, 2007. – 43 с.
2. Дуличенко А.Д. Русский язык: покидая XX век… (некоторые размышления) / А.Д. Дуличенко // Русский язык как язык межкультурного и делового сотрудничества в полилингвальном контексте Евразии: мат-лы II междунар. конгресса. – Астана: Сарыарка, 2009. – 720 с.
3. Дмитрюк Н.В. Русский язык в автохтонном и неавтохтонном языковом сознании казахстанцев // Психолингвистика в XXI веке: результаты, проблемы, перспективы. – 2009. – №2. – С. 207-208.
4. Саина С.Т. Двуязычие и многоязычие в семейной жизни и в повседневном быту // Речевое общение в условиях языковой неоднородности. – 2000. – № 4. – С. 60-75.

© Вахитова Т.Ф., Аманабаева А., Мырзабаева Д., 2023

УДК 811

*Гайсина А.Р., студент*
*Научный руководитель: Бухарова Г.Х.,*
*д-р филол. наук, проф.*
*БГПУ им. М. Акмуллы, г. Уфа*

# «ШУРА» – XX БЫУАТ БАШЫНДАҒЫ ТӘҮГЕ БАҪМА ЖУРНАЛ

**Аннотация.** В статье рассматриваются проблемы печатного дела на родном языке в начале прошлого века и внутренней организации журнала “Шура”. Показывается роль журнала в просвещении народа.

**Annotation.** The article discusses the problems of printing in the native language at the beginning of the last century and the internal organization of the magazine “Shura”, as well as the importance and necessity of educating the people through the media.

**Ключевые слова.** Журнал, журнал на родном языке, журнал “Шура”, Ризаитдин Фахретдинов.

**Key words.** Magazine, magazine in the native language, magazine “Shura", Rizaitdin Fahretdinov.

Мәғрифәттең һәм фәндең үҫешен, милләттең һәм, ғөмүмән, цивилизацияның алға барыуын, яңы асыштар яһауын баҫма һүҙһеҙ күҙ алдына килтереүе ауыр. Кешегә һәр быуатта тәжрибә менән алышыу мөһим. Бының өсөн төп ярҙамсы булып матбуғат тора. Рәсәйҙә иң беренсе гәзит Петр Батша I заманында баҫыла башлай, дәүләт сиктәрендә һәм күрше илдәрҙә булған хәрби, сәйәси хәлдәр хаҡында хәбәр итә. Башҡортостанда (һәм бүтән халыҡтар йәшәгән ерҙәрҙә) баҫмаға рөхсәт егерменсе быуат башында ғына бирелә. Иң тәүге баҫмаларҙан булып Ырымбур өлкәһендә сыҡҡан “Ваҡыт” гәзите менән “Шура” журналы тора.

Матбуғат өлкәһендәге төп үҙгәрештәр 1905 йылдағы тәүге революцион идеологиялар арҡаһында булған сәйәси үҙгәрештәрҙән һуң килә. Ошо уҡ ситуация менән файҙаланып, Мөхәмәтзакир Рәмиев төрки телендә яңы журнал сығарырға рөхсәт ала. Баш мөхәррир итеп Ризаитдин Фәхретдинов саҡырыла. 1908 йылдың ғинуарында журналдың тәүге һаны Ырымбурҙа баҫылып та сыға һәм 1917 йылға тиклем баҫылыуын дауам итә.

“Шура”ның эске торошон, рубрикаларын Р.Фәхретдинов үҙе ойоштора. Әммә беренсе һандарҙағы йүнәлештәр аҙағыраҡ сыҡҡандарынан айырыла. Был үҙгәрештәр журналдың үҫешен, алға барыуын күрһәтә. Бәлки, илдәге сәйәсәт 1917 йылда икенсе төрлө йүнәлеш алһа, тарихи-педагогик, фәнни-популяр, кесе энциклопедия булған матбуғат “ваҡытлы” тигән исем йөрөтмәҫ ине.

Беренсе “Шура” (“Кәңәш”) эсендә баҫылған тәүге мәҡәләләрҙең күбеһенең тематикаһы дини йүнәлештә. Беҙҙең уйыбыҙса, быға үҙенең төплө аңлатмалары бар. Беренсенән, Ризаитдин Фәхретдинов мөхәррир булыр

алдынан Диниә назаратында эшләй, аҙаҡ та “Хөсәйенийә” мәҙрәсәһендә шәкерттәргә ислам диненән һәм тарихынан дәрестәр бирә. Тимәк, дин темаһы баш мөхәррирҙең үҙенә яҡын һәм иң аңлайышлы темаларҙың береһе. Икенсенән, матбуғат уҡышлы булһын өсөн, уның киң ҡатламдарға тәғәйенлешле, аңлайышлы булыуы мөһим. Революцияға тиклемге, дин көслө булған дәүләттә гәзит-журналдарҙы, әҙәби әҫәрҙәрҙе мәсет йәки сиркәү яңылыҡтарынан айырмалы рәүештә баҫыуы мөмкин түгел. Өсөнсөнән, Ислам дине хаҡында һүҙ тотҡанда, сит ил тарихы, яңылыҡтары, культураһы, телдәре хаҡында булған мәғлүмәтте ябай халыҡҡа еткереүе еңелерәк. Мөхәррир үҙе лә “Шура” милләтте ғилемле, мәғрифәтле итмәк хаҡында мәшүрәт (кәңәш) мәжлесе буласаҡтыр” тип яҙа.

Журналдың тәүге битендәге инеш һүҙҙе лә Ризаитдин Фахретдинов үҙе яҙа. Баҫманың тәғәйенләнешен, төҙөлөшөн аңлатҡан һүҙҙе автор “Мәсләк вә маҡсүд” тип атай. Йәғни, “мәсләк” – ғәрәп теленән эшебеҙ, юлыбыҙ, задача тигәнде аңлата, ә “мәҡсүд” – ҡуйылған маҡсатыбыҙ, бурысыбыҙ. Авторҙың үҙенең аңлатмаһынан: “Яңы баҫма Рәсәй мосолмандарына хеҙмәт итергә, уларға көс һәм белем бирергә тейеш”.

Журналдың I һанының эске торошо ошондай бүлектәрҙән тора:

1. Мәшһүр әҙәмдәр һәм бөйөк хәҙисәләр.
2. Мәҡәләләр.
3. Тәрбиә һәм мәғариф.
4. Ил эсендә һәм сит илдәрҙә булған яңылыҡтар.
5. Библиография һәм тәңҡит.(Тәҡрид вә интиҡад).
6. Әджмәл сәйәси (күркәмлек) һәм башҡалар.
7. Мәрсәлә вә мөхәбәрә.
8. Шиғырҙар (Әшғәр).

Журналдың беренсе бүлегендә Джафар бин Ғабдулла (Алмас бин Сәләки) тигән мәҡәлә баҫылған. Ғөмүмән, “Мәшһүр әҙәмдәр һәм бөйөк хәҙисәләр” рубрикаһында Биркә хан, Аристотель, Платон, Сократ, Имам Ғазали, Ғүмәр Хәйәм, Фирдәүси, Ибн Фаҙлан, Ньютон, Шекспир, Гете, Атилла, Наполеон кеүек бөйөк шәхестәр тураһында мәғлүмәттәр бирелә. Икенсе бүлек – “Мәҡәләләр” – иң ҙур бүлек. Шуға күрә ул үҙ эсенә байтаҡ ҡына темалар һыйҙырған. Улар араһында педагогикаға, әҙәбиәткә, сит ил культураһына ҡағылышлы темалар күп.

“Шура”ла күп кенә шағирҙар һәм яҙыусылар үҙ яҙмаларын баҫтыра. Журналдың беренсе һанында иң беренсе Дәрдмәнд псевдонимы аҫтында яҙышҡан Закир Рәмиевтың шиғырҙары донъя күрә. Аҙаҡ Ғарифулла Кейеков, Мәжит Ғафури, Ғәлимйән Ибраһимов, Шәриф Камал, Шәйехзада Бабич, Мирхәйҙәр Фәйзи кеүек әҙиптәр актив ҡатнаша. Бик күптәргә журнал биттәре һәм мөхәррирҙең тәңҡите яҙыусылыҡ һәләтен яҡшыртыуға булышлыҡ итә.

Әйтеп китергә кәрәк, “Шура” журналы халыҡҡа яңылыҡ һәм белем еткереүсе генә түгел, ә милләттең тарихын һаҡлаусы, егерменсе быуат башында эшмәкәрлеген алып барған әҙиптәргә өр-яңы яҙма платформа булып тора.

Ошонда уҡ Зәки Вәлиди тарихсы һәм публицист булараҡ таныла. Ризаитдин Фәхретдин дә мәҡәләләрҙең күбеһен үҙе яҙа һәм үҙенең белеме менән халыҡ менән уртаҡлаша. Журналда баҫылған авторҙарҙың барыһы ла милли сәйәсәткә, йәмғәттең көнүҙәк проблемаларына, белем алыуға һәм тел проблемаларына ла бәйле һорауҙарға яуап бирергә тырыша.

Шулай итеп, “Шура” (“Кәңәш”) журналының эске торошо заманына хас йәмғиәт тормошо хаҡында бәйән итә: тарих, дин, педагогика, фәлсәфә һәм ил эсендә барған хәлдәр халыҡтың ниндәй шарттарҙа йәшәгәнен күрһәтә. Тағы ла, беҙҙең өсөн был баҫма тарихи дәреслек булараҡ файҙалы. Иң мөһиме шул: журнал заманына күрә үҙ маҡсатын үтәй һәм бөгөнгө көн матбуғаты өсөн дә өлгө һәм яҡшы мәктәп булып тора.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Фәхретинов, Р.Ф. Мәсләк вә маҡсад / Р.Ф. Фәхретдинов // Шура. – 1908. –№1.

2. Хөсәйенов, Ғ.Б. Ырымбурҙа. Мөхәррир/Ғ.Б. Хөсәйенов// Ризаитдин бин Фәхретдин. – 1997. – 118, 123, 127 б.


© Гайсина А.Р., Бухарова Г.Х., 2023

**УДК 821.161.1**


*Гайфиева Н.Н., магистрант*
*Научный руководитель: Халиуллина А.Г. канд. филол. наук, доц.*
*БГПУ им. М. Акмуллы, г.Уфа*


# МИФОЛОГИЧЕСКИЙ ПЛАСТ РАССКАЗА «ГИГИЕНА» Л. ПЕТРУШЕВСКОЙ


**Аннотация.** В статье дается анализ рассказа «Гигиена» Л. Петрушевской и рассматривается возможность изучения произведения в школе.

**Annotation**. The article analyzes the story "Hygiene" by L. Petrushevskaya and considers the possibility of studying the work at school.



**Ключевые слова.** Рассказ-антиутопия, смысл названия, миф, духовные ценности

**Key words**. The story is a dystopia, the meaning of the name, myth, spiritual values


Людмила Петрушевская – один из ярких представителей современной русской литературы. Она создала особый, во многом уникальный художественный мир. Творчество Л. Петрушевской получило широкое признание, как в России, так и за её пределами. Произведения писательницы переведены на многие языки мира, пользуются устойчивым интересом среди читателей разных стран. Рассказы многократно были переизданы и стали сегодня «уже почти классическими».

Несмотря на полученное Л. Петрушевской признание, её творчество остаётся недостаточно исследованным с художественной точки зрения. Полемика вокруг ее произведений, сопровождающая писательницу с самых первых публикаций, продолжается до настоящего времени. Противоречивость частных суждений практически всех, кто когда-либо писал о Л.С. Петрушевской, сопровождалась единством мнений в оценке всего её творчества как явления неординарного. Специальных исследовательских работ, посвященных изучению творчества Л. Петрушевской на уроках литературы в школе нет. Между тем, это ключевая проблема, сквозь призму которой можно проследить динамику мировосприятия писательницы, увидеть становление и развитие ее художественного мира, особенности её неповторимого авторского стиля. Именно этим определяется актуальность данной статьи.

На школьных уроках литературы рассматривается творчество Л. Петрушевской, посвященное проблеме героя, сквозь призму которой прослеживается динамика мировосприятия писательницы, становление и развитие ее художественного мира, особенности её неповторимого авторского стиля. Начиная с первых рассказов, темы Л. Петрушевской неизменны: смерть и ее физиология, болезнь, изнанка семейной жизни, алкоголизм, бедность, борьба за физическое выживание. Всевластие быта – первое, что бросается в глаза при чтении ее рассказов. Петрушевская сознательно исследует «прозу» жизни, лишенную духовного начала и радости. Особенное внимание она уделяет феномену отчуждения, бездушию и жестокости в человеческих взаимоотношениях.

Рассказ «Гигиена» впервые опубликован в журнале «Огонёк» в 1990 году (№ 28, с. 27-29). Жанр – антиутопия. Входит в состав различных сборников, один из них – сборник «Свой круг», 1990 г.

Антиутопия (англ. dystopia) – направление в художественной литературе и кино, в узком смысле – описание тоталитарного государства, в широком смысле – любого общества, в котором возобладали негативные тенденции развития. Жанр выбран писательницей не случайно. Это произведение материализует мифологему (повторяющаяся в мифах тема) конца света, так как порог между жизнью и смертью – самая устойчивая «смотровая площадка» прозы Петрушевской.

В рассказе «Гигиена» описана некая неизвестная болезнь, поразившая город в считанные дни, последствия которой непредсказуемы («…в городе началась эпидемия вирусного заболевания, от которого смерть наступает за три дня, причем человека вздувает и так далее…»). Название рассказа дает возможность интерпретации его смысла с разных точек зрения.

Первое прямое значение – это личная гигиена, то есть система действий, мероприятий, направленных на поддержание чистоты и здоровья. Смысл названия раскрывается с первых строк: «Есть надежда остаться в живых, если строго соблюдать правила личной гигиены…» [5].

Помогла ли личная гигиена выжить героям рассказа? Отец, соблюдавший нормы гигиены, погибает, а девочка, не умеющая ухаживать за собой, остается живой.

В названии отражено не только прямое значение слова, но и переносное. Речь идет о гигиене человеческой души, о сохранении лучших человеческих качеств.

Как показала практика, знакомство с мифологией как первым духовным опытом человечества приобщает учеников к вечным нравственным ценностям, эстетически обогащает их, оказывает эффективное влияние на формирование собственного взгляда на мир.

Изучая произведение «Гигиена», можно отметить такие черты реалистической поэтики Петрушевской, как освещение всех сторон жизни без ограничения, пафос отрицания действительности, социальная и физиологическая детерминированность человека. В то же время Петрушевская сгущает краски в изображении ужасов повседневной жизни, поэтому ее метод часто определяется как «гиперреализм», «натурализм», «жесткий» реализм. Исследование женских образов в данном рассказе возможно с разных позиций. Анализируя прозу Петрушевской как «гиперреалистическую», мы связываем ее с традициями «натуральной школы» XIX века и выделяем специфическую стратегию преодоления дихотомии «мужское-женское». Гендерный подход к литературному произведению основан на убеждении, что гендер в разные эпохи, в разных странах конструируется по-разному. И связано это прежде всего с тем или иным художественно-эстетическим направлением (стилем, методом). В неокритическом реализме, где герой выступает как социально детерминированный субъект, образы женщин оказываются тесно связанными с гендерной дифференциацией в России доперестроечного и послеперестроечного периодов. Людмила Петрушевская последовательно устраняет женщину и женственность в рассказах и повестях. Женщина как таковая умерщвляется автором. Место героини занимает некое бесполое, асексуальное, замученное бытом «облезлое» существо, в пределе стремящееся к нулю ( кто-то подрался с женщиной, отобрал у нее чемодан с хлебом; Елену пришлось держать запертой в ванне; Елена немного скреблась, исходя кровью из глаз, ничего не видя, да и что было видеть в абсолютно темной ванной, лежа на полу.)

Предназначение семьи в том, чтобы оберегать род человеческий, растить детей, продолжать род. Но эпидемия отдаляет друг от друга членов семьи, делает их чужими:

– отец семейства, глава в доме, много ел, не думал о родителях, о своем ребенке.

– остальные члены семьи (… «бабушка замкнулась»… «мать вспылила»…).

Автор показывает, что жестокость таких отношений характерна не только для данной семьи. В поисках продуктов люди занимались мародерством,

потеряв не только человеческий облик, но и душу: «Николай пошел с рюкзаком и ножом, их там внизу оказалась целая группа людей, милиционера окружили, подмяли, через витрину стали впрыгивать и выпрыгивать люди, кто-то подрался с женщиной, отобрал у нее чемодан с хлебом, ей зажали рот и утащили в булочную».

Над человечеством возникла угроза самоуничтожения.

Катастрофичность человеческого существования не только в страшных инфекциях, заболеваниях, во взрывах, в которых гибнут люди, но и в бездуховности, разобщенности.

В мире, утратившем духовные ценности, остались нетронутыми естественность и непосредственность, присущие животным, и неиспорченная детская нравственность.

Именно эту идею передала Л. Петрушевская образом кошки в своем рассказе.

Главное – это то, что в какой бы форме не создавалось произведение, оно всегда отражает нашу действительность, всегда говорит о борьбе Добра и Зла.

Как нам известно, проблема человека и среды в той или иной мере ставится в любом произведении писательницы.

Таким образом, для пера Л.С.Петрушевской характерен жестокий натурализм в изображении темных сторон внутреннего мира и общественной жизни человека.

## ЛИТЕРАТУРА

1. Богданова О.В. Постмодернизм в контексте современной русской литературы (60-90-е годы XX века - начало XXI века) / О.В. Богданова. – СПб., 2004. – 716 с.

2. Голубков М.М. XX век как литературная эпоха // Русская литература XX века: Итоги и перспективы изучения. Сборник научных трудов. – М., 2002. – С. 19-20.

3. Липовецкий Марк. Трагедия и мало ли что еще / Новый мир №10, 1994.

4. Литература XX столетия: 11 кл.: хрестоматия / Учредит.: К.М. Пахарева, Н.И. Дорофеева, Д.М. Веприняк. – К.: Освiта, 1998. – 671 с.

5. Петрушвская Л. Гигиена [Электронный ресурс].// – Режим доступа: https://md-eksperiment.org/ru/post/20200321-lyudmila-petrushevskaya-gigiena. – Дата обращения: 28.01.2023.

6. Прохорова Т.М. Расширение возможностей как авторская стратегия. Людмила Петрушевская // Вопросы литературы. – 2009. – №3. – С. 149-164.

7. Сафронова Л.В. Поэтика литературного сериала и проблема автора и героя (на материале сериалов «Дикие животные сказки» и «Пуськи бятые» Л.С. Петрушевской) / Русская литература. – №2. – 2006.

8. Скоропанова И.С. Третья волна постмодернизма // И.С. Скоропанова Русская постмодернистская литература: Учебное пособие. – М.: Флинта: Наука, 1999. – С. 357-533.

9. Сушилина И.К. Современный литературный процесс в России: Учебное пособие. – М.: МГУП, 2007. С. 39-40.

©Гайфиева Н.Н., Халиуллина А.Г. 2023

**УДК 821**

*Галина Г.Г., канд. филол. наук, доц.*
*БГПУ им. М. Акмуллы, г. Уфа*

## ҒАЛИМ ЗӘКИ ӘЛИБАЕВТЫҢ ҒИЛМИ ЭШМӘКӘРЛЕГЕ

**Аннотация.** В статье раскрывается научная и педагогическая деятельность кандидата филологических наук, доцента кафедры башкирского языка и литературы Башгоспедуниверситета им. М.Акмуллы Алибаева З.А. Отмечается, что он вносит большой вклад в изучении современной башкирской прозы. Областью его научных изысканий является башкирский современный роман.

**Annotation.**The article reveals the scientific and pedagogical activity of the Candidate of Philological Sciences, associate professor of the Department of Bashkir Language and Literature of the Bashkir State University named after M.Akmulla Alibayev Z.A. It is noted that he makes a great contribution to the study of modern Bashkir prose. The field of his scientific research is the Bashkir modern novel.

**Ключевые слова:** литература, башкирская проза, роман, наука.

**Key words:** literature, Bashkir prose, novel, science.

Кешеләрҙең яҙмышында хәл иткес роль уйнаған уҡытыусылар була. Ундайҙар, ҡағиҙә булараҡ, үҙҙәрен аямай һайлаған һөнәрҙәренә хеҙмәт итеүсән, көнө-төнө профессиональ камиллашыу өҫтөндә эшләп ғилемгә эйә булып ҡына ҡалмай, уны уҡыусылары менән ихлас бүлешеүсән. Уларҙы ерҙең ҡайһы сигендә генә йөрөмәһен, еңел таныrға була. Улар үҙҙәренең тотошо, интеллигентлы, мәҙәниәтле шул уҡ ваҡытта ялҡынлы, бөтә нимәгә иғтибарлы булыуы менән айырылып тора. Ундай уҡытыусылар бер нимәгә лә битараф булмай. Һәр уҡыусыһының яҙмышы менән ҡыҙыҡһынып, фәнни йәки предмет буйынса ғына белем бирмәй, ә тормош дәрестәре бирә. Шундай уҡытыусыларҙың береһе - филология фәндәре кандидаты, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһы доценты Зәки Арыҫлан улы Әлибаев.

Ул 1967 йылдың 10 ғинуарында хозур тәбиғәтле Белорет районы Йөйәк ауылында ишле балалы Арыҫлан һәм Разия ғаиләһендә етенсе бала булып донъяға килгән. Әлибаевтар заты элек-электән был ерҙәрҙә ҡеүәте, көсө, берҙәмлеге, белемлелеге менән дан ҡаҙанған. Бөгөнгө көндә улар нәҫелендә фән докторы, 3 фән кандидаты бар. Был факт үҙе генә лә күп нимә тураһында һөйләй. Тыуып үҫкән ере, тәбиғәте лә Зәки Арыҫлан улының матурлыҡты нескә тоя һәм аңлай белгән шәхес итеп тәрбиәләгәндер. Иң кесе бала булараҡ ул ата-

әсәһенең, барлыҡ туғандарының һөйөүен тойоп, мөхәббәткә сорналып үҫә. Был ғаиләлә балаларға рухи тәрбиә, белем биреү эшенә ныҡ ҙур иғтибар бирелә. Зәки Арыҫлан улының билдәләүенсә, үткән быуаттың 70-80-се йылдарында Башҡортостанда донъя күргән башҡорт телендәге баҫмаларҙың барыһы ла тиерлек уларҙың өйөндә яҙҙырылған. Бөтә балалар ҙа газета-журналдар килеү менән кемуҙарҙан ярышып уҡыр булған. Бәләкәй Зәки II кластан алып “Пионер”, “Башҡортостан пионеры” баҫмаларына үҙенең мәҡәләләрен ебәрә башлай. VII класта ошо баҫмаларҙың “Йәш хәбәрсе” танытмаһын ала. Әҙәби китаптар уҡырға ярата, III класта уҡығанда барлыҡ ғаилә менән Зәйнәб Биишеваның “Кәмһетелгәндәр” трилогияһын уҡый. Ошо ятраҡан шөғөлө уның киләсәктә яҙмышын билдәләй, һөнәр һайларға ярҙам итә. 1984 йылда Йөйәк урта мәктәбен тамамлағандан һуң Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына уҡырға инә. Беренсе курстан һуң барлыҡ курс егеттәрен әрме хеҙмәтенә алалар. 1985-1988 йылдарҙа иң ҡеүәтле Төнъяҡ флотта хеҙмәт итеп ҡайтҡандан һуң, университетта уҡыуын дауам итә. Студент йылдарында университет тормошоноң үҙәгендә ҡайнай: фән менән шөғөлләнә, матбуғат биттәрендә үткер мәҡәләләрен баҫтыра, йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнаша. Замандың шауҡымлы елдәре хөр фекерҙәргә ирек ҡуя. Яҙыусылар был осорҙа элек тыйылған һәм тейелмәгән темаларға мөрәжәғәт итеп ҡыҙыҡлы әҫәрҙәр яҙа. Халҡыбыҙҙың шанлы тарихын яҡтыртҡан, бөгөнгөһөн бар дөрөҫлөгөндә сағылдырған бик күп романдар ижад ителә. Ә.Хәкимовтың “Өйөрмә”, “Дауылдан ҡотолоу юҡ”, Ғ.Хисамовтың “Аҡтамыр”, “Ҡотолоу юлҡайҙарын тапманым”, Р. Байымовтың “Яуап бирер көн” кеүек романдар башҡорт һүҙ сәнғәтендә күренеш булды, тип әйтергә мөмкин. Әҙәбиәтте ятраҡан Зәкиҙә шул романдарҙы ғилми яҡтан төплө тикшереү теләге уяна. 1992 йылда университетты уңышлы тамамлаған егет Башҡорт дәүләт университетының башҡорт әҙәбиәте һәм фольклоры кафедраһына эшкә ҡалдырыла һәм ситтән тороп аспирантураға уҡырға инә. 1997 йылдың мартында күренекле ғалим, филология фәндәре докторы, профессор Р.Н. Байымов етәкселегендә “Хәҙерге башҡорт романдарының конфликт тәбиғәте” тигән темаға кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлай. Шул уҡ ваҡытта 1994-2002 йылдарҙа факультетта декан урынбаҫары булып эшләй.

2009 йылдан Зәки Арыҫлан улы М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәте кафедраһы доценты. Бында ул “Әҙәбиәт теорияһы”, “Башҡорт әҙәбиәте тарихы”, “Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте” курстары буйынса бакалавр һәм магистранттарҙа дәрестәр алып бара. Уның дәрестәрен студенттар көтөп ала. Ул үткәргән әҙәбиәт дәрестәре үҙе бер донъя. Унда тормош ҡайнай, фекерҙәр бәрелешә, бәхәс ҡыҙа, һәр студент үҙен шәхес итеп тоя. Буласаҡ уҡытыусылар әҙәби әҫәрҙәрҙе бар нескәлектәрендә фәнни күҙлектән анализларға өйрәнә. Зәки Арыҫлан улы дәрестә лә, дәрестән тыш эшмәкәрлектә лә йәштәрҙе битараф булмаҫҡа, бахыр булмай, батыр булып яныып, ирекле фекер йөрөтөп рухи азат йәшәргә өндәй. Ул айырыуса егеттәр менән эшләүгә күп ваҡытын бүлә. Тыуған еребеҙҙең ысын

хужалары тап улар икәнлеген һеңдерә. Барлыҡ эштәрҙә лә яуаплылыҡ уларҙың иңендә булырға тейешлеген аңлата. Һуңғы йылдарҙа башҡорт филологияһы факультетында егеттәр инициативаһы менән байтаҡ матур эштәр эшләнә. Йыл һайын Рәми Ғариповтың тыуған көнөндә уға арналған кисә үткәрелә, ҡәберенә барып сәскәләр һалына. “Көҙгө һағыш, әллә нағыш…” тигән моңло композиция уҙғарыла, Башҡортостаныбыҙҙың төрлө төбәктәренә әҙәби экскурсиялар ойоштороло һәм башҡа бик күп эштәр башҡарыла. Быларҙың башында, әлбиттә, Зәки Арыҫлан улы тора.

Ул үҙе генә фән менән шөғөлләнмәй, ә студенттарҙы ла йәлеп итә. Уның етәкселегендә бик күптәр курс эштәрен, сығарылыш квалификация эштәрен уңышлы яҡлай, бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара конференцияларҙа ҡатнашып мәҡәләләр яҙа. Бер нисә йыл рәттән уның етәкселегендә башҡорт филологияһы факультеты студенттары Таулы Алтайҙа уҙғарылған “Филология. Рәсәй халыҡтары телдәре һәм әҙәбиәте (төрки төркөм)” Бөтә Рәсәй олимпиадаһында I урынды яуланы.

Факультетта эшләп килгән “Тулҡын” әҙәби түңәрәгенә ярҙам итә. Студенттарҙың ижад емештәрен туплап баш һүҙ яҙып йыйынтыҡ баҫып сығарҙы. Яҙыусылар союзы үткәргән Республика кимәлендәге барлыҡ сараларҙа ла тулҡынсылар әүҙем ҡатнаша. Күренекле шағирҙар, яҙыусылар менән йыш ҡына осрашыуҙар ойоштора. Йәш ҡәләм оҫталарының әҫәрҙәрен тикшерап кәңәштәр биреү өсөн йыш ҡына консультацияға Зөлфиә Ханнанова, Александр Хватков, Лариса Абдуллина кеүек студенттар менән ихлас эшләгән һүҙ оҫталарын саҡыра.

Ул хәҙерге башҡорт әҙәбиәте, әҙәбиәт теорияһы мәсьәләләре буйынса биш тиҫтәнән артыҡ хеҙмәттәр яҙған. Юғары аттестация комиссияһы баҫмаларында ла мәҡәләләре баҫылған. “Хәҙерге башҡорт романдарының конфликт тәбиғәте”, “Һүҙ ҡөҙрәте”, “Поэтика современного башкирского романа” хеҙмәтенең авторы, “Ер яҙмышы, дәүер һулышы”, “Башкирская литература в связи времен”, “Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте”, “XX быуат башҡорт әҙәбиәте” хеҙмәттәрендә, Анкарала төрөк телендә сыҡҡан 35 томлыҡ “Turkidunysiortakedebieatlari” (“Төрки донъяһының уртаҡ әҙәбиәте”) йыйынтығының башҡорт өлөшөндә авторҙаш.

Зәки Арыҫлан улы башҡорт әҙәбиәтен Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә, сит илдәрҙә популярлаштырыу эшен дә алып бара. Һуңғы йылдарҙа халыҡ-ара конференцияларҙа Астана һәм Уралда (Ҡаҙаҡстан), Стамбул һәм Анкарала (Төркиә), Ашхабадта (Төркмәнстан) докладтар менән сығыш яһаны. Таулы Алтай дәүләт университетында студенттарға башҡорт әҙәбиәте тарихы буйынса лекциялар уҡыны. Шул уҡ ваҡытта ул системалы рәүештә үҙенең дә белемен камиллаштыра. 2013 йылда Анкараның Ғази университетында стажировка үтеп ҡайтты, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты үткәргән курстарҙа ла йыш ҡына белемен үҫтерә. Бөгөнгө көндә ул “Хәҙерге башҡорт романдарының поэтикаһы” тигән докторлыҡ диссертацияһы өҫтөндә эшләй.

Әүҙем граждანлыҡ позициялы шәхес булараҡ ул университет, ҡала, республика тормошонда ихлас ҡатнаша. Башҡортостан Республикаһының Дәүләт йыйылышы- Ҡоролтай депутаты булараҡ халыҡ менән тығыҙ бәйләнештә.

Ул шулай уҡ Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәй Федерацияһы Яҙыусылар Союзы ағзаһы. Башҡортостан Яҙыусылар союзын 2016-2022 йылдарҙа етәкләп, бихисап эштәр эшләне.

Эшмәкәрлегенең тағы бер тармағы – мәктәптәр менән хеҙмәттәшлек. Республика уҡытыусыларына һәр ваҡыт методик ярҙам күрһәтә, уҡыусылар менән осраша, әҙәбиәт дәрестәре үткәрә.

Бер нисә тапҡыр Мәғариф министрлығы тарафынан үткәрелгән башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса олимпиадала, “Йыл уҡытыусыһы” конкурсында, “Урал батыр” йәш сәсәндәр бәйгеһендә жюри ағзаһы булараҡ йәлеп ителде.

З.А. Әлибаевтың намыҫлы хеҙмәте хөкүмәт тарафынан иғтибарһыҙ ҡалманы. Ул – “Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы” (2009), “Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәғариф хәҙмәткәре “ (2012). Шулай уҡ бер нисә тапҡыр Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрылығының маҡтау ҡағыҙы менән бүләкләнде. 2022 йылда өлгөлө хеҙмәте өсөн З.А.Әлибаев Салауат Юлаев орденына лайыҡ булды.

Зәки Арыҫлан улы балаларына өлгөлө атай, ҡатынына ышаныслы ир. Ҡатыны Разия менән 4 бала тәрбиәләйҙәр. Олоһо Риф инде өйләнеп, айырым оя ҡорған, үҙ һөнәре буйынса геофизик булып эшләй. Камила тигән ҡыҙ тәрбиәләй. Икенсе улы Сәғит Санкт-Петербургтағы архетиктура-төҙөлөш университетын тамамлап, бөгөнгө көндә Мәскәү ҡалаһында һөнәре буйынса эшләй, ғаиләһе менән Айҙар улдарын үҫтерәләр. Берҙән-бер бөрөтөк ҡыҙы Әҙилә М.Аҡмулла исемендәге БДПУ-ны тамамланы, кинйәһе Арыҫлан Өфө радиоэлектроника колледжында I курсында уҡый.

Уй-хыял һәм булмыш. Улар ҡайһы ваҡыт бер-береһен тулыландырып та ебәрә. Ижади кешелә бигерәк тә. Шуға ла Зәки әфәнде бөгөнгө көндә лә Әҙәбиәт ғәли йәнәптәренә арымай-талмай, бөтә йөрәген биреп хеҙмәт итә.

© Галина Г.Г., 2023

**УДК 372.882**

*Галина Г.Г., канд. филол. наук, доц.*
*Аюпова А.А., студент*
*БГПУ им. М. Акмуллы, г. Уфа*

# З. ХАННАНОВА ИЖАДЫ АША ЭТНО-МӘҘӘНИ КОМПЕТЕНЦИЯЛАР ФОРМАЛАШТЫРЫУ

**Аннотация.** В статье анализируются произведения З.Ханнановой, как средства этнокультурного воспитания обучающихся. Сделан вывод о том, что поэзия Зульфии Ханнановой отличается искренностью и глубиной, смелостью и в то же время сдержанностью. Она несет в себе светлое, доброе начало. Поэтому оно близко и понятно людям разных поколений. В ее поэтических произведениях отражена судьба народа, его прошлое, настоящее и светлое будущее. При изучении ее стихов обучающиеся получают зания об истории, культуре, традициях башкирского народа. Представленные в статье материалы имеют практическую направленность и могут использоваться в образовательных целях во внеурочной деятельности.

**Annotation.** The article analyzes the works of Z.Hannanova, as a means of ethno-cultural education of students. It is concluded that the poetry of Zulfiya Hannanova is distinguished by sincerity and depth, courage and at the same time restraint. It carries a bright, kind beginning. Therefore, it is close and understandable to people of different generations. Her poetic works reflect the fate of the people, its past, present and bright future. When studying her poems, students receive knowledge about the history, culture, traditions of the Bashkir people. The materials presented in the article have a practical orientation and can be used for educational purposes in extracurricular activities.

**Ключевые слова.** Зульфия Ханнанова, этнокультурная компетентность, стхотоворения, история, народ.

**Key words.** Zulfiya Khannanova, ethno-cultural competence, science, history, people.

Үҙ халҡыныӊ мәҙәниәтен аӊлау – башҡа милләт вәкилдәре менән аралашыуҙыӊ нигеҙендә ята. Был фекер этно-мәҙәни компетенцияларҙы асыҡлауҙа ла мөһим урын алып тора.

А.Г. Козлов үҙенеӊ этник терминдар һүҙлегендә биргән аӊлатманан сығып ҡарағанда, беҙ был һүҙбәйләнештеӊ “мәҙәниәт” һүҙенә бәйле икәнен беләбеҙ. Милли мәҙәниәтте формалаштырыу структураһы бик ҡатмарлы, уныӊ компоненттары булып: мөхит (климат, географик шарттар), лингвистик (тел, үҙ-ара коммуникациялар үҙенсәлеге), тарихи, көнкүреш һәм психологик үҙенсәлектәр тора [3, 288].

Этно-мәҙәни компетентлыҡ – төрлө милләт вәкилдәре менән килешеү нигеҙендә үҙ-ара фекер алышыр өсөн булған белем кимәле.

Б.Б. Дякиевтың был темаға фекере ошолай яңғырай: “Рәсәйҙә уҡытыу сфераһы дөйөм милли аң, рухи, тел һәм мәҙәниәт интеграцияларын формалаштырыу өсөн шарттар булдырыу бурыстары алырға тейеш” [5: 3].

Этномәҙәни компетентлыҡтың әһәмиәте тураһында тикшеренеү эштәрендә билдәле педагогтар һәм психологтар яҙа. Бына улар: Т.В. Поштарева, И.А. Морозов, Г.Н. Волков, О.Н. Степанова, В.И. Баймурзина, Х.Х. Баймурзин, К.Ш. Әхиәров.

Ғилми мәҡәләлә хәҙерге көндә көслө шағирәләрҙең береһе – Зөлфиә Ханнанова ижады аша уҡыусыларҙа этно-мәҙәни компетенциялар яҡтыртылыуы өйрәнелә. Был нигеҙҙә шағирәнең фекер тәрәнлеге, шиғырҙары миҫал итеп ҡарала.

Йәш быуында үҙ халҡының тарихы, мәҙәниәте менән таныштырыуҙа Зөлфиә Ханнанова әҫәрҙәре баһалап бөткөһөҙ ҙур роль уйнай. Мәктәптә шағирә ижадын өйрәнеү буйынса дәрестән тыш саралар ойошторорға мөкин. Был сараларҙы түңәрәк өҫтәл, осрашыу, дебат форматында үткәрергә була. Сара өсөн шағирәнең көнүҙәк, юғары художестволы шиғырҙарын алырға кәрәк. Мәҫәлән, әгәр ҙә ил, халыҡ яҙмышы тураһында әңгәмә ойошторорға ниәтләйбеҙ икән уның “Башҡортостан”, “Аҡ намаҙлыҡ халҡым түшәһен!”,”Булһаҡ ине илгә беҙ терәк!”, “Телһеҙ, моңһоҙ мин кем инде?” шиғырҙарын алырға була. Ҡатын ҡыҙ яҙмышы, мөхәббәт, әсәлек мәсьәләләре тураһында фекер алышырға уйлаһаҡ, уның “Инә бүре”, “Илкәйемдә шундай апайзар бар”, “Ете ҡыҙ”, “Арабыҙҙа булған хис-тойғоға”һ.б шиғырҙарына мөрәжәғәт итәбеҙ.

Этно-мәҙәни компетенциялар тураһында һүҙ йөрөткәндә беҙ уның нигеҙендә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына ғына хас булған тыйнаҡлыҡты, сабырлыҡты, башҡаларға ҡарата булған иғтирамды күҙ алдына килтерәбеҙ. Нәҡ ошондай һыҙҙаттарҙы сағылдарған Зөлфиә Ханнанова үҙенең “Күҙҙәреңә ҡарай алманым мин” шиғырында:

“Күҙҙәреңә ҡарай алманым мин,
Әйтә алманым һиңә бөтәһен.
Хәйерлегә булһын! Сабыр итәм,
Йыраҡ юлға йәнә китәһең.”

Был хаҡта ғалимә, этнограф – Баязитова Р.Р үҙенең “Традиционный семейный этикет башкир” китабында ла әйтеп үтә. Иренә ҡарата булған хөрмәтен белдереп “хужам” тип өндәшеҙе, кеше араһында уны хур итергә, уның юлына арҡыры сығырға ярамауҙы, уға ғүмерлек тоғролоҡто һаҡлап йәшәргә кәрәклекте ҡыҙ бала бәләкәстән белеп үҫә тип яҙа ул “Ир хурлама – боҫторор тей, аш хурлама – ҡоҫторор тей. Ир ирлеген иткән, артына бер типкән”, “Балам, иреңә өндәшмә, ҡашаяҡ шалтырамай булмай. Һүҙ ҙә булып китер. Ауыҙыңа һыу уртла. Өндәшмәгән өйҙәй бәләнән ҡотолған. Әйтеп үкенгәнсе, әйтмәй үкен. Һүҙҙән һүҙ, талаш китә, тип әйтәләр ине” һ.б мәҡәл, әйтемдәрҙе миҫалға килтерә [1: 40].

Уҡыусылар менән дәрестән тыш “Зөлфиә Ханнанова шиғриәтенән сығып башҡорттарҙа ҡатын-ҡыҙ идеалы ниндәй булырға тейеш?” тигән темаға фекер алышыуҙар ойошторорға була.

Үҙенең бөтә шиғырҙарында ла автор ҡатын-ҡыҙ образын үҙәккә ҡуя. Лирик героиня халкы тарихына һоҡлана, һөйгән йәрен һағына, иле, теле яҙмышы өсөн борсола, берсә яна, берсә көйә, әммә һәр саҡта ла ул башҡорт ҡыҙы булып ҡала:

Үтәйемсе атта елеп
Тау-урманды, ялан-ҡырҙы,
Саялығым нәҫелемдән –
Мин бит әле башҡорт ҡыҙы (“Мин бит әле башҡорт ҡыҙы”). Ләкин шағирә ябай башҡорт ҡыҙы ғына түгел. Быуаттар буйына башҡорт ҡатын ҡыҙы ир-ат менән бергә атка менеп яу сапҡан, дошман илбаҫарҙарға ҡаршы көрәшкән, саялығы менән дан алған. Илгә ҡурҡыныс килгән дәүерҙә лә, Зөлфиә Ханнанова атка менеп батырҙар менән иңгә терәшеп ҡаршы көрәшергә әҙер.

“Инә бүре” шиғырында яҙғанса, ул үҙендә ырыуҙаштары менән бер ҡан ағыуын, инәлек бурысын тоя:

Тиңләмәгеҙ аҡҡоштарға,
Күммәгеҙ алҡыштарға,
Иҫем китмәй сәхнәләрҙә
Уйнаған балҡыштарға.
Тауҙар үре булған сакта
Нимә ул сәхнә түре?
Аҡҡош булғым килмәй минең,
Булғым килә күк бүре. (“Инә бүре”).

Башҡорт ҡатын-ҡыҙының саялығы, батырлығы, илһөйәрлеге тураһында тарихи документтарҙан да, хәтирәләрҙән дә, художестволы әҫәрҙәрҙән дә беләбеҙ. Бәндәбикә, Киҫәкбикә, Аҙнабикә, Һәҙиә, Зәйнәб һ б. Мәҫәлән XVIII быуат уртаһында йәшәп Екатиринбург уртаһында усаҡта яндырып үлтерелгән Киҫәнбикә Байрасова. Автор шул типтағы ҡатын-ҡыҙҙарҙың вариҫы. Миҫал итеп унның “Ете ҡыҙ” шиғырын ҡарап китергә була:

Сал тарихтан тыйнаҡ етәкләшеп
Ҡала уртаһына ҡайттығыҙ,
Асылына тоғро йәндәр аша
Таптығыҙмы юлды, ете ҡыҙ?!

Зөлфиә Ханнанова оҙайлы йылдар халҡына хеҙмәт итеп, шиғырзар ғына яҙып ҡалмай, ә йәмәғәт эшмәкәрлеге менән мәшғүл. Бар тормошо тыуған иле алдындағы бурысты үтәүҙән ғибәрәт. Шуға ла унның шиғырҙарында эшһөйәр, иле алдындағы бурыстарын аңлаусы эшлекле ҡатын-ҡыҙ образы ла күҙ алдына баҫа:

Яҙыусы эпик ҡоласлы хикәйәләү аша төрлө кешеләр, тотош халыҡтар яҙмышын, юрматыларҙағы, меркеттәр илендәге, Бошман ил-күсендәге, булғар ҡалаларындағы, татар-монгол урдуғаларындағы тормош ағышын, католик сиркәү ҡанундарына буйһонған уңғарҙар йәшәйешен, Бела Дүртенсе хакимлығы, Аҡташ, Мәсем хандар, Майҡы, Туран бейҙәрҙең даирәһен, рус кенәзлектәрендәге күренештәрҙе панорам һүрәтләүгә ирешә. Әммә ошондай ҡатлы-ҡатлы, ҡатмарлы яҙмыштар, төрлө урындарҙа, илдәрҙә барған ваҡиғалар хаҡында хикәйәләүсе сюжет ептәре Юрматы иле, кешеләре яҙмышын һүрәтләүсе төп сюжет һыҙығына килеп бәйләнә.

Үҙәк һүрәтләү объектына – ахырызаман көткәндә, татар яуы илдәрҙе бына-бына баҫыр алдынан, ил түрәләренең шул дәһшәткә мөнәсәбәтендә, ҡылған эштәре, уй-кисерештәрендә шәхси йөҙҙәре, характерҙары, рухи һыҙаттары асыла. Барлыҡ ваҡиғалар, геройҙар, уларҙың эштәре ошо күҙлектән, яу баҫырын шомланып көтөүселәрҙең донъяға ҡараштары, тормош ағышын шул мәлдә танып белеүҙәре кимәленән яҡтыртыла, баһалана, халыҡтың тарихи фекерләү үҙенсәлектәре сағылыш таба.

Роман нигеҙендә ятҡан бик күп фактик, документаль материалдар, Тажетдин Ялсығол китабынан белешмәләр, монах Юлиан юлъяҙмаларынан өҙөктәр, шулай уҡ, шәжәрә-легендаларҙы, тарихи-этнографик, яҙма культурала сағылған материалдарҙы оҫта ҡулланыу, аңлатыу ҡеүәһе, халыҡ тарихындағы мөһим ваҡиғаларҙы объектив яҫылыҡта яҡтыртыу яҙыусының тарихи роман яҙырлыҡ әҙерлеге, интеллектуаль кимәле хаҡында тағы ла бер ҡат иҫбатлай.

Төп геройҙар Бошман, Аҙнай, атаҡлы Ҡол Ғәли, монах Юлиандарҙың характерҙар хәрәкәте, шәхес булараҡ ғәрәсәтле заманда тотҡан урындары, йәғни актив позицияһы, рухи донъялары ярайһы уҡ тулы сағылыш тапҡан. Улар эске һәм тышҡы үҫештә, изге уй-теләктәрен, ил-күсте, халыҡты һаҡлап ҡалыу маҡсатын ҡылған эштәре менән нығыта барыуҙа һүрәтләнә.

Нәҫеле менән Туҡсуба ҡыпсаҡтарынан булған, исеме хатта күренекле ғәрәп һәм ҡытай тарихсыларының хеҙмәттәрендә телгә алынған, ил-күстәрҙе бергә йыйырға, хәтәрҙән һаҡлап ҡалырға күп көс һалған, баҫҡынсыларға ҡаршы тиҫтә йылдан ашыу көрәшеүсе тарихи шәхес Бошман бей образында ижтимағи-социаль яңғырашлы олпат характер тыуҙырылған. Бошман бей үҙенең эшмәкәрлегендә, көрәш юлында заманының яҡты аҡылы булған Ҡол Ғәлигә, башҡорт ил-күстәренең киләсәкте үткер күҙаллар, бөгөнгө байманлығын абруйлы ҡурсыр башлыҡтарына һәм аҡһаҡалдарына таяна. Татар яуының бик күп илдәргә, халыҡтар яҙмышына алып килгән афәтен алдан күрә белеүсе, шуға ҡаршы тороу сараһын эҙләүсе үткер зиһенле Бошман бей күрше илдәр, булғар ханлығы, рус кенәздәре менән бәйләнешкә инеп ҡарай. Әммә дин, йола ҡанундары хөкөм һөргән заманда төрлө аллаға табыныусыларҙың башҡа дин кешеләрен танымауы, ябырылып килгән оло хәтәрҙе күрмәүе арҡаһында ил

башлыҡтары бер-береһе менән килешә алмай. Ҡыпсак түрәһе ярты юлда туҡталып ҡалмай – Шәйбәни ханға баш һалған Баян һәм Йәкү батырҙарҙы ҡабаттан баҫҡынсыларға ҡаршы күтәреп, үҙ иленең уҙамандарын туплап, байтаҡ йылдар әле Бошман бей Европа илдәренә был хәтәрҙе үткәрмәй тора.

Нәҫел-ырыу сылбырын өҙөлөүҙән һаҡларға тейеш ҡан баба Аҙнай аҡылы, башҡалар күрә белмәгән күп нәмәне алдан һиҙемләүе, ғәҙел булыуы, күңелендә бик күп серҙәр һаҡлауы менән тотош Юрматыны үҙ ҡулында тотоусы бей булып күҙ алдына баҫа.

Ҡол Ғәлиҙе осратыу, әңгәмәләшеү күп нәмәгә Аҙнайҙың күҙҙәрен аса, борсолоу, тынғыһыҙлыҡ өҫтәй, ил хаҡына олораҡ эштәр эшләргә дәртләндерә.

Татар-монголдар менән булғар-башҡорттарҙың тәүге бәрелешенән һуң уҡ, ҡартайыуыпа ҡарамаҫтан, Аҙнай бей ырыу түрәһенең, бүтән башҡорттарҙың уянғанын көтөп ултырмай, тотош ил хәстәрен үҙ иңенә ала. Һүҙе үтемле, абруйлы дин ҡанундарына арҡа терәп эш итеүсе Аҙнай бей тарҡау башҡорт ырыуҙарын бергә туплауҙа, илде, халыҡты һаҡлап ҡалыуҙа, ҡаршы тороуҙа Бошман бейгә ныҡ таяу була.

Башҡорт илен – ил, башҡорт халҡын – халыҡ итеп таныҡкан, кешелек тарихында тотҡан урының билдәләгән боронғо яҙмаларҙың ҡиммәтен аңлауы, баһалауы – Аҙнай бейҙең рухи донъяһына яҡтылыҡ һибеүсе тағы бер һыҙат. Быуындан быуынға тапшырыла килгән, рухи тамырҙарҙы өҙөлөүҙән һаҡлаған был шәжәрәләрҙе ул, күҙ ҡараһылай ҡурсып, үҙенән һуңғы тоҡомға мираҫ итеп әҙерләй.

Романда тотош төрки донъяһында киң танылған атаҡлы шағир Ҡол Ғәли образы ла сағыу һыҙатланыш тапҡан. Яҙыусы шағирҙың сығышы хаҡында документаль факттарҙы ла килтерә, уның тамырҙарының башҡортҡа барып тоташыуын дәлилләүсе материалдарҙы телгә ала. Берҙән-бер яҙма мәғлүмәт булған боронғо башҡорт ғалимы Тажетдин Ялсығолдоң «Нәсәбнамә» әҫәренә таянып, унан өҙөктәр бирә. Унда Ҡол Ғәлиҙең атаһы Әй башҡорттарынан булыуы, Хәрәзмдә мөдәрислек итеүе, шағирҙың атай йорто булған Зәй тамағыма ҡайтыуы, Бүләр ҡалаһында йәшәүе әйтелә. Әммә был мәғлүмәттәр әҙәби әҫәрҙә ҡоро документ булып ҡына түгел, ә заманының иң алдынғы улы, Әҙәмиәт рухы күңелендә ирек ҡомарын тоҡандырған, ил ағаларына кәңәшсе, терәк булыусы романтик рухлы шағирҙың рухи йөҙөн тулыраҡ асыу өсөн хеҙмәт итә.

Яҙыусы тарихи дөрөҫлөккә яуап бирә торған материалдарҙы, ғалимдар тарафынан нигеҙләнгән факттарҙы иркен куллана, тарихи объективлыҡты тотороҡло һаҡларға тырыша. Ҡол Ғәлиҙең, Бошман бейҙең фажиғәле тамамланған яҙмыштары хаҡында халыҡ күңелендә төрлө риүәйәттәр йәшәй. Шулар хаҡында яҙыусы әйтеп уҙа ла, «әгәр шулай булған икән» тигән фараз ҡуя һәм, геройҙарының характер логикаһына тап килерҙәй, уларҙың ирек утында янған һынмаҫ рухын бирерҙәй картинаны ижади фантазия менән байытып сағыу буяуҙарҙа күҙ алдына баҫтыра. Был тәңгәлдә яҙыусыға үҙе һайлаған һығылмалы һүрәтләү алымы, эпик хикәйәләү туҡымаһына әленән-әле

авторҙың шәхсиәте, уйланыуҙары туранан-тура инеп китеүе ярҙам итә. Шулай ител, яҙыусы ваҡиға һәм образдың нигеҙендә ятҡан документаллек, йәғни, тарихи дөрөҫлөк менән художестволы дөрөҫлөктөң бер-береһе менән ярашыуына өлгәшә.

Дунай буйҙарында йәшәгән уңғарҙарҙың төп иленең Урал булыуын, Юрматы ырыуы менән туранан-тура ҡан-ҡәрҙәшлектә тороуын тарихи факттар нигеҙендә художестволы юл менән идея-эстетик яҡтан камил әҙәби әҫәрҙә сағылдыра алыу яҙыусының ҙур ижади уңышы ул.

Монах Юлиан образын да беҙҙең тарихи прозала яңылыҡ булырлыҡ күренеш тип иҫәпләргә мөмкиндер. Тик үҙ Аллаһын ғына берҙән-бер тип таныусы рухани тәүге сәфәренә уңғарҙарҙың тәү илен күреүҙе, башҡорттарҙы ысын хәҡиҡәт юлына төшөрөп, католиктар итеп, хәҙрәти Рим папаһының ҡул аҫтына алып ҡайтыуҙы маҡсат итеп ҡуйһа, байтаҡ ваҡиғалар, һынауҙар үткәндән һуң, ул һәр яҡтың үҙ динен, үҙ хәҡиҡәтен иң дөрөҫ тип иҫәпләүе сәбәпле төрлө бәләләр килеп сығыуы хаҡында фекер төйнәй, донъяға киңерәк ҡараш ташларлыҡ хәлгә етә. Татыу йәшәү өсөн кешеләр бер-береһенең Аллаһын да, йолаларын да иҫәпкә алырға, хурламаҫҡа тейеш тигән һығымта яһай ул. Әммә Доминик ордены монахы үҙ тәртибендә, үҙ динендә бер ғәйеп тапмай, ташлама яһауҙы башҡалар өлөшөнә ҡалдыра. Шулай итеп, яҙыусы характер логикаһына хилафлыҡ итмәйсә, руха- ниҙың аң үҫешенең билдәле кәртәләр менән сикләнгән булыуын да күрһәтә.

Йөкмәткенең поэтик асылыуы яғынан да «Ахырызаман көткәндә» романы Б. Рафиҡовтың алдағы әҫәрҙәренең художество табыштарын артабан үҫтереүсе, байытыусы әҫәр тип баһалана.

Символик мәғәнә һалынған әрүахтар иҫтәлегенә Ҡөрьән уҡыу күренешендә бер юлы бик күптәрҙең рухи торошо, уй- кисерештәре сағылыш ала. Торатау итәгендәге йыйынды тасуирлаған тулҡынландырғыс күренештә лә – әсәләрҙең балаларына уңғарҙан фатиха һорауҙары, дәрүиш-ҡәләндәрҙән мәрхәмәт ҡылыуын үтенеүҙәрендә – тәрән мәғәнә йәшеренгән, бында халыҡ күңелендәге хөрмәтләү, изгелекте идеаллаштырыу, туғанлыҡты ҡәҙерләү тойғолары сарпылыш тапҡан.

Шулай уҡ төрлө һүрәтләү сараларының, ассоциативлыҡтың уңышлы ҡулланылышын билдәләргә кәрәк. «Маймыл йылының иртә килгән яҙы, хәл йыйырға туҡтай-туҡтай, тиреҫкә юл тотто, Ерҙең ҡарҙан әрселеүенә, йылғаларҙың боҙ әсирлегенән ҡотолоуына шатланып ҡысҡырышҡан бихисап ҡош туптарын эйәртеп алғайны үҙенә». Тамырҙары ҡобайырҙарға, ауыҙ-тел ижадына барып тоташыусы ошондай образлы тасуирлауҙар әҫәрҙең идея-йөкмәткеһен байыта. Иблесте хәрәкәт итеүсе йәнле образ итеп биреү, был шартлы образдың уйҙарын фараз рәүешендә бәйән итеү хикәйәләү туҡымаһына йәнлелек, серлелек индерә. Тамдарҙағы ҡара төтөндөң ҡара әләм булып елпенеүе, киләсәк дәһшәт тураһында уйланған Юлиандың арҡаһын ҡояш ҡына түгел, ярһыған миң-миң аттың ҡайнар һулышы бешереүе, татар яуын ҡояш янына уҡ күтәрелгән, бына-бына кемдеңдер маңлайына төшәсәк суҡмар

рәүешендә күҙаллау, шомло хәбәрҙән бөршәйеп, бәләкәйләнеп ҡалған тирмәләр, яу тураһындағы һөрәнде аҡһатҡан, ҡанаттарын ҡайырған ышанмаусанлыҡ һ.б. – ошондай экспрессив стилистика, тел- стиль сараларының ҡулланылышы, метафорик, символик образдар әҫәр структураһын байыталар.

Яҙыусы хатта идеаль күренештәрҙе тасуирлағанда ла осор һулышын берерҙәй ассоциатив алымдар ҡуллана. Мәҫәлән, уйҙарҙы йыш ҡына төрлө яҡҡа сабышыусы тай-тулаҡҡа оҡшатыуҙа йәшен-ҡартын, батырын һәм шағирын эйәргә ултыртҡан хәтәр заман рухы аңҡығандай.

Үткер, оригиналь сағыштырыуҙар, йәнләндереүҙәр, метафорик образдар, ғөмүмән, тел-һүҙ байлығының сағыулығы, һүрәтләү манераһы әҫәрҙе эстетик яҡтан зауыҡлы яһауға, тәҫир итеү көсөн арттырыуға хеҙмәт итә. Былар барыһы ла яҙыусының һүрәтләү оҫталығының үҫеүе хаҡында һөйләй.

Шул уҡ ваҡытта романда күп төрлө сюжет һыҙыҡтарының, геройҙар яҙмышының бер үҙәк композицион төйөнгә төйнәлеп бөтмәүе лә күренә. Был бигерәк тә диңгеҙ артына, Юрматы сабыйҙарын юллап сәфәр сыҡҡан Ғилман батырға бәйле сюжет һыҙығына ҡағыла. Тәүге бүлектәрҙә байтаҡ урын алған Ғилман образы художестволы характер кимәленә күтәрелеп етмәгән, әҫәр һуңында батырҙың артабанғы яҙмышын һүрәтләгән риүәйәт-эпилог төп сюжетҡа йәбешер-йәбешмәҫ торғандай. Әлбиттә, ғәрәсәтле, буталсыҡ заман ысынбарлығында герой яҙмышының шулай мажаралы, фажиғәле тамамланыуы бик мөмкин. Ғилман маҡсатының мөһим өлөшөнә ирешә, тамырҙарынан айырылған сабыйҙарға башҡорт рухын алып барып еткерә. Образға был бер ни тиклем бөтөнлөк бирә.

Юлиандың башҡорттарҙы католик диненә күсеүгә өндәү эпизоды иһә психологик үткерлекте кәметә. Шулай уҡ тотош бер ырыу кешеләрен – табын ырыуын ҡара буяуҙарҙа биреү маҡсатҡа ярашлы түгел. Бар ырыуҙы ҡул аҫтында тотҡан көслө рухлы Аҙнай бейҙең туҙҙырылған илде йыйнаусы, ҡурсыусы булыуы урынына, мәмерйәлә үҙ-үҙенә бикләнеп йәшәүе, социаль тигеҙһеҙлек, синыфтар араһындағы ҡаршылыҡтарҙың сағылышы булған Искәндәргә бәйле ваҡиғаларҙа бейҙең хурлыҡҡа ҡалыуы, геройҙы үҫеш-үҙгәрештә биреүгә ҡарағанда, характер логикаһына хилафлыҡ итә.

Б. Рафиҡовтың «Ахырызаман көткәндә» романы тарих төпкөлөнә тәрән үтеп инеү, башҡорт ырыуҙарының ҡан-ҡәрҙәшлек шәжәрәһен төптән юллау, күп планлы панорам һүрәтләү аша шул осор тормош ағышын бар ҡатлаулылығында иңләп алып эпик һүрәтләүгә дәғүә итеүсе тәрән фәлсәфәүи уйҙар, сигенеүҙәр менән һуғарылған, халыҡ тормошоноң яңы ҡатламдарын асыусы, башҡорт тарихи прозаһын яңы баҫҡысҡа күтәреүсе әҫәр булды.

Туҡһанынсы йылдар башында ижадындағы тарихи тематиканы Булат Рафиҡов тарихи фараз әҫәрҙәрендә дауам итте. Ул «Эйәрләнгән ат» (1990), «Тәңреләр һәм төркиҙәр» (1991) тигән тарихи фараздарын яҙҙы.

Исеме үк әйтеп тороуынса, тарихи фараз беҙҙең әҙәбиәт өсөн яңы жанр. Ул тарихи мәғлүмәттәрҙе үҙенсә үҫтереп, онотолған йә мәғлүм булмаған ҡай

бер быуындарын, өлөштәрен логика буйынса фараз ҡылып, художестволы тулыландырып биргән тарихи жанр формаһы.

«Эйәрләнгән ат» тарихи фаразында автор Салауат Юлаевтың һәм уның ҡоралдаштарының Рогервиктағы һөргән осорон, хәҙер бик аҙ гына билдәле-билдәһеҙ дәүерен, ҡайһы бер өҫтәмә мәғлүмәттәргә таянып, үҫтереп, үҙенсә фараз ҡылып күҙ алдына баҫтыра, пугачевсыларҙың һөргөн шарттарында ла ил көнө, ирке өсөн көрәшен һынландыра, Салауаттың тыуған илендә ҡалған ике улының яҙмышын тетрәндергес драматик ситуациялар аша һүрәтләй.

«Тәңреләр һәм төркиҙәр» тарихи фаразында иһә орхон-йәнәсәй яҙмаларын тыуҙырыусылар тураһындағы повесть-хикәйәт боронғо тәрки ҡәүемдәрҙең, шул иҫәптән боронғо башҡорт ырыу тармаҡтарының оло тарихи юл башын йәнләндерә.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Вахитов А.Х. Жанр и стиль в башкирской прозе. – Уфа: Башкирское книжное издательство, 1982. – 346 с.
2. Башҡорт әҙәбиәте тарихы: 7 томда. –Т.6. Өфө: Китап, 1996. 504-524.


© Гәрәева Г.Н., 2023

**УДК821.512.141.09**

*Гәрәева Г.Н., филол. ф. д-ры., проф.*
*ӨФһТУ, Өфө к.*

# БАШҠОРТ МОНУМЕНТАЛЬ РОМАНДАРЫНДА КОМПОЗИЦИЯ ҠОРОЛОШО

**Аннотация.** В башкирской прозе 60-90-х годов XX века – в романах З.Биишевой, Я.Хамматова, Ф.Исянгулова, Б.Рафикова, Н.Мусина, Г.Ибрагимова, А.Хакима, Т.Гариповой и др. предпочтение было отдано монументальной композиции, они отражали самые важные в жизни общества и народа этапы развития.

**Annotation.** In Bashkir prose of the 60-90s of the twentieth century – in the novels of Z.Biisheva, Y.Khammatov, F.Isyangulov, B.Rafikov, N.Musin, G.Ibragimov, A.Hakim, T.Garipova and others, preference was given to monumental composition, they reflected the most important stages of development in the life of society and the people.

**Ключевые слова**: башкирская проза, роман, сюжетные линии, композиция, система образов

**Key words:** Bashkir prose, novel, storylines, composition, image system

XX быуаттың 60–80-се йылдар башҡорт прозаһында күп һыҙыҡлы сюжет үҫтерелешенә, күп планлы композиция ҡоролошона ынтылыу тарихи–

революцион темаға арналған З.Биишеваның “Яҡтыға”, Ф.Иҫәнғоловтың “Һәйкәлдәр тереләр өсөн” трилогиялары, Я.Хамматовтың “Бөртөкләп йыйыла алтын”пенталогияһы, Н.Мусиндың “Мәңгелек урман” дилогияһы һ.б. өсөн дә хас булды. Тарихи-революцион теманы яҡтыртыуҙа башҡорт прозаһы башлыса романдың монументаль композицияһына өҫтөнлөк бирҙе, романдарҙа йәмғиәт тарихындағы һәм халыҡ яҙмышындағы өс этап трактовкаланды.

Бының типик миҫалы итеп З.Биишеваның өс романын килтерергә мөмкин: “Кәмһетелгәндәр”, “Уяныу” (“Оло Эйек буйында”), “Яҡтыға” (“Емеш”) романдарының исемдәре үк был мөһим тарихи осорҙарҙы күрһәтеп тора. Ғ.Ибраһимовтың “Умырзая”, “Ай битен йыуғанда”, Н.Мусиндың “Мәңгелек урман”, Ә.Хәкимдең “Өйөрмә”, “Дауылдан ҡотолоу юҡ” дилогиялары кеше тормошондағы йәки йәмғиәт үҫешендәге бәхетле һәм бәхетһеҙ, уңышлы һәм уңышһыҙ осорҙарҙы сағылдырыусы социаль–психологик романдар өсөн дилогиялар ҡулайлы булды.

70–90-сы йылдарҙағы әҫәрҙәрҙә – Б.Рафиҡов, Ә.Хәким, М.Хәйҙәров, Т.Ғарипованың тарихи үткән һәм хәҙерге ысынбарлыҡ күренештәре тығыҙ үрелгән романдарында ла күп һыҙыҡлы сюжет үҫтереү, композицияны былдай художество алымдары менән байытыу тәжрибәһе артабан дауам ителде. Б.Рафиҡовтың «Сал ҡылған» романында заман проблемалары күтәрелһә лә, замандаштар образы үҙәккә ҡуйылһа ла, композицияла бөгөнгөнөң тарихи үткән менән тәрән бәйләнешен күрһәтеүсе шәжәрәләргә, ауыҙ–тел ижады ҡомартҡыларына киң урын бирелә, шул рәүешле күп планлы хикәйәләү хасил була.

Әҫәрҙә байтаҡ геройҙарҙың холоҡ–фиғеленә, рухи һыҙаттарына яҡтылыҡ һибеүсе, нәҫел–нәсәбен, тамырҙарын юллаусы шәжәрәләр нигеҙендә быуындар бәйләнеше юллана, мәшһүр йырсы Кинйәһолтанға һәйкәл асыу ваҡиғаһы, Аҡсарлаҡ байрамы үткәреү аша – былар барыһы ла сюжеттың күп һыҙыҡлы булыуын тәшкил итә – рухи мираҫҡа, ғөрөф-ғәҙәттәргә, туған телгә, халыҡтың ауыҙ–тел ижадына һаҡ ҡараш тыуҙырыу кеүек әхлаҡи–этик проблемалар күтәрелә.

Ә.Хәкимдең «Өйөрмә», М.Хәйҙәровтың «Китмәҫ өсөн килдем» романдарының сюжетын революциянан һуңғы, торғонлоҡ йылдарындағы һәм хәҙерге осорҙағы ил үҫешендәге күренештәрҙе күп һыҙыҡлы, күп планлы, эпик ҡоласлы яҡтыртыу тәшкил итә. Был романдарҙа 20–30-сы йылдарҙағы яңы йәмғиәт төҙөүгә бәйле киҫкен тарихи бороломшло мәлдәр, колхозлашыу осороноң крәҫтиән яҙмышында тетрәнеүҙәр менән оҙатылыуы, ирекһеҙләү, шәхес хоҡуҡтарын тупаҫ боҙоуҙарҙың утыҙ етенсе йылда айырыуса ғәрип төҫ алыуы, унан һуңғы осорҙарҙа ла фажиғәле хәл–ваҡиғаларҙың, рухты быуыусы атмосфераның дауам итеүен һүрәтләү үҙәккә ҡуйыла. Яҙыусылар был ваҡиғаларҙы үткән тарих итеп кенә ҡарамайҙар, уларҙың бөгөнгө көндәге эҙемтәләрен, үткән менән хәҙергенең тығыҙ бәйләнешен күрһәтәләр.

Һуңғы осорҙараҡ яҙылған А.Мағазовтың трилогияһындағы киҫкен бороломштарға, тетрәүҙәргә, фажиғәләргә тулы халыҡ тормошо, кешеләрҙең,

биниһая юғаллтыуҙарға ҡарамай, ғәҙел тормош төҙөргә ынтылыуҙары, йәмғиәттә бер-бер артлы вәхшәтлектәр ҡылынғанда ла бәхетле йәшәргә өмөттәрен һүндермәүҙәре бай тормош материалында хикәйәләнә.

"Әйләнә тирмән ташы" романы Башҡортостандың Дим, Өйәҙе буйҙарындағы 1910 йылдарҙан алып булған ауылдарҙағы тормош-көнкүреште ентекле тасуирлай. Геройҙарҙың яҙмышына, эшмәкәрлегенә бәйләнешле географик яҫылыҡ киңәйә бара, ваҡиғаларҙың ижтимағи-социаль яңғырашы көсәйә, Һамар ҡалаһында, Петроградта, империалистик һуғыш ҡырҙарында революцион аңдары үҫешкән, тормошҡа ҡараштары киңәйгән геройҙар романдың сюжет һыҙыҡтарын күп тармаҡлы, ҡоласлы итә.

Ер-һыу, ауыл атамаларының, ысынбарлыҡта нисек бар, шулай алыныуы романда һүрәтләнгән тормош материалының ышандырыу көсөн арттыра, документаль ерлеген нығыта. Дим буйы башҡорттарының ҡыҙ биреү, килен төшөрөү кеүек туй йолаларына, йәштәрҙең киске уйындары, һалдатҡа оҙатылыуы, һөйөшөү һәм айырылышыу кеүек ғаилә тормошона ҡағылышлы тәртип-низамдар, имләү-дауалау кеүек күренештәр, күп төрлө көнкүреш өлкәһенә ҡараған ғөрөф-ғәҙәттәр – халыҡтың рухи донъяһына, милли менталитетына ҡағылышлы этнографик картиналар, шулай уҡ йыр, таҡмаҡ, әйтемдәр, геройҙар телмәрендә йыш яңғыраған тапҡыр фразеологизмдар сюжет һыҙығына мул индерелгән. Улар крәҫтиәндәрҙең көндәлек тормошонда ғәҙәти күренеш булған өмәләр, күмәк хеҙмәт күренештәре, ара-тирә ҡабынып киткән ыҙғышлы хәлдәр, тирә-яҡтағы, илдәге донъя барышы тураһында әңгәмәләшеүҙәр, батшалыҡҡа, синфи иҙеүгә ҡаршы көрәш идеяһын таратыу күренештәре менән аралашып, тәбиғи үрелеп килә. Ауылдан алыҫ яҡтарҙа барған империалистик һуғыш шаңдауы ла, революцион көрәш картиналары ла сағылыш таба.

Романда образдар системаһы бик киң һәм сыбар. Гәрәй Дәүләтов һымаҡ башҡорт крәҫтиәне лә, Сәлихйән Баязитов һымаҡ шәкерт тә, Ҡазан яҡтарынан суҡындырыуҙан ҡасып килгән татарҙар ҙа, революцион эшмәкәрлеге өсөн һөргөнгә ебәрелгән рус эшсеһе, тимерсе Савелий Гавриков та, ҡаҙаҡ егете Юлдашбай ҙа, күрше-тирә ауылдарҙың сыуаштары, башҡа милләт вәкилдәре лә хәрәкәт итә.

1914 йылда башланған империалистик һуғыштың халыҡҡа килтергән ҡазаһын, Февраль, Октябрь революцияларын, егерменсе йылдарҙағы ил, халыҡ тормошондағы үҙгәрештәрҙе хикәйәләү фонында төрлө холоҡло, төрлө ынтылыштар менән йәшәүсе, күп төрлө социаль төркөмдәргә ҡараусы кешеләр араһындағы ҡырҡыу мөнәсәбәттәр һүрәтләнә. Романда һуғыш арҡаһында байып ятыусы, хәрбиҙәргә йылы кейем тегеү буйынса төшөмлө заказ алған сауҙагәр-промышленник Югин, тире-яры эшен көйгә һалып ебәргән, Югинды сеймал менән тәьмин итеп тороусы Юныс Закиров, тирмәнсе Хәйернас, ҡомһоҙ Вәлә мулла һымаҡтар ҙа, Ҡашҡа Мөслим һымаҡ ауыҙын асһа, үпкәһе күренеп торған меҫкен ярлылар ҙа, үҙ хеҙмәт көстәре, егәрлектәре менән донъя көткән, ғәҙеллектәре менән айырылып торған Баязитовтар, Ғәйнетдиновтар, Сакаевтар

ғаиләләре лә, һунарсылыҡ менән көн күреүсе Бүре Вәли ҙә, ауылда йәҙитселек мәктәбе асыусы мөғәллимә Сәбилә лә, табиплыҡ итеүе, ярҙамсыллығы, аҡыллы кәңәштәре менән тирә-яҡтағыларҙың хөрмәтен ҡаҙанған Мулләхмәт хәҙрәт тә бар. Уларҙың холоҡ-ҡылығы күп төрлө эреле-ваҡлы эпизодтарҙа, ғибрәтле ситуацияларҙа йәнле булып асыла.

А.Мағазов “Аға һыуҙар“ романында ла фольклор поэтикаһын уңышлы ҡуллана. Сюжетҡа индерелгән сағыу йола, ғөрөф-ғәҙәт күренештәре, легенда һәм ҡарһүҙ, мәҙәни һәм этнографик картиналар хикәйәләү манераһына, әҫәрҙең стиль тәбиғәтенә, художестволы туҡымаһына үҙенсәлекле биҙәк өҫтәй.

Романда революциянан һуңғы йылдарҙағы киҫкен ваҡиғалар, крәҫтиәндәргә ер бүлеп биреү, коммуналар, ауыл хужалығы артелдәрен ойоштороу, мәҙәни-ағартыу эштәре йәйелдереү, көндәлек тормош-көнкүреш хәлдәре хикәйәләнә. Утыҙынсы йылдар башында колхоздар ойоштороу осоронда хәллерәк крәҫтиән ғаиләләрен кулак тип һөргөнгә оҙатыу, репрессия осоронда яңы тормош төҙөү өсөн янып эшләгән ауылдың алдынғы фекерле кешеләрен, уҡытыусы, агроном кеүек белгестәрҙе, халыҡ дошманы тип, ҡулға алыу кеүек, уларҙың ғаиләһе, зат-зәүеренең ыҙа сигеүе, халыҡ тәрән хөрмәт иткән, изге күреп ололоҡлаған Мулләхмәт мулланың чекистар үҙен ҡулға алырға килгән мәлдә йән биреүен яҙыусы психологик тәьҫирле итеп күрһәтә. Тарихтың киҫкен боролоштарына эләккән геройҙарҙың эш-ҡылыҡтарын, уй-кисерештәрен, тетрәнеүҙәрен ҡырыҫ реалистик стилдә, тормошсан итеп хикәйәләү менән бергә, Совет власына ҡаршы ҡорал күтәргән, большевиктар еңгәс, яңы тәртиптәргә яйлашып, түрәлеккә үрләгән Сирай Карнаев, Фәтхелислам Алакаровтарҙың аҫтыртын көрәш алып барыуҙары мажаралы-детектив алымдарҙа тасуирлана.

А.Мағазовтың “Донъя - ҡуласа“ тигән романы утыҙынсы йылдарҙағы Дим буйы ауылдарындағы тормошто һәм Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы ваҡиғаларҙы үҙ эсенә ала. Бәләбәй төрмәһендәге ҡулға алынған тотҡондарҙы язалау күренештәре, революционер, күренекле партия эшмәкәре, “халыҡ дошманы“ Савелий Гавриловтың язалауҙарҙан һуҡырайыуы күренештәре ҡуйы буяуҙарҙа тетрәндергес картина рәүешендә күҙ алдына баҫтырыла. Репрессиянан ҡасып ситкә сығып киткән геройҙар эҙен юллап, автор хикәйәләү офоҡтарын киңәйтә бара, Урта Азиялағы хәл-күренештәрҙе яҡтыртыуға иғтибар бүлә. Романда ил, халыҡ тормошондағы вәхшәтле күренештәрҙе һүрәтләүҙә ҡулланылған киҫкен драматик тон утыҙынсы йылдарҙағы йәштәрҙең мәҙәниәткә, мәғрифәткә әүҙем тартылыуҙарын, сәнғәткә ылығыуҙарын яҡтыртҡан эпизодтарҙа лирик йылылыҡ, романтик аһәң менән алмашына. Был романда ла сюжетка индерелгән Дим буйы башҡорттарының сағыу йола, ғөрөф-ғәҙәт күренештәре йыш ҡына публицистик стилдә алып барылған хикәйәләүгә үҙенсәлекле биҙәк өҫтәй.

Тарихи хрониканы асыҡ юллаған, яҡтыртҡан төп сюжет һыҙығынан башҡа был романдарҙа байтаҡ ярҙамсы сюжет һыҙыҡтары айырылып сыҡҡан, төрлө ҡатлам вәкилдәренең мөнәсәбәттәре, эш–ҡылыҡтары, рухи донъялары

яҡтыртылған, үткән һәм бөгөнгөгә бәйле төрлө ваҡыт сиктәре аралаштырып бирелгән, киң арауыҡ сиктәрендә барған ваҡиғаларҙан торған ваҡыт һәм урын–ер, хәрәкәт берлеге аша, шул осор социаль–ижтимағи атмосфераһы, төрлө мөхиттәге көнкүреш, йәмғиәттәге рухи тормош киң итеп сағылдырылған.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Баимов Р. Н. Судьба жанра. – Уфа: Башкирское книжное издательство, 1984. – 320 с.
2. Гәрәева Г.Н.Башҡорт прозаһында сюжет һәм композиция ҡоролошо үҙенсәлектәре: монография – Өфө:БашДУ нәшриәт үҙәге, 2021. 154 бит.


© Гәрәева Г.Н., 2023

**УДК 821.512.141.09**

*Гәрәева Г.Н., филол. ф. д-ры, проф.*
*Биканова Г.Ф., студент*
*ӨФһТУ, Өфө ҡ.*

# НАИЛ ҒӘЙЕТБАЙҘЫҢ «БАБИЧ» РОМАНЫНЫҢ ИДЕЯ-ТЕМАТИК АСЫЛЫ

**Аннотация.** В данной статье анализируются идейно-тематическое содержание, проблематика, жанрово-стилевые особенности, концепция героя в новом романе Н.Гаитбая “Бабич”.

**Annotation.** This article analyzes the ideological and thematic content, problems, genre and style features, the concept of the hero in N.Gaitbai's new novel "Babich”.

**Ключевые слова:** Наиль Гаитбай, Шайехзада Бабич, поэт, поэзия, борьба за автономию, народ.

**Key words:** Nail Gaitbay, Shayehzada Babich, poet, poetry, struggle for autonomy, people.

Илебеҙҙең аҫыл улдарының береһе Шәйехзада Бабич тураһында яҙылған был романды бер тынала уҡып сыҡтым. Ғәҙәттә, беҙ Бабич хаҡында ҡасандыр оҫта шағир булған, башҡорттарҙың милли азатлығы өсөн көрәшеүсе һ.б. кеүек өҫтөн генә беләбеҙ, ә был романда иһә Шәйехзада беҙгә бөтөнләй икенсе яҡтан асыла.

Әҫәрҙең тәүге өлөшөндә Ҡаҙаҡ далаларында мүлдәк булып йөрөүсе Шәйехзаданың әйтештә ҡатнашып, ҡаҙаҡтарҙың иң көслө сәсәндәренең береһе Хажибәкте еңеүе тураһында һүҙ алып барыла. Тәү ҡарашҡа физик яҡтан әллә ни көслө булмаған, йәш Шәйехзаданы башта һанға ла һуҡмайҙар.

Әммә бар яҡлап та үткен, телгә маһир, кәрәк саҡта йоҙроҡ та төйнәп һуғышырға сыҡҡан был егет зирәклеге, отҡорлоғо менән тәжрибәле ҡаҙаҡ сәсәнен еңеп тә ҡуя.

Миңә бигерәк тә әйтеш барған саҡта Шәйехзада менән Хажибәктең бер-береһенә әйткән йомаҡтары, ҡобайырҙары ныҡ оҡшаны. Был авторҙың үҙе уйлап сығарған шиғырҙарымы, әллә ысынлап та ҡайҙалыр яҙылып ҡалынған әҫәрҙәрме икән тип оҙаҡ уйландым. Наил Ғәйетбайҙың әйтеш барған майҙанды шул тиклем йәнле итеп һүрәтләүе яҙыусының һис шикһеҙ үҙе шунда булып, ярышты күреп яҙып алынған кеүек итеп тойола, ҙур кинәнес менән уҡыным.

Ғөмүмән, роман ҡоро тарихи мәғлүмәттәр менән генә тултырылмаған, киреһенсә, төрлө хәл-ваҡиғалар аша уҡыусыларға Шәйехзада Бабичтың асылда кем булыуын күрһәткән. Егерме дүрт йыл ғына йәшәгән был ярһыу йөрәкле, оҫта шағир ошо ҡыҫҡа ғүмере эсендә күпме изгелектәр ҡылып, үҙе артынан кешеләр йөрәктәрендә юйылмаҫ эҙ ҡалдырып киткән шәхес. Бала саҡтан уҡ зирәк, тирә-йүнде, тормошто өйрәнергә ынтылған, тиктормаҫ бала булып үҫә. Бала саҡтан уҡ күмәк кешеләр алдында сығыш яһау уның оялыуын еңергә, ҡат-ҡат үҙ өҫтөндә эшләп, оҫталығын арттырыуға, кешеләрҙе үҙ артынан эйәртерлек ораторлыҡ һәләтенә эйә булыуға килтерә, Был, үҙ сиратында, Бабичтың көслө рухлы, алдына алған маҡсаттарына ирешеүсән көслө зат икәнлегенә ишара.

“Ғәлиә” мәҙрәсәһендә уҡып йөрөгән осорҙа ла ул бар яҡлап актив, уҡыу менән генә мауыҡмай, үҙенең лидерлыҡ сифаттарын үҫтергән, шағирлыҡ оҫталығын арттырған, шул уҡ ваҡытта ғәҙеллек өсөн көрәшкән шәкерт булып һүрәтләнә. Замана менән бергә барған, алдынғы ҡарашлы был мәҙрәсәлә шәкерттәрҙе дини фәндәр генә уҡытып, мулла булыр өсөн генә әҙерләмәгәндәр.

“Ғәлиә” мәҙрәсәһендә уҡыусылар бар яҡлап та үҙҙәрен үҫтергәндәр: астрономия, физика, химия, психология кеүек фәндәр, бынан тыш күп төрлө сит телдәр өйрәнелгән, шәкерттәргә шул уҡ ваҡытта музыка менән ҡыҙыҡһынырға, театрҙарға йөрөргә рөхсәт ителгән. Мәҙрәсәнең директоры Зыя Камали хаҡында тап ошо романда яҙылған ваҡиғалар аша ғына белдем, ул, башлыса, мәҙрәсәлә уҡып сыҡҡан шәкерттәрҙән белемле уҡытыусылар, ғалимдар, яҙыусылар, рәссамдар, музыканттар, композиторҙар, журналистар әҙерләп сығарыуға ҙур көс һала.

Бабич мәҙрәсәлә лә уҡый, бар Өфөнө шаулатып концерттар ҙа ойоштора, башлап яҙыусылар түңәрәген дә етәкләй, милли хәрәкәттә лә ҡатнашып өлгөрә. Йәш, ҡайнар ҡанлы, дәрте ташып торған Шәйехзада бар һәләтен, көсөн биреп башҡара был эштәрҙе. Яҙыусы ошолай Бабичтың шәхес булып үҫешеү этаптарын, уның тормош юлын эҙмә-эҙлекле, сағыу итеп һүрәтләй. Уның әкренләп аңы үҫешеүен, яйлап ерле мөхтәриәт өсөн көрәштең асылына төшөнөүен, кешеләрҙең ихласы ла, ике йөҙлө хәйләкәре лә булыуын, кемдең кем икәнен белеп, дуҫты дошмандан айырырға өйрәнеүен сағылдыра. Ул - тура һүҙле, ҡуйған маҡсаттарынаынтылыусы, ғәҙеллек һағында торған кеше.

Өфөлә йәшәгән осорҙа ул сәхнәлә мандолинола оҫта уйнап, тиҙ арала таҡмаҡтар уйлап сығара торған сәсән телле шағир, үҙенең тәбиғи һөйкөмлөгө менән тамашасыларҙы тиҙ генә арбай алыусы артист булып танылa. Бирелгән һәләтен ул кәрәкле юҫыҡҡа йүнәлтә ала: халыҡ уны ярата, шағир нимә әйтә, шуны тыңлай, ғөмүмән, халыҡҡа тейешле тәьҫир итә ала.

Әммә ошо һәләте уға артабанғы тыуған ҡатмарлы хәл-ваҡиғаларҙан имен ҡотолорға ла ярҙам итә. Урыны менән яҙыусы арттырып та ебәрәлер, мәҫәлән, ҡыҙылдар ҡулына эләккәс, ул күрәҙәсе бабай роленә инеп шул тиклем килештереп уйнай, хатта хәрби комиссар Ҡылысов та эштең айышына төшөнә алмай. Әҫәргә быларҙың бер зыяны ла юҡ, киреһенсә, уҡыусыларға ул Бабичҡа ҡарата хөрмәт кенә арттырырға, уны нисектер ябайыраҡ, яҡын кеше итеп күрһәтергә булышлыҡ итә.

Романда бик күп төрлө тарихи шәхестәр яҡтыртылып үтә. Ҡасандыр ябай кәмитсе, артист булып ҡына, халыҡты көлдөрөп йөрөүсе тигән исем аҫтында билдәле булған Бабич, милли сәйәсәт өлкәһендә үҙ фекерен әйтә алырлыҡ шәхес булып үҫешә. Бының өсөн Әхмәтзәки Вәлиди менән Ғәлимйән Ибраһимов ҙур йоғонто яһай.

Вәлиди уға милли-мәҙәни мөхтәриәт менән ерле мөхтәриәт араһындағы айырманы, үҙе һөйләшкән телдең татар теле булмайынса, башҡорттоң төньяҡ теле икәнлегенә төшөндөрә. Бабич тора-бара Ғәлимйән Ибраһимовтың уны үҙ мәнфәғәттәренә генә файҙаланырға ниәт итеүен аңлай, бының башҡорт менән татар араһын киҫкенләштереүе генә мөмкин икәнлеген төшөнә. Ентекләп уйланғандан һуң ғына, Шәйехзада үҙенең барлыҡ көсөн, һәләтен туған башҡорт халҡының яҡты киләсәгe хаҡына бирергә хәл итә. Вәлидиҙең: “Һин шуны аңла! Беҙ татарға ҡаршы көрәшмәйбеҙ, мәңге дуҫ буласаҡбыҙ! Әммә беҙ башҡорт халҡының рус, татар аҫтында түгел, ә үҙ аллы, иркле булыуы өсөн бөтә көсөбөҙҙө һаласаҡбыҙ. Һин дә был көрәштән ситтә ҡалмаҫһың, тип уйлайым, шағир әфәнде!?”- тигәндәре Бабичҡа шикләнергә урын ҡалдырмай.

Бабич шулай тәү ҡарашҡа тик ил, халыҡ мәнфәғәтен генә ҡайғыртҡан көрәшсе кеүек күренә. Әммә параллель рәүештә ул шулай уҡ мөхәббәт хистәренә бирелгән, романтик күңелле йәш егет тә. Был йәһәттән әҫәрҙә һүрәтләнгән ҡаҙаҡ ҡыҙы Йомабикә һәм Алмабикә образдары иҫтә ҡалырлыҡ. Әйтеш майҙанында ҡаҙаҡтарҙың иң сибәр ҡыҙҙарының береһе Йомабикәне кәләшлеккә алыу өсөн барған ярышта Шәйехзаданың тамам ҡыҙҙы үҙенә ғашиҡ итеүе, аҙаҡ алыҫ араларҙа бер-береһенә мөхәббәт хаттары яҙып тороуҙары, Йомабикәнең Шәйехзада артынан эҙләп килеүе - барыһы ла мөхәббәттең кешене утҡа ла индереүе, һыуға ла һалыуына тағы бер ишара. Ике йәш йөрәктең аяныслы мөхәббәт тарихи йөрәктәрҙе тетрәндерерлек.

Шулай ҡыҫҡа ғына ғүмере эсендә халҡыбыҙ тормошонда яҡты йондоҙҙай балҡып, ҡапыл юҡҡа сыҡҡан Шәйехзада Бабич тураһында был роман тиҙ арала уҡылып сығылды. Шағир, сәсән телле оҫта, милли азатлыҡ өсөн көрәшсе булып халыҡ күңелендә ҡалған әҙип, был романда бөтөнләй башҡа яҡтан йәнле булып, күп яңы характер һыҙаттары менән балҡып асылды, Бабичтың рухын мәңгеләштерҙе, беҙҙең арала йәшәп ятҡан тере шәхес итеп күрергә булышлыҡ итте.

© Гәрәева Г.Н, Биканова Г.Ф., 2023

**УДК 821.512.141.09**

*Гәрәева Г.Н., филол. ф. д-ры, проф.*
*Дәүләтгәрәева Х.И., студент*
*ӨФһТУ, Өфө к.*

# Ф. АҠБУЛАТОВАНЫҢ «ХАНБАЛА ҺӘМ ХАН БАЛА» ХИКӘЙӘҺЕНДӘ ВАТАНСЫЛЛЫҠ МОТИВТАРЫ

**Аннотация.** В данной статье анализируется рассказ известного башкирского прозаика Ф.Акбулатовой “Ханбала и хан бала”, посвященный на одну из самых актуальных проблем современности.

**Annotation.** This article analyzes the story of the famous Bashkir prose writer F.Akbulatova's “Hanbala and Khan Bala”, dedicated to one of the most pressing problems of our time.

**Ключевые слова:** Фарзана Акбулатова, рассказ, герой, тема патриотизма, деталь, понятие Родины.

**Key words:** Farzana Akbulatova, story, hero, theme of patriotism, detail, concept of Homeland.

Әҙип һүҙе бөгөнгө көндә, элекке идеалдар юҡҡа сыҡҡан, яңылары асыҡ төҫмөрләнмәгән мәлдә, йәмғиәттә эшһеҙлек, енәйәтселек кеүек сирҙәр көсәйгән мәлдә, бигерәк тә кәрәк. Сөнки әҙәбиәттең күркәм әхлаҡ сифаттарын, ватансыллыҡ тойғоһон тәрбиәләүсе оло хазина икәнен иҫтән һис ҡасан сығарырға ярамай. Был йәһәттән Фәрзәнә Аҡбулатова әҫәрҙәрен кешеләә юғары әхлаҡи һыҙаттар тәрбиәләүсе ижад итеп атап була.

Фәрзәнә Фәтих ҡыҙының әҫәрҙәре йөкмәткеһе йәһәтенән әһәмиәтле лә, теле-стиле яғынан һутлы, уҡымлы ла. Уның ижады рухы менән үтә лә халыҡсан, әҙәби геройҙары балҡып торған тос характерҙарға бай, һәр образы тапҡыр, үткер телле. Яҙыусы хикәйә һәм романдарында халыҡтың йәшәү рәүешен, рухи-әхлаҡи, ижтимағи-социаль проблемаларҙың киҫкенлеген, төрлөлөгөн тәрән мәғәнәле, уйландырырлыҡ образдар аша асып бирә. Уның “Ханбала менән хан бала” тигән хикәйәһе лә – ошондайҙарҙың береһе.

Ф.Аҡбулатованың “Ханбала менән хан бала” әҫәренендә күтәрелгән иң төп проблемаларҙың береһе – Ватан азатлығы өсөн һәм ата-бабалар аманаты өсөн көрәш, ата менән ул араһында булған мөнәсәбәттәр, йәшәү мәғәнәһе, һуғыш-яуҙарҙың бала күңелендә ҡалдырған тәрән яралары.

Хикәйәнең төп геройы, туғыҙ йәшендә етем ҡалған Ханбала ғүмере буйы ил гиҙеп йөрөй. Уның батыр атаһын, ағаһы менән уның сабыйын, ғәзиз әсәһен, тотош ырыуын дошмандар төн уртаһында һуйып китә. Ханбала үҙенең йылғырлығы арҡаһында ғына иҫән ҡала. Сабый аңына был ҡанлы вәхшәт шундай төшөнсә һала: һуғыш кәрәкмәй, “ниңә дошман булырға кәрәк?”, “ни өсөн йыртҡыстар кеүек ҡан ҡойорға?” кеүек бик күп һорауҙар уның мейеһендә өйөрөлә.

Әле атаһы иҫән сағында улына дошман менән көрәшеү изге бурыс икәнлеген, уны Ватанды һаҡлау яҙмышы көтәсәген аңлата. Туғыҙ ғына йәшлек сабыйҙың ҡанлы фажиғәнән һуң эске донъяһы емерелә, рухы ҡыйрала, ул бер ҡасан да һуғышмаясаҡмын, дошмандарға теш ҡайрамаясаҡмын, тип үҙ-үҙенә ант итә. Ханбала атаһының батыр ҡылысын атҡа алмаштыра, атаһы билдәләгән яҙмышынан ҡырҡа баш тарта, аҡ-ҡараны күрмәй, саптырып тыуған яҡтарын ташлап китә.

Ярты ғүмерен үҙе генә ил гиҙә, бер ҡайҙа ла оҙаҡ тормаҫ, кешегә бик күренмәҫ була. Тора бара өйләнеп, улы Аҡбала тыуа. Улы менән бергә геройҙың йәшәү мәғәнәһе барлыҡҡа килә. Ул балаһының киләсәген уйлай, аталарса хәстәрлек күрә. Аҡса килтерә торған шөғөл таба: һуғыштан һуң ҡалған уҡ-һаҙаҡтарҙы улы Аҡбала менән йыйып, икенсе ергә алып барып һата һәм бик тиҙ байып китә. Бик күп ҡан ҡойғостар күрергә тура килә уларға, Ханбала һуғышҡа ҡыҫылмаҫҡа, гел һалҡын ҡан менән генә эш итергә тейешлектәрен тәкрарлай, улын киҫәтә тора.

Әммә батыр ҡаны аға был балала. Берҙән-бер көн Туҡтамыш хан менән баҫҡынсылар алышҡанда, бәләкәй генә бала атаһы, Ватаны өсөн ҡорал тотоп дошмандарға ҡаршы сыға. Туҡтамышты ла, уның улын да баҫҡынсылар үлтерәләр. Аҡбала, атаһы тыйғанға ғына түҙеп, ошо ваҡиғаны өнһөҙ-тынһыҙ ҡарап тора. Йән аямай алышып, тиҫтәләгән уҡ-ҡылыс аша үтһә лә, аумаған, ҡоламаған атаһы Туҡтамыштыңтубығына башын һалып йән биргән батыр уландың ҡыҙ икәнлеге башлығы төшөп китеп, оҙон сәс толомдары таралып китеүенән асыҡлана.

Ханбалаға оят була, ул үҙенең ғүмере буйы ҡасып йөрөгәнен аңлай, “минең исемем генә Ханбала, ә бында ысын хан балаһы үҙен ҡорбан итте” тип уйлай ул. Аҡбаланың иһә күңеле ярһып китә, дошмандарҙан үс алыу ниәте үҫкәндән-үҫә. Ханбала Туҡтамыштың ҡылысын күреп ҡото оса, тетрәнеү кисерә. Тыуған ерен, ватанын ташлап ҡасыр өсөн атҡа алмашҡан атаһының батыр ҡылысын Туҡтамыш хан ҡулына ҡыҫып тотоп йән биргән , баҡтиһәң.

Үҫмер Аҡбала, был һәләкәткә шаһит булғандан һуң, ата-бабалары Ватанын эҙләргә сығып китә. Атаһы “донъялағы иң ҙур хазинаһын юғалтмаҫҡа – уғланы артынан барырға, ул баҫҡан эҙҙәрҙе табырға һәм тороп ҡалмаҫҡа тейешмен” тип, уның артынан йыйынып юлға сыға.

Аҡбаланың тәүәкәллегенә һоҡланып, Ханбала үҙенең ниндәй ҙур хата эшләгәнен аңлай: тыуған төйәгеңә, ватаныңа, ата-бабаларың рухына, васыятына тоғро ҡалырға кәрәк. Тыуған иленде һәм балаларыңдың киләсәге өсөн һин көрәшмәһәң, кем көрәшер ҙә кем яҡлар. Бер ҡасан да Ватаныңды оноторға, дошмандарҙың баҫып алыуына юл ҡуйырға ярамай!

Ф. Аҡбулатова әҫәрендә күтәрелгән темалар, фекерҙәр бөгөнгө көндә үтә лә актуаль, замандың көнүҙәк мәсьәләһен күтәрә, художестволы образдары замандаш уҡыусы өсөн фәһемле, яҡын. Әҫәрҙә образдар системаһы ҡатмарлы түгел. Алғы планда Ханбала образы тора. Был образ аша автор бала саҡта күргәндәрҙең тойған-кисергәндәрҙең сабый күңелендә тәрән эҙ ҡалдырғанын,

киләсәгенә көслө йоғонто яһағанын күрһәтә. Ысынлап та, бала күңеле йомшаҡ, теге йәки был ваҡиғаны үтәнә ныҡ ауыр кисерә. Ата-әсәһеҙ ҡалған, рухы имгәнгән, күңеле бала саҡтан ук етемлектән һыҙланған, төшөнкөлөккә бирелгән бала, ҡан ҡойошта ҡатнашмаҫ өсөн, ҡасып йөрөүҙе һайлай.

Аҡбала образы тәүҙә ата һүҙен һүҙ итеүсе, түҙемле, сабыр, тыйнаҡ бала образын күҙ алдына баҫтырһа, Туҡтамыш ырыуының, хан һәм ҡыҙының айбарлы алышыуын, ватан һағында йән-тәслимгә һуғышып һәләк булыуын тетрәнгәндән һуң, олатаһы ҡылысын тапҡандан һуң, ата-бабалары ватанын эҙләп, тәүәккәл юлға сабып сығып китеүе батыр олатаның батыр ейәне икәнлеген, ватанын табып, уның һағында ҡалҡан булып ҡалҡасағына шик тыуҙырмай.

Был төп образдарҙан башҡа тағы ла икенсе пландағы геройҙар – Ханбаланың атаһы, төп геройҙың ҡатыны, Туҡтамыш һәм уның ғәзиз балаһы Ханбала менән Аҡбаланың характерҙарын төрлө яҡлап асыуҙа билдәле роль уйнай.

Фәрзәнә Аҡбулатова был образдар системаһы аша үҙенең әҫәрендә ватансыллыҡ тойғоһоноң көсө, әһәмиәте, тыуған ил өсөн ҡорбанға барырға әҙерлек, аманатҡа тоғролоҡ һәм хаинлыҡ кеүек мәңгелек проблемаларҙы фәлсәфәүи тәрән итеп сағылдырыуға ирешкән.

Әҫәрҙең композицияһы ябай ғына: Ханбаланың эске күңел донъяһындағы кисерештәрен, донъяға ҡараштарын эҙмә-эҙлекле асыуға ҡоролған. Сюжеттан тыш элементтарҙан булған һөйкәлмә образ – атаһының нисәмә йылдар аша Ханбаланы үҙе эҙләп тапҡан батыр ҡылысы – ваҡиғаларҙың киҫкен боролошона килтерә, Аҡбала күңелендәге һынылышҡа, йөрәгендә ватансыллыҡ тойғоһо уяныуға, булмышын атайсалын эҙләп табыу теләгенең тыйып тотҡоһоҙ булып солғап алыуына этәрә.

Фәрзәнә Аҡбулатова хикәйәһенең лексикаһы ифрат бай һәм үҙенсәлекле. Автор ғәрәп-фарсы һүҙҙәрен, дини лексиканы күп ҡулланһа ла, әҫәрҙәре теленең аңлайышлы, халыҡсан. Был үҙенсәлек яҙыусының халыҡтың бай ауыҙ-тел ижадын тәрән белеүенә һәм уны оҫта файҙаланыуына бәйләнгән.

Әҫәрҙә синонимдар урынлы һәм уңышлы ҡулланыла (киҫкен –асыулы; оноторға – уйламаҫҡа һ.б.). Шуныһы характерлы, автор, синоним һүҙҙәренең яңыһын да, иҫкеһен дә ҡулланып, стилистик шымалыҡҡа ирешә, заман һулышын тулыраҡ күҙ алдына баҫтыра. Мәҫәлән: ҡара ҡойон – дошман, ҡырғын – һуғыш, емергес –ҡурҡыныс һ.б. Хикәйәлә ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәр йыш осрай. Был, күрәһең, тормоштоң ҡапма-ҡаршылығы, авторҙың уға ҡаршылыҡлы мөнәсәбәте менән аңлатылалар. Был поэтик сара аша яҙыусы туған халҡына булған тәрән хистәрен еткергә тырыша: дуҫ – дошман, бөгөнгөһө – үткәне....

Әҫәрҙә ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр генә ҡулланылмай, бөтә йөкмәтке антитезаға ҡоролған: Ханбала үҙенең күңелендә ҡайнашҡан хистәре менән көрәшә.

Ф. Аҡбулатованың эпитеттары күберәк халыҡтың йәнле һөйләү теленә, фольклор әҫәрҙәренә яҡын, яҙыусы гипербола алымы аша ла үҙ геройының тәрән кисерештәрен һүрәтләй, ер тормошонан ҡәнәғәт булмауын күрһәтә. Әҫәрҙең теле лә бик үҙенсәлекле: лирик геройҙың кисерештәрен һәм эҙләнеүҙәрен асыу өсөн автор «ташламаясаҡ», «көрәшеп», «онотторға», «икеләнмәйәсәк» кеүек хәл-торошто күрһәтеүсе ҡылымдарҙы йыш ҡуллана.

Йомғаҡлап әйткәндә, замандың иң актуаль проблемаларының береһенә арналған Фәрзәнә Аҡбулатованың "Ханбала һәм хан бала" әҫәре һүрәтләү сараларына ифрат бай.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Гәрәева Г.Н. Башҡорт прозаиктары: монография. Өфө: БашДУ РБҮ, 2012. – 494 бит.



© Гәрәева Г.Н, Дәүләтгәрәева Х.И., 2023



**УДК 821.512.141.09**



*Гәрәева Г.Н., филол. ф. д-ры, проф.*
*Мостафина И.А., студент*
*ӨФһТУ, Өфө к.*


## ЮҒАРЫ КЛАСТАРҘА ҺУҒЫШ ТЕМАҺЫН ӨЙРӘНЕҮ


**Аннотация.** В статье анализируются методы и приемы, призванные патриотическому воспитанию учеников на уроках литературы. Подчеркивается при этом важнось учета псхологических возможностей и возрастных особенностей учеников в планировании учебного процесса. Рассматриваются методы, формы, элементы проблемного обучения в преподавании литературы и воспитании патриотизма.

**Annotation.** The article is about the patriotic education of students in literature lessons. It is noted how important it is to take into account the psychological capabilities and age characteristics of students in the educational process planning. There are considered the methods, forms, elements of problem-based learning in the teaching of literature and the patriotic education.



**Ключевые слова:** патриотическое воспитание, тема войны, Родина, литература.

**Key words:** patriotic education, theme of war, Motherland, literature.


Йәмғиәттә Ватанға ҡарата һөйөү һәм патриотик тәрбиә биреү темалары киң таралған һәм һәр ваҡыт актуаль булып ҡала килә. Теге йәки был халыҡтың оло йәштәге вәкилдәре үҙ бурысы итеп йәш быуында тыуған илгә ҡарата һөйөү тәрбиләүҙе алған. Был бурысты тормошҡа ашырыуҙа мәктәптең роле бик ҙур. Дәрестәрҙә мәктәп әҙәбиәт курсы айырым иғтибарға лайыҡ, сөнки нәфис

әҙәбиәт дөйөм тәрбиәнең айырылғыһыҙ өлөшө булып тора, шулай уҡ патириотик тәрбиә нигеҙен дә нығыта. Әҙәбиәт ярҙамында шәхес тәрбиәләнә, уның киң яҡлы үҫеше, күңел торошо, әхлаҡи ҡиммәттәре тәмъин ителә. К.Д. Ушинский фекеренсә, “патриотизм – тәрбиә биреүҙең маҡсаты ғына түгел, ә көслө педагогик алым. Үҙен яратмаған кеше булмаған кеүек, тыуған иленә ҡарата һөйөүе булмаған кеше лә юҡ. Был һөйөү кеше тәрбиәләүгә тап килгән асҡыс булып тора” [4].

Башҡорт әҙәбиәтендә һуғыш темаһына ҡағылышлы әҫәрҙәр ҙур тәрбиәүи көскә эйә. Әҫәрҙәрҙең һәр юлында һалдаттарҙың ҡаһарманлығы хаҡында бәйән ителә. Уҡыусы тыуған иленә ҡарата һөйөү һәм ихтирам менән һуғарыла.

Патриотизм формалаштырыу системаһының эшмәкәрлеген артабан да дауам итеү өсөн белем биреүҙең эстәлеген һайлау мәсьәләләре, дәрестәрҙә текст менән эш итеүҙә төрлө алымдар ҡулланыу һорауҙарын дөрөҫ хәл итеү бик мөһим.

Дәрестәрҙә һуғыш темаһына арналған әҫәрҙәр менән танышыу, уларҙы ентекле өйрәнеү патриотизм хистәрен тәрбиәләүҙәге маҡсаттарға ирешергә ярҙам итә. Һәр бала үҙе йәшәгән тыуған иленең тарихын белергә, еңеү хаҡын аңларға, шул еңеүгә өлгәшкән батыр ир-егеттәрҙе һәр ваҡыт иҫләргә тейеш. Һуғыш темаһына ҡағылышлы әҙәби әҫәрҙәрҙе анализлағанда, уҡыусылар тарихи һәм ижади тәрән эҙ ҡалдырған билдәле яҙыусы биографиһы менән таныша. Уҡыусыларҙа Ватанға ҡарата һөйөү тәрбиәләүҙә шулай уҡ туған халҡының героик тарихы, үҙ ерен һаҡлап алып ҡалыуы, башҡа баҫҡынсыларға ҡаршы ныҡ тороуы хаҡында тарихи материалды үҙләштереү мөһим урынды биләй.

Уҡыусыларҙа патриотизм тойғоларын тәрбиәләү барышында уларҙың психологик мөмкинселектәрен һәм йәш үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыу мөһим. Белем биреүҙә уҡыусыларҙың тейешле фекерҙәре, күҙаллауҙары тыуһын өсөн төрлө методтар, формалар, ҡулланмалар, проблемалы уҡытыу элементтарын сиратлап ҡулланырға мөмкин.

Һуғыш темаһына арналған әҫәрҙәр менән танышҡандан һуң ундағы образдар уҡыусылар күңелендә эмоциональ эҙ ҡалдырырға, үҙ туған иленең тарихын шул темаға арналған әҫәрҙәр аша өйрәнеү, һуғышҡа, ҡурҡыу белмәҫ һалдаттарға, дөйөм халыҡҡа ҡарата үҙ мөнәсәбәтен белдереү теләге уяныырға тейеш.

Айырым класта башҡорт әҙәбиәтендәге һәр авторҙы, һәр әҫәрҙе өйрәнеү өсөн үҙ ара берләштереп ҡулланып булған эш алымдары, формалар һайлап алыу кәрәк. Әммә был алымдар уҡыусыға авторҙың позицияһын, әҫәрҙең мәғәнәһен һәм тәрәнлеген аңлатырға ярҙам итергә тейеш. “Бөйөк Ватан һуғышы” темаһын өйрәнә башлағанда, әҙәбиәт уҡытыусыһы мотлаҡ рәүештә уҡыусыларҙа эмоциональ кисерештәр барлыҡҡа килтереү, шул йылдарҙа булған хәл-ваҡиғаларҙың ҡатнашыусыһы итеү, шул осорҙо яҡынайтыу хаҡында уйларға тейеш [2].

Айырым яҙыусылар ижадын, авторҙар группаһын өйрәнеүҙә ҡулланып булған эш алымдарын һәм формалары ҡарап китәйек. Һуғыш темаһын өйрәнеүгә арналған дәресте планлаштырғанда уҡытыусы әҫәр геройының күңел матурлығын, уның батырлығын һәм патротизмын күрһәтеүҙе маҡсат итеп ала. 5-6-сы класс уҡыусылары әҙәби әҫәрҙәрҙә туған иленең героик тормошо менән танышҡанда Ватанын домшмандарҙан һаҡлаған ябай һалдаттарҙың хис-тойғолары менән таныша, еңеү хаҡында фекер йөрөтә, тыуған ил даны нисек тормошҡа ашырылыуы хаҡында уйға бирелә. Быңдай дәрестәрҙә һуғыш хаҡында әңгәмә ҡорола, тасуири итеп шиғырҙар уҡыла. Ижад аша кешене аңлау, тойоу күпкә еңелерәк, шуға ла дәрестәрҙә ижади күнегеүҙәр урынлы: тарихи әҫәргә, өҙөккә иллюстрация яһау, кроссворд төҙөү, тарихи шәхестәрҙең диалогын һөйләү, тарихи геройға ҡылыҡһырлама биреү һәм башҡалар. Дөйөм дәрестең эмоциональ атмосфераһын барлыҡҡа килтереү өсөн музыкаль өҙөктәр тыңларға, театрлаштырылған сәхнәләштәреүҙәр ҡуйырға мөмкин.

7-8-се кластарҙа патриотик тәрбиә биреү һорауы ҡатмарлаша. Өҫтәлмә мәғлүмәт сығанаҡтары менән ҡулланыуға бәйле үҙ аллы күнегеүҙәр ыңғай һөҙөмтәләргә эйә. Уҡыусылар әҫәрҙең темаһын, идеяһын билдәләй, фекер алыша, анализ яһай. Уҡыусылар теманы үҙ ғаиләһе тарихы менән бәйләп өйрәнеүе патриотик тәрбиә биреү маҡсаттарын тормошҡа ашырырға ярҙам итә. Дәрескә алдан әҙерләнәләр, һуғыш осоронда фронтта йәки тылда булған туғандары хаҡында материал эҙләй. Быңдай алым дошмандарға ҡаршы торған ғаилә ағзаһына ҡарата ихтирам тәрбиәләргә, ғорурлыҡ тойғоһо уятырға ярҙам итә.

8-9-сы кластарҙа һуғыш темаһына арналған лекция һәм дискуссия алымдары ҡулланыу артыҡ һөҙөмтәләргә килтермәй. Был осраҡта хикәйә алымы тәрәнерәк функцияға эйә. Уҡытыусы яҙыусының тормошо һәм ижады хаҡында бәйән итергә, шулай уҡ уҡыусы әҫәрҙәге герой хаҡында һөйләргә мөмкин. Шулай уҡ әңгәмә формаһы ла урынлы. Образдарға характеристика биреү, уларҙың үҙҙәрен тотоуы, әҫәрҙең идеяһы, төп мәғәнәһе, һүрәтләү саралары һ.б. әңгәмәнең төп темаһы итеп һайлана. Дәрестә төрлө нәфис фильмдарҙан өҙөк, йырҙар тыңлау, презентациялар тәҡдим итергә мөмкин.

9 - сы класта һуғыш темаһын өйрәнеүҙең нигеҙе булып уҡыусыларҙың был ваҡиғаларға ҡағылышлы даталар менән таныш булыуы тора. Һуғыш темаһы лирикаһы менән танышыр алдынан ҙур булмаған инеш өлөш булыуы кәрәк. Мәҫәлән, һуғыш осорондағы әҙәбиәт торошо, героик һәм трагик мотивтар күтәрелеүе хаҡында. Юғары кластарҙа әҙәбиәтте проблемалы уҡытыу методы урынлы. Методҡа ярашлы, уҡыусылар диалог барышында критик фекерләргә өйрәнә, хәл-ваҡиғаларҙы анализлау нигеҙендә ҡатмарлы һорауҙарға яуаптар таба, альтернатив фекерҙәр менән таныша һәм һығымталар яһай. Был методты ҡулланыу уҡыусыларға үҙ-ара фекер алышыу шарттары булдыра һәм һорауҙарға яуап табыу маҡсаты тыуҙыра. Киләсәктә уҡыусылар үҙ фекерен нигеҙләй алыу, аргументтар табыу һәләтенә эйә була. Шулай уҡ улар үҙ граждандыҡ позицияһын тәрбиәләй һәм уҡыу проценсында әүҙем ҡатнаша.

Әҙәбиәт уҡытыуҙың патриотик потенциалын тулы файҙаланыу, урынлы алымдар, формалар ҡулланыу мәктәптәрҙә патриотик тәрбиә нигеҙен нығыта, артабан туған илгә ҡарата һөйөүҙе үҫтерергә мөмкинселек бирә.

## ӘҘӘБИӘТ

1. Иҙелбаев М.Х. Мәктәптә әҙәбиәт дәрестәре: башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы / Мирас Иҙелбаев. - Өфө : Китап, 2013. - 198 с.

2. Казначеева Н.Н. Пути активизации интереса школьников к произведениям о Великой Отечественной войне // «Проблемы современного воспитания», – 2018. – №11. – М.: ГосНИИ семьи и воспитания.

3. Овчинникова Н.П. Идея патриотизма и Отечества в истории русской педагогики // Педагогика, – 2007. – №1. – С. 93-102;

4. Ушинский, К. Д. О народности в общественном воспитании / К. Д.Ушинский // Собрание соч. : в 6 т. Т. 1. – М. : Педагогика, 2000. – С. 160.

© Гәрәева Г.Н., Мостафина И.А., 2023

**УДК 821.512.141.09**

*Гәрәева Г.Н., филол. ф. д-ры, проф.*
*Сатвалова И.Я., студент*
*ӨФҺТУ, Өфө к.*

## ӘҘӘБИӘТ ДӘРЕСТӘРЕНДӘ ХУДОЖЕСТВОЛЫ ОБРАЗДАРҘЫ АНАЛИЗЛАУ АЛЫМДАРЫ: ПОРТРЕТ ХАРАКТЕРИСТИКАЛАРЫ

**Аннотация.** В статье анализируются приемы портретной характеристики, призванные раскрытию художественных образов на уроках литературы. Подчеркивается при этом важнось учета псхологических возможностей и возрастных особенностей учеников в планировании учебного процесса. Рассматриваются методы, формы, элементы проблемного обучения в преподавании литературы, в изучении опыта писателей в воссоздании художественных образов.

**Annotation.** The article analyzes the techniques of portrait characterization designed to reveal artistic images in literature lessons. At the same time, the importance of taking into account the psychological capabilities and age characteristics of students in the planning of the educational process is emphasized. The methods, forms, elements of problem-based learning in teaching literature, in studying the experience of writers in recreating artistic images are considered.

**Ключевые слова:** литература, портретные характеристики, приемы, художественный образ.

**Key words:** iterature, portrait characteristics, techniques, artistic image.

Әҙәбиәт дәрестәрендә уҡыусыларға төплө белем һәм төрлө яҡлы идея-эстетик тәрбиә биреү уҡытыусынан дәрестәрҙең һөҙөмтәлелеген күтәреүҙе талап итә. Тик ошондай дәрестәр генә уҡыусыларға әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен, характерҙарҙы дөрөҫ аңларға һәм һүҙ сәнғәте булған художестволы әҙәбиәткә һөйөү тәрбиәләргә булышлыҡ итә.

Әҙәби әҫәрҙе йөкмәтке һәм форма берлегендә өйрәнеү, идея-тематик йөкмәткене үҙләштереүҙе яҙыусының тел-стиль үҙенсәлектәренә, һүрәтләү сараларына, образдарҙы асҡанда портрет характеристикаларына мөрәжәғәт итеүгә бәйләп асыу – программа талаптарының береһе һәм иң мөһиме.

Хәҙерге информация ағымдары иҫ киткес тиҙлек менән алмашынып торған заманда мәктәп уҡыусыларының әҙәбиәттән бер аҙ ситләшеүе күҙәтелә. Компьютер, интернетҡа бәйләнгән балаларҙа художестволы әҫәргә ҡыҙыҡһыныу уятыу – башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһының төп бурыстарының береһе.

Төрлө уҡыусы төрлө кимәлдә әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштерә. Художестволы әҫәргә һалынған төп фекер барыһына ла мәғлүм булһын өсөн уға мотлаҡ рәүештә анализ яһау кәрәк. Уҡыусы күберәк әҫәрҙәге ваҡиғалар, геройҙарҙың эш-ҡылыҡтары менән мауығып, уларҙы яҙыусы ниндәй алымдар менән асыуына иғтибар итмәй. Ҡайһы бер уҡытыусылар тексттың йөкмәткеһен һөйләү, төп образдарға ҡылыҡһырлама биреү менән генә сикләнәләр һәм шуның нигеҙендә дөйөм әҫәр, уның идея-тематик йөкмәткеһе хаҡында һүҙ йөрөтәләр.

Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһе өҫтөндә эшләгәндә яҙыусының тел-стиль үҙенсәлектәрен, һүрәтләү оҫталығын уҕкыусыларға еткереү – уҡытыусының мөһим бурысы. Художестволы әҫәр өҫтөндә методик яҡтан дөрөҫ алып барылған эш балаларҙа ижади әүҙемлек уята.

Һәр әҫәр художестволы бер бөтөндө тәшкил итә. Художестволы әҫәрҙе анализлау иһә ошо бер бөтөндө хасил иткән компоненттарҙы айырым-айырым өлөштәргә тарҡатып тикшереүҙе аңлата һәм түбәндәге элементтарҙан тора: тарихи шарттар, әҫәрҙең темаһы, әҫәрҙеү идеяһы, әҫәрҙең исеме, әҫәрҙең жанры, төп герой, икенсе пландағы (дәрәжәләге) геройҙар, символик образдар, әҫәрҙең сюжеты, сюжеттан тыш элементар, композиция, автор позицияһы, әҫәрҙең телмәр үҙенсәлеге һәм башҡалар.

Юғарыла тәҡдим ителгән схема тексты анализлағанда уның ниндәй яҡтарына иғтибар итергә кәрәклеген күрһәтә.

Анализдың тәртибе, эҙмә-эҙлелеге әҫәрҙең үҙенсәлегенән, ниндәй жанрға, әҙәби төргә, уҡыусыларҙың әҙерләнеү кимәленән сығып уҡытыусы тарафынан билдәләнә. Шулай булғас, схемала күрһәтелгән ҡайһы бер пункттар төшөп ҡалыуы ла ихтимал. Мәҫәлән, лирик әҫәргә анализ эшләгәндә ҡайһы бер пункттар булмай. Уларҙа төп иғтибар кешенең төрлө ваҡиғаларға, тәбиғәт күренештәренә, донъя тураһындағы уй-тойғоларын сағылдырыуға йүнәлтелә. Лирик әҫәрҙәрҙә тормош картиналарын, ваҡиғаларҙы, айырым кешеләрҙең

портретын, тәбиғәт күренештәрен һүрәтләү урын алһа ла, улар барыһы ла шағирҙың эске донъяһы менән бәйләнештә тасуирланалар.

Был төргә ҡараған әҫәр шағир йөрәге аша үткән иң нескә кисерештәрҙе бәйән итеп, беҙҙе ошо хис донъяһына алып инә. Шағир менән бергә кисерергә, бергә тулҡынланырға өйрәтә.

Лирик поэзияның үҙәгендә торған лирик герой образы шағир шәхесенән, ул үҙ замандаштары өсөн хас сифаттарҙы дөйөмләштереп килә. Ысынбарлыҡ авторҙың донъяны аңлауы, төшөнөүе, субъектив ҡарашы аша сағыла.

Ғөмүмән, бирелгән бөтә пункттарҙы бер юлы ҡарау мөмкин дә, мотлаҡ та түгел. Шуға күрә текст буйынса конкрет эш төрҙәре билдәләнелә, артабан улар өй эшенә, синыфта эшкә бүленә.

Әҫәрҙе анализлау дәрестәрендә уҡытыусы менән уҡыусылар араһында тығыҙ бәйләнеш булдырылырға тейеш. Бындай дәрестәрҙә балалар ябай уҡыусы түгел, ә уҡыусы-тикшеренеүсе, ә уҡытыусы уларға йүнәлеш биреүсе, кәрәк урында төҙәтеп ебәреүсе дирижер ролен башҡарырға тейеш. Ул тикшеренеүселәр тарафынан тәҡдим ителгән бер гипотезаны ла инҡар итмәй, киреһенсә, аудиторияға тәҡдим итә. Һәр бала үҙ фекерен әйтеп кенә ҡалмай, ул уны миҫалдар менән дәлилләй. Әҙәбиәт дәресендә бар уҡыусының да фекере кәрәкле, мөһим.

Художестволы әҫәрҙәрҙе анализлағанда, уның бөтә компоненттары ла бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә тикшерелә, әммә образдарҙы анализлау үҙәк урынды алып тора. Төп герой, ыңғай һәм кире образдарҙы билдәләргә кәрәк. Һәр образ әҫәрҙең төп һәм ярҙамсы идеяларын асыуға буйһондорола. Уларҙың характерын ваҡиғалар үҫешендә, персонаждарҙың бер-береһе мөнәсәбәтендә асыҡларға тырышырға кәрәк. Образдарҙы әҫәрҙең сюжет үҫешенә бәйләп ҡарап, төп конфликтты билдәләргә кәрәк. Уҡытыусы шулай уҡ балаларҙың иғтибарын ыңғай һәм кире персонаждарҙың рухи донъяһына, ҡараштарына йүнәлтергә, тормошта йәшәү принциптарын, көрәшен, характерҙарының формалашыу сәбәптәрен асырға тейеш. Был йәһәттән, портрет характеристикаларын барлап үтеү юғары һөҙөмтәләргә өлгәшергә ярҙам итә.

Әҙәби әҫәрҙәрҙә образдарҙы асҡанда портрет характеристикаларын ҡулланыу художестволы әҫәрҙең күркәмлеген, образдарҙың сағыулығын тәьмин итә. Мәҫәлән, Мостай Кәрим үҙенең ижадында быны бик уңышлы ҡуллана. Автор был алымды геройҙарына тышҡы йәки эске яҡтан характеристика биргәндә оҫта файҙалана. Яҙыусы тарафынан файҙаланылған портрет характеристикалары үҙҙәренең үҙенсәлеге һәм ҡабатланмаҫ стилистик образ тыуҙырыу алымдары байлығы менән йәлеп итә. Образ-персонажды һүрәтләгәндә яҙыусы йыш ҡына уның портретына мөрәжәғәт итә. Образдарҙы асҡанда, күберәк сифаттар ҡулланыу бик отошло. Был алым төрлөсә ҡулланыла: геройҙың портретын әҫәрҙең бер өлөшөндә тулы итеп тасуирлау, икенсе осраҡта ул төрлө урында бирелеүе мөмкин.

«Өс таған» повесында малайҙарҙың портреты әҫәрҙең башында уҡ тулы итеп һүрәтләнә. Уларҙа портрет характеристикаларының әһәмиәтен ҡарап үтәйек: “Ыҫмала төҫлө ҡуйы ҡара сәсле, ҡылыс танаулы малай Ғабдулла исемле. Уның сәсенә ҡулыңды тейҙерһәң бармаҡтарың сатнап йәбешер һымаҡ. Йәмшек танаулы табаҡ битле йыуаны – Вәзир. Һыуыҡта ла, эҫелә лә уны ике бит алмаһы гел ҡыҙарып янып тора. Вәзирҙең күҙҙәрен сылт-сылт йома торған ғәҙәте бар. Бер саҡ яңы килгән уҡытыусы апай, үсекләшә тип уйлап, ошо ҡылығы өсөн уны кластан да ҡыуып сығарҙы. Үҙе шундай булһа ла, рогатканан һәләк мәргән ата ул. Өсөнсөһө – берҙән-бер ерән сәсле, һипкелле малай – Айҙар. Уның «Ҡыр кәзәһе» тигән ҡушаматы ла бар. Шәп йүгергән өсөн шулай тип йөрөтәләр. Дүртенсеһе саҡ ҡына ситтәрәк ултыра. Уның әле етеһе лә тулмаған. Сысҡан ҡойроғо кеүек кенә толомона матур ҡыҙыл таҫма ҡушып үргән. Исеме лә матур уның – Гөлнур. Тик алғы тештәре генә юҡ. Теше булмағас, ауыҙында һис кенә лә һүҙ тормай». Күреүебеҙсә М. Кәрим малайҙарҙың тышҡы ҡиәфәтенә хас һыҙаттарҙы һанау менән генә сикләнмәй, ә уларҙы образлы итеп тасуирлай. Һүҙҙәрҙе һәм образлы һүрәтләү сараларын билдәләү, портретты асыусы ҡайһы бер ҡылыҡтарҙы күрһәтеү, геройҙарҙың нисегерәк итеп күҙ алдына баҫтырылыуын асыҡлау әҫәрҙәрҙәге образдарға характеристика биреүҙә мөһим роль уйнай. Портрет характеристикаһын сифаттар нигеҙендә төҙөү образға анализ биреүҙә әһәмиәтле. Портрет характеристикаһын уҡығанда уҡ уларҙа ҡулланылған сифаттарҙың һәр береһе онотолмаҫ билдәне еткереүе менән хәтерҙә ҡала. Ә артабанғы хәл-ваҡиғаларҙа яҙыусы портрет характеристикаһына артыҡ иғтибар итмәй, кәрәк урында уҡыусыға таныш һыҙаттарҙы ҡабатлап ҡына китә, йәки малайҙарҙың үҙҙәренән әйттерә. Мәҫәлән, “Өс таған” повесында йүгереү буйынса ярыш ойошторғанда Айҙар алға сыға, Вәзир артта ҡала, шуға ла ул эстән генә «Ерән шайтан!» тип уны үсекләй. Рогатканан атыу ярышы ойошторғанда Вәзирҙең «һәлпәк танауына бер серекәй килеп ҡунды» тип һүрәтләй автор. Әҫәрҙә яҙыусы һәр геройҙың портретына, холҡона бәйле ҡушамат та таба: береһе – Йүгерек, икенсеһе Көрәшсе, өсөнсөһө Мәргән. Тимәк, портрет характеристикалары әҫәрҙә төрлө образлы күренештәр тыуҙырып ҡына ҡалмай, мәғәнә мөнәсәбәттәре тыуҙырып, геройҙың эске холҡон асыуҙа ла мөһим хеҙмәт үтәй. Автор оҫталығын асыу, унан бигерәк портрет деталдәренең, образдарҙың ниндәй роль уйнауын асыҡлау – былар барыһы ла геройҙарға характеристика биргәндә портрет алымын ҡулланыуҙа төп йүнәлеш.

Мостай Кәримдең “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” әҫәре лә портрет характеристикаларына ифрат бай. Мәҫәлән, Искәндәр Әсҡәте геройын яҙыусы тәүбашлап “күҙҙәре лә етен сәскәһенә оҡшаған – зәп-зәңгәрҙәр” тип атай. Артабан, әҫәр барышында Әсҡәткә тышҡы характеристика биреүҙә сифаттар киң ҡулланыла. Миҫалдар: Әсҡәттең инде арҡаһындағы ҡутырҙары ҡубып төшә башланы, йөҙөндәге ҡара янған урыны һарғылт зәңгәргә әйләнде. Минең башта ултырған етен башлы, һыңар ҡолаҡлы Әсҡәт, ҡапыл ҡарағанда бер тотҡаһы төшкән самауырға оҡшап ҡалған. “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” повесында ҡатын-ҡыҙ

героиняларына бирелгән портрет характеристикаларында сифаттар матурлыҡ төшөнсәһен биреүҙә, гүзәл заттың гүзәллеген еткереүҙә оло хеҙмәт үтәй. Миҫалдар: «Тимәк, сөм-ҡара сәсле, сөм-ҡара күҙле, һул битендәге ҡара миңе балҡып торған етем ҡыҙға тиң түгел, сөнки мин я. фа сикмәй йәшәнем. Аҡйондоҙҙоң ирендәре буйлап әлеге арбаусан йылмайыу йүгерҙе. Бер яғына уның ыҡсым ғына атыр көлмәһе төҫлө, төптән йыуантыҡ, күҙгә мөләйем генә бисәһе, икенсе яғына – сөм-ҡара сәсле, атаһыныҡы шикелле зәп-зәңгәр күҙле Аҡйондоҙ баҫҡан» һәм башҡалар.

Билдәле яҙыусы, прозаик Рәшит Солтангәрәевтың әҫәрҙәре лә үҙҙәренең тормошсанлығы, үткерлеге һәм актуаллеге, жанр һәм стиль үҙенсәлектәре менән айырылып тора. Ҡайһы ғына әҫәрен алма, ундағы хәл-ваҡиға – тормоштан, уйлап сығарылған, фантазияға ҡоролған факт юҡ. Яҙыусы һәр ваҡиғаға мәғәнә һалырға тырыша. Рәшит Солтангәрәев бер ҡасан да үҙе һөйләмәй, ә күрһәтә, тәҡдим итә, һығымта яһауҙы уҡыусының үҙенә ҡалдыра. Йыш ҡына ул теге йәки был геройҙың портрет характеристикаһын биреп, әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен асыуға ирешә, Геройҙарының эске донъяһын, уй-кисерештәрен, икеләнеү-ғазаптарын бик оҫта, ышандырғыс итеп күрһәтә белә. Ниндәй һөнәр эйәһе тураһында ғына яҙмаһын, яҙыусы уларҙың һөнәр үҙенсәлектәренә ҡарағанда күңел төпкөлдәренә үтеп инергә, башҡалар күрмәгән, иғтибар итмәгән сифаттарын асып һалырға тырыша, очерк геройҙарын сәнғәт юғарылығына күтәрергә тырыша. Тормошто ул аҡҡа һәм ҡараға ғына бүлеп күҙәтмәй. Геройҙарҙың ниндәйҙер сәйер яҡтары бар, яҙмыштары ла ябайҙан түгел, ләкин уларҙың күпселеге яғымлы, матур күңелле кешеләр. Яҙыусы портрет алымдарын ҡулланып, әҫәр геройҙарын төрлө яҡлы итеп яҡтырта һәм уларҙың булмышын һүрәтләп бирә. Персонаждың эске донъяһын, хистәрен, фекер-кисерештәрен уларҙың төҫ-ҡиәфәтен, холоҡ-фиғелен һүрәтләү аша сағылдыра автор. Автор тарафынан файҙаланылған портрет характеристикалары үҙҙәренең үҙенсәлеге һәм ҡабатланмаҫ стилистик образ тыуҙырыу алымдары байлығы менән йәлеп итә. Образ-персонажды һүрәтләгәндә яҙыусы йыш ҡына уның портретына мөрәжәғәт итә.

Рәшит Солтангәрәевтың «Ҡиәмәтлек кейәү» хикәйәһе автор тарфынан тойғоло, күңел кисерештәре аша ышандырырлыҡ итеп яҙылған. Төп геройҙар – Шакир, уның ҡатыны Райхан, Гөлйөҙөм инәй образдары аша алдашыуҙың яҡшылыҡҡа килтермәүе, донъяла һәр ҡылған эштәрең өсөн яуап бирергә тура киләсәге тураһында әйтелә. Был турала әҫәрҙә: «Баштан-аяҡ бысраҡҡа сумып йөрөгәндән һуң тап-таҙа күлгә сумып, йыуынып сыҡҡан һымаҡ һиҙә үҙен», – ти төп герой тураһында автор.

Хикәйәлә Шакир образы сағыу буяуҙар менән бирелә. Ҡатыны Райхан уға: «Кит-кит, был тиклем дә никтыуҙы булырһың икән! Ҡартайған һайын аҡылың кирегә китә! Һуң, утыҙға етеп бараһың бит инде!» йәки «Был тиклем дә ҡартайғансы аҡыл ултырмаған әҙәм булыр икән! Ана һөтө менән кермәһә, тиҙәр бит... » тип асыулана. Әммә уңайһыҙ хәлгә ҡалғандан алып, ул : «Ғүмере буйы

уйынды ысындан айырмайынса, теленә ни тура килә, шуны һөйләп йөрөгән кеше бер өндәшмәҫкә әүерелде ». Гөлйөҙөм инәйҙе үҙҙәренә ҡиәмәтлек әсәй итеп алғандан һуң ғына, уның күңеле тыныслана: «ошо мәлдән йәнә ҡәҙимге, алабарман, бер аҙ былағай, әммә эскерһеҙ үҙ рәүешенә инде». Бына ошондай портрет характеристикалары уның характер һыҙаттарын асыуға хеҙмәт иттерелә.

Шакирҙың ҡатыны – ут. Был турала әҫәрҙә Шакир ауыҙынан әйтелә: «Райхан һүҙгә аптырап тора торған ҡатын түгел, ирек ҡуйһаң, көнө буйы туҡтамаҫ» йәки : «Лауылдама әле! Тауышың тауышмы, буш мискәгә таяҡ менән һуҡҡан шикелле! » һәм башҡалар.

Әҫәрҙә Гөлйөҙөм инәй образы айырыуса нескәлек менән бирелә. Бер яҡтан, автор уны : «Гөлйөҙөм инәйҙең ауылда «ҡупығыраҡ кеше» тигән даны ла бар. Ниндәй генә ауырлыҡтар күрмәһен, уның кеше алдында сер биреп, бахырланып йөрөгәне булмаҫ. Киреһенсә, юҡты ла бар итеп, берҙе биш итеңкерәп һөйләп йөрөр», тип ҡылыҡһырлай. Инәйҙең был ҡылығы артында, нисәмә йылдар бер ҡайтып, әсәһенең хәлен дә белмәгән Хәсәнде яҡлашыу, уға һүҙ тейҙермәү ята. Шакирҙан улының ҡайтыу хәбәрен ишеткәс, Гөлйөҙөм инәй теремекләнеп, йөҙөндә шатлыҡ осҡолары уйнап китә: «Нисә йыл ауылда кеше араһында бер төрлө кәмһенгән төҫлө йөрөгән әбейҙә ҡапыл тәкәбберлек тойғолары ла уянып китте. Әбейҙең күңеле күтәрелде, үҙен дә, ошо ялтыраған еҙ шикелле, йәшәреп киткәндәй тойҙо», тип самауыр менән сағыштыра уны Рәшит Солтангәрәев.

Шулай итеп, художестволы әҫәрҙәрҙә портрет характеристикаларын уңышлы ҡулланыу образдарҙың өҫтәлмә билдәһен асыҡлауҙа, образлы стилистик биҙәк биреүҙә ҡатнаша. Тәү ҡарашҡа ябай ғына күренгән ваҡиғалар, ябай образдар аша, төрлө һүрәтләү саралары, портрет характеристикалары алымын ҡулланып, әҙиптәр үҙҙәренең ижады аша кеше яҙмышына хаҡсыл ҡараш, иғтибарлылыҡ тәрбиәләй.

## ӘҘӘБИӘТ

1. Баһауетдинова М. И., Йәғәфәрова Г. Н. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтен заманса уҡытыу. - Өфө: Китап, 2009. – 176 бит.

2. Ғималова М. Ғ. 8-10 кластарҙа башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы. - Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1983. – 152 бит.

3. Солтангәрәев Рәшит. Оло юлдың туҙаны. Повесть һәм хикәйәләр. – Өфө: «Китап», 1995. – 544 бит.

4. Мостай Кәрим. Оҙон-оҙаҡ бала саҡ. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1981. – 296 бит.

© Гәрәева Г.Н., Сатвалова И.Я., 2023

**УДК 821.512.141.09**

*Гәрәева Г.Н., филол. ф. д-ры, проф.*
*Сәйетгәрәева И.И., студент*
*ӨФҺТУ, Өфө ҡ.*

# МӘКТӘПТӘ НАЗАР НӘЖМИ ПОЭЗИЯҺЫНДА БӨЙӨК ВАТАН ҺУҒЫШЫ ТЕМАҺЫН ӨЙРӘНЕҮГӘ ҠАРАТА

**Аннотация.** В данной статье представлена краткая биография Назара Наджми, его вклад в башкиркую литературу, а также анализ стихотворений из школьной программы, посвященных Великой Отечественной войне.

**Annotation.** The article presents a brief biography of Nazar Najmi, his contribution to Bashkir literature, as well as an analysis of poems dedicated to the Great Patriotic War.

**Ключевые слова:** Назар Наджми, тема Великой Отечественной войны, деталь, поэзия.

**Key words:** Nazar Najmi, the theme of the Great Patriotic War, detail, poetry.

Күренекле һүҙ оҫтаһы, Башҡортостандың халыҡ шағиры, Рәсәйҙең Максим Горький һәм Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премиялары, Татарстан Республикаһының Ғаяз Исхаҡи исемендәге премияһы лауреаты Назар Нәжми – XX быуаттың икенсе яртыһында башҡорт шиғриәтен үҫтереүгә баһалап бөткөһөҙ өлөш индергән шәхестәрҙең береһе. Әҙәбиәтебеҙҙе новаторлыҡ һыҙаттары менән байытҡан һәм тотош мәктәбен ойошторған. Академик Ғайса Хөсәйенов Назар Нәжмиҙе, ниндәй өлкәлә - шиғриәттә, драматургияла йәки публицистикала эшләүенә ҡарамаҫтан, таланттың һүҙен, күләмен, көсөн белгән, уның баһаһын һиҙгән иң үткер һәм үтә тапҡыр таланттарҙың береһе тип атаған.

Назар Нәжми 1918 йылдың 5 февралендә Башҡортостандың Дүртөйлө районы Миңеште ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Башта ете йыллыҡ ауыл мәктәбендә, һуңынан Өфө металлургия эшсе факультетында уҡыған. 1938 йылда К.А. Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтында тел һәм әҙәбиәт факультетына уҡырға ингән, ләкин өсөнсө курстан фронтҡа китергә мәжбүр булған. Һуғыштан һуң ғына юғары уҡыу йортон тамамлаған. Оҙаҡ йылдар республика гәзит-журналдары редакцияларында («Ҡыҙыл Башҡортостан», «Әҙәби Башҡортостан», «Һәнәк») эшләй, Башҡорт академия драма театры директоры, яуаплы сәркәтип, һуңынан Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе булып эшләгән. Шағир ҙур ижтимағи эш алып барған: БАССР-ҙың Юғары Советы депутаты, БАССР-ҙың һәм РСФСР-ҙың Яҙыусылар союзы идараһы ағзаһы, Рәсәй Федерацияһының һәм СССР-ҙың бик күп яҙыусылар съездары делегаты итеп һайланған.

Назар Нәжмиҙең исеме ваҡытлы матбуғат биттәрендә һуғышҡа тиклем үк күренә башлаған. Ул һуғыштан һуң шағир булып тулыһынса раҫлана. Уның «Тамсылар» исемле тәүге шиғырҙар китабы 1950 йылда донъя күргән.

Назар Нәжми тәү сиратта шағир булараҡ билдәле. Уның шиғырҙары ихласлыҡ, фекер тәрәнлеге, афористиклыҡ, музыкаллек менән айырылып тора. Уларҙың күбеһенең музыкаға һалыныуы һәм хәҙер халыҡ араһында иң популяр йырҙарға әүерелеүе осраҡлы түгел.

Назар Нәжмиҙең ижадында айырыуса Бөйөк Ватан һуғышы темаһы сағылыш тапҡан. Шәхестең байтаҡ ҡына шиғырҙарында һуғыш образы ҡот осҡос нәмә булараҡ йыш осрай. Һуғыш осорон, кешеләрҙең бәхетле, тыныс тормош өсөн көрәшен сағылдырған әҫәрҙәре үҙенсәлекле башҡорт халҡы тарихы йылъяҙмаһына әүерелде тип әйтергә була.

Бөйөк Ватан һуғышы осоронда Назар Нәжмиҙең “Окопта уйҙар”, “Үткән көндәр гүәллеген уйлап”, “Күҙҙәреңә бағып туя алманым”, “Иҫән ҡайтһам”, “Тышта һалҡын, землянкала еүеш”, Танкист”, “Фронтта төн” кеүек шиғырҙары донъя күрә. Был әҫәрҙәр, әлбиттә, йәшәү һәм үлем хаҡында уйланыуҙарҙы, фронт көндәлегенең айырым күренештәрен, ҡот осҡос шарттарҙа ла алдағы көнгә өмөт менән ҡарауҙы һүрәтләй.

1947-1949 йылдарҙа уның “Теләк”, “Һау бул, Веймар”, “Йөрәгемә яҡын бары ла” шиғырҙарын берләштергән “Ҡайтыу” циклы, “Котелок”, “Миндә аҡ сәс бөртөктәрен күреп...”, “Тамсылар” кеүек шиғырҙары, “Әсә поэмаһы донъя күрә.

Шағир, хеҙмәт һәм тыныслыҡ темаһына күсеүенә ҡарамаҫтан, һаман да һуғыш хәл-күренештәренә таяна, “Окоптарҙа дары еҫе һулаған...” шиғырында һәм “Әсә” поэмаһында әйтелгәнсә, донъяға асығыраҡ күҙ менән ҡарап, шиғриәттең дә офоғон киңәйтә бара. Шағир һуғышты фашист образында ҡәһәрләһә, Гете, Шиллер йөҙөндә ижадсы образын үҙенең лирик “мин”е аша һынландырҙы [1, 348].

Бөйөк Ватан һуғышына бағышланған шиғырҙары араһында киң билдәлелек алған, мәктәптә өйрәнелгән “Котелок”, “Күлдәк” кеүек әҫәрҙәрендә образ менән тема, йөкмәтке менән форма бер бөтөндө тәшкил итә. Сөнки автор, мәҫәлән, “Котелок” шиғырында тик бер деталгә генә мөрәжәғәт итһә лә, төрлө яҡлап уны асыҡлай. Поэтик деталь булып торған һалдат котелогы фронтовикты яуға оҙатып ҡалыусы ғына түгел, ә лирик геройҙы һуңынан да тыныслыҡ һағында тороусы һалдат итеп күҙ алдына баҫтырыуҙа мөһим роль уйнай.

Кәрәк булһа, шинель кейеп,
Тағырмын һине билгә.
Бәлки тағы күп ерҙәрҙән
Үтербеҙ икәү бергә.
Котелогым, котелогым,
Үтербеҙ икәү бергә.

“Күлдәк” шиғырында ла автор күлдәк детале аша һалдаттың ауыр тормошон - ямғырлы һалҡын көндәрҙә еүеш кейемдә йөрөүен һүрәтләй. Ошо

бала сағында, кибер-кипмәҫ көйө кейгән күлдәк һәм өс көн буйы ҡойоп яуған ямғыр аҫтында манма һыуға әйләнгән һалдат гимнастеркаһы әҫәрҙең бик мөһим детале булы тора. Әсәһенең әйткән һүҙҙәрен иҫенә төшөрөү лирик геройға алға барырға, ауырлыҡтарға түҙәргә ярҙам итә. Тормошта йыш осрай торған бер-береһенә оҡшаш күренештәрҙе йәнәш ҡуйып, тәрән мәғәнәле һөҙөмтәгә килеү манераһы күҙгә ташлана был шиғырҙа.

Беҙ барабыҙ, Һалдат юлы сикһеҙ.
Ямғыр нимә һуғыш мәлендә.
Яуһын әйҙә! Йөрәк кенә типһен,
Ә күлдәгем кибер тәнемдә.

Назар Нәжмиҙең фронт лирикаһы үҙәгендә һалдат образы тора. Шағир унын күңел байлығын, еңеүгә ихтыярынсағылдырырға тырыша. “Ҡайтманығыҙ тыуған ерҙәргә” шиғырында яу ҡырҙары күптән тынһа ла, яу эҙҙәрен йылдар юйһа ла, шул ҡырҙарҙа ятып ҡалған батырҙарҙы халыҡтың мәңге онотмауы, улар тураһында яҡты иҫтәлектәр һаҡлауы данлана. Әгәр яуҙа ятып ҡалған һалдаттарға һәр ҡайҙа һәйкәлдәр һалынған икән, билдәһеҙ һалдат ҡәбере өҫтөндә мәңгелек ут яна икән, халыҡтың ил батырҙарының исемен, үлемһеҙ дандарын мәңгеләтереү билдәһе ул [1, 349].

Назар Нәжми лиро-эпик жанрҙарға ҡараусы «Ҡапҡалар», «Йыр тураһында баллада», «Урал», «Шағир һәм шаһ» кеүек әҫәрҙәрендә лирикаһында яҡтыртҡан темаларҙы тағы ла киңерәк һәм тәрәнерәк сағылдыра. «Ҡапҡалар» поэмаһының төп идеяһы ике донъя, ике заман, ике ҡапҡаны үҙеңдең күңелең ҡапҡалары менән бәйләнештә ҡарауға бәйле. Поэмала автор ваҡиғалар эсендә ҡайнай, әҫәрҙең төп персонажына әйләнә, тормош шағирҙың уй-фекерҙәре аша һыҙатлана.

Төп образ – ҡапҡа образы ҡат-ҡат һүрәтләнә, яңы һыҙаттар ала бара. Шул ҡапҡа алдында автор үткәнен иҫкә төшөрә, хәҙергеһен байҡай. Ҡапҡа поэманың реаль ерлеген кире ҡаҡҡыһыҙ итә, кешелектең азатлыҡ өсөн көрәшендә оло бер этап булыуына ла баҫым яһай.

Йорт менән урам араһындағы тәүге ябай ҡапҡа һымаҡ сабыйҙың донъяны аңлауы ла әлегә тар ғына. Икенсе ҡапҡа – баҫыу ҡапҡаһы – ауылды киң донъя менән тоташтырып тора. Был ҡапҡалар бала саҡтың символдары. «Тау артында ла донъя барлығын» белгән үҫмергә «ҡала ҡапҡалары» асыла. Был геройҙың аң даирәһе үҫеүен аңлата.

Артабанғы «белем ҡапҡаһы» күңел күҙе күреүҙе талап итеүсе образ-төшөнсә. Лирик герой ир ҡорона еткәс «Бранденбург ҡапҡаһын» аса, тыныслыҡты нығытыусыларҙың береһе булараҡ сығыш яһай. Олпат ир ағаһы йәшендә ул «кеше күңеленең ҡапҡаларын ҡаға». Был поэмала шағирҙың биографияһы ғына түгел, ә тотош бер осор яҙмышы һүрәтләнә.

Яҡын дуҫы, һабаҡташы Мәлих Харистың шиғырҙарын йыйып, китап итеп сығарышҡан, уның ижады хаҡында иҫтәлектәр яҙған Н.Нәжми ҡәләмдәш дуҫына арнап 1962 йылда «Йыр тураһында баллада» әҫәрен ижад итә. Балладаға эпиграф итеп М. Харистың шиғыр юлдары алынған:

...Эй ғүмерҙең һуңғы сәғәте!
Һин миңә лә шулай күкрәп кил.
Уландарын иҫкә алғанда,
Онотмаһын мине лә Тыуған ил!

«Бағышлау» һүҙенән һуң автор башта ваҡыттың атылған йондоҙ, атта елгән егеттәй тиҙ һәм өҙлөкһөҙ үтә тороуы тураһында һөйләп килә лә ҡапыл һабантуй, ат ярышы тамашаларын тасуирлап китә. Гүйә, ваҡыт менән уҙышҡандай, бер егет атта елә. «Эй саф ваҡыт! Ярһып ҡына шулай ғүмер үтер кеүек, ундағы дәрт, ундағы көс бар ғүмергә етер кеүек».

Шундай йәмле, күңелле саҡта, һабантуй яңы ҡыҙған мәлдә һуғыш башланыу хәбәрен алыу, ат өҫтөндә елдәй елгән егеттең бәйгеләрҙән ҡапыл һуғыш уты эсенә барып ингәндәй булыуы хәл-ваҡиғаларҙы ҡырҡа киҫкенләтә. Йәм-йәшел донъя күҙ алдында «ҡапыл ҡарайҙы ла ҡалдымы ни...», егет ҡулында «ҡамсы түгел, ҡылыс ине».

Яуҙан ваҡыт урлай-урлай яҙған батыр хаҡындағы ҙур йыры өҙөлөп ҡалғас, шағир үҙе һәләк булғас, героик поэманы дауам итеү иҫән ҡалған дуҫы – ҡәләмдәше өлөшөнә төшә. Балладаның аҙағында «оса Ваҡыт, оса Йыр, оса Ер» тигән һүҙҙәр, донъялағы мәңгелек хәрәкәтте, батырлыҡтың, йырҙың, шиғырҙың үлемһеҙлеген символлаштыра. Ошо рәүештә фәлсәфәүи мәғәнәле Ваҡыт төшөнсәһе, йыр булып йәшәр Батырлыҡ, шағир һәм һалдат образдары ысынбарлыҡтағы һәм шартлы, хатта символик хәл-ваҡиғалар аша поэтик һынланыш таба.

«Йыр тураһында баллада» әҫәре жанры яғынан «баллада» тип исемләнһә лә, уның сиктәре байтаҡҡа киңерәк. Әҫәрҙә ысынбарлыҡ күренештәре, тормошсан шиғри һынланыуҙар ҡапыл шартлы ваҡиғалар, символика менән аралашып китеү арҡаһында баллада героик поэма жанрына яҡынлай.

Шулай итеп, Назар Нәжми ижадының ҙур өлөшөн Бөйөк Ватан һуғышы темаһы алып тора. Әҫәрҙәрендә һуғыштың бөтә ауырлығын үҙ елкәләрендә күтәреүсе, төпкә егелеп тартыусы, окоптарҙан ҡалҡынып, үлемесле һөжүмдәргә ташланыусы ябай һалдаттың күңел донъяһы һүрәтләнә, халыҡтың еңеүгә индерелгән өлөштәре асыла.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Башҡорт әҙәбиәте тарихы: 6 том. – Өфө: Китап, 1996 – 710 бит.
2. Назар, Н.Н. Әҫәрҙәр 3 томда, 1 том, шиғырҙар / Н.Н. Назар. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте. 1977. – 304 бит.
3. Хәбиров Р. // Башҡортостан уҡытыусыһы. – 2013. – №1. – 66-68 бит.


© Гәрәева Г.Н, Сәйетгәрәева И.И., 2023

**УДК 821.512.141.09**

*Гәрәева Г.Н., филол. ф. д-ры, проф.*
*Сәйетҡолова Л.Р., студент*
*ӨФҺТУ, Өфө к.*

# МИЛЛИ ТАРИХИ ПРОЗАБЫҘ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

**Аннотация.** В данной статье анализируются особенности освещения исторической панорамы, поворотных, судьбоносных моментов в жизни башкирского народа в крупных эпических полотнах последних десятилетий.

**Annotation.** This article analyzes the features of the illumination of the historical panorama, turning, fateful moments in the life of the Bashkir people in large epic canvases of recent decades.

**Ключевые слова:** башкирская литература, проза, роман, образ, панорамное изображение, историческая личность, документальная основа.

**Key words:** bashkir literature, prose, novel, image, panoramic image, historical personality, documentary basis.

Хәҙерге башҡорт прозаһында рухи тамырҙарға, төрлө осорҙар араһындағы бәйләнештәргә иғтибар көсәйҙе. Яҙыусылар әхлаҡ нормаларының, рухи культураның, халыҡ характерының формалашыуын, бөгөнгө ҡараш һәм тәртиптәрҙең нигеҙенә ятҡан дөйөм кешелек ҡағиҙәләренең ҡайҙан килеүен, тарихтың боролошло мәлдәренән, быуаттарҙың тәрән төпкөлдәренән эҙләнеләр.

Р.Солтангәрәев “Осто бөркөт” (1991), М.Ямалетдинов “Ҡотолоу юлҡайҙарын тапманым” (1991) повестарында, Я.Хамматов “Комбриг Мортазин” (1992) романында атаҡлы башҡорт полководецы Муса Мортазин яҙмышы аша революцион көрәште күрһәтте, тарихи-биографик проза жанрын үҫтерҙе. Р.Байымов Сыбар шоңҡар (1997), Ғ.Хисамов “Тамып та ғына ҡала ҡандары” (1991), “Аҡтамыр“ романдарында 1917-1919 йылдарҙа Рәсәй күләмендә революцион бәрелештәр, граждандар һуғышы барған ваҡытта башҡорт халҡының милли азатлыҡ һәм автономия өсөн көрәшен, ҡатмарлы һәм фажиғәле сәйәси-ижтимағи хәл-ваҡиғаларҙы сағылдырҙы. Бер яҡтан, Зәки Вәлидиҙең хат һәм фармандарын, архивтарҙа һаҡланған тарихи документтарын әҫәргә индереү, икенсе яҡтан, художестволы дөйөмләштерелгән образдар менән эш итеү, конкрет тарихи материалдарҙы автор фантазияһы аша үткәрелгән күренештәр менән аралаштырыу романдарҙың үҙенсәлекле стилен хасил итә. Ҡатмарлы тарих панорамаһы йәнле һәм тулы булып, бөтә реаллегендә күҙ алдына баҫа.

М.Иҙелбаев “Декабрь йондоҙҙары” (1991) повесында ун туғыҙынсы быуаттың һикһәненсе йылдарында Ҡазан университетында студенттар ҡуҙғалышында актив ҡатнашҡан Мирсаяф Бейешов образын тарихи документтарға таянып һынландырҙы.

Р. Өмөтбаев “Ысыҡтан эйелә ҡылған” (1993), “Һынылыш“ . “Ирәндектең күкһел томаны“(2013) тигән өс романдан торған трилогияһында илдә граждандар һуғышы тамамланғандан алып Бөйөк Ватан һуғышы осорон эсенә алған ваҡыт арауығында башҡорт ауылдарындағы ауырлыҡ менән барлыҡҡа килгән үҙгәреш-яңырыуҙар, Совет власын урынлаштырыу, яңыса йәшәү принциптарын нығытыу өсөн көрәш картиналары, утыҙынсы йылдарҙа егәрле хеҙмәте менән хәлләнгән крәҫтиәндәрҙе һөргөнгә һөрөү кеүек фажиғәле күренештәр, һуғыш осорондағы тыл тормошо, халыҡтың героик хеҙмәте һәм михнәтле көнитмеше һүрәтләнде.

Хәҙерге башҡорт прозаһында халыҡ тормошоноң социаль һәм рухи тамырҙарын тәрәнерәк байҡарға ынтылыш көсәйеүе күҙәтелде, яҙыусылар тыйылып яткан архив материалдарына, меңәр йылға һуҙылған тарихтың боролошло, хәтәр мәлдәренә, башҡорттарҙың берҙәм халыҡ булып ойоша барыуына, уны бөтә кешелек донъяһы алдында танытҡан ваҡиғаларға, үткәндәге тормошоноң һәм көрәшенең бығаса шәжәрәләрҙә һәм риүәйәттәрҙә генә тороп ҡалған сәхифәләренә, мөрәжәғәт иттеләр.

Я.Хамматовтың "Төньяҡ амурҙары" (1982-1985) романында башҡорт халҡының батыр улдарының 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыуы сағылыш тапты. Ырымбур губернаторы Волконский, полководецтар Кутузов, Багратион, башҡорт ғәскәрҙәре командиры Ҡаһым түрә, яугир-сәсән Буранбай кеүек тарихи шәхестәр, юғары даирәләге хәл-ваҡиғалар менән бер рәттән, әҫәрҙә Илмырҙа, Йәнтүрә һымаҡ ябай халыҡ вәкилдәре, ярлы ҡатлам тормошо ла сағылыш ала. Бының менән автор Наполеон ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғыштың бөтә халыҡ көрәше булыуын раҫлай. Иң яуаплы мәлдәрҙә халыҡта патриотизм, батырлыҡ, ғәҙеллек, бер-береһенә ярҙамсыллыҡ кеүек сифаттарҙың өҫкә ҡалҡып сығыуы күрһәтелә.

“Төньяҡ амурҙары”ның сюжеты, нигеҙҙә, башҡорт полководецы Ҡаһым түрә тормошон тасуирлауға, французлар Рәсәйгә баҫып ингәс, уның етәкселегендә башҡорт полкы ойошторолоп, дошманға ҡаршы һуғышта ҡатнашыуы ваҡиғаларына ҡоролған. Ваҡиғалар ҡуйылығы, геройҙарҙың күплеге романға эпиклыҡ биргән.

Ғ.Ибраһимовтың халыҡтарҙың ун һигеҙенсе быуат урталарындағы, 1773–1775 йылдарҙағы Пугачев һәм Салауат етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышы алды көндәрендәге тормош-көнкүрешен, азатлыҡҡа ынтылыш рухын сағылдырған өс китаптан торған “Кинйә” (1977-1981) романына тарихи теүәллек, документаль нигеҙҙең ҡеүәтле булыуы, ваҡиғаларҙы бөтә нескәлектәре менән тәфсилләп һүәтләү һәм шуның менән күп биҙәкле киң полотно хасил итеү хас. Был роман милли тарихи прозабыҙҙы юғары баҫҡысҡа күтәреүсе күренекле әҫәр булды. Шәжәрә, риүәйәттәрҙә, тарихи йырҙарҙа һаҡланған факттарҙы, халыҡтың ғөрөф-йолаларын әҫәр туҡымаһына самалы һәм урынлы индереп ебәреү, тарихи теүәллек, документаллек һәм художестволылыҡ синтезына өлгәшеү йәһәтенән бөгөнгө әҙәбиәттә әле булһа Ғ.Ибраһимовтың “Кинйә“ романы юғары өлгө булып тора.

1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында Емельян Пугачевтың һәм Салауат Юлаевтың яҡын көрәштәше, восстаниеның баш идеологы, төрлө милләт халыҡтарының азатлыҡ байрағы аҫтына туплаусы Кийә Арыҫланов образын кәүҙәләндереүе, халыҡ хәтеренән юйыла, онотола барған оло тарихи шәхестең исемен халыҡҡа кире ҡайтарыуы менән Ғәли Ибраһимов неоватор-яҙыусы булып танылды.

Яҙыусы, бер яҡтан, бөтә илде ҡуҙғатҡан, батша тәхетен тетрәткән көрәш рухының массаларҙа нисек итеп гығый килеүенең сәбәптәрен асһа, икенсе яҡтан, халыҡ азатлығы өсөн көрәшселәрҙең формалашыу юлдарын яҡтырта. Романдың “Тапалған йәйләү” тип аталған тәүге китабында ун һигеҙенсе быуат һуҙымында Башҡортостан ерендәге ҡатмарлы, ҡаршылыҡлы, фажиғәләр менән тулы ижтимағи тормош һүрәтләнә.

Демидовтар, Твердышевтар башҡорт ерҙәрен, урмандарын талап, заводтар һала, батша наместниктары Кириллов, Саймонов, Неплюевтар халыҡты төрлөсә яфалайҙар, ҡала һәм ҡәлғәләр төҙөүгә ҡыуалар, батша власының ғәҙелһеҙ эштәренә ҡаршы ризаһыҙлыҡ күренештәрен карателдәр рәхимһеҙ рәүештә баҫтыра тора. Шул уҡ ваҡытта батша властары һәм промышленниктар тарфынан бында көсләп килтереп ултыртылған рус крәҫтиәндәре һәм заводҡа беркетелгән кешеләр араһында ла ризаһыҙлыҡ көсәйә бара.

Үҙ дәүеренең алдынғы ҡарашлы кешеһе Арыҫлан батыр ғаиләһендә тыуған Кинйә кесе йәшенән ана шул ҡатмарлы социаль-сәйәси хәлдәрҙе күреп үҫә. Ғаиләлә ул матур тәрбиә ала, алдынғы мәҙрәсәләрҙә уҡый. Батырша, Ҡараһаҡал, Алдар батыр һ.б. яуҙары баҫтырылғандан һуңғы язалауҙар, ҡоллоҡҡа ҡыуып алып китеүҙәр, халыҡтың михнәтле, зарлы тормошо хаҡында ишетеү, үҙ күҙҙәре менән күреү һ.б. геройҙың аңын, тормошҡа ҡараштарын үҫтерә. Ғ. Ибраһимов Кинйәне халыҡ массаларының иң түбән төпкөлдәренән алып, юғары өлкәләренә тиклем бөтә социаль ҡатламдары менән аралаштыра, власть вәкилдәре яуызлыҡтарының шаһиты, Ҡонҡас сәсәндең, Ғәбдесәләм абыҙҙың хикмәтле һүҙҙәрен күңеленә һеңдереүсе итеп күрһәтә. Кинйә сит халыҡтар менән дә аралашып, уларҙың томош-көнкүреше, уй-теләктәре менән таныша, шул рәүешле автор ижтимағи тормоштоң үҙе геройҙы формалаштырыуын күрһәтә. Герой ҡатнашҡан, шаһиты булған, күргән йәки ишеткән күп төрлө ваҡиғаларҙы, күренештәрҙе һүрәтләү Ғ. Ибраһимов романына эпик киңлек бирә. Китапта бөтә Башҡортостан образы ҡалҡа, хатта унда, фон булараҡ, Петербург та, батша һарайында барған хәлдәр ҙә сағылыш таба.

Беренсе китапта Кинйә алғы планда торһа ла, сюжет үҫешендәге хәл иткес ролде Арыҫлан батыр уйнай. “Ил ағаһы” тип исемләнгән икенсе китапта инде Нуғай даруғаһы ҡороноң атаманы, хөрмәтле абыҙ дәрәжәһенә күтәрелгән Кинйә Арыҫланов актив көрәшсе шәхес булып күҙ алдына баҫа. 1757 йылда Пруссия менән һуғышта ҡатнашыу, Уралға ҡайтҡас, Себер линияһын һаҡлауға ебәрелеү, ил эсендәге ижтимағи мәсьәләләрҙе хәл итеү һ.б ваҡиғаларҙа ул инде

ил ағаһы булып кәүҙәләнә. Тарихи ваҡиғаларҙы, тормош-көнкүреш картиналарын, халыҡта социаль тигеҙһелекккә һәм завод хужаларының башҡорт ерен талауына ҡаршы көрәш рухының үҫә барыуын сағылдырыусы күренештәрҙе бер композицион төйөнгә туплауҙа Кинйә Арыҫлановтың роле ҙур.

Ғөмүмән, икенсе китапта ваҡиғалар динамикалы үҫтерелгән, факттарҙы һәм деталдәрҙе художестволы һайлап алыу һәм типиклаштырыу көсәйгән. Бөтә компоненттар төп идеяны – халыҡтың тарихта төп көс булыуын, унда үҙ азатлығы өсөн көрәш рухының үҫә барыуын раҫлауға йүнәлтелгән. Яҙыусы үҙ геройының киләсәктә ошо көрәштең башында торасағын уҡыусы күңелендә нығыта бара. ”Атайсал утта” тигән өсөнсө китабында Ғ.Ибраһимов төрлө милләт халыҡтарын азатлыҡ идеяһы менән рухландырған, берҙәм көрәшкә туплаған, 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышының иң күренекле юлбашсылары рәтенә күтәрелгән, восстаниеның баш идеологы дәрәжәһен биләгән оло шәхес образын һынландырған.

Ғ.Хөсәйеновтың “Алдар батыр ҡиссаһы”нда, Н.Мусиндың “Алдар батыр“ романында үҙәккә Алдар батыр ҡуйылып, уның башҡорттар өсөн дә уртаҡ Ватанға әйләнлерелгән Рәсәйҙе яҡлап, яу сабыуҙары хикәйәләнә. Алдар батырҙың ҡаҙаҡ ханы Абдулхайыр менән тәүҙәге осраҡлы мөнәсәбәттәренең артабан ижтимағи-сәйәси төҫ алыуы күрһәтелә. Алдар батыр Өфө воеводаһы Бутурлин ҡушыуы буйынса ҡаҙаҡ һәм ҡарағалпаҡ халыҡтарын Рәсәй ҡулы аҫтына алыр өсөн Тевкилев менән берлектә актив эшмәкәрлек алып бара. “Алдар батыр ҡиссаһы”нда төп иғтибар ошо илселек миссияһына туплана, һуңынан Алдарҙың азатлыҡ көрәшен етәкләүе сағылдырыла.

Ғ.Хөсәйеновтың ун һигеҙенсе быуаттағы Батырша восстаниеһы менән бәйле ваҡиғалар киң планда сағылыш тапҡан “Ҡанлы илле биш” (1992) романында тарихи панорамалыҡ документаль дәлиллек, халыҡ тормошон һәм азатлыҡ хәрәкәтен тарихи-социаль, милли-этник, мораль-этик, психологик йәһәттән художестволы анализлау менән ныҡ беркетелгән. Ғ.Хөсәйенов художестволы образ тыуҙырыуҙы ғилми-публицистик очерк менән аралаштыра бара.

Б.Рафиҡовтың тарихи факттарға нигеҙләнгән “Ҡараһаҡал” (1988) романында башҡорт халҡының рус дәүләте составына ингәндән һуң үҙ ирке өсөн алып барған көрәштәрҙең береһе – 1735-1740 йылдарҙағы Ҡараһаҡал – Миңлеғол Юлаев етәкселегендәге милли азатлыҡ хәрәкәте сағылдырыла.

Б.Рафиҡов ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы тарихи көрәш барышында халыҡ етәксеһе булып күтәрелгән Ҡараһаҡалды үҙәккә ҡуя, шул уҡ ваҡытта ун һигеҙенсе быуат баштарындағы тормош-көнкүреш, Көньяҡ Уралды колонизациялау көсәйә барған шарттарҙағы халыҡтың аяныслы яҙмышын үҙгәртеү өсөн ҡабынып киткән милли-азатлыҡ хәрәкәте киң планда күрһәтелә. Миңлеғолдоң Ҡаҙағстан ерендә үҙ иле өсөн ҡорал хәстәрләүе, Әбделхайыр хан менән низағтары, Алдар һәм Тевкилев походы, Башҡортостанда Кирилловтың Ҡазағстан һәм Урта Азияға үтеп инеүҙе еңеләйтеү өсөн башҡорттарҙы

файҙаланыуы кеүек күренештәр әҫәрҙә тарихи хәрәкәт масштабын тағы ла киңәйтә.

Батша наместниктарынан, рус түрәләрәненән яфа күргән халыҡтың баш күтәреү күренештәре киң һәм тәфсилле яҡтыртыла., халыҡ төп хәрәкәт итеүсе һәм әйҙәүсе көс итеп бирелә. Яҙыусы әлегә ойошоп бөтмәгән һәм түрә батырҙары араһында ла берҙәмлек етмәгән халыҡтың күтәрелеше батша ғәскәрҙәре тарафынан баҫтырылыуын, әммә халыҡта көрәш рухының һүнмәүен күрһәтә.

## ӘҘӘБИӘТ

1. XX-XXI быуат башҡорт әҙәбиәте: юғары уҡыу йорттары өсөн дәреслек / Г.Н. Гәрәева [һ.б.]; Башҡорт дәүләт университеты. – Өфө: БашДУ РБҮ, 2017. – 648 бит.

© Гәрәева Г.Н, Сайетҡолова Л.Р., 2023

**УДК 811.512.141**

*Ғәбитова З.М., филол. ф. канд., доц.*
*ӨФҺТУ СФ, Стәрлетамаҡ ҡ.*

# БАШҠОРТ ТЕЛЕН ӨЙРӘНЕҮ БАРЫШЫНДА ЛЕКСИК КҮНЕКМӘЛӘР ФОРМАЛАШТЫРЫУ

**Аннотация.** В статье рассматриваются особенности формирования лексических единиц на уроках башкирского языка.

**Annotation.** The article discusses the peculiarities of the formation of lexical units in the lessons of the Bashkir language.

**Ключевые слова:** лексика, слово, словосочетания, навыки, умения, речь, приемы, текст, способы, формирование, развитие.

**Key words:** vocabulary, words, phrases, skills, abilities, speech, techniques, text, methods, formation, development.

Башҡорт теле дәрестәрендә уҡыусыларҙың телмәр мәҙәниәтен үҫтереү һәм тәрбиәләү башҡорт теле уҡытыусылары алдында торған төп бурыстарҙың береһе булып ҡала.

Ә был бурыстарҙы тормошҡа ашырыу уҡыусыларҙың бәйләнешле телмәрен үҫтереү эшен дөрөҫ ойоштороуҙан тора. Уҡыусының бәйләнешле телмәрен үҫтереү уҡытыусының оҙайлы һәм системалы көндәлек эше булырға тейеш. Ындай эшмәкәрлекте уҡыусыларҙың тел берәмектәрен лексик-семантик, фукциональ яҡтан бөтә нескәлектәрендә ҡабул итә белеүҙәренән башларға кәрәк. Бының өсөн һәр дәрестең грамматик темаһынан тыш, лексик темаһы ла булырға тейеш. Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәп уҡыусылары өсөн тәҡдим ителгән “Башҡорт теле” уҡыу-уҡытыу комплекттарында грамматик тема менән бергә лексик тема ла бирелә [3, 3].

Лексик күнекмәләрҙе үҫтереү белем биреүҙең шәхси, метапредмет һәм предмет һөҙөмтәләренә өлгәшеү талаптарына яуап бирә. Уҡыусыларҙың лексик күнекмәләрен формалаштырыу процесы оҙайлы һәм күп көс талап итә. Әммә шул уҡ ваҡытта уны төҙөү мөһим, бөтә уҡыу процесы уҡыусының шәхесенә, уның үҫешенә, үҙаллылығына йүнәлтелеүе мөһим. Ҡайһы бер уҡыусылар өсөн тиҙерәк алға китеү өсөн шарттар булдырырға, икенселәренә күнекмәләр өсөн мөмкинлек биреү.

Башҡорт теле дәрестәрендә заманса коммуникатив уҡытыу ысулына ярашлы, яңы лексик берәмектәр индерелергә тейеш, унда мөмкин булған контекстарҙа, реаль аралашыу ситуацияларына яҡын булыуы һәм был йәш төркөмөндәге уҡыусыларҙың мәнфәғәттәренә тап килеүе кәрәк.

Башҡорт телен өйрәнеү системаһында лексика иң мөһим компоненттарҙың береһе булып һанала. Унан башҡа телмәр эшмәкәрлеген (тыңлау, һөйләү, уҡыу, яҙыу) формалаштырыу мөмкин түгел. Был күренеш, үҙ сиратында, яңы лексик берәмектәрҙе һәр дәрестә өйрәнергә һәм уҡытыусы был өлкәгә айырым иғтибар бүлергә бурыслы булыуын аңлата. Уҡыусыларҙың программа талаптарына яраҡлы лексик минимумды үҙләштерергә, хәтерендә ҡалдырырға һәм һәр ситуацияға ярашлы ул һүҙҙәрҙе еңел генә үҙ телмәрендә ҡуллана алыуына өлгәшеү мөһим.

Лексик күнекмәләр – улар ҡатмарлы эш төрҙәренең береһе, ул, үҙ сиратында, ябай эш төрҙәрен берләштергән тулы комплекстан тора. Уларҙы башҡарып сығыу махсус күнегеүҙәр ярҙамында тормошҡа ашырыла.

Һәр күнегеү лексик берәмектәрҙе тейешле кимәлдә үҙләштереүгә йүнәлдерелгән һәм системала ҡаралған булырға тейеш:

1) реаль һүҙлек запасын үҙләштереүгә йүнәлдерелгән күнегеүҙәр, мөмкин булған һүҙлек запасын киңәйтеү һәм тел һиҙемләүен үҫтереү;

2) рецептив лексик күнегеүҙәр (тыңлау, уҡыу) һәм репродуктив (һөйләү, яҙыу);

3) төрлө типтағы лексик берәмектәрҙе үҙләштереүгә (һүҙҙәр, нығынған һүҙбәйләнештәр, үтә йыш ҡулланылған әйтемдәр) өйрәнеү өсөн ауырлыҡтар тыуҙырған күнегеүҙәр булыуын иҫәпкә алыу.

Етерлек кимәлдә һүҙлек запасы булмауы уҡыусыларҙа ышанмаусанлыҡ һәм башҡорт телендә һөйләшергә теләмәү тойғоһон уята. Шулай итеп, дәрестә төп бурыстарҙың береһе булып уҡыусыларҙың һүҙлек запасын киңәйтеү тора. Башҡорт теле дәрестәрендә лексик һәм грамматик күнекмәләр айырылғыһыҙ. Һүҙгә эйә булыу һөйләшеүҙең мөһим тәүшарты булып тора, әммә телмәр эшмәкәрлегенең репродуктив төрҙәрендә һүҙҙең мәғәнәһен генә белеү етерлек түгел, бында һүҙҙәр бәйләнештәрен белеү һәм улар нигеҙендә һүҙбәйләнеш төҙөү ҙур роль уйнай.

Уҡытыусы яңы һүҙҙең ҡабатланыуын максималь күләмдә тәьмин итергә, уҡыусыларҙың телмәрҙә күп тапҡыр тыңлау һәм ҡабатлау мөмкинлеген булдырырға тейеш. Эш тәжрибәһе шуны раҫлай: көсһөҙ һәм хатта урта уҡыусы бер дәрес дауамында бер нисә тапҡыр яңы лексик берәмек тураһында

һөйләмәһә, уҡытыусы һәм иптәштәрен тыңламаһа, дәрес тамамланғас та унының хәтеренән «китмәç» тигән ышаныс юҡ. Бындай ҡараш уҡытыусынан лексиканы беренсел эшкәртеү һәм уның менән эште ойоштороу өсөн тәғәйенләнгән күнегеүҙәрҙе һайлауға сиктән тыш иғтибар талап итә. Шуға күрә уҡыусыларҙы яңы һүҙҙәр менән таныштырыу (презентация һәм семантизация) һәм уларҙы беренсел нығытыу бик көсөргәнешле эш булып тора [1, 87].

Яңы лексиканы аңлатыуға уҡытыусыны әҙерләү ҡарашынан сығып түбәндәге этаптар билдәләнә:

– яңы лексиканы анализлау;

– яңы һүҙҙәрҙең күләмен һәм улар менән танышыуҙы ойоштороу формаһын билдәләү;

– семантизация ысулдарын билдәләү;

– һәр айырым һүҙҙең аңлатмаһын төҙөү һәм иллюстратив материалды һайлау;

– беренсел күнекмә һәм уларҙың эҙмә-эҙлелеге өсөн күнегеүҙәрҙең типтарын һәм төрҙәрен билдәләү.

Башҡорт теле дәрестәрендә яңы һүҙҙәр менән танышыу уҡыусыларға ла, уларҙы уҡытыуҙы ойоштороусыларға ла билдәле ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Килеп тыуған ауырлыҡтарға ҡарамаçтан һүҙҙе үҙләштереүҙең төп маҡсаттарын билдәләү талап ителә:

– мобиль һүҙлек запасын булдырыу;

– онотоуға юл ҡуймау;

– һөйләү телмәрендә ҡулланыу.

Яңы һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәрҙе өйрәнеү өсөн уҡыусылар хәтеренең бөтә төрҙәре лә ҡатнашыуы мотлаҡ; күрмә (ул уҡыу һәм һүҙҙәрҙе яҙыу барышында үçтерелә); ишетеү (башҡорт телендә һүҙҙәрҙе әйтеү барышында үçешә); хәрәкәт (һүҙҙәрҙе яҙыу һәм телмәр эшмәкәрлегенең активлашыуы менән бәйләнгән); логик (уның ярҙамында үҙләштерелгән материалды тулыһынса аңлау) [2, 49].

Константин Дмитриевич Ушинский, мәғлүмәтте хәтерҙә ҡалдырыу өсөн «мөмкин тиклем күберәк тойоу ағзалары – күҙ, ҡолаҡ, тауыш, мускул хәрәкәттәре һәм хатта, мөмкин булһа, еç һиҙеү һәм тәм тойоу хәтерҙә ҡалдырыу актында ҡатнашырға тейеш", тип яҙҙы. «Бөтә органдарҙың ошондай дуçтарса ярҙамы менән үҙләштереү актында», - тине Ушинский, – «Һеҙ иң ялҡау хәтерҙе еңерһегеҙ».

Шулай итеп, яңы һүҙ берәмектәре менән уҡыусыларҙы таныштырыу ғына етмәй, ә уҡыусыға үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе үҙ телмәрендә артабан да ҡуллана алыр өсөн уның мәғәнәһен төрлө миçалдарҙа һәм ситуацияларҙа аңлатып еткереү кәрәк буласаҡ.

Башҡорт теленең лексикаһын үҙләштереү мәсьәләһе көнүҙәк мәсьәлә, яңы һүҙҙәрҙе үҙләштереүҙең, әлбиттә, ысулдары күп, ә юғары һуңғы һөҙөмтәләргә өлгәшә алырлыҡ ысулдар әлегә табылмаған.

Һүҙҙе үҙләштереү һөйләшеүҙең тәүшарты булып тора. Репродуктив телмәр эшмәкәрлегендә һүҙҙе үҙләштереү генә етмәй, ә һүҙҙәрҙең бәйләнешен һәм улар нигеҙендә һүҙбәйләнештәр төҙөй белеү иғтибар үҙәгенә алына.

Һүҙҙәрҙе репродуктив телмәр эшмәкәрлеге төрҙәрендә ҡулланыу өсөн:

1) һүҙҙе иҫкә төшөрөү;
2) уны әйтеү;
3) уның мәғәнәһен билдәләү;
4) һөйләм һәм текста таныу.

Уҡыусылар үҙ фекерҙәрен дөрөҫ әйтеү өсөн һүҙҙәрҙе белеү кәрәклеген аңларға һәм коммуникатив мәсьәләне хәл итеү көсөргәнешлеген һиҙемләргә тейеш. Был, үҙ сиратында, телмәр ихтыяжы. Уҡытыусыға һүҙҙең уҡыусы хәтерендә ҡалдырыу өсөн төрлө эш алымдары ярҙамында өлгәшергә кәрәк, бындай осраҡта һүҙҙе ҡулланыу даирәһе артасаҡ [4, 53].

Һүҙҙәрҙе хәтерҙә ҡалдырыуҙы ғәҙәти ятлауға әйләнмәһен өсөн, уҡыусыларға түбәндәге эш төрҙәрен башҡарыу кәңәш ителә:

1. Һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлау, уны асыҡ итеп күрһәтеү. Һөйләм, ҡыҫҡа ғына текст, хатта һүрәт булыуы ла ихтимал. Яңы лексик берәмектәрҙе үҙләштергәндән һуң, уҡыусыларҙан яңы һүҙҙәр менән һөйләмдәр, бәләкәй генә текст төҙөү, картинаны һүрәтләү кеүек эш төрҙәрен башҡарыуы мөмкин.

2. Өйрәнелгән лексика буйынса кроссвордтар төҙөү. Иң уңышлы кроссвордтарҙың яуаптарын бергәләп табыу.

3. Лексик берәмектәр менән танышып һәм тәүге тапҡыр һүҙҙе нығытыуҙан һуң, "Һүҙҙәр дәресе" уйынын индерергә була. Уҡыусыларға алфавит яҙылған ҡағыҙ бите бирелә һәм улар алфавиттың һәр хәрефенә үҙләштергән һүҙҙәрҙе яҙып сығалар. Бындай эш төрҙәрен парҙарҙа, индивидуаль эшләргә лә мөмкин.

Башҡорт теле лексикаһын үҙләштереү – ул уҡыусыларҙың һүҙлек байлығын үҫтереү процесы һәм үҙ эсенә өс этапты ала:

1) яңы материал менән танышыу (һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәһен аңлатыу);
2) лексик берәмектәрҙе ҡулланыу күнекмәләре (тәүге тапҡыр нығытыу);
3) лексик берәмектәрҙе ҡулланыу (уларҙы телмәр эшмәкәрлегенә индереү).

Беренсе этап – танышыу. Ул һүҙҙең формаһы һәм уның мәғәнәһе өҫтөндә эшләү һәм ҡулланыуҙы үҙ эсенә ала. Һүҙҙең формаһы аҫтында уның әйтелеше һәм яҙылышы, шулай уҡ грамматик һәм структур үҙенсәлектәре билдәләнә. Һүҙҙе үҙләштереү өсөн иң мөһим шарттарҙың береһе-анығ өн һәм моторлы образдар тыуҙырыу. Был маҡсатта тауыш анализы менән бергә имитация киң ҡулланыла. Бынан тыш, өн-хәреф (дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре) һәм хәреф-өн (уҡыу ҡағиҙәләре) анализы ҙур әһәмиәткә эйә, уға иң ауыр һүҙҙәр дусар ителә. Һүҙ төҙөлөшөн анализлау тел фаразын һәм потенциаль һүҙлекте формалаштырыуҙың мөһим шарты булған һүҙьяһалыш механизмын үҙләштереү

өсөн кәрәк. Һүҙҙең семантизацияһы, йәғни уның мәғәнәһен асыу, ике төркөмгә берләштереү ҡабул ителгән төрлө ысулдар менән тормошҡа ашырыла: тәржемә һәм тәржемәһеҙ.

Тәржемәһеҙ ысулдарға предметтарҙы, ишараларҙы, ғәмәлдәрҙе, картиналарҙы, һүрәттәрҙе һәм башҡаларҙы күрһәтеү инә, башҡорт телендәге һүҙҙәрҙең мәғәнәһен билдәләләү аша асыу, йәғни билдәле һүҙҙәр менән һүрәтләү, синонимдар йәки антонимдар аша, һөйләмдең дөйөм төшөнсәһенә нигеҙләнгән контексуаль фараз нигеҙендә билдәләү, факттарҙы белеүгә нигеҙләнгән һүҙҙе билдәләү, шулай уҡ уның эске формаһы нигеҙендә мәғәнәне билдәләү.

Тәржемә ысулдарына һүҙҙе рус теленең тейешле эквиваленты менән тәржемә итеү, тәржемә-аңлатма, был осраҡта рус телендә эквиваленттан тыш мәғәнә күләмендә тап килеү йәки айырылыу тураһында мәғлүмәт бирелә.

Тасуирланған ысулдар өҫтөнлөктәргә һәм етешһеҙлектәргә эйә. Тәржемәһеҙ алымдар телде фаразлауҙы үҫтерә, телдә практиканы арттыра, хәтерҙә ҡалдырыу өсөн терәктәр булдыра, ассоциатив бәйләнештәрҙе көсәйтә. Шуға күрә был ысулдар күберәк ваҡыт талап итә һәм һәр ваҡыт теүәл аңлауҙы тәьмин итмәй [2, 48].

Тел материалын нығытыу өсөн төрлө типтағы күнегеүҙәр ҡулланыла. Улар һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәрҙе үҙ фекереңде сағылдырыу өсөн, әңгәмәләшеүсенең әйткән фекерҙәрен аңлау, шулай уҡ уҡыуҙа иркен ҡулланыу өсөн бирелгән һүҙҙәр реаль һүҙҙәрҙе үҙләштереү маҡсаты менән тап килергә тейеш. Күнегеүҙәр әҙерлек һәм телмәр күнегеүҙәренә бүленә.

Коммуникатив бурыстарҙан сығып, телмәрҙә теге йәки был грамматик форманы ҡулланыу күнекмәләрен формалаштырыусы күнегеүҙәр системаһы әҙерлек күнегеүҙәре тип атала.

Мәҫәлән, һүҙҙең синонимдарын, һөйләмдә һүҙҙәр тәртибен билдәләү, һорауҙарға яуап биреү, һөйләмдәрҙе ҡабатлау, түбәндәге миҫалдарға таянып, һөйләмдәрҙе тулыландырыу һ.б.

Телмәр оҫталығын үҫтереүсе, коммуникатив бурысҡа эйә күнегеүҙәр телмәр күнегеүҙәре тип атала. Уларҙа һөйләүсенең иғтибары һүҙҙәрҙең йөкмәткеһенә йүнәлтелгән була. Телмәр күнегеүҙәренең ситуатив булыуы мөмкин. Мәҫәлән, уҡыусылар алдында проблеманы хәл итеүҙе талап иткән бурыс ҡуйырға була. Шулай уҡ телмәр күнегеүҙәре уйын күнегеүҙәрен үҙ эсенә ала. Ҙур төркөмдәрҙә командалар ярышы үткәреү маҡсатҡа ярашлы. Һөҙөмтәләр тел буйынса түгел, ә реаль критерийҙар буйынса баһаланырға тейеш [4, 54].

Үрҙә әйтелгәндәрҙе иғтибарға алып, тел саралары системаһында лексика телмәр эшмәкәрлегенең мөһим компоненты булып тора. Был уның һәр башҡорт теле дәресендә мөһим урын алыуын билдәләй, һәм лексик күнекмәләрҙе формалаштырыу уҡытыусының даими күҙ уңында тотола.

Лексиканы өйрәнеү – башҡорт теленә өйрәнеүҙең айырылғыһыҙ өлөшө, унһыҙ уны өйрәнеү мөмкин түгел. Шуның менән бәйле, материалды дөрөҫ

биреү лексик берәмектәрҙе уңышлы үҙләштереүгә алып килә, ә уҡытыу алымдарының төрлөлөгө белем биреү процесын мауыҡтырғыс итергә мөмкинлек бирә.

## ӘҘӘБИӘТ

1. Бьюзен Т. Думайте эффективно. – Мн.: Попурри, 2009. – 96 с.

2. Гуреева Л.В., Козьмина Н.А. Упражнения, направленные на предъявление и активизацию лексического материала на занятиях со студентами специальности энергетический менеджмент. – Челябинск: Два комсомольца, 2013. – С. 48-50.

3. Габитова З.М. Уроки развития речи. – Уфа: Китап, 2009. –127 с.

4. Марчан Н.Б. О некоторых приемах повышения эффективности изучения лексики/ Марчан Н.Б.// Иностранный язык в школе. – 2004. – №5.

© Ғәбитова З.М., 2023

**УДК 811.512.141**

*Ғәзизова Ә.Р.,*
*башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы*
*МАДББУ "58-се Лицей", Өфө к.*

## ТЕМАТИК ТЕЛМӘР ҮҪТЕРЕҮ КАРТАЛАРЫ

**Аннотация.** В данной статье рассматривается процесс освоения тематической речи с помощью карт. Карты разрабатываются на принципах интеграции (объединение частей), дифференциации (разложение на части) и функциональности (использование слов в речевой деятельности).

**Annotation.** This article discusses the process of translating thematic speech using maps. Maps are developed on the principles of integration (combining parts), differentiation (decomposition into parts) and functionality (using words in speech activity).

**Ключевые слова:** речь, карты, методические пособия, язык.

**Key words:** speech, maps, teaching aids, language.

Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы башҡорт дәүләт теле уҡытыусыларының маҡсаты башҡортса аралашыу компетентлығын-йәки коммуникатив компетентлыҡ формалаштырыу.

Ғөмүмән, ниндәй генә тел булмаһын, уны өйрәнеү һәм өйрәтеү ҡатмарлы процесс. Йылдан-йыл, тормош менән бергә, уҡыусыларҙың дәрес материалын үҙләштереү ысулдары ла үҙгәрә. Балаларға күберәк күргәҙмә материалдар әҙерләргә, видео яҙмалар, төрлө интерактив уйындар уйнатыу кәрәк. Ҡулдарынан смартфондарын төшөрмәгән балаларға белемде системалаштырып бирергә кәрәклеге лә бик мөһим икәне аңлашыла.

Мәғлүмәтте хәтерҙәрендә тиҙ һәм оҙайлы ваҡытҡа ҡалдырһындар өсөн ысулдар эҙләгәндә, интеллект карталар, йәки менталь карталар тигән алымға тап булдым. 1960 йылдарҙан уҡ өйрәнелгән был алым әлеге көндә айырыуса бик актуаль. Сөнки әлеге заманда балаға ла, өлкән кешегә лә бик күп мәғлүмәтте иҫтә ҡалдырырға, системалаштырырға кәрәк.

Тел дәрестәрендә лексик темаларҙы бер системаға һалып, бәйләнешле телмәр тыуҙырыу, һүҙлек запасын байытыу, арттырыу һәм нығытыу маҡсаты менән тематик телмәр карталарын ҡулланыу алымы уңышлы.

Дәреслектәрҙә үткән һәр тема билдәле бер һүҙлек составы менән бәйле. Тематик телмәр карталары – ул билдәле бер темаға ҡараған телмәр берәмектәре йыйылмаһы: темаға ҡараған яңы һүҙҙәр, төрлө яһалыу юлдары менән төҙөлгән һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр, телмәр ситуациялары-диалогтар, текстар. Картала бирелгән һүҙҙәр күләме төрлө синыф уҡыусыларының йәш үҙенсәлектәренә, аң, телде белеү кимәленә ҡарап тәҡдим ителә.

Яңы һүҙҙәр бер нисә һүҙ төркөмөнә ҡарай. Әммә уларҙы уҡыусы айырым түгел, ә контекста иҫтә ҡалдырырға тейеш. Бирелгән телмәр берәмектәрен грамматик тема менән дә бәйләргә була. Текст эсендә яңы һүҙҙең ҡулланылыу формалары, урыны, кимәле күренә һәм бала аңында телмәр берәмектәре системаға һалынып бара.

**МӘКТӘБЕМ. МОЯ ШКОЛА.**

**ЯҢЫ ҺҮҘҘӘР**

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| ай-месяц | ҡыңғырау-звонок | белемле-образованный | алырға-получать, ҡала-остается | бөгөн-сегодня |
| алды-перед | ҡәләм-карандаш | иң-самый | ашығырға-торопиться | бөтә-все |
| ашхана-столовая | майҙан-площадка | иркен-просторный | баҫып торорға-стоять | зинһар-пожалуйста |
| баһа-оценка | миҫал-пример | ҡатмарлы-сложный | борсолорға-расстраиваться | иртәгә-завтра |
| белем-знание | мәктәп-школа | насар-плохой | белем алырға-получать знания | кисә-вчера |
| бина-здание | сәғәт-часы,время | тырыш-старательный | белергә-знать, үткәрергә-проводить | унда-там |
| ваҡыт-время | сәхнә-сцена | тәртипле-воспитанный | күрһәтергә-показать | һәм-и |
| дәрес-урок | таҡта-доска | төрлө-разные | ҡуйырға-ставить, поставить | һәр-каждый |
| дәреслек-учебник | тамаша залы-актовый зал | уңышлы-успешный | ойошторорға-организовать | шулай уҡ-так же |
| дәфтәр-тетрадь | тәҙрә-окно | хөрмәтле-уважаемый(ая) | осратырға-встретить | |
| ишек-дверь | урын-место | һәйбәт-хорошо, хороший | планлаштырырға-планировать | |
| ихата-двор | уҡыусы-ученик(ца) | һуңғы-последний | сығыш яһарға-выступать | |
| йыл-год | уҡытыусы-учитель | яҡты-светлый | сисергә-решать что-то | |
| көндәлек-дневник | усаҡ-костер | | тырышырға-стараться | |
| китап-книга, | хата-ошибка | | тултырырға-заполнять | |
| китапхана-библиотека | һорау-вопрос | | уҡырға-учиться, читать | |
| кәштә-полка | һуҡмаҡ-тропа | | ултырырға-сидеть | |
| күнегеү-упражнение | эш-работа | | әҙерләнергә-готовиться к чему-либо | |
| ҡабатлау-повторение | әсбап-пособие | | әҙерләргә-готовить что-то | |
| ҡат-этаж | янында-рядом | | яҙырға-писать, төҙәтергә-исправлять | |
| ҡағиҙә-правило | | | ярышырға-соревноваться | |

**ҺҮҘБӘЙЛӘНЕШТӘР:**

Белем көнө, мәктәп уҡыусылары, уҡыусы көндәлеге, яҡшы баһа, насар баһа, хөрмәтле уҡытыусы,белемле уҡыусы, доклад әҙерләргә, семинарға әҙерләнергә, сәхнәлә сығыш яһарға, уҡырға ваҡыт, һуңғы ҡыңғырау, миҫал сисергә, көндәлек тултыра, китапханала ултыра, мәктәп ишеге, мәктәп алды.

Карталар еңелдән ауырға, интеграция (өлөштәрҙе берләштереү), дифференциация (өлөштәргә тарҡатыу) һәм функционаллек (һүҙҙәрҙе телмәр эшмәкәрлегендә ҡулланыу) принциптарына таянып эшләнә. Унда бирелгән телмәр берәмектәрен дәрестең төрлө этабы, формалары менән бәйләргә

мөмкин. Мәсәлән, яңы тема өйрәнеү дәресендә иғтибар күберәк уҡыусыға таныш түгел һүҙҙәргә, һүҙбәйләнеш, һөйләм төҙөүгә бүленһә, ҡабатлау дәресендә телмәр ситуациялары һәм текст төп урынды яулай. Диалогтарҙы дәрес башында ҡабатлау өсөн дә, белемдәрҙе активлаштырыу маҡсаты менән индерергә була.

Карталар еңелдән ауырға, интеграция (өлөштәрҙе берләштереү), дифференциация (өлөштәргә тарҡатыу) һәм функционаллек (һүҙҙәрҙе телмәр эшмәкәрлегендә ҡулланыу) принциптарына таянып эшләнә. Унда бирелгән телмәр берәмектәрен дәрестең төрлө этабы, формалары менән бәйләргә мөмкин. Мәсәлән, яңы тема өйрәнеү дәресендә иғтибар күберәк уҡыусыға таныш түгел һүҙҙәргә, һүҙбәйләнеш, һөйләм төҙөүгә бүленһә, ҡабатлау дәресендә телмәр ситуациялары һәм текст төп урынды яулай. Диалогтарҙы дәрес башында ҡабатлау өсөн дә, белемдәрҙе активлаштырыу маҡсаты менән индерергә була.



**ҺӨЙЛӘМДӘР**

Мәктәп-белем усағы.
Минең ҡустым ҙур һәм матур мәктәптә белем ала.
Беҙҙең мәктәп бинаһы дүрт ҡатлы.
Башҡорт теле кабинеты яҡты һәм ҙур.
Бөгөн ағайым һуңғы ҡыңғырауға китте.
Дуҫым менән бергә беҙ класта иң тәртипле уҡыусылар.
Класташым мине ашхана янында осратты.
Яҡшы уҡырға теләгән уҡыусы китапхананы ярата.
Насар баһа алһам, әсәйем борсола.
Апайым университетта һәйбәт уҡый, шуға иртәгә семинарҙа сығыш яһай.

**ТЕЛМӘР СИТУАЦИЯЛАРЫ**

| | |
|---|---|
| - Сәләм!<br>- Сәләм!<br>- Азат, ҡайҙа ашығаһың?<br>- Дәрескә. Доклад менән сығыш яһарға кәрәк.<br>- Әҙерләндеңме?<br>- Эйе, презентацияны ла әҙерләнем.<br>- Ярай, уңышлы сығыш һиңә.<br>- Рәхмәт Ринат. Осрашҡанға тиклем!<br>- Хуш! | - Һаумыһығыҙ Зөлфиә Зөфәр ҡыҙы.<br>- Һаумы Айнур. Ниндәй һорау менән килдең?<br>- Кисә эшләгән эшемдең хаталарын төҙәтергә килдем. Ярҙам итегеҙ әле.<br>- Әйҙә, төҙәтәйек. Ултыр.<br>- Рәхмәт Зөлфиә Зөфәр ҡыҙы.<br>- Ярай, ҡағиҙәне ҡабатла. Тырышып уҡы.<br>- Һау булығыҙ.<br>- Һау бул. |

**ТЕКСТ**

Мин Дамир, бишенсе класс уҡыусыһы. Өфө ҡалаһында, 15-се мәктәптә белем алам. Беҙҙең мәктәп ҙур, дүрт ҡатлы. Бөтә кабинеттар ҙа яҡты, иркен. Шулай уҡ мәктәп бинаһында спорт залы, тамаша залы, ашхана һәм китапхана бар. Минең иң яратҡан урыным -китапхана һәм спорт залы.
Мәктәп ихатаһында ҙур спорт майҙаны бар. Унда беҙ төрлө спорт уйындарын уйнайбыҙ, ярыштар ойошторабабыҙ.
Беҙҙең мәктәптә юғары квалификациялы ихтирамлы уҡытыусылар эшләй. Минең яратҡан дәресем-математика. Миңә ҡатмарлы миҫалдар сисергә оҡшай.Уҡытыусылар беҙгә ныҡлы белем бирә. Беҙгә тырышып белем алырға ғына ҡала.

**МӘҠӘЛДӘР**

Белмәү ғәйеп түгел, белергә тырышмау – ғәйеп.
Белем—энә менән ҡойо ҡаҙыу.
Белмәгәндең беләге тыныс, белгәндең йөрәге тыныс.
Уҡыған ил уҙыр, уҡымаған ил туҙыр.
Уҡыу - белем шишмәһе.
Аҡыл һуң төшә, һуң төшһә лә, мул төшә.
Аҡылдың ҡәҙере әҙәп менән, байлыҡтың ҡәҙере йомартлыҡ менән.
Аҡыллы кеше алдамаҫ та, алдатмаҫ та

Һәр телмәр үҫтереү картаһында телмәр ситуациялары, текстар, мәҡәлдәр билдәле бер тәрбиәүи мәғәнә менән бирелгән. Дәрес барышында уҡытыусы был диалогтар менән эшләһә, йәки уҡыусыларҙан оҡшаш ситуациялар төҙөтһә, тәрбиәүи маҡсатҡа ирешәсәк.

Һүҙлек бүлеге менән грамматик күнегеүҙәр:

1. Микротемаларға айырыу;
2. Тамырҙаш һүҙҙәр табыу;
3. Синоним, антонимдар табыу;
4. Сингармонизм законына ярашлы йыйыу;
5. Ижектәргә бүлеү;
6. Баҫым ҡуйып сығыу;
7. Сифат-исем, рәүеш-ҡылым һ.б. Һүҙбәйләнештәр төҙөү;
8. Һәр һүҙгә ассоциациялар табыу;
9. Тәржемә итеү;
10. Ҡуплек ялғауҙарын ҡушыу;

11. Килеш менән үҙгәртеү;
12. Эйәлек ялғауҙарын ҡушыу;
13. Һүҙбәйләнеш төҙөү;
14. Зат, заман менән үҙгәртеү һ.б.

Телмәр карталарын төҙөү, һәм улар буйынса дәрестән дәрескә эшләү шулай уҡ балаларҙың когнитив һәләттәрен үҫтереүгә булышлыҡ итә: бала һүрәттәргә ҡарап һүҙҙәр таба, һүҙҙәрҙе күрә, ишетә, әйтә, ҡабатлай һәм иҫендә ҡалдыра.

Ҙур күләмле мәғлүмәтте иҫтә ҡалдырыу өҫтөндә күп ғалимдар баш ватҡан. Ошондай һөҙөмтәле тикшеренеүҙәр алып барған ғалимдарың береһе-британия психологы Тони Бьюзен. Ул үҙ үҙенде камиллаштырыу-хәтерҙе, фекерләүҙе үҫтереү өлкәһендә бик күп тикшеренеүсе белгес. Студент сағынан белем алыу процесында бирелгән мәғлүмәттәрҙе хәтерҙә ҡалдырыу ысулдарын эҙләй. Баш мейеһенең төҙөлөшөн, үҙенсәлектәрен, нейрофизиологияны, нейролингвистиканы өйрәнгәндән һуң, ул үҙенең фекерләү ҡеүәһен үҙгәртергә кәрәк икәнлеген аңлай. Мейеләге нейрондарҙың төҙөлөшөн күреп иҫе китә. Баҡтиһәң, улар тармаҡланған ағас формаһында икән. Шул формаға нигеҙләнеп ул үҙенең фекерләү карталарын төҙөй ҙә инде. Был карталарҙың нигеҙе тематик телмәр үҫтереү карталарының маҡсаты менән тап килә.

Аҡыл карталарының тәбиғилек принцибына таянып төҙөлөүе күләмле мәғлүмәтте иҫтә ҡалдырыуға булышлыҡ итә. Сөнки кеше организмының барлыҡ функциялары, шул иҫәптән фекерләү процесы ла тәбиғи йүнәлештә булырға тейеш.

Карталар төҙөлөшө буйынса бик ябай. Аҡ ҡағыҙҙың уртаһына билдәле бер теманы яҙабыҙ ҙа, унан төрлө яҡҡа тармаҡландырып был темаға ҡараған төп йүнәлештәрҙе яҙабыҙ. Һәр йүнәлеш төрлө төҫлө булырға тейеш. Ни тиклем төҫтәр күберәк, шул тиклем мәғлүмәт күберәк иҫтә ҡала. Артабан был төп йүнәлештәрҙән тағы ла тамырҙар ебәреп һүҙҙәр яҙырға кәрәк. Һәр тамыр йәки ботаҡ тик бер һүҙле һәм төрлө төҫлө була. Үҙәк һүҙ төп теманы белдергәс ул ҡалын хәрефтәр менән яҙылырға тейеш.

Бирелгән темаға ҡараған иң кәрәкле һүҙҙәрҙе теркәү процесында ул төрлө ассоциациалар күҙ алдына килтерә, кәрәкле мәғлүмәтте иҫендә ҡалдыра. Карталарҙы төҙөү процесын дәрестә, уҡыусылар менән берлектә ойошторорға мөмкин. Был эш уларҙың когнитив һәләттәрен үҫтерә. Сөнки интеллект карталар төҙөүҙә, уларҙы иҫтә ҡалдырыуҙа баш мейеһенең ике ярымшары ла ҡатнаша. Һүҙҙәр урынына шулай уҡ һүрәттәр ҙә ҡулланыла.

Башланғыс кластарҙа бәләкәй күләмле карталарҙан башлап башланғыс синыфты тамамлауға уртаса күләмле картаға күсәбеҙ, балаларҙың һүҙлек кимәле лә икенсе класты тамамлауға башҡортса аралашыу өсөн 5-6 һөйләм төҙөрлөк, һорауҙарға яуап бирерлек була.

Карталар менән эш шулай уҡ предмет, метапредмет, шәхси һөҙөмтәләрҙе үҫтереүгә булышлыҡ итә. Функциональ грамоталылыҡ формалаштырыуҙы ла күҙ уңында тота.

Башҡорт теленә, башҡорт халҡына һәм уның мәҙәниәтенә хас формалар ҙа ҡулланып була. Мәҫәлән, кәрәҙ формаһын ҡулланыу. Ете күҙәнәктән торған кәрәҙ формаһының уртаһына үҙәк темаға ҡараған һүрәт йәки һүҙ беркетелә. Сәғәт телдәре йөрөшө буйлап был темаға ҡараған төп йүнәлештәрҙе яҙып, йәки һүрәттәр ҡуйып сығабыҙ.




Уҡыусылар быҙндай ижади эште үҙҙәре лә ихлас башҡаралар. Бөйөк халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың шиғырында әйтелгәнсә, беҙ балалар менән халыҡтың сәскә күңеленән бал ҡорттары һымаҡ һүҙҙәр-ынйылар йыябыҙ ҙа, матур мәғәнәле текст-хуш еҫле кәрәҙ ҡоябыҙ. Кәрәҙҙең һәр күҙәнәге темаға ярашлы һүрәттәр менән тултырылырға мөмкин.Уларҙы подтема тип әйтеп, һәр береһенә ҡараған һүҙҙәрҙе табабыҙ. Кәрәҙҙә бирелгән темаға ярашлы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе иҫтә ҡалдырғас, балалар ваҡыт үтеү менән был темаға ҡараған тексты тиҙ иҫкә төшөрәләр.

Шулай уҡ интеллект карталарҙы онлайн вариантта ла эшләргә мөмкин. Быҙның өсөн һәр уҡыусы телефондарына Orbit Mind ҡушымтаһын күсереп алып, кәрәкле темаға онлайн карталар эшләй ала. Был вариант өлкән класс уҡыусылары өсөн тап килә.




Интеллект карталар менән төрлө грамматик эштәр башҡарырға мөмкин. Мәҫәлән “Мәктәп” темаһына ҡараған карта:

1. Карталағы һүрәттәргә ҡара, белгән һүҙҙәрҙә әйт.
2. Кемдәрҙе йәки нимәләрҙе күрәһең?
3. Һәр һүҙ менән һүҙбәйләнеш төҙө.
4. Темаға ярашлы бер нисә һөйләм төҙө.
5. Уҡытыусы һәм уҡыусы менән бәйле телмәр ситуацияһын төҙө.
6. Яратҡан шөғөлөң тураһында һөйләм төҙө.
7. Һеҙҙең кабинетығыҙҙа нимәләр бар?
8. Класташың ниндәй? Һ.б. һорауҙар.




Шулай итеп, кәрәҙле, аҡыл һәм тематик телмәр үҫтереү карталары башҡорт теленән кәрәкле һүҙлек запасы булдырыуға, бәйләнешле телмәр үҫтереүгә, кәрәкле мәғлүмәтте иҫтә ҡалдырыуға булышлыҡ итә. Үҙ тәжрибәмдең уңышлы алымдары башҡорт телен уҡытыуҙа һөҙөмтәләргә ирешеү өсөн уҡытыусыға методик ярҙам булып торор тип ышанам.

## ӘҘӘБИӘТ

1. Дәүләтшина М.С. Башҡорт телен уҡытыу методикаһы: уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларында башҡорт телен (дәүләт теле буларак) өйрәнеү өсөн. 1-се киҫәк. – Өфө: Китап, 2018. – 136 бит.

2. «Тони Бьюзен. Интеллект-карты. Полное руководство по мощному инструменту мышления»: Манн, Иванов и Фербер; Москва; 2019, ISBN 978-5-00117-678-7.

3. Карта слов и выражений русского языка [Электронный ресурс]: – Режим доступа: https://kartaslov.ru/. – Дата обращения: 18.01.2023


© Ғәзизова Ә.Р., 2023

**УДК 811.512.141**

*Ғәзизуллина М.Ә.,*
*Башҡортостан Республикаһының*
*атҡаҙанған уҡытыусыһы,*
*М. Искужин ис. 136-сы башҡорт лицейы, Өфө к.*

## УҠЫУСЫЛАРҘЫҢ МЕТАПРЕДМЕТ КОМПЕТЕНТЛЫҒЫН ФОРМАЛАШТЫРЫУҘА ТӘНҠИТЛЕ ФЕКЕРЛӘҮҘЕ ҮҪТЕРЕҮ ТЕХНОЛОГИЯҺЫ

**Аннотация.** В статье рассмотрена тема развития критического мышления у детей. Переведены методы и приемы развития критического мышления для формирования мыслительной деятельности учащихся на уроках башкирского языка.

**Annotation.** The article discusses the topic of the development of critical thinking in children. The methods and techniques of developing critical thinking for the formation of students' mental activity in the lessons of the Bashkir language are translated.

**Ключевые слова:** критическое мышление, методы, приемы, методика преподавания башкирского языка.

**Key words:** critical thinking, methods, techniques, methods of teaching the Bashkir language.

Уҡытыусының төп маҡсаты – белем сифатын күтәреү өсөн төрлө юлдар һәм алымдар ҡулланып, киләсәктә илдең ысын хужалары була алырлыҡ белемле, аҡыллы, һау-сәләмәт һәм хәҙерге тиҙ үҙгәреүсән донъяға яраҡлаша алған балалар тәрбиәләү. Ә йәмғиәтебеҙ үҙгәрештәрҙе контролдә тотоуға, ижади һәм тәнҡитле фекер йөрөтөүгә, көндәлек һорауҙарҙы хәл итеүгә, үҙ фекерен аныҡ һәм ышаныслы яҡлауға, эҙмә-эҙлекле иҫбатлауға һәләтле уҡыусылар тәрбиәләүҙе талап итә.

Ошо талаптарҙан сығып ҡарағанда, уҡыусының дәреслектәге ҡағиҙәне ятлап, дөрөҫ итеп һөйләп биреү кеүек эштәр хәҙер ҡәнәғәтләндерә алмай. Алған белемде киләсәктә ҡулланырға өйрәтеү, уҡыусының үҙаллылығын һәм ижади фекерләүен , һөйләү белеү мәҙәниәтен тәрбиәләү – тел уҡытыусыһына ҡуйылған төп талаптар. Кеше фекерләү һәләте булғанда ғына ҡатмарлы хәлдәрҙән сыға ала, асыштар яһай, яңы нәмәләр уйлап таба.

Уҡыусыларҙың уйлау, күҙаллау һәләтен, тәнҡитле фекерләү белеүен үҫтереү өҫтөндә эшләү өсөн, яңы эффектив алымдар, юлдар, йүнәлештәр ҡулланыу өҫтөндә эш башланым.Түбәндәге бурыстар ҡуйҙым:

-Проблеманың бөгөнгө көндә теоретик һәм практик нигеҙҙәрен өйрәнеү;

-Уҡыусыларҙың фекерләү кимәлен баһалау өсөн диагностика үткәреү;

-Уҡыусыларҙың фекерләүен үҫтереүгә йүнәлтелгән әҙәбиәт дәресенә яраҡлы уҡытыу алымдарын, технологияларҙы, методтарҙы һайлап алыу һәм дәрестә ҡулланыу өсөн яраҡлаштырыу;

-Ижади эштәр системаһын булдырыу;

-Көтөлгән һөҙөмтәләрҙе, күрһәткестәрҙе барлау өсөн диагностик алымдар һайлау;

-Көтөлгән һөҙөмтәләрҙе прогнозлау.

Метапредмет компетенцияның билдәләмәһе – метапредмет компетенциялар – ул регулятив, коммуникатив, танып белеү йәғни төп универсаль уҡыу эшмәкәрлеген үҙләштереү, төрлө уҡыу предметтарын өйрәнеү нигеҙендә формалашҡан белемде уҡыу процесы сиктәрендә лә ҡулланыу, реаль тормош ситуацияларын хәл иткәндә лә файҙаланыу.

Башҡорт әҙәбиәтендә түбәндәге предметтар менән бәйле универсаль уҡыу эшмәкәрлеге үҙләштерелә, төрлө уҡыу предметтарын өйрәнеү нигеҙендә белем алыу формалаша. Мәҫәлән: Башҡорт әҙәбиәте дәресе дәрестәре менән бергә бәйләнеп уҙғарылырға мөмкин.

| | |
|---|---|
| **Башҡорт әҙәбиәте** | Башҡорт теле |
| | Тарих |
| | География |
| | Биология |
| | Музыка |
| | Рәсем |
| | Технология |
| | Математика |
| | Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте |
| | Рус теле һәм әҙәбиәте |
| | Инглиз теле |
| | |

Тәнҡитле фекерләүҙең маҡсаты – кәрәкле мәғлүмәтте эҙләү процесында үҙ фекереңде формалаштырыу, был мәғлүмәттең объектив, сифатлы булыуын аңлау һәләтен үҫтереү, яңы дөрөҫ мәғлүмәт барлығын асыҡлаған осраҡта үҙ ҡараштарыңды үҙгәртеү, шәхесте ҙур мәғлүмәт ағымы менән эшләргә,

йәмғиәттә булған мәсьәләләрҙе аңларға һәм хәл итергә, эште планлаштырырға, проблемаларҙы хәл иткәндә тәүәккәл булырға өйрәтеү.

Уҡыусының ирекле үҫешенә булышлыҡ итеүе – был технологияның тағы бер үҙенсәлеге. Тәнҡитле фекерләү технологияһы эҙмә-эҙлеклелек принцибына нигеҙләнгән. Яңы мәғлүмәт менән танышыр алдынан уҡыусы, нимә беләм һәм ул артабан миңә нимә өсөн кәрәк, тигән һорауҙарға яуап эҙләй. Мәғлүмәтте үҙләштергәндән һуң бала ниндәй яңылыҡ алыуы, уның нимә биреүе һәм нисек ҡулланылыуын иҫбатлай. Тәнҡитле фекерләүгә һәләтле бала үҙенең интеллектуаль эшмәкәрлегенә баһа бирә:

– хатаһын аңлап, ваҡытында төҙәтә, кәрәк икән, үҙ ҡарарынан баш тарта;

– эшенең ыңғай һәм кире яҡтарын анализлау аша объектив һығымталар яһай;

– яңылыҡҡа ынтыла;

– төрлө жанрға ҡараған текстарҙы яҙыу күнекмәһен үҫтерә;

– мәғлүмәтлелек: ҡатмарлығы төрлө кимәлдә булған мәғлүмәт менән аналитик һәм баһалау эшен үтәй.

| 1 этап | Бурыстар | Функциялар | Алымдар |
|---|---|---|---|
| **Саҡырыу** | Яңы материал үҙләштереүгә ҡыҙыҡһыныу уятыу, уҡыусыларға үҙҙәренә яңы теманы билдәләргә ярҙам итеү | Дәлилләү (яңы мәғлүмәт менән эшләүгә, теманы үҙләштереүгә теләк уятыу)<br>Мәғлүмәти (булған белемдәрҙе яңы тема үткәндә ҡулланыу)<br>Коммуникатив (бәхәсһеҙ уй-фекерҙәр менән уртаҡлашыу | Кластер<br>Идеялар кәрзине<br>Юрауҙар ағасы<br>Дөрөҫ һәм дөрөҫ булмаған раҫлауҙар |

Уҡыу һәм яҙыу аша тәнҡитле фекерләүҙе үҫтереү технологияһы уҡыусының мәғлүмәтте өс этапта үҙләштереүен күҙ уңында тота:

Тәнҡитле фекерләүҙе үҫтереүҙең технологик этаптары:

| 1 этап | 2 этап | 3 этап |
|---|---|---|
| Саҡырыу<br>Өндәү<br>Ойоштороу | Уйлау<br>Фекерләү<br>Үҙләштереү<br>(Яңы тема) | Рефлексия<br>(Йомғаҡлау) |

**Юрауҙар ағасы алымының** авторы – Америка уҡытыусыһы Дж. Белланс.

Маҡсаты: сюжетты күҙаллау, уның барышын алдан күрә белеү.

Ағастың олоно – тема, ботаҡтары – ике йүнәлеш буйынса күҙаллау “мөмкин”, “ихтимал” (“ботаҡтар” һаны сикле түгел). Ә япраҡтар уйлағандарҙың, теге йәки был күҙаллауҙарҙың дәлиле.

| 2 этап | Бурыстар | Функциялар | Алымдар |
|---|---|---|---|
| **Үҙләштереү** | Яңы белемдәрҙе булған белемдәр менән йәнәшә ҡуйып, ҡабул итеүгә ярҙамлашыу | Мәғлүмәти (тема буйынса яңы мәғлүмәттәр алыу)<br>Сиситемалаштырылған (Алған белемдәрҙе классификациялау)<br>Мотивацион (Дәлилләү)<br>(Өйрәнелгән темаға ҡыҙыҡһыныу | Инсерт<br>Туҡталыш менән уҡыу<br>Фишбоун йәки “балыҡ һөлдәһе”<br>+ - ҡыҙыҡ<br>Беләм, белергә теләйем, белдем<br>“Нимә? Ҡайҙа? Ҡасан? Ни өсөн?” таблицаһы<br>Һорауҙар<br>Тар һәм киң һорауҙар<br>Блум кубы |

Алымдарҙың төрлөһөн ҡулланырға мөмкин, мәҫәлән “Плюс, минус, ҡыҙыҡ” алымы. Маҡсаты: әҫәрҙе уҡыу барышында – ыңғай моменттарын **плюс,** кире моменттарын **минус,** ҡыҙыҡ, оҡшаған ерҙәрен **өндәү тамғаһы** менән билдәләп барыу. Бирелгән өҙөктә ыңғай һәм кире моменттарын, оҡшаған һәм оҡшамаған урындарын билдәләп өйрәнеү йөкмәткене аңлап ҡабул итергә, дөрөҫ баһа бирергә, тәнҡитле фекерләү ҡеүәһен үҫтерергә ярҙам итә.Шулай уҡ, әҙәби әҫәрҙе уҡығанда инсерт алымын ҡулланып өйрәнеү ҙә бик отошло. Инсерт алымы – тәнҡитле йәки тамғалы уҡыу.

| 3 этап | Бурыстар | Функциялар | Алымдар |
|---|---|---|---|
| **Рефлексия** | Уҡыусыларға үтелгән теманы үҙ аллы йомғаҡларға һәм алдағы дәрескә йүнәлеш бирергә | Коммуникацион (яңы алған мәғлүмәт буйынса фекерҙәр менән уртаҡлашыу)<br>Мәғлүмәти (яңы белем алыу)<br>Мотивацион (киләсәктә белемдәрҙе арттырыуға теләк уятыу)<br>Баһалау (булған һәм яңы алған мәғлүмәтте үҙ-ара бәйләргә өйрәтеү үҙ ҡарашыңды яҡлау. Эш барышын баһалау) | Эссе<br>Диаманта<br>Синквейн<br>Хокку<br>Борт журналы<br>Алты эшләпә |

Хокку алымы. Хокку – япон лирик поэзияһы жанры, өс рифмалашмаған строфаларҙан, 17 ижектән тора. Беренсе строфа – биш; икенсе строфа – ете; өсөнсө строфа – биш ижектәрҙән тора. Мәҫәлән: Талха Ғиниәтуллиндың “Әсә һәм бала” хикәйәһен өйрәнгәндән һуң, уҡыусылар менән хокку алымын ҡулланып, ошондай юлдар барыҡҡа килде:

*Әсә һәм бала – 5 ижек*
*Ярата, уйлай, көтә–7 ижек*
*Ә улы ҡайтмай – 5 ижек*

Тағы бер алым – диамант алымы.

Диамант яҙыу ҡағиҙәһе: Башта ике антоним исем уйларға кәрәк. Шунан бирелгән схема буйынса диаманта төҙөргә.

1 юл – теманы асыҡлаусы бер исем.

2 юл – предметты баһалаусы ике сифат.

3 юл – предметҡа хас булған өс ҡылым.

4 юл – һығымта, теманың төп фекерен ҡабатлаусы дүрт ассоциация (исем).

5 юл – икенсе исемгә хас булған өс ҡылым.

6 юл – икенсе исемгә хас булған ике сифат.

7 юл – тәүге юлдағы исемгә ҡапма-ҡаршы бер исем (антоним). Мәҫәлән:

*Әсә*

*Изге,түҙемле, мәрхәмәтле*

*Ярата,тәрбиәләй,көтә*

*Әсә күңеле балала,бала күңеле далала*

*Алдай,яратмай,уйламай*

*Ялҡау,намыҫһыҙ*

*Бала*

Был алымдарҙы парҙар менән йәки үҙ аллы эшләгәндә уҡыусыларға тәҡдим итергә була. Бирелгән алымдар менән эшләгәндә уҡыусының тәнҡит күҙлегенән фекерләй белеүен, ижади үҫешен күрергә була.

Шулай итеп, алынған белемдәрҙе тормошта теләһә ниндәй ситуацияла ҡуллана белеүсе, үҙ аллы дөрөҫ ҡарар ҡабул итә алырҙай, тормошта уңышҡа ирешеп, туған телде, илде һаҡлап һәм яҡлап йәшәүсе уҡыусылар тәрбиәләнә. Ошо технологияларға нигеҙләнеп дәрес үткәргәндә уҡыусылар үҙ аллы белем алырға ынтыла, тәнҡитле һәм ижади фекерләй, бәйләнешле, дөрөҫ һөйләргә, үҙенең эшмәкәрлегенә баһа бирергә өйрәнә.

## ӘҘӘБИӘТ

1. Баһауетдинова М.И., Йәғәфәрова Г.Н. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә яңы технологиялар ҡулланыу (методик ҡулланма). – Өфө, 2008.

2. Использование методов и приемов развития критического мышления для формирования мыслительной деятельности учащихся на уроках русского языка и литературы. Из опыта работы учителя русского языка и литературы Бардацкой Н.А. 2010 г.

3. Микушева Т.А. учитель русского языка, литературы и МХК МОУ «Технологический лицей». Приемы технологии «Развитие критического мышления через чтение и письмо» на уроках литературы.

4. Сәғиҙуллина Э.Р. Тәнҡитле фекерләүҙе үҫтереү технологияһы// «Башҡортостан уҡытыусыһы».– 2012. – №2.

© Ғәзизуллина М.Ә., 2023

**УДК 373**

*Ғәлиева Р.Т., магистрант*
*Насипов И.С., д-р.филол. н, проф.*
*БГПУ им. М. Акмуллы, г. Уфа*

# БАШКОРТСТАН РЕСПУБЛИКАСЫНДА ПОЛИЛИНГВАЛЬ БЕЛЕМ БИРҮ ҮЗӘКЛӘРЕ: СТӘРЛЕТАМАК ШӘҺӘРЕ ШӘҺӘР ОКРУГЫНЫҢ «23 НЧЕ САНЛЫ ПОЛИЛИНГВАЛЬ КҮППРОФИЛЬЛЕ МӘКТӘП» МУНИЦИПАЛЬ АВТОНОМ ГОМУМИ БЕЛЕМ БИРҮ УЧРЕЖДЕНИЕСЕ

**Аннотация.** В статье рассказывается об одном из центров полилингвального образования в Республике Башкортостан – МАОУ «Полилингвальная многопрофильная школа № 23» ГО г. Стерлитамак. Рассказывается об истории открытия образовательной организации, создании полилингвальной многопрофильной школы. Раскрывается особенности организации учебно-воспитательного процесса в школе, ее сегодняшнее состояние и перспективы развития.

**Annotation.** The article tells about one of the centers of multilingual education in the Republic of Bashkortostan – MAOU "Multilingual multidisciplinary School No. 23" in Sterlitamak. It tells about the history of the opening of an educational organization, the creation of a multilingual multidisciplinary school. The features of the organization of the educational process in the school, its current state and prospects of development are revealed.

**Ключевые слова:** образование, школа, полилингвизм, многопрофильность, языки, родной язык, Стерлитамак.

**Key words:** education, school, multilingualism, multidisciplinary, languages, native language, Sterlitamak.

Башкортостан Республикасының иң зур һәм заманча җиһазланган яңа мәктәпләренең берсе – Стәрлетамак шәһәре шәһәр округының «23 нче санлы полилингваль күппрофильле мәктәп» муниципаль автоном гомуми белем бирү учреждениесе. Уку йорты 2019 елның февралендә Стәрлетамак шәһәрендә «Мәгариф» милли проектын гамәлгә ашыру кысаларында «23 нче санлы мәктәп» буларак ачылды. Ул Башкортстан Республикасы оештырылуга 100 ел тулу уңаеннан шәһәргә бүләк булды. Белем бирү учреждениесе шәһәрнең зур үсеш алган яңа районында урнашкан. Бүгенге көндә мәктәптә ике меңнән артык укучы белем ала.

Мәктәпнең үзенчәлеге – иртә профильләштерү, 5 сыйныфтан ук профильгә кадәр әзерлек системасын кертү башлана. Бүгенге көндә табигыйфәнни, технологик, гуманитар профильләр гамәлгә ашырыла, Росгвардия класслары эшли.

Мәктәп төрле пилот проектларда уңышлы катнаша: «Акыллы каникуллар» («Умные каникулы») халыкара проекты, «Оч» («Взлетай») төбәк

белем бирү проекты. «Акыллы каникуллар» проекты укучыларның уку һәм каникул вакытында профильле сменаларда һәм лингвистик лагерьларда катнашуын күздә тота. Барлык каникулларда да мәктәптә «Алтын вакыт» («Golden time») мәктәпяны лагере эшли.

Мәктәп шәһәрнең башка белем бирү учреждениеләре, ата-аналар белән генә түгел, ә төрле иҗтимагый оешмалар белән дә хезмәттәшлек итә: «Ватан» Бөтенрусия патриотик җәмгыть (ВПО «Отечество»), «Туган якны өйрәнү музее», «Өмет» Мәктәптән соң эш үзәге (ЦВР «Надежда»), «Салют» Балалар савыктыру лагере (ДОЛ «Салют»), 31 нче санлы Мәктәпкәчә белем үзәге (ДОУ № 31) һ.б.

Укучыларның иҗади потенциале үссен өчен, өстәмә белем бирү педагоглары балаларда үз көчләренә ышаныч булдыручы, иҗади мәсьәләләрне хәл итү сәләтенә ышаныч формалаштырырга ярдәм итүче дәресләр оештыралар. Көннең икенче яртысында һәр укучы үзенә ошаган мәктәп түгәрәгенә йөри ала: вокал яки театр студиясе, «Мин – рәссам» иҗат остаханәсе, «Бию ритмында» түгәрәге, «Мәктәптә КВН» түгәрәге эшли. Иң кече яшьтәге укучылар өчен «Юл хәрәкәтенең яшь инспекторлары» дәресләре уздырыла. 2020 елдан «Шәһәр йолдызлыры» («City Stars») мәктәп телестудиясе эшли башлады. Яшь корреспондентлар үз телесюжетларында мәктәп тормышындагы барлык кызыклы вакыйгаларны яктырталар. Укучылар зур кызыксыну белән анда Бөек Ватан сугышы экспонатлары, төрле китаплар, техника тупланган мәктәп музеена йөриләр, монда тикшеренү эшләре язалар, мәктәп кунаклары өчен экскурсияләр үткәрәләр.

2019 елның декабреннән мәктәптә Яңа ел Росгвардия балы үткәрелә. Яшь кавалерлар гүзәл ханымнар белән вальс бииләр, залда әкияти атмосфера хөкем сөрә, ә биюче егетләр һәм кызлар белән беррәттән, сәхнәдә Наташа Ростованың беренче балы театральләштерелә. Росгвардия балы мәктәпнең иң күңелле һәм көтеп алына торган традициясенә әверелде.

2020-2021 уку елыннан 23 нче мәктәп полилингваль күп профильле белем бирү учреждениесе буларак үз эшчәнлеген дәвам итә.

Полилингваль нигездә укытуның актуальлеге телгә өйрәтүнең белемнең төп компонентларының берсе булуы, беренче чиратта, кеше тормышының барлык өлкәләре дә гомуми дөньви интеграциягә юнәлеш алуы тенденциясе белән билгеләнә. Полилингваль белем тел мохитен булдыруны күздә тота, анда тел предмет түгел, ә чынбарлыкны тану һәм мәдәниятара бәйләнешларга сәләтле күп мәдәниятле шәхес формалаштыру чарасына әверелә.

1999 елда ЮНЕСКО Генераль конференциясенең 30 нчы сессиясендә Резолюция кабул ителә, ул ЮНЕСКОда катнашучы илләр тарафыннан килештерелгән «мультителле белем бирү» («мультиязычное образование») төшенчәсен раслый. Бу документ нигезендә мультилингваль, яки полилингваль белем бирү мәгарифтә ким дигәндә өч телне: туган телне, региональ яки гомуммилли телне (дәүләт телен – РТ.) һәм халыкара телне куллануны аңлата [1].

Стәрлетамакның 23 нче санлы полилингваль күппрофильле мәктәбендә белем бирү процессы өч телдә алып барыла: рус телендә, башкорт телендә һәм инглиз телендә. Чит телне (инглиз телен) өйрәнү 1 нче сыйныфтан ук башлана, икенче чит телне (немец телен) – 5 нче сыйныфтан. 5 нче сыйныфтан, дәрестә һәм класстан тыш формаларда, француз, кытай, испан һәм төрек телләре квалификацияле укытучылар һәм ул теллләрдә сөйләшүчеләр ярдәмендә укытыла башлый.

Полилингваль күппрофильле мәктәптә укучыларга туган мәдәниятне, халык традицияләрен өйрәнү мөмкинлеге бирә торган мохит булдырылган. Милли телләргә өйрәтүгә зур игътибар бирелә. 1-9 сыйныфларда башкорт теле дәүләт һәм туган тел буларак өйрәнелә, барлык параллель сыйныфларда да туган (татар) телен өйрәнүче төркемнәр җыелган.

Күп телләрне укыту туган, русия һәм дөнья мәдәнияте һәм мәдәни-тарихи мирас традицияләрен үзләштерүгә, мәдәниятара коммуникациягә әзерлекне, дөньяга карата иҗади һәм җаваплы позицияне формалаштыруга, кешеләргә, халыкларга, мәдәниятләргә хөрмәт тәрбияләүгә, үз асылыңны саклап калганда төрле мәдәниятләр вәкилләре белән актив хезмәттәшлеккә ярдәм итә. Нәкъ менә шуңа күрә хәзерге җәмгыятьтә күп телләрдә белем бирүнең полилингваль моделе, күп мәдәниятле шәхес формалаштыру белем бирү киңлегенең мөһим юнәлешләренең берсе булып тора.

Мәктәпнең полилингваль белем бирүгә күчүе әкренләп 2024 елга кадәр планлаштырыла; чит илләрнең мәгариф оешмалары белән хезмәттәшлек кысаларында тел белеме өлкәсендә халыкара хезмәттәшлек каралган.

Полилингваль мәктәпне тәмамлаган укучы – ул туган ил мәдәниятенә тирән ихтирам белән тәрбияләнгән, үз республикасының этномәдәни мирасына сакчыл караган, Ватаныбызның иминлеге һәм чәчәк атуы өчен шәхси үсешкә һәм иҗтимагый үсешкә сәләтле Россия гражданины.

Кече Ватанга, үз халкының гореф-гадәтләренә, туган телгә мәхәббәт хисен формалаштыруда туган телләр укытучылары зур роль уйный. Алар тарафыннан төрле чаралар – Туган телләр декадалары, Республика көннәре, иҗади кичәләр һәм конкурслар һ.б. оештырыла. Мәктәптә барлык чаралар да төрле телләрдә үткәрелә. 2021-2022 уку елында югары уку йортлары белән берлектә «GEOLING-Илгизәр» уенының шәһәр һәм республика этапларын үткәрделәр. Балалар «Урал батыр» эпосы, рус, башкорт һәм инглиз телләрендә Башкортстан мәдәнияте һәм тарихы турындагы сорауларга җавап бирделәр.

«Туган ягым моңнары» хор җыры мәктәп конкурсында барлык сыйныф укучылары рус, башкорт һәм татар телләрендә халык җырларын башкаралар. Балаларга конкурс бик ошый, алар халык җырларын өйрәнәләр, җырлыйлар һәм башкаларның чыгышын тыңлыйлар, бәя бирәләр. Халыклар бердәмлеге көне уңаеннан зур концерт оештырылды. Чара башында укучылар төрле милли костюмнарда күңелле музыка астында дуслык әйлән-бәйләне биеделәр. Алып баручылар рус, башкорт, татар телләрендә бәйрәм турында сөйләделәр, укучылар җырладылар, биеделәр, төрле сәхнә әсәрләреннән өзекләр

күрсәттеләр һәм республика халыклары телләрендә сәнгатьле итеп шигырьләр сөйләделәр.

Республикада ел саен Башкортстан халыкларының милли костюмы көнен бәйрәм итәләр. Чараның максаты – халыкларының милли мәдәниятен саклау һәм үстерү. Полилингваль күппрофильле мәктәп укытучылары һәм укучылары «Мин милли костюмда укыйм» акциясенә кушылалар, төрле чаралар үткәрәләр. Бәйрәм халыкларның гореф-гадәтләренә, тарихына һәм мәдәниятенә тагын бер тапкыр игътибар итү, яшь буында халык мәдәниятенең рухи байлык һәм кыйммәтлек икәнлеген аңлауны тәрбияләү мөмкинлеге бирә.

Укучылар һәм укытучылар татар, башкорт телләрендә халыкара диктантларда, этнографик диктантта актив катнашалар. Зур этнографик диктант – Россиядә яшәүче халыкларның мәдәнияте белән таныштыручы, шулай ук этномәдәни грамоталылыкның гомуми дәрәҗәсен бәяләргә мөмкинлек бирүче агарту проекты. Ел саен мәктәптә республика һәм шәһәр иҗади конкурсларының мәктәп этаплары үткәрелә. Укучылар танылган шагыйрьләрнең шигырьләрен өйрәнәләр, яттан сәнгатьле итеп сөйлиләр һәм аларны әсәрләрен сәхнәләштерәләр. Шуңа күрә җиңүчеләр мәктәп данын конкурсларның башка этапларында уңышлы яклыйлар [2].

Мәктәптә полилингваль белем бирү башлангыч үсеш этабында гына булса да, җитәкчелек һәм укытучылар киләчәккә зур өметләр баглап яшиләр, планнар коралар. Күп телле шартларда белем бирүнең теоретик нигезләрен үзләштерәләр, бу өлкәдәге дөньяви казанышлар белән танышалар, үзләренең уңышлы тәҗрибәләре белән актив уртаклашалар, мастер-класслар күрсәтәләр, түгәрәк өстәлләр оештыралар. Практика шуны күрсәтә: телләрне өйрәнү һәм тиешле дәрәҗәдә үзләштерү төрле телләрдә даими аралашу аша гына уңышлы була.

## ЛИТЕРАТУРА


1. Акты Генеральной конференции. 30-я сессия. Париж, 26 октября – 17 ноября 1999 г. Т. 1: Резолюции [Электронный ресурс]. – Режим доступа: http://unesdoc.unesco.org/images/0011/001185/118514r.pdf. – Дата обращения: 12.10.2022 г.

2. Галиева Р.Т. , Насипов И.С. Центры полилингвального образования в Республике Башкортостан: Стерлитамак // Тюркская филология в XXI веке: проблемы и перспективы: Сб. материалов Всерос. очн.-заочн. научно-практ. конф. с международным участием, Республика Башкортостан, г. Стерлитамак, 24 ноября 2022 г. / Отв. ред. И.С. Мансуров. – Стерлитамак: Стерлитамакский филиал УУНиТ, 2022. – С. 220-223.


©Галиева Р.Т., Насипов И.С., 2023

**УДК 372.882**

*Ғәлимова В.А., студент*
*Ғилми етәксеһе: Ғәлина Ғ.Ғ., филол. ф. канд., доц*
*М.Аҡмулла ис. БДПУ Өфө ҡ.*

# МӘКТӘПТӘ НАЗАР НӘЖМИҘЕҢ «ИБЛЕС» ПОЭМАҺЫН ӨЙРӘНЕҮ

**Аннотация.** В статье рассматривается пути изучения поэмы Назара Наджми «Иблис». Отмечается, что при анализе произведения следует особое внимание уделить патриотическому воспитанию. Сравнительно-сопоставительное изучение с поэмами Ш.Бабича, М.Гафури позволит глубже изучить развитие религиозных мотивов в башкирской поэзии.

**Annotation.** The article examines the ways of studying Nazar Najmi's poem "Iblis". It is noted that when analyzing the work, special attention should be paid to patriotic education. Comparative study with the poems of Sh.Babich, M.Gafuri will allow a deeper study of the development of religious motives in Bashkir poetry.

**Ключевые слова:** Назар Наджми, поэма, Иблис, изучение.

**Key words:** Nazar Najmi, poem, Iblis, study.

Башҡорт әҙәбиәтендә XX быуатта мифологик образдар, мифопоэтик шәхестәр, архетипик образдар менән ҡыҙыҡһыныу һөҙөмтәһендә М. Ғафури («Адәм үә Иблис», 1910), Ш. Бабич («Ғазазил», 1916), Н. Нәжми («Иблес») әҫәрҙәрендә Иблес образына мөрәжәғәт иткәндәр.

Был өс әҫәрҙәрҙең дә нигеҙендә Ҡөрьән китабында урын алған дини миф һалынған: Алланың әмеренә буйһонмау арҡаһында ожмахтан ҡыуылған Ғазазил фәрештәнең Иблискә әйләнеүе һәм уның кешеләрҙе насарлыҡҡа ҡотортоуы, аҙҙырыуы. Бер үк образ тураһында һүҙ барһа ла, һәр автор уны үҙенсә асҡан, үҙенсә ҡабатланмаҫ сюжет ҡорған.

Ш. Бабич һәм М. Ғафури әҫәрҙәре менән уҡыусылар алданыраҡ таныша, шуға ла Н. Нәжми поэмаһын өйрәнеү барышында был әҫәрҙәргә таянып була. Поэманың йөкмәткеһе бик ҙур, шунлыҡтан уҡыусылар уны өйҙә уҡып киләләр.

Уҡытыусы иң элек традицион һорау ярҙамында йөкмәткене үҙләштереү кимәлен тикшерә?

Ҡыҫҡаса йөкмәткене һөйләтергә лә мөмкин. Бер нисә сюжет һыҙығы Әхмәт образында килеп төйөнләнеүе асыҡлана. Тәү ҡарашҡа поэманың лирик геройы ваҡиғаларҙы күҙәткән һымаҡ ҡына. Геройҙар Сәғүд Ғәрәбстанында һәм Башҡортостандың Зөйә буйҙарында хәрәкәт итә. Ваҡиғалар ике ваҡыт арауығын берләштерә: хәҙерге заман менән хәтирәләр ебен үреп һүрәтләй автор. XX быуат башында илдә түңкәрелеш булғас, ауыл муллаһы Әхмәт ҙур ғаиләһе менән тыуған ерен ташлап китергә мәжбүр. Юлда үҙенең балаларын юғалта, ҡатыны Бибикамал менән юлда тыуған улы ғына иҫән ҡала.

- Сәфәрҙә тыуып, Сәғүд Ғәрәбстанында үҫкән Мәхмүт булмышына туған моң нисек килеп һарылған?

-Әсәhе Бибикамалдың hағышлы моңо аша уға ата-бабалар төйәгенә, телгә булған ҡыҙыҡһыныу, хөрмәт, барып күреү хыялы уята. Мәхмүтте төштәренә кергән, ғүмерҙә бер тапҡыр ҙа күрмәгән ата-бабалар төйәге үҙенә тарта:

*Әсә йырлай... Мәхмүт йөрәгенә*

*Ағыла йыр әллә ҡайҙарҙан. Алыҫтарҙан сыңлап килә төҫлө Ата-баба тыуған ярҙарҙан.*

Бибикамалдың ер hәм йыр тураhындағы hүҙҙәре лә актуаль:

*Ер менән йыр – бер үк ҡарындан,Ә, етмәhә, йырҙы шағир яҙған.*

Был hорау бик мөhим, сөнки уҡыусылар менән ата-әсәнең баланы тәрбиәләүҙәге роле асыҡлана.

- Мәхмүттең ғүмере трагик рәүештә өҙөлөүенең сәбәбе нимәлә?

*Улының йырын тыңлап, Әхмәт Тертләп ҡуйҙы: «Был ни ғәләмәт?!»*

Тап ошо юҫыҡтағы бәхәс үҫкәндән-үҫә, трагедияға барып етә. Мәхмүт:

«Тел үҙе лә иман», – тип өндәшә икән, нисек дөрөҫ әйтелгәнлегенә инанмай мөмкин түгел. Бөгөн дә бит туған телебеҙ тирәhендә ҡыҙыу бәхәстәр барғанда,халыҡ шағирының поэтик hүҙҙәре бик көнүҙәк яңғырай.

Әхмәт менән Иблес диалогын роллләп уҡыла. Был диалогтың ябай бәхәс кенә түгел, ә автор өсөн геройҙарҙың характер hыҙаттарын асҡан ысул да икәнлеге күрhәтелә. Үҙен ғүмер буйы хаҡ, Аллаh юлында тип уйлаған Әхмәткә Иблес күҙен аса.

Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеhе уҡыусылар менән бергәләп билдәләнә. Бында әҫәр тураhында Х. Ғиләжевтың hүҙҙәрен килтереү урынлы: «Поэманың нигеҙендә – Ватан hәм кеше яҙмышының нисбәте. Тыуған ил hәм туған тел төшөнсәләренең тормоштағы трагик драмаhы кеүек, бер ваҡытта ла үҙенең әhәмиәтен юғалтмаған проблемалар ята. Ҡайҙа барhа ла кешенең ҡара hаҡалы үҙе менән, йәғни кешенең аллаhы ла, иблесе лә үҙендә, улар кешенең тәбиғәте, донъяға ҡарашы, ғәме. Иленән ҡасhа ла, тыуған тупраҡтан, туған моңдан, туған телдән кеше ҡаса алмай» [1, 13].

Дәрестә уҡыусыларҙың танып-белеү эшмәкәрлеген әүҙемләштереү

Маҡсатында ҡыҙыҡлы эш алымдары ҡулланырға кәрәк. Геройҙарғаҡылыҡһырлама биреүҙе төркөмләп ойошторорға мөмкин. Беренсе төркөм Әхмәткә, икенсе төркөм Иблескә, өсөнсө төркөм Мәхмүткә, дүртенсе төркөм Бибикамалға ҡылыҡһылама бирә, кластерҙар төҙөй. Уҡыусыларҙан яуаптарҙыәҫәрҙән өҙөктәр ярҙамында иҫбатлауҙы талап итергә кәрәк. Мәҫәлән:




Назар Нәжмиҙең Иблесе күп ҡырлы, ул хатта ниндәйҙер хистәргә лә эйә, ул үҙенең яҙмышы тураһында ла тәрән уйлана:

*Бөтәһенән тик мин генә мәхрүм,Шуға ла ер миңә тиң түгел.*

*Кеше генә – үҙ ерендә алла... Ниңә кеше? Ниңә мин түгел?!*

Башҡа образдарға ла ентеклеҡылыҡһырлама бирелә. Шамил, Ҡыҙ, Егет образдары әҫәрҙең, фекер киңлегенә һәм тәрәнлеген көсәйтеүгә ярҙам итеп киләләр. Шағирҙың лирик образына ла иғтибар ителә.

*Иртәгәләр бөгөн тыуа икән,*

*Шул иртәгәм бармы бөгөндә?* – тип лирик герой инештә үк һорау ҡуя.

Шағир ваҡыт менән бәхәскә инә. Назар Нәжми шиғриәтендә ваҡыт үлсәм бирәмеге түгел, сиктәрен күпкә киңәйтә. Эске азатлыҡ, тойғолар юғарылығы ваҡыттан ашып китә:

*Мин дә шулай ғүмер буйына,*

*Яна-яна, төҙөп ҡуйҙым кеүек*

*Шиғырҙарҙан торған бер бина.*

*Ул бинамды һаман төҙөйөм мин*

*Иртәгә һәм бөгөн өсөн дә,* – тип үҙенең ҡараштарын нығытып ҡуя шағир. Йомғаҡлау өлөшөндә ике өҙөк уҡыла:

*а) Илай ине Әхмәт... Әхмәт илай...Йөрәгендә ине ут йәшен.*

*б) Минәтауҙа Иблес, көлә-көлә,Түгә утлы, әсе күҙ йәшен.*

Ике төп геройҙың илау сәбәптәре һәм уларҙың күҙ йәштәре араһындағы айырма асыҡлана.

Шулай уҡ Ш. Бабичтың һәм Н. Нәжмиҙең әҫәрҙәрендәге Иблес образдарын сағыштырып ҡарарға ла була.

Уҡыусылар менән дәрес аҙағында һығымта яһала: кешенең рухи азатлығын Иблес кенә еңә алмай. Ул азатлыҡ эскән һыу, һулаған һауа, тыуғанер йылыһы һәм моң менән кешегә һеңә. Кешене шәхес кимәленә күтәрә, иңенә яуаплылыҡ та һала.

## ӘҘӘБИӘТ

1.Ғиләжев Х. Был донъяла һин йәшәйһең икән... // Атай йорто. Баш һүҙ.

–Өфө: Китап, 1988. – 5-17 бб.
2. Н.Нәжми. Атай йорто. –Өфө: Китап, 1988. – 304 бит

© Ғәлимова В.А., Ғәлина Ғ.Ғ., 2023

**УДК 821**

*А.В. Ғәлиуллина, студент*
*Ғилми етәксеһе: З.А. Әлибаев, филол. ф. канд., доц.*
*М. Акмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

## ҠУРАЙ – БАШҠОРТТАРҘЫҢ КҮҢЕЛ ҠЫЛЫ

**Аннотация.** В этой статье говорится о важности и силе курая. Автор показывает неразрывную связь башкирского народа с кураем и в качестве примера приводит известного кураиста.

**Annotation.** This article talks about the importance and power of the kurai. The author shows the inextricable connection of the Bashkir people with the Kurai. As an example, the author cites a well-known curator

**Ключевые слова:** курай, музыкальный инструмент, живая музыка, национальный символ, фольклор, кураист, народ.

**Key words:** kurai, musical instrument, live music, national symbol, folklore, kurai, people.

Мин үҙем бәләкәйҙән ҡурай моңон тыңлап үҫтем. Атайым һәр ваҡыт төрлө башҡорт көйҙәрен уйнап беҙҙе бейетеп, йәки оҙон көй уйнап тәрән уйға батырып ала ине. Ҡурайҙа уйнай белеү беҙҙең нәҫелдә борон борондан килгән. Минең олатайымдың атаһы Ғәлиуллин Зәйнулла һуғыш ваҡытында ҡурай уйнап дан алған булған, һәм һуғыштан иҫән һау ҡайтҡас уҙененң улына, минең олатайыма, өйрәткән, ә олатайым атайға өйрәткән. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, атай күпме генә тырышмаһа ла мине ҡурайҙа уйнарға өйрәнә алманы. Ләкин, көйөн ишетһәм бөтә тәнемде ул тылсымлы моң ярып үтеп китә.

Ҡурай моңон беҙ радио, телевизор интернет селтәрҙәрендә ишеткәнебеҙ бар, шулай ҙа ул көй тере ҡурай моңон ишетеүгә етмәй. Тере көйөн ишетеү ул үҙе бер мөғжизә.

Ҡурай тураһында һөйләгәс, билдәле ҡурайсыларҙы лә әйтеп китергә кәрәктер тип уйлайым. Минең яҡташым Дәүләтбай Абдрахман Улы Рәхмәтуллин 1937 Йылдың 15 сентябрендә Башҡортостан Республикаһының Бөрйән районы Нәби ауылында тыуған. Ул бик иртә етем ҡала, был унның бала сағы ауыр була. Дәүләтбай Рәхмәтуллин бала сағында уҡ ҡурайҙа уйнарға өйрәнгән. Унның тәүге уҡытыусыһы-ауылдашы, ҡурайсы Нурғәли Ҡарабулатов. Ул ҡурайҙы ҡырҡып алып, уйын ҡоралын нисек дөрөҫ тоторға һәм тауыштарҙы нисек сығарырға икәнен күрһәткән. Әкренләп ул ауылдаштары алдында концерттарҙа сығыш яһай башлай. 1957 йылда танылған ҡурайсы Мөхәмәт

Ҡәҙерғолов менән таныша, егет уны маҡтай һәм илһамландыра. 1961 йылда Башҡортостандан үҙешмәкәр артистар составында Дәүләтбай Абдрахман Улы бөтә Союз халыҡ хужалығы ҡаҙаныштары күргәҙмәһендә сығыш яһай, унан көмөш миҙал менән ҡайта. Был сәфәрҙән Дәүләтбай Рәхмәтуллиндың тормошо ҙур сәхнәлә башлана ла инде. Районда йәки республикала бер ҙур сара ла Бөрйән ҡурайсыһы ҡатнашлығынан тыш үтмәне.1969 йылда башҡа ҡурайсылар, шулай уҡ яңғыҙ ҡурайсылар составында, шулай уҡ Яңғыҙ номер менән Ленинградта Башҡортостан автономияһының 50 йыллығына арналған концертта сығыш яһай. Шул Уҡ Йылда Куйбышевта бөтә Союз халыҡ таланттары смотры үтте, Унда Дәүләтбай Рәхмәтуллин лауреат Исемен Алды. 1972 йылда Люксембургта халыҡ-ара фольклор байрамы үтә, унан ҡурайсы лауреат дипломы менән ҡайта. Ауылдашы, билдәле йырсы Ғилман Сәфәрғәлин менән бергә популяр «беҙҙең адрес – Советтар союзы" телевизион тапшырыуында ҡатнашты. 1974 йыл ҡурайсы өсөн әһәмиәтле була. Уға «БАССР-ҙың Атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре»тигән маҡтаулы исем бирелә. 1975-1981 йылдарҙа Бөрйән районы Нәби ауылында район музыка мәктәбе филиалында ҡурай класы буйынса уҡытыусы булып эшләй. 1979 йылда улы Айбулат менән бергә ҡурайсылар конкурсында Йомабай Иҫәнбаев исеменән бүләк алалар. 1995 йылда Өфөлә үткән «ҡурай Моңо – 95» конкурсында призер була.

Ғата Зөлкәфил улы Сөләймәнов Баймаҡ районының Беренсе Төркмән ауылында 1912 йылдың 15 июнендә тыуа. Тыуған ауылы ҡурайсылары менән тирә-яҡта элек-электән дан тотҡан була. Ҡурай моңона һоҡланып үҫә. 1985 йылда "Ҡурай" тигән китабы донъяны күрә.

Башҡорттарҙа борондан музыка ҡоралы – ҡурай билдәле булып килә. Был ҡорал башҡорт халҡының милли символдарының береһе булып һанала. Ете таждан торған стилләштерелгән ҡурай сәскәһе Башҡортостан республикаһы гербында һәм флагында төшөрөлгән. Тәрән боронғолоҡҡа барып тоташҡан һәм халыҡтың бөтә тарихы тормошо менән бергә барған милли музыка халыҡтың ижадында һәм көнкүреш тормошона бәйләнгән, башҡорт халыҡ музыкаһын мәғәнәле һәм стиль системаһына тупланыу, башҡорт халҡының формалашыуы менән бер үк ваҡытта бара тигән һығымта яһарға мөмкинлек бирә . Йыр ижады менән бер рәттән башҡорттарҙа музыка ла үҫешкән була, өҫтәүенә, инструменталь музыка вокал музыкаһынан өҫтөнлөк ала. Башҡорттарҙа һәр йыр көйөнә тиерлек уның иректе варианты булараҡ инструменталь көйө була. Инструменттың килеп сығышы ла бик ҡыҙыҡ: ҡот осҡос үлемдән ҡотолған егет тураһында легенда сағылдырыла. Бер урманға барып еткәс, егет тирә-яғынан ҡурҡыныс янағанын көткә, ул өмөтһеҙлөккә бирелмәй алға атлай. Күҙҙәренә оҙон һабаҡлы сәскә эләгә, унан һуң көй сығарған шыма сәскә таба. Музыка ҡоралында уйнау егетте ҡотҡара, уны урмандан сығара, көйө яуызлыҡты еңә. Был легенданың варианттары бик күп осрай, ҡайҙалыр егет һылыуҡайҙың йөрәген яулаған, ҡурай арҡаһында ҡайҙалыр яуыз хандан ҡасҡан. Әммә ниндәй генә легенда булмаһын, ҡурай ғазаптарҙан ҡотолоу символы булараҡ

башҡорттарҙың юлдашына әүерелә.Күп һанлы башҡорт йырҙарында, эпостарҙа һәм эпик риүәйәттәрҙә ҡурай ҙа тарихи сағылыш таба. Мәҫәлән, ҡурай «Ҡуңыр Буға», «Аҡбуҙат», «ҡара Юрға», «Заятүләк һәм Һыуһылыу "боронғо башҡорт эпостарында телгә алына. Ҡурай тураһындағы һүҙҙәр «Килен тауы» риүәйәтендә һәм төрлө легендаларҙа ла осрай. Башҡа халыҡтарҙағы кеүек, башҡорттарҙа ла инструменттың составы, башҡарыу типы, борон заманға барып тоташҡан рухи мәҙәниәттең бай ҡатламы барлыҡҡа килгән. Халыҡ ижадының башҡа төрҙәре менән тығыҙ бәйләнештә үҫешеп, улар милли мәҙәниәттең үҙенсәлеген, уның тарихи бәйләнештәрен сағылдыра. Музыкаль ижадтың нығынған формаларында башҡорт этносының матди һәм рухи мәҙәниәте тураһында йәшерен мәғлүмәт бар.

Шулай итеп, ҡурайсылар легендаларҙы, йырҙар тарихын, ҡәбилә, халыҡ тормошонан факттарҙы белергә һәм башҡорттарҙың бөтә рухи мираҫын һаҡларға тейеш Башҡорттар өсөн ҡурай-ул музыка ҡоралы ғына түгел, ә тарихи белемде быуындан быуынға тапшырыу сараһы ла. Билдәле булыуынса, ниндәй ҙә булһа көйҙө башҡарыр алдынан ҡурайсылар ҡыҫҡаса уларҙың сығышының легендаһын һөйләй һәм тап ҡурай милли мәҙәниәттә мөһим урын алған төп музыка ҡоралы булды һәм булып ҡала. Ҡурай башҡорттарҙың боронғо музыка ҡоралы. Халыҡтың оҙайлы, ҡатмарлы этник тарихына ҡарамаҫтан, был музыка ҡоралы үҙенең үҙенсәлеген һаҡлаған, башҡорттарҙың үҙенсәлекле музыкаль мәҙәниәтен үҫтереүгә булышлыҡ иткән. Ҡурай моңо ул тылсымлы көй, унан һағыш, шатланыу, ҡайғы-яза, бәхетле минуттар барыһыла урғылып сыға.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Кузеев Р.Г. Происхождение башкирского народа. Этнический состав, история расселения // 2-е изд., доп. – Уфа: дизайн Полиграф-сервис, 2010. – 256 с.
2. Молодой учёный №3 (137) январь 2017 г. Рубрика культурология «Курай – башкирский национальный инструмент»
3. История происхождения курая. [Электронный ресурс]. // Режим доступа: Livejoyrnal.com . – Дата обращения: 20.01.2023.
4. Социальная сеть вконтакте группа "Нефтекамская государственная филармония" пост «Башкирский кураист, заслуженный работник культуры БАССР Давлетбай Рахматуллин»
5. Идельбаев А.М. [Электронный ресурс]. // Режим доступа: https://idelbaev--artur-livejournal-com – Дата обращения: 20.01.2023
6. История происхождения курая. [Электронный ресурс]. // Режим доступа: https://trishurupa.ru/content/ISTORIYa-PROISKhOZhDENIYa-KURAYa.html. – Дата обращения: 20.01.2023


© Ғәлиуллина А.В., Әлибаев З.А., 2023

УДК 821.512.141

*Ғәниев Ф.Б., студент*
*Ғилми етәксеһе: Ғәлина Ғ.Ғ., филол. ф. канд., доц.*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө к.*

# Ш. БАБИЧ ҺӘМ Р. БИКБАЕВ ШИҒЫРҘАРЫНДА ДИНИ МОТИВТАР

**Аннотация.** В статье рассмотрены религиозные мотивы в поэзии двух великих поэтов в сравнительном аспекте. Отмечается, что религиозные мотивы в их творчестве связаны с исторической и культурной средой, личными убеждениями и мировоззрением. Дается анализ отдельных произведений поэтов.

**Annotation.** The article examines religious motives in the poetry of two great poets in a comparative aspect. It is noted that religious motives in their work are connected with the historical and cultural environment, personal beliefs and worldview. The analysis of individual works of poets is given.

**Ключевые слова**: религия, мотивы, вера, медресе, Коран, символ, хадис, намазлык, славословие, судьба, традиции, народ.

**Key words:** religion, motives, faith, madrasah, Koran, symbol, hadith, namazlik, praise, fate, traditions, people.

Башҡорт яҙыусыларының ижадында дини мотивтарға нигеҙләнеп яҙылған әҫәрҙәр йыш осрай. Быны беҙ XX быуат башында талантлы шағир Ш. Бабич ижадында ла асыҡ күрәбеҙ, быуат аҙағында Башҡортостандың халыҡ шағиры Р. Бикбаев поэзияһында ла күҙәтәбеҙ.

Ш. Бабич мулла улы булған, мәҙрәсәлә белем алған. Ул динде бөтөнләй инҡар итмәй, ижадында дини темаға йыш ҡына мөрәжәғәт итә. Был турала З. Шәрипова бына нимә яҙа: «Бабич та мәҙрәсә мөхитендә тәрбиә-белем алған һәм, ижадсы булараҡ, заманы өсөн нисек кенә алдынғы булмаһын, мәҙрәсә һауаһында өлгөрөп еткән шәхес, шуға күрә уның әҫәрҙәрендә дин йоғонтоһо, шунең материаль кәүҙәләнеше – дини лексиканың муллығы бик тәбиғи» [6, 91].

«Ғәйет көнө» шиғырында автор байрамды мөьминдәрҙе шатландырырлыҡ, фәрештәләрҙе йырлатырлыҡ, ә яуыз ендәрҙе илатырлыҡ итеп йырларға, күңел асырға саҡыра:

*Шатлан, мөьмин, бөгөн шатлан – Ғәйет көнө,*
*Шатлығыңдан иҫер, мөьмин, айыҡ көйө* [1, 67].

Р. Бикбаевтың да «Бөгөн ғәйет» тип аталған шиғыры бар, ул иҫтәлектәренә ҡоролған. Автор бала сағында байрамға йыйылған ҡарттарға «таҫтамал һоноп ҡалдым» тип шатлана. Унан һуң «ғәйеттәр ғәйеп һаналған» ваҡыттар килә, шағир кешеләрҙең һаман да бер ни күрмәүҙәренә борсола.

Ш. Бабич борсолоулы уйҙарына яуап тапмағанда, күңеле болоҡһоғанда шиғырҙары аша йыш ҡына Аллаға өндәшә. Мәҫәлән:

*Өҙ башымды, эй хоҙайым, был миңә ысын баш тҙгел,*

*Ах, залим баш, һиндә мәхкүм ҡалды мазлум йәш күңел* [1, 63].

Ш. Бабичтың наҙан һәм алдаҡсы муллаларҙан көлөп ижад иткән күп кенә сатирик шиғырҙары билдәле. «Хәҙрәте Сүнчәләй рухына», «Әй, мулла абзый» шиғырҙары шундайҙарҙан:

*Әй, мулла абзый, ант итәмен аллаң менән,*

*Ант итәмен башыңдағы салмаң менән:*

*Өҫтән былай кеше төҫлө күренһәң дә*

*Эсең-тышың тулы сеп-сей ялған менән!* [1, 199].

Әммә хәҙрәттәрҙең барыһын да ул насар итеп һүрәтләмәй, «Ҡанун тыңлағанда» шиғырында Фараби хәҙрәткә дан йырлай:

*Әй, Фараби хәҙрәте, төркөм, ҡаным, нәҫелем, йәнем,*

*Мәңге онотолмаҫ әҫәрҙән беҙгә ҡалдырҙың ҡанун* [1, 93].

Фараби Әбү Насыр Мөхәммәт (870 – 950) Урта Азияла йәшәгән фәйләсүф. Ул боронғо грек фәлсәфәһен Шәреҡтә таратыусыларҙың береһе була, йәндең үлемһеҙлегенә, әхирәттәге тормошҡа ышанмауҙа, ҡыҫҡаһы, аллаһыҙлыҡта ғәйепләп, Фарабиҙы дин әһелдәре эҙәрлекләйҙәр. Ш. Бабич Фарабиҙың музыкаль талантына баш эйә, ҡанун моңона һоҡланыу шиғырҙың башынан аҙағына тиклем дауам итә.

Шағир ижадында *Алла* образы төрлөсә кәүҙәләнеш ала: уны әҙәми зат һүрәтенә индерә, ер кешеһенә хас сифаттар менән билдәй, йәғни материаллаштыра, ҡайһы бер әҫәрҙәрендә, киреһенсә, – илаһи зат итеп һүрәтләй.

Ш. Бабич ҡатмарлы осорҙа йәшәй. Уның Аллаға булған мөнәсәбәте кешелек донъяһындағы реаль хәл-ваҡиғаларға турана-тура бәйле. Беренсе бөтә донъя һуғышы осорондағы ҡанлы һуғыш, илдәге бөлгөнлөк мәлдәрендә ул хатта Аллаға ғәйеп ташлай, асыулана, уға ышанысын юғалта, уның мәрхәмәтлелегенә шикләнә һәм барлығына икеләнә:

*Белмәйем,*

*әллә алла,*

*әллә иблес*

*Алдалай?!* – тип яҙа автор борсолоп.

Шағир яҙмышының үтә лә ҡырҡыу, борсоулы мәлдәрендә Аллаға ярҙам һорап мөрәжәғәт итә. Тик ул үҙ яҙмышы өсөн түгел, бөтә Башҡортостан халҡы өсөн борсола, уның өҫтөнән ҡан болоттары китеүен теләй:

*Раббым, һиңә һығына Башҡортостан,*

*Ишет мәзлүм башҡорт аһтарын.*

*Ҡан болото китһен инде өҫтән,*

*Һалсы рәхмәтеңде, ғаффарым!* [1, 276].

Ш. Бабич өсөн аллаға ышаныу – иң тәүҙә рухи таҙалыҡ, фиҙәкәрлек. Уның тарафынан «Алла» төшөнсәһе ғәҙеллек, хаҡлыҡ, изгелек символы булып ҡабул ителә һәм шағир аңында бөтәһен бергә берләштергән һәм күпкә тәрәнерәк һәм киңерәк булған «иман» һүҙенә барып тоташа.

Дини мотивтар шағирҙың мөхәббәт поэзияһында ла осрай, ҡыҙҙарҙы ул Алла менән сағыштыра:

*Ҡәләмемә күңел ене ҡағылдырған,*

*Тиле күңелде үҙ юлына абындырған –*

*Ике нәмә – әүүәл алла, икенсе ҡыҙ*

*– Бәндәләрҙе ҡөҙрәтенә табындырған,* – тип яҙа ул «Исемдәр баҡсаһында», «Алла һәм ҡыҙ» образдары «матурлыҡ, сафлыҡ» төшөнсәләре аша бергә берләшкәндәр, шуға ла ҡыҙҙарға мөнәсәбәт тә йыш ҡына «Алла» күҙлегенән күрһәтелә [1, 226].

Дин йолаларын үтәү кәрәклеген дә күрһәтә автор. Мосолмандар һәр эште «Бисмилла» әйтеп башларға тейеш, ул шул турала иҫкәртә:

*Әйтмәгәс бисмилланы эш уңмай шул,*

*Әйләнергә башлай кәүҙә лә уң вә һул.*

*Һәм тамаҡтың төптәре ғыр-ғыр килә,*

*Болғана ҡулда, ауыҙ мыр-мыр* килә [1, 156].

Күреүебеҙсә, Ш. Бабичтың дини мотивлы әҫәрҙәре күберәк шағирҙың күңел торошон күрһәтә.

Р. Бикбаев иһә икенсе заман кешеһе. Ул пионер, комсомол тәрбиәһе алып үҫә, ләкин күңелелендә иманын юғалтмаған. Быны быуаттар аша беҙгә килеп еткән хәҙистәрҙең аҡылдарын йөрәгендә йөрөткән һәм халҡына еткергәнлеге иҫбатлай

2001 йылда «Йөҙ ҙә бер хәҙис» тигән беренсе китап, 2003 йылда икенсеһе, 2006 йылда өсөнсөһө донъя күрә. 2009 йылда башҡорт һәм урыҫ телендә «Өс йөҙ ҙә өс хәҙис. Триста три хадиса» тигән баҫма донъя күрә. Шағирҙың «Һайланма әҫәрҙәр»енең алтынсы томында хәҙистәрҙең дауамы – тағы ла 474 хәҙис баҫылып сыға. Р. Бикбаев барлығы 777 хәҙисте шиғыр формаһына күсереп, башҡорт теленең матурлығын, ҡиммәтен арттырҙы. Уларҙың тәрбиәүи әһәмиәте лә ифрат ҙур, халыҡты тәртипкә, әҙәпкә, иманлы ғүмер кисерергә саҡыралар. Мәҫәлән:

*Аллаһты һис ҡыҙыҡтырмаҫ*

*Малығыҙ менән йәмегеҙ.*

*Аллаһ өсөн ҡәҙерлеһе –*

*Күңелегеҙ, ғәмәлегеҙ* [2, 168].

«Ватандаш» журналында 2012 йылдың туғыҙынсы номерында «Тыуған еребеҙ – изге намаҙлыҡ» исеме аҫтында Р. Бикбаевтың шағирҙар шәлкеме баҫылып сыҡҡан. Исеменән күреүенсә, был шиғырҙарҙа дини мотивтар күтәрелгән. Шиғырҙарҙан авторҙың ғаиләһендә туғандарының дини кешеләр булыуын күрәбеҙ. Инәһе уға ҡомартҡы итеп намаҙлыҡ, ҡартатаһы тәсбих ҡалдырған. Шағир уларҙы ҡәҙер итеп һаҡлай:

*Алға һалһам ошо намаҙлыҡты,*

*Йәнгә йылы китә өҫтәлеп* [2, 165]

Һәм тыуған ерҙе лә намаҙлыҡҡа тиңләй:

*Бер уйлаһаң,*

*Ошо атлап йөрөгән*
*Тыуған еребеҙ – изге намаҙлыҡ.*
*Тыуған ергә баҫһам,*
*Намаҙлыҡҡа*
*Баҫҡан һымаҡ булам шуға ла* [2, 165].

Шағирҙы Стамбулдың мәсеттәре һоҡландыра. Иҫенә төшһә, мәсет манараларһыҙ, аҙан тауышһыҙ үткән бала сағы өсөн үкенә:

*Эй үкенес!*
*Аҙан арбауынан*
*Башланмаған сабый көндәрем...*
*Ҡолатылған изге манаралар,*
*Емерегән мәсет мөнбәре* [4, 65]

Р. Бикбаев үҙенең әҫәрҙәрендә дини мотивтарҙы халыҡ яҙмышы, заман, ил, халыҡ, киләсәк алдында яуаплылыҡ проблемаларына бәйләй.

Мәҫәлән, «Ҡөрьән ошо телдә әйтелгән бит» шиғырында:

*Ҡөрьән ошо телдә әйтелгән бит –*
*Ғәрәптәргә кем һуң көнләшмәҫ!?*
*Аллаһ һүҙе ошо телдә ингән*
*Аллаһ ошо телдә һөйләшкән,* – тип яҙа [2, 165].

Ошонда уҡ һәр телдең «Аллаһ теле икән»е һәм телде ҡәҙерләргә кәрәклеге тураһында иҫкәртә:

*Милләттәрҙе туған теле һаҡлар,*
*Милләт әгәр телен һаҡлаһа* [2, 165].

Ғ. Хөсәйенов шағир тураһында бына нимә яҙа: «Һәләте менән Рауил Бикбаев тапҡыр фекерле уйсан шағир. Уны Мифтахетдин Аҡмулла, Шәйехзада Бабичтарҙан килгән көслө поэтик традицияларҙы, беҙҙең заманда уларҙы артабан үҫтереп һәм күрелмәгәнсә байытып ебәргән Мостай Кәрим, Рәми Ғариповтарҙың шиғри мәктәптәрен лайыҡлы дауам иткән халыҡ шиғирҙарыбыҙҙың күренеклеһе итеп тоям» [2, 7]. Был ысынлап та шулай.

Шулай итеп, Ш.Бабич ижадын төплө өйрәнеп, монография сығарған, уның әҫәрҙәрен текстологик йәһәттән эшкәртеп шиғри йыйынтыҡтарын баҫтырған Рауил Бикбаев ижадында дини тематика сағылдырыу мәсьәләләрендә һис шикһеҙ бөйөк Бабич йоғонтоһо ныҡ һиҙелә.

## ӘҘӘБИӘТ

1. Бабич Ш. Шиғырҙар, поэма, эпиграммалар. – Өфө: Китап, 1985. – 400 бит.

2. Бикбаев Р. Тыуған еребеҙ – изге намаҙлыҡ! // Ватандаш. 2012. – № 9. – 165-166-сы бит.

3. Бикбаев Р. Һайланма әҫәрҙәр. 1 том: шиғырҙар, поэмалар. – Өфө: Китап, 2008. – 528 бит.

4. Бикбаев Р. Һайланма әҫәрҙәр. 6 том: шиғырҙар, поэма, хәҙистәр, мәҡәләләр. – Өфө: Китап, 2019. – 544 бит.

5. Хөсәйенов Ғ.Б. Тәрән тамырлы ижад. Баш һүҙ // Һайланма әҫәрҙәр. 1 том. – Өфө: Китап, 2008. – 7-11-се бит.
6. Шәрипова З. Бабич поэзияһында дини символика // Халыҡ шағиры – халыҡ хәтерендә. – Өфө: Китап. 1996. – 90-98-се биттәр.

© ҒәниевФ.Б., Ғәлина Ғ.Ғ., 2023

**УДК 372.881.111.1**

*Жерновкова М.С., учитель английского языка,*
*МАОУ «Лицей №107»,*
*руководитель РМО учителей английского языка*
*Советского района г.Уфа.*

## DIGITAL PLATFORM FOR LANGUAGE PROTECTION AND PRESERVING CULTURES

**Аннотация.** Данная статья посвящена цифровой платформе *https://bashlang.ru/*, которая помогает изучать родной (башкирский) язык по современным технологиям. Мы, учителя английского, в рамках полилингвального обучения, пользуемся данной платформой для подготовки уроков интегрированной направленности, пользуемся аудио и видеоматериалом, а также словарями. Ребята активно разыгрывают диалоги, учатся оперировать разной лексикой, строить предложения, говорить правильно.

**Annotation.** This article is devoted to the digital platform https://bashlang.ru/ that helps to learn the native (Bashkir) language using modern technologies. We use this platform to prepare lessons as multilingual education, use audio and video materials, as well as dictionaries. The children actively act out dialogues, learn to operate with different vocabulary, build sentences, and speak correctly.

**Ключевые слова:** башкирский язык, лексика, словарь, цифровые технологии, интерактивные упражнения, самостоятельное изучение

**Key words:** Bashkir, vocabulary, dictionary, digital technology, interactive exercises, self-study

We live in the modern world and you can’t imagine an educated person who doesn’t know any foreign language. But also we are now living on the «smart» planet with continuous development of technology. The knowledge of different languages provides better education to cope up with the fast moving development. It is especially important nowadays. A modern engineer or even a worker deals with instruments and machines from other countries and must be able to read the instructions, which are usually written in English. Computer programs and games, most of Internet pages are also written in English. Science magazines are mostly

published in English and scientific and business conferences are held in English as well. Diplomats and militaries use English to solve their problems.

But in the race of civilizations the world's indigenous languages are under threat of disappearing, with one language dying every two weeks and many more at risk. The revitalization of indigenous languages is essential for ensuring the continuation and transmission of culture, customs and history, but it is also important to address biodiversity loss and climate change.

In the 21st-century, language loss occurs mainly due to a lack of people speaking them. In fact, UNESCO describes endangered languages as those whose speakers have disappeared or shifted to another language – usually the main language of a dominant group. This usually takes the form of parents passing on their native tongue to their children who later on in life use the dominant language of the country they're in to gain socioeconomic advantages or avoid discrimination [3].

Although advances in modern technology are seen as a contributing factor of language loss, technology has been embraced by many developers, philanthropists and linguists in order to help preserve endangered languages across the globe.

With online platforms becoming a destination for language preservation, language learning startups, including *https://bashlang.ru/*, have diversified their product offering to contribute to the preservation process.




This web-site is devoted to the study of the most common words and phrases of the Bashkir language, grouped by topic for self-study. Words are accompanied by pictures, voice pronunciation and translation into Russian [1].

Let's look at the main list of topics in the Bashkir dictionary there: greetings and polite words, pronouns, family, numbers, time, frequently used verbs, adjectives, adverbs and prepositions, house and flat descriptions, settlements, municipal districts of the Republic of Bashkortostan, cities of the Republic of Bashkortostan, rivers and lakes of Bashkortostan, body parts, description of a person's appearance, studies, professions, seasons, food, vegetables and fruits, clothes, city, transport, domestic animals and birds, wild animals, wild birds, fish and insects, trees and grass.



летчик
осоусы

There are some examples of them:

1. ***Greetings and polite words.***

Һаумыһығыҙ! – Hello!
Хәйерле иртә! – Good morning!
Хәлдәр нисек? – How are you?
Һау булығыҙ! – Good bye!
Тыныс йоҡо! – Good night!
Мөмкинме? – May I?
Танышыуға шатмын! – Nice to meet you!

2. ***Pronouns.***

мин – I
һин – you
ул – he
беҙ – we
һеҙ – you
улар – they
минең – my
һинең – your
уның – his
һис кем – nobody
бер нәмә лә – nothing
был – this
теге – that



я
мин

3. ***Family.***

Әсәй – mother
Атай – father
Олатай – grandfather
Өләсәй – grandmother
Ҡусты – little brother
Һеңле – little sister



прадед
ҡарт олатай/ ҡартай

In addition, there is a visual dictionary that facilitates understanding for elementary school students. Moreover the web-site contains grammatical comments that will help you understand the structure of the Bashkir language and build sentences on your

own. Articles are divided into groups depending on the parts of speech they describe: noun, pronoun, adjective, verb, etc.

But what is important, this platform has online lessons with which you can




learn the vocabulary and grammar of the Bashkir language through interactive exercises and tests. The main concept of presenting the material is based on linguoculturological, communicative, interactive teaching approaches based on the experience of learning foreign languages. The material is offered in modern interactive forms (info graphics, video, automatic simulator) and included listening, multimedia dictionaries, interactive exercises, speech situations.

To use the web resource, you do not need to install additional programs and applications; it is available both from a PC or a laptop and a mobile device. The material is arranged in such a way that each user can build an individual learning path in accordance with the level of language proficiency. The web resource for self-study of the Bashkir language "Interactive Bashkir" provides invaluable assistance to everyone in mastering the spoken Bashkir language, replenishing their active vocabulary. [3]

If you regularly complete the interactive exercises of each lesson, your result will improve every day! Progress will be reflected in your personal account.

Saving a language isn’t just a matter of recording words or phrases and digitizing them to be held in an online vault. Language is inherently about people, culture and identity. In order to keep a language alive, it needs to be spoken by many, immersed in everyday culture, and actively passed on to future generations.

The internet is ruled by only a handful of dominant languages (such as English, Chinese) and there’s even evidence to suggest that only 5% of languages have a chance of surviving in the digital world. But only time will tell if language activists can truly win the long game of language preservation.

As John Daniel, Assistant Director-General for Education in UNESCO, has written: “Years of research have shown that children who begin their education in



their mother tongue make a better start, and continue to perform better, than those for whom school starts with a new language. The same applies to adults seeking to become literate." (UNESCO 2003a). [4]

As an English teacher, I believe that the introduction of multilingual education has the best effect on the thinking of children, the ability to operate with a variety of vocabulary, teach comparison and analysis, and also helps us teach people who can adequately represent their native republic, their native language on the global scene.

**ЛИТЕРАТУРА**


1. Интерактивный башкирский [Электронный ресурс] // – Режим доступа: https://basic.bashlang.ru/index.php. – Дата обращения: 13.01.2023.
2. Веб-ресурс для самостоятельного изучения башкирского языка «Интерактивный башкирский» [Электронный ресурс] // Мир родного языка. – Режим доступа: https://bash-mir.ru/posts/718. – Дата обращения: 24.01.2023.
3. Как технологии используются для сохранения исчезающих языков [Электронный ресурс] // Toppan digital language. – Режим доступа: https://toppandigital.com/us/blog-usa/technology-preserve-endangered-languages. – Дата обращения: 24.01.2023.
4. Linguistic diversity and the preservation of endangered languages: A case study from Nepal [Электронный ресурс ] // HAL open science. – Режим доступа: https://shs.hal.science/halshs-03083332/document. – Дата обращения: 15.01.2023.


© Жерновкова М.С., 2023

**УДК 372.881.1**

*Zhussupova G.M., master of pedagogy, senior teacher*
*Niyazbekova A. A., master of philology, senior teacher*
*Nurbekova G.Zh., master of pedagogy, senior teacher*
*L.N.Gumilyov Eurasian national university*
*Astana, Kazakhstan*

# THE USE OF ETHNO-CULTURAL COMPONENTS IN FOREIGN LANGUAGE CLASSES

**Аннотация.** Данная статья посвящена необходимости изучения этнокультурных традиций в образовательном процессе. Представлена актуальность введения этнокультурного образования, понятие этнокультурного компонента, а также показано, что при внедрении этнокультурного компонента в процесс обучения иностранному языку повышается качество образования, повышается мотивация к изучению иностранного языка и расширяются этнокультурные знания обучающихся.

**Annotation**. This article is devoted to the need to study ethno-cultural traditions in the educational process. The relevance of the introduction of ethno-cultural education, the concept of an ethno-cultural component is presented, and it is also shown that when an ethno-cultural component is introduced into the process of teaching a foreign language, the quality of education increases, motivation to learn a foreign language increases and the ethno-cultural knowledge of students expands.

**Ключевые слова:** этнокультурное образование, этнокультурные компоненты, этнокультурная личность, история, народные традиции.

**Key words:** ethno-cultural education, ethno-cultural components, ethno-cultural personality, history, folk traditions.

The issue of ethno-cultural education is considered by many linguists and methodologists. And this is not accidental, because the ethno-cultural component of education means the upbringing of an ethno-cultural personality by means of a foreign language. [1, 134] Language is the most complete indicator of culture. Therefore, when determining the content of training, the question arises about the ethno-cultural component. This foreign language training program, along with the aspect of linguistics, includes an ethno-cultural program through which students can talk about the culture, geography, political situation of the country in which they study and about their native country. Through foreign languages, students can describe facts and phenomena related to local culture, as well as in the framework of real communication they can convey their identity and make it a world culture.

Why does the question of introducing an ethno-cultural and regional component in the teaching of foreign languages arise? This necessity is connected, first of all, with some requirements of modern society - the development of tourism; promotion of cultural ties; strengthening cooperation between educational institutions

of Kazakhstan and other countries; increased migration due to the growth of local ethnic conflicts.

The ethno–cultural component of teaching foreign languages is not only knowledge of the culture and traditions of our state, but also the ability to conduct a "dialogue of civilizations" with representatives of another mentality, another culture through critical thinking. These tasks require students to possess a certain degree of knowledge in history and ethnography, economics and politics, the history of the language, culture and literature of their country.

The problem of university methods of teaching a foreign language is the problem of improving the speech activity of students, including speaking (monologue and dialogic speech) through the use of materials of local ethno-culture. Unfortunately, the educational material does not always contain the necessary ethnic information or cannot fully reflect the material due to the fact that it is rapidly losing its relevance. Therefore, at present there is a need to introduce additional country-specific material reflecting real facts and events in our country and abroad, as well as local history material. The involvement of material reflecting the connection with the actual events contributes to the fact that communication acquires a communicative-motivated character, since the students talk with great interest about what is especially close and understandable to them, they are satisfied that they can speak in a foreign language about events that they care about, about which they are well informed. An integral part of each lesson is the ability to work with a text in a foreign language, it allows you to implement many educational and educational tasks of the lesson.

To introduce an ethno-cultural component into the process of teaching a foreign language, we often use a communicative and situational form. We apply various situations of speech communication, situations with the application of knowledge about the language being studied and about their country. The material is selected about folk traditions and about its famous people, sights of the city of Kazakhstan, etc. On the one hand, it is very interesting and informative, and on the other, it gives students a great opportunity for further creative realization.

For a variety of teaching using the ethno-cultural component, various means are used to activate the language activity of students. As a language warm-up, crosswords, the project method, the method of learning by stations and other various methods are offered for the development of critical thinking and creativity of students.

To increase the motivation of students, we offer small dramatizations, etiquette dialogues on each of the topics studied. Today, during distance learning, it is impossible to do without visual material, such as photographs, slides, book illustrations, video clips and videos, various audio accompaniment.

In our practice, we often use the Wortigel method, the "Thought Map". The Wortigel method is a thinking and creative tool. This method is applicable for collecting and organizing thoughts, for the development of associative thinking, problem solving, etc. Wortigel is a simple technology for recording thoughts, ideas.

The collection of thoughts is fast, associative. In the center of the board, a topic is written, from which the main branches depart, where other keywords are recorded. All other ideas are arranged on the branches of these words. Branches can be painted, decorated, numbered and replaced with drawings, symbols, etc. Wortigel is the performance of the work of one person or group. This method is often used by us to systematize and repeat the material, when collecting the necessary language material, as well as during control. For example, at the initial stage of training, such topics with an ethno-cultural component are offered to create a Wortigel: "My family", "Traditional dish", "Holidays in my native country", "My University", etc. The most interesting topics are "My city", "Sights of my city", "Famous cities of Kazakhstan", "Kazakh traditional dishes", "National clothes", "Holidays and traditions" and much more.

In practice, there are exercises used by sociologists and psychologists. Such tasks are aimed at awareness and actualization of ethnic identity, for example: "Who am I?", "My business card", "Group business card", "My favorite places in my hometown", interviews, unfinished sentences. The purpose of using such exercises is to lead to further discussion and contribute to the development of both speech skills and abilities, as well as awareness of the importance of ethno–cultural values. [2, 24].

Everyone knows that today there are many electronic educational applications that can be used quite effectively in teaching foreign languages. The Learning Apps service is a public Web 2.0 application. This application is designed specifically for additional material in the learning and teaching process using interactive multimedia modules. This service was created by scientists from several European universities: the University of Education Bern (Switzerland), the University of Mainz and the University of Zittau and Goerlitz (Germany) [3]. The Learning Apps application includes several types of templates that can be conditionally divided into educational ones ("Find a pair", "Classification", "Chronological ruler", "Simple order", "Text input", "Sorting pictures", "Quiz with the right to choose an answer", "Fill in the gaps", "Audio/Video content") and educational games ("What? Where? When?", "Guess the puzzle", "Crossword puzzle", "Words from letters", "Horse Racing", "Couples"). The templates of the second group allow you to present educational material in a playful way, which increases interest in learning a foreign language and directs students to a more interesting type of activity for them. Almost all the templates of the Learning Apps service can be filled with video and audio materials, which makes it possible to use more organs of perception of information and visualize it as much as possible.

In conclusion, it should be emphasized that the use of interesting information on ethno-culture in educational and extracurricular activities contributed to the activation of cognitive activity of students and improving the quality of education. Thus, the effectiveness in the training and education of students has improved. Work with the ethno-cultural component in foreign language classes and extracurricular activities has shown that such application needs to be continued, as it significantly

increased motivation to study a foreign language and culture and significantly expanded the ethno-cultural knowledge and ideas of students.

## REFERENCES


1. Kurmanaeva D.K. Regional component as a means of multicultural personality development // Herald of L.N. Gumilyov ENU. – Astana, 2008
2. Ilyina N.A. Ethnocultural values and traditions as a factor in the socialization of personality in modern conditions: diss. cand, social sciences. – M., 2003
3. Learningapps.org [Electronic resources]. – Access mode: https://learningapps.org/about.php. – Дата обращения: 19.01.2023.


© Жусупова Г.М., Ниязбекова А.А., Нурбекова Г.Ж., 2023

**УДК 1174**

*Илмөхәмәтов А.Г., филол. ф. канд., доц.*
*ГАУ ДПО ИРО РБ., Өфө к.*

## РУХИ-ӘХЛАҠИ ТӘРБИӘ СЫҒАНАҒЫ БУЛАРАҠ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ

**Аннотация.** В статье рассматриваются вопросы этнопедагогики и возможности использования народного творчества в духовно-нравственном воспитании и формирования обучающихся общеобразовательных организаций.

**Annotation**. The article deals with the issues of ethnopedagogy and the possibility of using folk art in spiritual and moral education and the formation of students of educational organizations.

**Ключевые слова:** образование, обучение, духовно-нравственное воспитание, этнопедагогика, народное творчество, фольклор, культура, традиции, сказки.

**Key words:** education, training, spiritual and moral education, ethnopedagogy, folk art, folklore, culture, traditions, fairy tales.

Мәғариф өлкәһендә яңыртылған Федераль белем биреү стандарттарын тормошҡа ашырыу шарттарында мәктәп уҡыусыларына рухи-әхлаҡи тәрбиә биреү көнүҙәк мәсьәләгә әүерелде. Илһөйәрлек, толерантлыҡ, әхлаҡ темалары күтәрелде [ФДББС] Уҡыусыны дөйөм кешелек мәҙәниәтенә ылыҡтырыу аша рухи яҡтан үҫешкән шәхес итеп тәрбиәләүҙе күҙ уңында тотҡан белем биреүҙе гуманлаштырыу методологияһы ла яңы һулыш алды. Шул уңайҙан камертон мәҙәниәт формалаштырыу проблемаһы ла күтәрелеп сыҡты [7, 22].

Белем биреү ойошмаларында рухи яҡтан үҫешкән, толерантлы, илһөйәр шәхес тәрбиәләүҙә халыҡтың традицион мәҙәниәтенә (этномәҙәниәт) нигеҙләнеү – отошло алымдарҙың береһе буларак танылa [4, 55]. Халҡың тарихын, үҙ тамырҙарыңды белеү, халҡыңдың рухи-мәҙәни ҡиммәттәрен һәм

символдарҙы таныу рухи-әхлаҡи тәрбиәле шәхесте тәрбиәләүҙең нигеҙен булдыра, күп мәҙәниәтле һәм күп кимәлле социаль тормошта балаларҙың комфортлы йәшәйешен тәьмин итә.

Һәр халыҡ үҫеп килгән быуында ижтимағи тормошта һәм тәбиғәттә гармониялы йәшәй алған, әҙәп-әхлаҡ яғынан үҙен камиллаштырырға ынтылған, рухи яҡтан үҫешкән шәхестәр итеп күрергә теләй. Ошо маҡсатта быуаттар дауамында халыҡ педагогикаһын тәшкил иткән төрлө тәрбиә саралары тыуҙырған. Халыҡ педагогикаһының йәш быуынды тәрбиәләү өсөн иң бай сығанаҡтарының береһе – ул фольклор – ауыҙ-тел ижады. Фольклор – ул быуаттар дауамында халыҡ тәжрибәһен туплаған халыҡ аҡылы. Тап уның аша үҙенең тормошҡа ҡарашын, донъяны танып белеү үҙенсәлеген сағылдырған. Заман талаптарына яраҡлаштырып шымартып быуаттар буйына фольклор өлгөләре ярҙамында йәш быуынды тәрбиәләгән. Бала әкиәт, йомаҡ образдары аша донъяны танып белә, ҡарһүҙҙәрҙә, легендаларҙа, риүәйәттәрҙә һароуҙарына яуаптар таба, әйтешмәк, тиҙәйткестәр аша телмәрен шымарта, уйындарҙа сыныға, йолалар аша хеҙмәткә өйрәнә, байрамдарҙа эстетик зауығын үҫтерә. Дамир Вәлиев билдәләүенсә, халыҡ ижады – халыҡтың тормошо, уның үткәне, эстетик һәм этик ҡараштары, шулай уҡ идеалдары тураһында бөткөһөҙ мәғлүмәт сығанағы [1, 8].

Бала шәхесен, уның рухи-әхлаҡи сифаттарын тәрбиәләүҙә беҙ был иҫкермәҫ рухи ҡиммәттәргә мөрәжәғәт итә алабыҙ. Халыҡ педагогикаһы өлгөләре бит кешене ғүмере буйы, тыуғанынан алып ҡәбергәсә, оҙата килә.

Халыҡ педагогикаһы, әлбиттә, күп яҡлы һәм бик бай жанрлы. Мәктәптә белем биреү процесында төрлө дәрестәрҙә һәм дәрестән тыш эшмәкәрлектә киң ҡулланырға мөмкин. Ҡайһы бер фольклор өлгөләрен белем биреү процесында файҙаланыу өсөн материаль-техник саралар, махсус бина, йыһаздар, алдан әҙерлек талап ителһә, (мәҫәлән, йола байрамдарын ойоштороу, халыҡ уйындарын үткәреү, бейеү ҡуйыу һ.б.), күпселек фольклор материалын тәрбиә маҡсатында дәрестәрҙә файҙаланыу ауырлыҡ тыуҙырмай. Балалар баҡсаһында, башланғыс кластарҙа дәрестәрҙә балаларҙың телмәрен шымартыу өсөн алғыштар, һөйҙөргөстәр, тиҙәйткестәр, һанамышуҙар, үсекләшеүҙәрҙе ҡулланырға мөкин булһа, әйтештәр менән оҙылып барыусы ябай уйындар ял минуттарын ойоштороуҙа отошло. Мәҫәлән, “бутыр-бутыр бутҡа бешә”, “ун бармаҡ”, “себештәр ни әйтә” уйындары барышында балалар уйынсаҡ иркен шарттарҙа өндәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәнә, лексик берәмектәр үҙләштерә.

Әкиәттәр – хатта ололарға ла ят булмаған тылсымлы донъя. Әкиәт яратмаған бала юҡтыр. Мәктәпкәсә йәштән тәрбиә маҡсатында әкиәттәрҙе киң ҡулланырға мөмкин. Тәү ҡарашҡа ғына, әкиәт киҫкени сюжетлы фантастик әҫәр кеүек, ә ысынында иһә “ әкиәттәрҙә уйҙырма менән ысынбарлыҡ бер бөтөндө тәшкил итә. Унда һүрәтләнгән ваҡиғалар йәки образдар ни хәтле әҙәм ышанмаҫлыҡ булһалар ҙа, әкиәттең нигеҙендә реаль ысынбарлыҡ ята” [3, 246]. Әкиәт – халыҡ ижадының бик боронғо жанры, уларҙа халыҡтың характеры, менталитеты, донъяға ҡарашы сағыла, шуға күрә һәр халыҡтың тик үҙенә генә хас

әкиәттәре була. Әкиәт һәр ваҡыт яҡшылыҡ еңеүе менән тамамланған, изгелек менән яуызлыҡ көрәшенә нигеҙләнгән мауыҡтырғыс сюжетҡа ҡоролған була. Әкиәттәрҙе халыҡтың йәшерен коды тип тә атап булыр ине. Ғәҙәттә балаларҙың әкиәт геройҙарына оҡшарға тырышыуҙарын иҫәпкә алып, халыҡ был геройҙар характерына балаларында күрергә теләгән рухи ҡиммәтәрҙе һалған. Мәҫәлән, "Аҡъял батыр" әкиәтендә мөғжизәләр менән бер рәттән, буласаҡ ир-егеттәр өсөн "ғәмәли кәңәштәр" ҙә бик күп. Бәләкәйҙән үҙеңдә көс, таҫыллыҡ тәрбиәлә, белемгә ынтыл, лайыҡлы тоғро дуҫтар һайла, дуҫтарыңа ышан, дуҫлыҡҡа тоғролоҡ һаҡла, намыҫлы бул һ.б. Мәкер, көнсөллөк, ҡомһоҙлоҡ, нәфсе, үс алыу кеүек хистәрҙән юғарыраҡ булырға, ғәфү итә белергә лә өйрәтә был әкиәт. Шуныһы ҡыҙыҡлы, "Синбад-диңгеҙсе" кеүек донғя әкиәттәренән айырмалы рәүештә, башҡорт әкиәте геройҙары байлыҡҡа, власҡа ынтылмайҙар, ә ябай халыҡҡа ихлас ярҙам итергә ынтылалар, уларҙы яман түрәләрҙән, дейеүҙәрҙән, сығырсыларҙан азат итәләр. Мәҫәлән, шул уҡ Аҡъял батыр батырлыҡтары аша дан-шөһрәткә лә, байлыҡҡа ла, власҡа ла эйә була, ләкин ер аҫты донъяһы халҡын яуыз иргәйелдән ҡотҡарып, батшаһын еңеп, тыныс тормош ҡорғас, төп бурысын үтәне тип һанай һәм үҙ халҡын ярлылыҡтан ҡотҡарырға була байлығын алып, ата-әсәһенә ҡәҙер-хөрмәт күрһәтергә тыуған йортона ашыға. Бында бөйөк филсәфәүи тәрбиә идеяһы йәшеренгән – йәшәү мәғәнәһе байлыҡта һәм власта түгел, ә рухи үҫештә, рухи камиллыҡта. Хәйлә, ялған, мәкер, ғәҙелһеҙлек, байлыҡ, власть, дан-шөһрәт, нәфсе, физик һынауҙар аша үтеп, ғәфү итә белгән, тыуған яғын һөйгән, ата-әсәһен ҡәҙерләгән, игелек эшләргә һәләтле, дуҫлыҡҡа тоғро, илһөйәр кеше булып ҡалыу идеяһы. Был идея халыҡ аҡылын туплаған мәҡәлдәргә һалынған идея менән дә ауаздаш. "Үҙ илең – алтын бишек", "Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул", "Һыуға үҙәнендә, иргә илендә яҡшы" – бала саҡтан тәрбиәләнгән рухи сифаттар ярҙамында кешегә көнләшмәй, намыҫлы хеҙмәт менән хәләл икмәк табырға, үҙ эштәрең, үҙ батырлыҡтарың, изге эштәрең менән дан ҡаҙанырға өйрәтә улар. Шулай уҡ үҙеңдә төрлө ымһыныуҙарға, нәфсегә, яуызлыҡтарға ҡаршы торорҙай рухи көс тәрбиләргә ҡуша.

Хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙә лә "алдашма", "урлашма", "ғәйбәт һөйләмә", "хәрәмләшмә" нәсихәттәре ярылып ята. Хайуандар образдары аша ялғандың фашланыуы, яуызлыҡтың еңелеүе, изгелектең еңеүе, рухи көстөң физик көстән өҫтөнлөгө иҫбатлана.

Халыҡ педагогикаһында хеҙмәт тәрбиәһенә мөһим урын бирелә. "Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ", "Эшләүең кеше өсөн булғанда ла өйрәнеүең үҙең өсөн" тиелә. Тормошонда кәрәк булыр һөнәрҙәрҙе теләп үҙләштерергә өндәй. Мәҫәлән, "Әминбәк" әкиәтендә герой атаһы күҙлегенән һис кәрәкһеҙ һөнәрҙәргә өйрәнә, әммә бына тап ошо һөнәрҙәр уға тормошонда уңыштарға ирешергә ярҙам итә. Ошонда уҡ, кинәйә лә бар – һөнәр үҙләштерәһең икән, уны камил кимәлдә үҙләштер.

Шулай итеп, уҡыусыларҙы рухи-әхлаҡи тәрбиәләүҙә халыҡ педагогикаһының көслө сараһы буларак фольклор әҫәрҙәрен ҡулланыу отошло алым тип баһаларға мөмкин.

## ӘҘӘБИӘТ

1. Валеев Д.Ж. История башкирской философской и общественно-политической мысли. Основные тенденции развития. – Уфа: Китап, 2001. – 352 с.
2. Федераль дәүләт белем биреү стандарты – https://www.garant.ru/products/ipo/prime/doc/401333920/
3. Галин С.А. Народной мудрости источник. Толковый словарь башкирского фольклора. – Уфа: Китап, 2007. – 304 с.
4. Чехордуна Е.П. Героический эпос как ресурс духовно-нравственного развития и воспитания личности // Педагогика. № 6, 2012. С. 54-60.
5. Шаваева М.О. Этнопсихологический контекст современного образования // Педагогика. – 2012. – №9. – С. 71-74.
6. Журнал «Ватандаш». – 2009-2012. –. № 1-12.
7. Маджуга А. Г., Воровщиков С. Г., Головнева Е. В., Салимова Р. М. Камертонная культура человека: концептуальные подходы к изучению феномена // Перспективы науки и образования. 2019. № 6 (42). С. 20-30. doi: 10.32744/pse.2019.6.2


© Ильмухаметов А.Г., 2023

**УДК 372.8**

*Иманғолова И.Б., студент*
*Ғилми етәксеһе: Таһирова С.А., пед. ф. канд., доц.*
*М. Акмулла ис. БДПУ, Өфө к.*

# ДӘРЕСТӘН ҺУҢҒЫ ЭШМӘКӘРЛЕКТӘ УҠЫУСЫЛАРҘЫҢ ЛИНГВИСТИК БЕЛЕМЕН ҮҪТЕРЕҮ

**Аннотация.** В статье рассматриваются пути деятельности педагога в процессе формирования лингвистической компетенции обучающегося. В процессе формирования лингвистической компетенции важным является развитие личности обучающегося, его умение использовать знания о системе изучаемого языка. Предлагается система упражнений, направленная на формирование лингвистической компетенции на уроках башкирского языка и литературы.

**Annotation.** The article discusses the ways of the teacher's activity in the process of forming the linguistic competence of the student. In the process of forming linguistic competence, it is important to develop the student's personality, his ability to use knowledge about the system of the language being studied. A system of exercises aimed at the formation of linguistic competence in the lessons of the Bashkir language and literature is proposed.

**Ключевые слова:** внеурочная деятельность, лингвистическая компетенция, словари.

**Key words:** extracurricular activities, linguistic competence, vocabulary.

Башҡорт теле дәрестәрендә дәрестән тыш эшмәкәрлектә лингвистик компетенцияны үҫтереү характерындағы эштәр төрлө темаларҙы үткәндә уңышлы рәүештә ҡулланылырға мөмкин. Һәр тел дәресенең мөһим бер өлөшөн алып торған һүҙлек эштәре шулай уҡ, был ҡарамаҡҡа, лингвистик эш сифатында ҡаралыуы мөмкин.

VI класта программа материалындағы һүҙлек эше үҙе үк лингвистик анализ һыҙаттары менән байытыла ала. Мәҫәлән, дәрестән тыш эштәрҙә лексик төшөнсәләрҙе өйрәнгәндә алып барылған һүҙлек күнекмәләре ижади эштәрҙең мөһим бер өлөшө булып һанала.

Хәҙерге методика ғилемендә һүҙлек эшен алып барыу йүнәлешендә лексик-семантик һәм орфографик характерҙағы күнегеүҙәр системаһын айырып йөрөтәләр. Уларҙы дәрестән тыш эштәрҙә берәй яҙыусының әҫәре нигеҙендә телде өйрәнеү процесында берләштереп алып барыу уңышлы алым булып тора.

Һүҙлек менән эште күҙаллаған семантик күнегеүҙәр системаһы һәм орфографик характерҙағы һүҙлек эше баланың тел шәхесен тәрбиәләү һәм дөрөҫ яҙыу һәләтен тәрбиәләүҙе билдәләй, улар дүрт аспектта бер-береһенә бәйләнә:

1) орфоэпик;

2) лексик-семантик;

3) орфографик;

4) синтаксик;

Башҡорт теле дәрестәрендә һүҙлек эшендәге күнегеүҙәр системаһы ошо дүрт йүнәлештә алып барыла. Төрлө темаларҙы үткәндә уларҙы берләштереп телдең бөтә ҡатламдары буйынса ла белем биреү – уҡытыусының мөһим бурысы.

Әлбиттә, иң тәүҙә уҡыусы һүҙҙең орфоэпик йөҙө менән таныша. Балалар һүҙҙе дөрөҫ әйтергә өйрәнергә тейеш. Орфоэпик һүҙлек эше башланғыс кластарҙа айырыуса ентекле үткәрелә. Айырым һүҙ таҡтаға яҙыла, класс уны берҙәм рәүештә телдән уҡытыусы артынан ҡабатлап әйтергә тейеш.

Лексик-семантик характерҙағы күнегеүҙәр башҡорт телен уҡытыуҙың бөтә мәктәп курсында киң файҙаланыла. Уҡытыусы балалар менән берлектә һүҙҙең лексик мәғәнәһен асыҡлай, тәүҙә балалар үҙ аллы эшләй (был осраҡта уҡытыусы уҡыусыларҙың белемдәренә, танып-белеү эшмәкәрлегенә таянып эш итә) унан һүҙлектәр ҡулланыла. Был осраҡтарҙа “Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге”нә мөрәжәғәт итергә мөмкин.

Һүҙең лексик мәғәнәһе өҫтөндә эш түбәндәгесә барырға мөмкин:

1) һүҙҙең этимологияһына төшөнөү;

2) һүҙҙең тамырының мәғәнәһенә мөрәжәғәт итеү һәм уның морфемаһының семантикаһын аңлатыу;

Мәҫәлән, дәрестән тыш лексик төшөнсәләрҙе өйрәнгәндә балаларға һүҙлектәр менән эш итергә өйрәтеү ҡаралған. Шул уҡ ваҡытта, уҡытыусы, айырым яҙыусының ижадына нигеҙләнеп, был тарафта лексик-семантик

характерҙағы һүҙлек эшен тәҡдим итергә мөмкин. Ул һүҙлектән берәй һүҙҙең аңлатмаһын уҡып күрһәтә, унан дәреслеккә бирелгән ҡушымталағы һүҙлекте күрһәтә. Унан уҡыусылар яҙыусының ижад емешенән таныш булмағна һүҙҙәрҙе табып, уларға аңлатма эҙләй.

Уҡытыусы һүҙлектә ниндәй ҙә булһа берәй һүҙҙең аңлатмаһы шул һүҙҙең ҡаршыһына мәҡәлә итеп бирелеүен аңлата. Был иһә аңлатмалы һүҙлек – һүҙҙәр тураһындағы мәҡәләләр йыйынтығын тәшкил итә тигән һүҙ. Миҫал өсөн *булдыклы, ҡуляулыҡ* һүҙҙәренең аңлатмалырын уҡырға. Ҡушымталағы *ҡ* хәрефе менән бирелгән һүҙҙәр тураһындағы мәҡәләләрҙе уҡырға. Был осраҡта уҡытыусы түбәндәге типтағы һорауҙар бирергә мөмкин: һүҙлектәге мәҡәлә ниндәй киҫәктәрҙән тора? һорауҙы түбәндәгесә лә ҡуйырға мөмкин: “Аңлатмалы һүҙлек”тең һүҙ тураһындағы мәҡәләһенән һүҙҙең мәғәнәе һәм килеп сығышы хаҡында нимә белдек? Аңлатмалы һүҙлеккә ниндәй маҡсат менән мөрәжәғәт итәбеҙ.

Артабан лексик характерҙағы күнегеүҙәр эшләү барышында уҡытыусы Ғ.Б. Хөсәйеновтың “Батырҙар ҡиссаһы” (7-се класс) әҫәренә мөрәжәғәт итеп, ундағы таныш түгел һүҙҙәрҙең лексик-семантик асылын асыҡларға өйрәтә. Мәҫәлән, *“тәҡдир”* һүҙенә этимологик күҙәтеү үткәреү ҡаралған. Уҡытыусы балаларҙан был һүҙгә ҡағылышлы белемдәрен һорай. Унан һүҙҙең мәғәнәләрен, синонимдарын табыу буйынса үҙ аллы ижади эш үткәрелә.

*Тәҡдир* – кешенең күрәсәге, алдағы ғүмер юлының билдәләнеше мәғәнәһендәге ғәрәп һүҙе. Уның синонимдары – *яҙмыш, өлөш, күрәсәк.*

Ижади эш һөҙөмтәһендә был тел берәмегенең мәғәнәһенә төшөнөү уҡыусының тел аңын киңәйтеп кенә ҡалмай, ә абстракт лексиканың бәйле ассоцияларын һәм фекерләү кимәлен дә һүҙлек эше ярҙамында үҫтерергә ярҙам итә.

Һүҙлек эшенә хас лексик-семантик күнегеүҙәр дәрестән тыш эшмәкәрлектә айырыуса киң ҡулланыла.

Балаларға Ғ.Б. Хөсәйеновтың “Батырҙар ҡиссаһы” нигеҙендә айырым һүҙҙәрҙән торған күнегеү бирелә. Уҡыусылар З. Ураҡсиндың “Башҡорт теленең синонимдар һүҙлеге”н файҙаланып, уларҙың бер-нисә синонимын яҙырға тейеш.

| Бирелгән һүҙҙәр | Синонимдар |
|---|---|
| *шатлыклы* | *ҡыуаныслы, һөйөнөслө;* |
| *матур* | *һылыу, зифа;* |
| *бала* | *бәпес, бәләкәс, кескәй;* |
| *тағыу* | *эләктереү, бәйләү, ҡушыу;* |

Шундай уҡ күнегеүҙе антонимдар төшөнсәһен аңлатҡанда ла тәҡдим итергә була.

Дәрестән тыш эшмәкәрлектә бының менән генә һүҙлек эше тамамланмай. Лексик-семантик күнегеүҙәрҙә балының һүҙ мәғәнәһенә төшөндөрөү һәм уны телмәрҙә урынлы ҡулланаырға өйрәтеү айырыуса мөһим. Төрлө һүҙҙәрҙең этимологик мәғәнәһенә төшөнөү лексик-семантик һәм синтаксик йүнәлештәге күнегеүҙәрҙе һүҙлек эшендә актив файҙаланыу мөмкинлектәрен аса. Һәр һүҙҙең

мәғәнәһенә төшөндөргәс, уҡыусыны уны контекста ҡулланыу юлдарына өйрәтергә кәрәк. Был осраҡта балалар төрлө текстарҙы өйрәнгәндә һүҙҙең мәғәнәүи бәйләнештәрен ҡарай, уның урынына синонимдар ҡуллана, тел берәмегенең антонимдарын таба. Һүҙҙе яҙма телмәрҙә ҡулланырға өйрәтеү маҡсатында уҡытыусы тарафынан ижади эштәр, орфографик характерҙағы һүҙлек диктанттары тәҡдим ителә.

Урта кластарҙа ижади һүҙлек эшенең бер алымы булараҡ һүҙгә бөтә яҡлап анализ яһауҙы файҙаланырға мөмкин.

Был эштең төп асылы – айырым бер һүҙҙең фонетик, лексик, грамматик, стилистик һәм башҡа сифаттарын асыҡлау, артабан балаларҙы был тел берәмегенең башҡа һүҙҙәр менән бәйләнешенә төшөндөрөү. Был тел күнекмәләр уҡыусыларға белемде ҡабатлау мөмкинлеген бирә, тел һәм һүҙ тураһындағы белем уларҙың хәтерендә ныҡына бара.

Һәр класҡа өйрәнелгән материалдың күләменә ҡарап һүҙгә дөйөм анализ буйынса күнекмәләрҙең төрлө варианты бирелә. Мәҫәлән, VI класта ул түбәндәгесә булырға мөмкин: һүҙҙең лексик мәғәнәһен билдәләү, һүҙлек буйынса этимологияһын аңлатыу (матур) сифат+исем тибындағы һүҙбәйләнеш төҙөү (*матур өй*); синонимдар табыу (*зифа; һылыу*); һүҙ күсмә мәғәнәлә файҙаланамы? (*матур* һүҙе файҙаланылмай); фонетик анализ; һүҙ төркөмөн билдәләү (*матур* – сифат); һүҙгә составы буйынса анализ (*матур* – тамыр һүҙ); һүҙҙең стилистик сифатын күрһәтеү (ниндәй төр лексикаға ҡарай?);

Уҡытыусы етәкселегендәге эш балаларҙың һүҙгә анализдың төп принциптарына төшөнөүен күрһәткәндән һуң үҙ аллы эштәр тәҡдим итергә була. Был эштте тамамлап уҡыусылар һүҙ тураһында инша яҙа.

Систематик характерҙағы ижади һүҙлек эшен алып барыу башҡорт телен мәктәптә уҡытыу процесында уҡыусыларҙың фәнни анализға булған ҡыҙыҡһыныуҙарын арттыра, уларға һүҙлек запасын байыта, телмәрен үҫтерә.

Шулай итеп, лингвистик компетенцияны үҫтереү күнекмәләре аша уҡыусылар төрлө һүҙ төркөмдәренә ҡараған һүҙҙәргә грамматик анализ яһау уларҙы әҙәби тел миҫалында күрергә өйрәнә. Уҡыусылар лингвистик төшөнсәләрҙең билдәләрен төрлө телмәр ситуацияларында айырырға өйрәнә.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Аҙнағолов Р.Ғ. Уҡыусы шәхесен үҫтереүҙең лингводидактик нигеҙҙәре. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1991. – 321 бит.
2. Ғәбитова З.М. Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-се класы өсөн “Башҡорт теле” дәреслегенә методик күрһәтмәләр. – Өфө: Китап, 2003. – 120 бит.
3. Ғәбитова З.М., Таһирова С.А. Башҡорт теле: башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған башланғыс һәм урта профессиональ белем биреү учреждениеларының I курс студенттары өсөн. – Өфө: Китап, 2010. – 192 бит.
4. Дәүләтшина М.С. Башҡорт телен уҡытыу методикаһы. – Өфө: Китап, 2010. – 128 бит.

5. Ғәбитова З.М., Усманова М.Ғ. һ.б. Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 7–се класс уҡыусылары өсөн дәреслек. 3-сө баҫма, яңыртылған. – Өфө: Китап, 2007. – 152 бит.
6. Усманова М.Ғ. һ.б. Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5–се класс уҡыусылары өсөн дәреслек 3-сө баҫма. – Өфө: Китап, 2006. – 224 бит.
7. Хисаметдинова Ф.Г., Эрсен-Раш М., Ураксин З.Г. Учим башкирский язык. – Уфа: Китап, 1997. – 192 с.

© Иманғолова И.Б., Таһирова С.А., 2023

**УДК 821.512.141**

*Иргалина И.И., студент*
*Ғилми етәксеһе: Нәбиуллина Г.М., филол. ф. канд., доц.*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

## ФӘРЗӘНӘ АҠБУЛАТОВАНЫҢ БАЛАЛАР ӨСӨН ЯҘҒАН ӘҪӘРҘӘРЕНЕҢ ИДЕЯ-ТЕМАТИК ЙӨКМӘТКЕҺЕ

**Аннотация.** В статье рассмотрена актуальная задача современности – проблема социального сиротства в произведении Ф. Акбулатовой. Сложнейшее явление общества автор раскрывает с помощью переживаний своего маленького героя. В связи с этим, акцент делается на художественную деталь, который углубляет внутреннюю драму мальчика.

**Annotation.** The article considers the actual task of our time - the problem of social orphanhood in the work of F. Akbulatova. The author reveals the most complex phenomenon of society with the help of the experiences of his little hero. In this regard, the emphasis is on artistic detail that deepens the boy's inner drama.

**Ключевые слова**: Инсаф, дети, воспитание, любовь, роль мамы в жизни ребёнка, вера в чудо.

**Key words**: Insaf, children, upbringing, love, mother`s role in a child`s life, faith in a miracle.

Балалар тормошона бағышланған, балаларға уҡыу өсөн тәғәйенләнгән әҫәрҙәр башҡорт балалар әҙәбиәтендә байтаҡ. Бала тәрбиәләү – һәр заман өсөн көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһе. Һәҙиә Дәүләтшина, Зәйнәп Биишева, Жәлил Кейекбаев, Мостай Кәрим, Әнүәр Бикчәнтәев, Фәрит Исәнғолов, Динис Бүләков кеүек билдәле яҙыусылар ҙа ваҡытында үҙҙәренең ижадында балалар темаһына ҙур иғтибар бирә. Уларҙың балалар өсөн яҙылған хикәйәләр, экиәттәр, повестарында күтәргән проблемалар бөгөн дә актуаллеген юғалмай.

Улар менән бер рәттән Фәрзәнә Аҡбулатова ла үҙенең бик күп ижад емештәрен балаларға бағышлай, замандың көн ҡаҙағына һуҡҡан мәсьәләләре әҙибә әҫәрҙәрендә сағылыш таба. Уларҙың күбеһе "Аҡбуҙат" журналдарында

баҫылып тора. Беҙҙең ҡарамаҡҡа, иң билдәлеләре – "Дуҫлыҡ", "Тамсыҡай", "Йомроҡай", "Аҡбай мажаралары" һб.

Араларында иғтибарҙы үҙенә йәлеп иткәне, моғайын, "Серле туҫтаҡ" хикәйәһелер. Әҫәрҙә бөгөнгө көндәрҙә лә киң таралған күренеш – атайһыҙ йә әсәйһеҙ ҡалған, йәғни тулы булмаған ғаиләлә тәрбиәләнеүсе балалар проблемаһы, уҫал, яуыз үгәй атаһының ролен башҡарған Әкрәм өсөн үҙ әсәһенән айырым тороусы Инсаф исемле малай хаҡында һүҙ алып барыла. Инсаф үҙенә күрә күңелсәк, ҙур уй-хыялдар менән йәшәүсе үҫмер.

Түбәндәге бәләкәй генә өҙөктә, Зилә исемле персонаждың телмәрендә күңелде ярып үтерлек тетрәндергес һүҙҙәр яңғырай: "Фәрештә күңелле баланы иблискә алмаштырҙың, Гөлзифа. Әсәнән тыуған сабыйҙың күңеле пак була ла һуң? Әкрәм кейәүҙең ошондай сағы булмаған тиһеңме ни? Ҡасан әүерелгән ул иблискә? Эйй-й.... эскелек арҡаһында бер беҙҙең кейәү генәме һуң йәнен шайтанға һатҡан...." [1].

Зиләнең йәне әрнеп тә, күңеле эсенән тетрәнеп яңғыраны был һүҙҙәрҙә хикәйәнең төп идеяһы асыла. Әрнеү эсендә әллә күпме мәғәнә, йәш ҡатындарҙың, уларҙың баларының күҙ йәҙ йәшенең сәбәбсеһе булып ғаилә башлыҡтарының эскелеккә бирелеп китеүе тора. Йәшел йылан менән ағыуланған кеше бөтә ғаиләһен рухи һәм физик ауырлыҡтарға усар итә.

Бала күңеле быяла һауыт кеүек – бер ватылһа йүнәтеп булмай, була ул, тик элекке ҡиәфәтенә ҡайтарып булмай, сөнки ватылған урындары күренәсәк. Бала күңеле менән дә шулай уҡ, бигерәк тә кесе йәштәге балалар өсөн. Әле алһыу, янып торған күҙҙәрҙең нурын ҡабыҙһаң кире ҡайтарыуы бик ауыр була.

Бала кешегә күп кәрәк тә түгел инде, өйҙә йылы аштарын бешереп көткән әсәй кәрәк. Инсаф та шулай, әсәйенең өйгә ҡайтыуын теләй ине, тәҙрә төбөндә көтөп тора ине. Әсәһен һағынып, юҡһынып көтә ине, һөйләр, уртаҡлашыр хәбәрҙәре лә йыйылып киткән ине. Улының һағыныуы ни, әсәһенең хәбәр тыңлау түгел килеп күреп китергә ваҡыты ла юҡ ине.

Инсафтың нисек кенә юҡһыныуын берәүҙә белмәй ине, унең нимәләр кисергәнен ул үҙе генә белә. Барып әсәһен үҙе күрә алмай, сөнки үгәй атаһынан ҡалтырай. Әсәһе быға тиклем саҡырып ала торғайны яндарына, әммә һуңғы арала онотто. Инсаф өсөн яҡын кешеләренең береһе тик өләсәһе генә ине.

Әсәй кеше, бары әсәй инде бала өсөн, Инсаф әсәһен бик тә ярата, ул янда булған мәлдәрҙе иҫенә төшөрөп ала.

Гөлзифа әсәһенән килеп йыш ҡына сынаяҡтар ала, сөнки өйҙәгеләрҙе Әкрәм онтап тора. Шуға күрәлә Инсаф серле туҫтаҡ эшләргә тырыша, унең ышаныуы буйынса серле туҫтаҡ әсәйен ҡайтарырға ярҙам итәсәк.

“Хикәйә һәм повестарһың бер жанр формаһына ғына хас индивидуаль компонеттары булған кеүек, барлыҡ бәләкәй һәм урта жанрҙарға ла хас дөйөм компонеттар ҙа бар. Композицияның ҡайһы бер элементтары, художестволы деталь...” [3, 107]. Серле туҫтаҡ – был әҙәби деталь функцияһын башҡара әҫәрҙә, унең аша баланың проблемаһын образла итеп уҡыусыһына еткерә алған яҙыусы.

Серле туҫтаҡҡа тотоноп мәктәптән һүң ҡайта башланы, сөнки ағас менән эш итеү еңел эш түгел. Инсаф ҡуйманы, серле туҫтаҡты эшләп ҡуйҙы һәм туҫтаҡ әсәһен ҡайтарырына ул ысынлап та ышана. Әсәһенең килеүен ул түҙемһеҙлек менән көтә.

Шулай бер көн әсәһе бал артынан килеп етә һәм Инсаф бүләген сығарып тапшыра. Әсәһенә оҡшай бүләк, алып ҡайтасағын әйткәс, Инсаф аңламай ҡала. Нисек инде алып ҡайта, әсәй минең менән ҡалырға тейеш ине, тигән уйҙар солғап ала уны. Бүләген кире тартып алда, әсәһе лә нимә булғанын аңламай ҡала.

Өләсәһе туҫтаҡты ҡосаҡлап:" Элек бындай һауыттар бик күп була торғайны, магазинда ғына һауыт-һаба күбәйгәс ағас һауыттарҙы онотталар. Ә бит ағас һауыттан тамаҡ күпкә тәмлерәк, үҙебеҙ ҡулланырбыҙ, ҡоротлап һурпа эсербеҙ", - ти.

Әйтелгәндәрҙән күренеүенсә, яҙыусы бында “предмет донъяһынан идея кимәленә күтәрелеү” [4, 13] юлын һайлай. Художестволы деталгә ҙур мәғәнә һалып, әҫәрҙең идеяһын тулыһынса аса.

"Серле туҫтаҡ" хикәйәһе эсендә әсә менән бала араһындағы мөнәсәбәт, бала кешенең борсолоуҙары, йә атайһыҙ, йә әсәйһеҙ ҡалып үгәй атай-әсәй янында тәрбиәләнеүҙәре тураһында һүҙ бара. Инсаф етем бала түгел, уның әсәһе бар, тик үгәй атаһы уны яратмағанға күрә өләсәһендә тәрбиәләнергә мәжбүр. Әсәһе Инсаф тип өҙәлөп бармай, әммә шуға ла ҡарамаҫтан, бала кеше әсәһен ярата һәм өйгә ҡайтыр тип, бер өҙлөкһөҙ көтә.

Беҙҙеңсә, бала кеше һәр ваҡыт бала булып ҡала, ниндәй генә ваҡыт булыуына ҡарамаҫтан. Һәр балаға ата-әсә мөхәббәте, иғтибары кәрәк. Фәрзәнә Аҡбулатова бала күңелен, психологияһын аңлап ижад итә. Бәлки шуға ла кескәй геройҙарыбыҙ беҙҙең күҙ алдына үҙ сифаттары менән ысын образ булып ойоша ала. Инсаф шул тиклем "серле туҫтаҡҡа" ышана, был ышанысын бер ҡасан да юғалтмай.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Акбулатова, Ф.Ф. Атай икмәге. – Өфө: Китап, 1993. – 144 бит.
2. Йомроҡай. Фәрзәнә Аҡбулатова. Әкиәт [Электронный ресурс]: Аҡбуҙат // Режим доступа: https://akbuzat-rb.ru/articles/ki-t-ilen-s-y-kh-t/2020-10-15/yomro-ay-f-rz-n-a-bulatova-ki-t-1663333. – Дата обращения: 11.01.2023.
3. Нәбиуллина Г.М. 70-90-сы йылдар башҡорт повестары һәм хикәйәләренең поэтикаһы: Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте фәне буйынса уҡыу әсбабы. – Өфө; БДПУ, 2002. – 140 бит.
4. Нәбиуллина Г.М. Рәшит Солтангәрәев прозаһының поэтикаһы: монография. – Өфө; БДПУ, 2007. – 132 бит.


© Иргалина И.И., Нәбиуллина Г.М., 2023

**УДК 372.882**

*Ирғәлина З.А., студент*
*Ғилми етәксеһе: Ғәлина Ғ.Ғ., филол. ф. канд., доц.*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

# БАЙМАҠ РАЙОНЫ ФОЛЬКЛОРЫ ЯРҘАМЫНДА УҠЫУСЫЛАРҘА ЭТНОМӘҘӘНИ КОМПЕТЕНЦИЯЛАР ФОРМАЛАШТЫРЫУ

**Аннотация.** В статье рассматриваются пути формарования этнокультурной компетенции обучающихся посредством изучения местного фольклора. Отмечается, что локальные легенды и предания способствуют патриотическому воспитанию.

**Annotation**. The article discusses the ways of forming the ethno-cultural competence of students through the study of local folklore. It is noted that local legends and traditions contribute to patriotic education.

**Ключевые слова.** этнокультурная компетенция, фольклор, легенды, воспитание

**Key words:** ethno-cultural competence, folklore, legends, education

Бөгөн, элекке ҡиммәттәр юҡҡа сыҡҡан, яңы әхлаҡи күрһәткестәр эҙләү дәүерендә, йәш быуынды үҙ аллы тормошҡа әҙерләүҙең нигеҙе булып этномәҙәни традицияларҙы нығытыу, компетенциялар формалаштырыу тора. Этномәҙәниәт – теге йәки был этнос вәкилдәренең ижтимағи-мәҙәни үҫеше барышында барлыҡҡа килгән рухи, милли һәм эстетик байлыҡтарының йыйылмаһы, һәр бер халыҡтың быуаттар буйы тупланған бай хазинаһы. Уҡытыуҙа этномәҙәни материалды ҡулланыу – ул үткәнде тергеҙеү, уҡытыу-тәрбиә процесында уҡыусыларҙың белемен, һәләтен һәм оҫталығын үҫтереү, йәмғиәттә үҙ урынын табырҙай шәхес тәрбиәләй алырлыҡ халыҡ педагогикаһы алымдарын индереү ул.

Башҡорт халҡының фольклоры мәҙәниәтебеҙҙең, сәнғәтебеҙҙең бай һәм үҙенсәлекле тармағын тәшкил итә. Унда халҡыбыҙҙың тарихы, традициялары һәм йолалары, фәлсәфәүи ҡараштары, идеялары, тел байлығы сағылыш тапҡан [2, 16]. Ә үҙ халҡыңдың, үҙең тыуған төбәктең мәҙәниәтен һәм тарихын, рухи ҡомартҡыларыбыҙҙы өйрәнмәйенсә, йәш быуында туған теленә һәм иленә һөйөү тәрбиәләү мөмкин түгел. Фольклор әҫәрҙәре, бала күңелендә әҙәплелек, тәүфиҡлылыҡ, намыҫлылыҡ кеүек юғары әхлаҡ сифаттары тәрбиәләүҙә нигеҙ булып тора.

Белем биреүҙең Федераль дәүләт стандартарында ҡабул ителгәнсә, бөгөнгө көндә уҡыусыларҙа белем, оҫталыҡ, күнекмә булдырыу урынына төрлө компетентлыҡтар формалаштырыу ҡаралған. Мәктәпте тамамлаусы йәштәрҙең киләсәге ошо компетентлыҡтарҙың ниндәй дәрәжәлә үҫешкән булыуы менән бәйле.

Дәрестә этномәҙәни компетентлыҡты формалаштырыуҙың төп бурыстары:

– үҙ милләттебеҙгә генә хас тарихи-мәҙәни мираҫыбыҙҙы, милли үҙаңды үҫтереү;

– дөйөм кешелек ҡиммәттәре менән бер рәттән, туған халҡың өсөн генә хас булған ҡиммәттәрҙе үҙләштереү;

– халҡыңдың телен, мәҙәниәтен, әҙәбиәтен, тарихын, традицияларын һәм башҡаларҙы өйрәнеү.

Тимәк, тарихи тамырҙарыбыҙҙы белеп, өйрәнеп, киләсәк быуынға еткереү – беҙҙең мөҡәддәс бурысыбыҙ. Уҡыусыларҙа ата-бабаларҙан тапшырылған аманат өлгөһөндә тәрбиәләргә теләйбеҙ икән, мотлаҡ халыҡ ижадынан оло һабаҡ үрнәктәренә мөрәжәғәт итеү кәрәк.

Уҡыусылар өсөн халыҡ ижады үрнәктәренең тәрбиәүи әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Халыҡтың әкиәттәре, киң ҡоласлы йырҙары, тәрән фәлсәфәүи йөкмәткеле әйтемдәре, тапҡыр мәҡәлдәре, үҙенсәлекле йомаҡтары йәш быуында этномәҙәни компетенциялар формалаштырыуҙа ҙур роль уйнай. тәрбиәләүҙә Ғалим, әҙәбиәт белгесе Ғ.С. Ҡунафин: «Беренсенән, улар беҙҙе үткән замандарҙа булған һәм бынан һуң бер ҡасан да элек нисек булған шул килеш ҡабатланмаясаҡ ижтимағи мөнәсәбәттәр, тарихи хәл-ваҡиғалар менән таныштыра, икенсенән, унда дөйөм кешелеккә хас булған, уны быуаттар буйына уйландыра, борсой һәм ҡыуандыра килгән идеялар, төшөнсәләр сағылыш таба», – ти. [3, 15].

Әҙәбиәт дәрестәрендә башҡорт халҡының фольклоры өйрәнелә. Халыҡ ижадының бай йөкмәткеле әҫәрҙәре халыҡ тормошон, көнкүрешен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, әхлаҡ нормаларын, азатлыҡ өсөн көрәшен, илһөйәрлек һәм халыҡтар дуҫлығы тойғоларын, эстетик ҡараштарын сағылдырып, гармоник үҫешкән шәхесте формалаштырыуға хеҙмәт итәләр. Программала халҡыбыҙҙың данлы тарихына ҡағылышлы, йола-ғәҙәттәре, мифологияһы, тел, музыка, йыр-бейеү, театр жанрҙары ла үрелеп бара. Был жанрҙар халҡыбыҙҙың этник мәҙәниәтен төрлө яҡлап өйрәнеүгә ярҙам итә.

Әммә ерле материалдар, үҙ төбәгеңдең фольклоры балалар күңеленә бик яҡын була, уларҙы ла өйрәнеү кәрәк. Этномәҙәни компетенцияларҙы формалаштырыу милли төбәк компонентын өйрәнеүҙән башлана.

Баймаҡ районы Башҡортостандың иң гүзәл хозур тәбиғәте һәм иҫ киткес талантлы кешеләре менән айырылып торған төбәк. Был төбәктә халыҡ хәтерендә йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр ҙә һаман да ныҡлы һаҡлана, һуңғы ваҡытта ҡайһылары тергеҙелә.

М. Бураҡаева: «Иң мөһиме – үҙ тамырыңдан айырылмау. Тәрбиә эше үҙ тамырың нигеҙендә барырға тейеш. Сөнки төп маҡсатың тамырың тоташҡан халыҡ маҡсаты менән тап килгәндә генә һин үҙеңде юғалтмайһың. Йәшәйештә үҙеңде юғалтмауҙан да ҙурыраҡ ҡаҙаныш юҡ», - тип иҫәпләй [1, 78].

Дәрестәрҙә уҡыусыларҙы үҙебеҙҙең тарих, мәҙәниәт, ғөрөф-ғәҙәттәр менән таныштыра алабыҙ. Райондан һәм ҡаланан сыҡҡан күренекле шәхестәребеҙ менән таныштырып, осрашыуҙар ойошторороға мөмкин.

Уҡыусыларҙың таныпбелеү әүҙемлеген һәм милли үҙаңын үҫтереүгә йүнәлдерелгән эштәр ойошторорға була. Үҙ халҡыңдың мәҙәниәте аша республикала йәшәүсе башҡа халыҡтарҙың тарихына, мәҙәниәтенә, традицияларына ихтирам хисе тәрбиәләнә. Дәрестән тыш эштәр, районда һәм ҡалала үткәрелгән төрлө саралар ҙа балаларҙа этномәҙәни компетенциялар формалаштырыуға йоғонто яһай.

Һуңғы арала республикала Тәбиғәткә бәйле «Нардуған», «Ҡарға бутҡаһы», «Кәкүк сәйе», «Муйыл сәйе», «Япраҡ сәйе» кеүек байрамдар өйрәнелә һәм үткәрелә. Ҡолоҡ мәлдәрендә ямғыр теләүгә сығыуҙар, «Ҡар һыуына барыу», «Ҡатыҡ тәмләшеү», «Кейеҙ баҫыу йолаһы» кеүек байрамдар ҙа тергеҙелә. Баймаҡ районында «Мәргән уҡсы» традицион яндан уҡ атыу буйынса ярыштарҙа ҡатнашыусылар ҙа күбәйҙе. Хатта ошондай төрлө сараларҙа тамашасы булараҡ ҡына ҡатнашыу ҙа, уҡыусылар күңелендә тәрән эҙ ҡалдыра.

Яҡташтарыбыҙ үҙҙәренең бай тарихына, милли мәҙәниәтенә битараф түгел. Беҙҙең Баймаҡта «Ҡурай» музейы бар. Был музей районды ғорурлығы булып тора, унда бай экспонаттар, тарихи ҡомартҡылар туплаған. Ҡурайға өс һәйкәл дә ҡуйылған. Беренсеһе – Төркмән ауылы эргәһендәге Туғажман тауы башында, икенсеһе – Ишмырҙала, өсөнсөһө – республикаға, районға бик күп талантлы йырсылар, бейеүселәр, ҡурайсылар үҫтергән, билдәле шәхестәре менән дан тотҡан Буранбай ауылында. Мотлаҡ рәүештә был музейға, һәйкәлдәргә экскурсияға барыу, өс һәйкәлде күреү кәрәк. Шулай уҡ ошондай экскурсиялар мәлендә башҡорт халыҡ әкиәте «Ҡурай»ҙы һөйләп китһәң дә, әсә һөтөнөң, ҡурай моңоноң ни тиклем әһәмиәткә эйә булғанлығын аңларға мөмкин.

Уҡыусылар менән үҙ яғыңдың фольклор әҫәрҙәрен йыйыу, туплау кеүек тикшереү эштәре лә үткәрергә була. Йыйылған материалдарҙы матбуғат биттәрендә баҫтырып сығарырға, альбомдар эшләргә, интернет биттәрендә сайт йәки төркөмдәрҙә күрһәтергә була. Уҡыусылар бындай тикшереү эштәре менән конференцияларҙа сығыш яһайҙар, конкурстарҙа ҡатнашалар.

Үҙенең тыуған ерен, йәшәгән өйөн, әсәһенең телен яратҡан бала ғына үҙенең тыуған ере менән ғорурлана, уның өсөн яуаплылыҡ хисе тоя ала. Ә ғорур кеше – ирекле шәхес, ул бер ҡасан да дәрәжәһен юғалтмай.

Ә беҙҙең республикабыҙҙа Баймаҡ кеүек ғорурланырлыҡ урындар, тарихи иҫтәлектәр, өлгө алырлыҡ шәхестәр ҙә етерлек.

Ғөмүмән алғанда, халыҡ ижадының һәр бер жанры – иҫ киткес көслө тәрбиә сараһы, тик уны белергә һәм ҡулланырға ғына кәрәк. Халыҡ ижады, йолалары, традициялары менән һуғарылып үҫкән бала киләсәктә рухи яҡтан бай, физик яҡтан камиллашҡан, илебеҙҙең ышаныслы киләсәге булып үҫәсәк.

## ӘҘӘБИӘТ

1. Бураҡаева М.С. Арғымаҡ. Күңел донъяһына сәйәхәт. – Өфө: Китап, 2005. – 344 бит.

2. Галин С. Ә. Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады. - Өфө: Китап,2004. – 392 бит.

3. Юлмөхәмәтов М.Б., Ҡунафин Ғ.С. «Башҡорт әҙәбиәте» дәреслегенә методик ҡулланма. – Өфө: Китап, 2017. – 404 бит.


© Ирғәлина З.А., Ғәлина Ғ.Ғ. 2023

**УДК 821**

*Искужина Г.И., студент*
*Ғилми етәксеһе: Әлибаев З.А., филол. ф. канд., доц.*
*М.Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө к.*

## БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ ЙОЛАЛАРЫ

**Аннотация.** Кто изучал традиции и обычай? Какие виды обычай бывают? Обычай одной деревни. Все это рассматривается в данной статье.

**Annotation.** Who studied traditions and customs? What kind of custom are there? Custom of one village. All this is considered in this article.

In the author's artistic picture of the world there are such key moments as: space, time and the storyline, which can be fictional, that is, they are a figment of the imagination, or real, describing some specific episode from a person's life, or contain both those and other characteristics together. The cognitive approach helps us to reconstruct or identify fragments or elements of the content of the author's worldview – concepts. Cognitive linguistics helps us to look at the work of many authors in a new way, because when analyzing literary texts, we can understand not only the specifics of the author's worldview, his conceptual sphere, but also learn in a new way about the conceptual sphere of a certain era from a particular people, of which this writer is a representative.

The sequence of mastering national worldviews in the works of writers of the peoples of Russia will be shown by the example of the work of several national writers, based on the theory proposed by G. Gachev. When analyzing K. Khetagurov's lyrics, one should consider the Cosmos (i.e. images associated with

national nature). Further, after studying the Cosmo-Psycho-Logos, K. Kuliev and Yu. Rytheu, a comparison of the artistic systems of both writers is carried out. It is important to show the specific differences between the artistic systems of different peoples (for example, how the works of Balkar literature differ from the works of Chukchi literature), so that, not limited to what lies on the surface (what is sometimes called national exoticism), to get to deeper layers of works. This can be achieved only if students learn how, with the help of an artistic image, a writer reflects the peculiarities of the psychological makeup of his native people (Psycho-) and the specifics of his thinking (Logos).

National images of the world go deep into the work and are distinguishable only at the level of language. Since the literature of the peoples of Russia is studied in Russian, it is sometimes difficult to determine the national specifics of the region's literatures. This requires in-depth ethnocultural comments that help to understand the national specifics, which are in the sphere of national history, culture, traditions, customs and, of course, in the sphere of national identity.

G.D. Gachev notes that from the integrity of the Cosmo-Psycho-Logos, «the most difficult thing is to understand the Logic of thinking of another people, the national Logos» [16]. Therefore, we will consider it only in relation to other components of this integrity. Arguing about what, in the conditions of integration and assimilation processes taking place in the world, allows an ethnic group to remain itself, G. Gachev writes: «In the course of history, and especially in the XX century, all peoples have become closer and unified in everyday life and thinking and yet, in its core, each nation remains itself as long as the special climate, seasons, landscape, food, ethnic type, language, etc., are preserved, because they continuously nourish and reproduce national storages of being and thinking.»

The linguistic peculiarity of Austen's novel «Pride and Prejudice» is connected with the vertical context, which is reflected in the choice of the writer's vocabulary. According to a significant number of researchers of the writer's work, the reason for popularity is precisely her special manner of presentation, the style of the writer. Austin has an insight into the psychology of heroes, an understanding of human relationships, Austin is able to see even those feelings that do not lie on the surface. She puts a person at the center of her work, puts a special emphasis on him, scientists subtly notice the writer's manner of approaching an internal monologue, she was able to convey an incoherent stream of thoughts in the speech of her characters.

Jane Austen's innovation also lies in the transmission of a peculiar rhythm of speech, built on the same observation of the fragmentary style of the actors. Austen found her own voice. She saw a lot, judged a lot, but she did it very restrained and therefore not in a less convincing manner. She possessed the art of ironic allusion and did it almost perfectly, demonstrating a wide range of uses of the finest irony, a slight smile and even sarcasm. Austin avoids stylistic cliches. Very skillfully uses a rich palette of comedic shades, using the traditions of English dramatic culture. A sense of proportion helps the writer to avoid exaggerations and, even approaching the grotesque, she does not cross the boundaries of the finest irony. Austin is not

characterized by verbose author's digressions reflecting an understanding of reality. The images of the author largely determine the reader's attitude to the values that are approved by the narrator.

At the same time, a few words should be said about regional worldviews. Such regions include the Republic of Bashkortostan with its endless steppes, deep lakes and wonderful forests or North Caucasus, the Volga region, Siberia, and the North. When analyzing national pictures of the world, it can be noticed that certain images are inherent not only to one people belonging to a particular region, but also to other peoples of this region. For example, artistic images: noble and courageous highlander – native village – native people – snow chains – gorge – rocks – can be attributed not only to the Ossetian picture of the world, but also to the pictures of the world of other peoples of the Caucasus.

## ЛИТЕРАТУРА


1. Журнал: Актуальные проблемы гуманитарных и естественных наук [1-2];
2. Гачев Г.Д. О национальных картинах мира // Народы Азии и Африки. – 1967. № 1. С. 77.
3. Гачев Г.Д. Национальные образы мира: Космо-Психо-Логос. М., 1995. – С. 11.


© Куватова К.Я., Валеева Л.Ф., 2023

**УДК 811.512.141**

*Куланчин А.Й., филол. ф. канд., өлкән уҡытыусы*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

## ӨС МӘҒРИФӘТСЕНЕҢ МӨФТӨЙ ЯНЫНДА БЕР ОСРАШЫУЫ[1]

**Аннотация.** Статья посвящена встрече трех известных башкирских просветителей М. Акмуллы, Р. Фахретдинова и М. Уметбаева в 1894 году в г.Уфе. Обосновывается идея о том, что достойны упоминания и другие личности, которые принимали участие в этой встрече – муфтий М. Султанов и Х. Усманов.

**Annotation.** The article is devoted to the meeting of three famous Bashkir educators M. Akmulla, R. Fakhretdinov and M. Umetbaev in 1894 in Ufa. The idea is substantiated that other personalities who took part in this meeting, Mufti M. Sultanov and Kh. Usmanov, are worthy of mention.

**Ключевые слова:** просветительство, медресе, муфтий, образование.

**Key words**: enlightenment, madrasah, mufti, education.

[1] статья подготовлена в рамках гранта «Исламский педагогический Ренессанс: методология, теория и практика формирования» по направлению «Методологические и прикладные аспекты гуманитарных исследований» БГПУ им. М. Акмуллы.

Билдәле башҡорт мәғрифәтсеһе һәм шағиры Мифтахетдин Аҡмулла иҫтәлегенә Өфө ҡалаһындағы Башҡорт дәүләт педагогия университетына уның исеме бирелгән. Замандаштарының хәтирәләре буйынса, Аҡмулла үҙе Өфө ҡалаһында бер тапҡыр ғына була. 1894 йылда Аҡмулла, үҙ ғаиләһе мәсьәләләрен хәл итеү өсөн, Өфөлә урынлашҡан Диниә назаратына килә. Уның был сәфәре тураһында Ризаитдин Фәхретдинов үҙенең "Аҫар"ында телгә ала. Был осорҙа Ризаитдин Фәхретдинов Диниә назаратында ҡазый вазифаһын башҡарған була һәм Аҡмулланың ғаилә мәсьәләһен дә ул ҡарай. Ошо ваҡытта ике мәшһүр мәғрифәтсе бер-береһе менән яҡындан таныша. Риза ҡазый Аҡмулла хөрмәтенә сәй табыны ойоштороу теләге менән мөфтөй Мөхәмәдйәр Солтановҡа мөрәжәғәт итә. Мөфтөй был тәҡдимде хуплай, һәм күркәм бер сәй табыны уҙа. Был табында телгә алынған Мифтахетдин Аҡмулла, Ризаитдин Фәхретдинов һәм Мөхәмәдйәр Солтанов менән билдәле мәғрифәтсе Мөхәмтсәлим Өмөтбаев та ҡатнаша. Был осорҙа Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев Диниә назаратында тәржемәсе булып эшләгән. Ризаитдин Фәхретдинов яҙыуынса, уны был мәжлескә, күрәһең, мөфтөй саҡырған була. Беҙҙең фекеребеҙсә, был мәжлестә тағы ла бер шәхес ҡатнашҡан булырға тейеш. Ризаитдин Фәхретдинов «Аҫар» хеҙмәтендә былай тип яҙа: «Беҙ барғанда мөфтөй янында сәй мәжлесендә Хәйрулла ахунд берлә Мөхәмәтсәлим Өмөтбай бар ине. Былар саҡырылып килгән булырҙар» [1, 210]. Бында Өфө ҡалаһындағы «Ғосмания» мәҙрәсәһенә нигеҙ һалыусы булараҡ билдәле Хәйрулла Ғосманов тураһында һүҙ барырға тейеш. Шулай итеп, 1894 йылда Өфө ҡалаһында тәүге һәм һуңғы тапҡыр билдәле өс башҡорт мәғрифәтселәре Мифтахетдин Аҡмулла, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев һәм Ризаитдин Фәхретдинов осраша. Был осрашыуҙы ойоштороусы мөфтөй Мөхәмәдйәр Солтановтың тыуыуына быйыл 185 йыл була. Ул, сығышы менән башҡорт дворяндары Солтановтар нәҫеленән булып, Өфө губернаһы Минзәлә өйәҙе Мәстей ауылында тыуа. Башҡорттар араһынан Ырымбур мосолман диниә назаратында тәүге мөфтөй булып һанала. Мөхәмәдйәр Солтановтың нәҫеле башҡорт булыуын йәнә лә уның улы Искәндәр Солтановтың эшмәкәрлеге лә раҫлай. Искәндәр Солтанов Башҡортостан автономияһы өсөн көрәштә әүҙем ҡатнаша. 1917 йылда Каруанһарайҙа үткән 3-сө Дөйөм Башҡорт ҡоролтайында автономияның кесе парламентына ағза итеп һайлана. 1918 йылда Башҡорт хөкүмәтенең юридик бүлеген етәкләй. Уның икенсе улы Арыҫлангәрәй ҡатыны менән бергә хәйриә эшмәкәрлеге менән шөғөлләнә, Өфө ярлы мосолмандары Мөтәүәллиәт комитетына нигеҙ һалыусыларҙың береһе була. Ҡатыны менән етем ҡыҙҙар өсөн бушлай мәктәп аса, унда тәрбиәләнеүселәрҙе мосолман уҡытыусылары уҡыта. Арыҫлангәрәйҙең ҡатыны Мәрйәм Солтанованың исеме Башҡортостан Республикаһы мосолмандарының Диниә назараты ҡарамағындағы Ислам колледжына бирелгән.

Шулай уҡ ошо осрашыуҙа ҡатнашҡан Хәйрулла Ғосмановҡа килгәндә, ул тарихҡа Өфө ҡалаһында аслыған "Ғосмания" мәҙрәсәһенә нигеҙ һалыусы

булараҡ ингән. Хәйрулла Ғосманов мәҙрәсәне тәүҙә Беренсе йәмиғ мәсет янында аса, аҙаҡ уҡыу йорто өсөн айырым бина төҙөтөлә. Был уҡыу йортонда билдәле "Ғәлиә" мәҙрәсәһенә нигеҙ һалыусы Зыя Камали ла белем ала. Шулай уҡ "Ғосмания"ла Әхмәтзәки Вәлиди "Төрки халыҡтар тарихы"н уҡыта. Хәйрулла Ғосманов үҙе үлгәндән һуң, мәҙрәсә менән билдәле башҡорт дин әһеле Йыһангир Абыҙгилдин идара итә, һәм уҡыу йорто нигеҙ һалыусыһы хөрмәтенә "Ғосмания" тип атала башлай. "Ғосмания" мәҙрәсәһе бинаһы 80-се йылдарҙа Башҡорт дәүләт педагогия институтының уҡыу корпусы булып хеҙмәт итә.

Шулай итеп, 1894 йылда булған осрашыуҙа Башҡортостанда, башҡорт һәм бүтән төрки халыҡтары араһында мәғрифәтселек идеяларын таратыусы ҙур шәхестәр осраша. Улар аҙаҡ та ошо осрашыуҙы һәр саҡ йылы һүҙҙәр менән иҫкә алыр булған. Ғалим Р.Ф. Исламов үҙенең хеҙмәтендә Аҡмулланы яҡындан белгән Дусмаил Ҡасҡынбаевтың ошондай һүҙҙәрен килтерә: «Үҙенең Өфөгә барып, мөфтөй илә ҡазыйҙарға күрешкәнлеген һәм уларҙың хөснө илтифатын тәхсин итеп ултырҙы» [1, 240]. Ризаитдин Фәхретдинов был осрашыу тураһында былай тип яҙа: "Мөфтөй хәҙрәттең ҡыҙыҡ табып вә хозурланып ултырыуы ваҡытын ошо мәжлестән башҡа ла күргәнемде хәтерләмәйем. Ошо сәғәттән һуң үҙем дә былдай бер күңелле мәжлескә осраманым. Былдай ваҡыттарҙың ҡәҙерҙәре беленмәгән" [2, 166]. Ҡыҙғанысҡа күрә, был осрашыу Аҡмулланың Өфөгә тәүге һәм һуңғы килеүе була.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Мифтахетдин Акмулла: тормош юлы һәм ижаты / төз., фәнни мөх. Р.Ф. Исламов. – Казан: Рухият, 2022. – 520 бит.
2. Ризаитдин Фәхретдинов. Һайланма әҫәрҙәр / текстологик эштәрҙе башҡарыусы, төҙөүсе, баш һүҙ авторы, аңлатмалар биреүсе филология фәндәре кандидаты Миңлеғәли Нәҙерғолов. – Өфө: Китап, 2009. – 304 бит.


© Куланчин А.Й., 2023

**УДК 811. 512.141**

*Курбонов Н.Х., магистрант*
*Толомбаев В.З., филол. ф. канд., доц.*
*М. Акмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

## ҠЫЛЫМДЫ ӨЙРӘНГӘНДӘ УҠЫУСЫЛАРҘЫҢ ФУНКЦИОНАЛЬ СТИЛИСТИК ГРАМОТАЛЫЛЫҒЫН ФОРМАЛАШТЫРЫУ

**Аннотация.** В статье рассматривается методы формирования стилистических умений и навыков учащихся при изучении глагола в башкирском языке, эффективность методических приемов, обеспечивающих изучение выразительных возможностей глагола, и результативность описываемой методики.

**Annotation.** The article discusses the methods of forming the stylistic skills of students in the study of the verb in the Bashkir language, the effectiveness of methodological techniques that ensure the study of the expressive possibilities of the verb, and the effectiveness of the described methodology.

**Ключевые слова:** глагол, стилистические умения и навыки, функционально-стилистический подход, речевая деятельность.

**Key words:** verb, stylistic skills, functional-stylistic approach, speech activity.

Професор Р.Ғ. Аҙнағолов үҙенең хеҙмәттәрендә: «Дәреслектәргә ингән тел саралары фән, статистика, ғилемдәр тупланмаһы рәүешендә генә өйрәнелмәһен ине», – тип яҙа [1,5]. Унын фекеренсә, бала зиһененә уй, хәтеренә мәғәнә һалыу мөһим. Шуға күрә туған тел саралары һөйләм йә булмаһа текст эсендә, шул һөйләмдең, текстың башҡа киҫәктәре, берәмектәре менән тығыҙ бәйләнештә өйрәнелергә тейеш. Ысынлап та, бөгөнгө көндә тел берәмектәрен танып белеүҙән бигерәк, уларҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланырға өйрәтеү, йәғни уҡыусыларҙа тел компетенцияһын формалаштырыу фарыздыр. Һуңғы ваҡытта грамматика уҡытыуҙың кәрәклеге-кәрәкмәгәнлеге тураһында һүҙ ҡуҙғытыусылар ҙа осрай. Әлбиттә, грамматика закондарын аңлатмай тороп, телгә өйрәтеү мөмкин түгел. Был осраҡта лексика, морфология, синтаксис кеүек ҡатмарлы тел кимәлдәрен өйрәнеүҙе функциональ-стилистик нигеҙҙә алып барыу отошлораҡ.

Телде функциональ-стилистик нигеҙҙә өйрәнеү, асылда – уҡыусыларҙы тел берәмектәренең телмәрҙәге ҡулланылышы, уларҙың төрлө мәғәнә төҫмөрҙәрен белдереү үҙенсәлектәре менән таныштырыуҙы һәм ошо арҡылы балала төрлө коммуникатив шарттарға, ситуацияларға, жанрҙарға ярашлы тел берәмектәрен урынлы, дөрөҫ итеп ҡуллана белеү һәләтен формалаштырыуҙы күҙ уңында тота.

Тел сараларын функциональ-стилистик аспектта өйрәнеү хәҙерге методика фәнендә нигеҙләнгән, күп ғалимдарҙың хеҙмәттәрендә яҡтыртылған булыуға ҡарамаҫтан, башҡорт телен уҡытыу практикаһында уға әллә ни әһәмиәт бирелмәй. Төрлө грамматик категорияларҙы өйрәнеү һаман ялҡыткыс формаль планда бара, мәҫәлән, килештәрҙе, һорауҙар ҡуйып, ҡылымдың йүнәлеш формаларын ялғауҙарына ҡарап танырға өйрәтәбеҙ, ә уларҙың грамматик функцияһы, мәғәнә үҙенсәлеге, стилистик ҡулланылышы иғтибарҙан ситтә ҡала килә. Шул нигеҙҙә, балаларҙың телмәрендә грамматик формалар дөрөҫ ҡулланылмай, семантик, стилистик яҡтан хаталы һөйләмдәр барлыҡҡа килә. Әгәр ҙә, «Юлдаш»та радиоуйын алып барыусы еңеүсегә автойыуыу үҙәгенә барып, автомобилен <u>йыуып</u> ҡайтырға тәкдим итә икән, был дикторҙың йөкмәтеү йүнәлешен белмәүҙе түгел, ә унын ҡулланылышына әһәмиәт бирмәүҙе күрһәтә. Тапшырыу алып барыусы ҡылымдың йүнәлеш категорияһы булыуын да, унын форма төрҙәрен дә беләлер, әлбиттә, әммә ул формаларҙы урынлы, дөрөҫ итеп ҡулланырға кәрәклегенә генә әһәмиәт биреп етмәйҙер.

Һүҙ төркөмдәрен функциональ-стилистик нигеҙҙә өйрәнеүҙә беҙ стилистик йүнәлешле, тел берәмектәренең функциональ үҙенсәлектәрен тойомлауға, танып белеүгә йүнәлтелгән эш төрҙәрен күҙ уңында тоторға тейешбеҙ. Морфология дәрестәре уҡыусыны теге йәки был текст төҙөүҙә кәрәкле тел сараларын һайлау закондары менән таныштырырға мөмкинлек бирә. Уҡыусыларҙың морфология өлкәһендәге белеме мотлаҡ телмәр эшмәкәрлегендә ҡулланылыш табырға тейеш, бының өсөн дәрестәрҙә теге йәки был грамматик күренештең булыу-булмауын билдәләү, уны танырға өйрәтеү менән генә сикләнмәйенсә, уларҙың конкрет телмәрҙәге ҡулланылышын, мәғәнәүи төҫмөрҙәрен билдәләү, анализлау шарт.

Түбәндә бирелгән Рәшит Солтангәрәевтың «Хамбал» хикәйәһенән алынған миҫалдарҙан күренеүенсә, ҡылым формалары айырым бер лексик, грамматик мәғәнә белдереүҙән бигерәк, күпкә киңерәк функцияға эйә.

Миҫалдар:

*Оло малай ялтанды ла тағы **тороп йүгерҙе** (Р.Солтангәрәев «Хамбал»). Улар Хамбалды яҡын уҡ ебәрҙеләр, алданылар, ҡарт **сабып килеп етте** лә, һуғырға тип, сыбығын күтәргәйне генә, малайҙар, тантаналы **шарҡылдашып**, ярлауға **һикерҙеләр** (Р.Солтангәрәев «Хамбал»). Йоҡлап ятҡан әҙәм балалары урындарынан **һикерешеп торҙолар** ҙа тәҙрәләренә һарылдылар (Р.Солтангәрәев «Хамбал»). Бала-сағаның ҡурҡып ҡасыуы һыбайлыны **ярһытып** ебәрҙе шикелле, теге, дошманына ташланған атлы ҡаҙаҡ шикелле, атын уңлы-һуллы сыбыҡлап **саба башланы** (Р.Солтангәрәев «Хамбал»). Ә бала-саға, иҙәнгә **һибелгән** борсаҡ шикелле, **йүгерешә** (Р.Солтангәрәев «Хамбал»). Шунан самалап та тормайынса тирәккә барып һарылдылар ҙа, тараҡан шикелле, юғары **үрмәләп менеп киттеләр** (Р.Солтангәрәев «Хамбал»). Ул ғына ла түгел, ярлау ситенә еткәс, ҡон **ҡайтарырға** булдылар – үҙҙәре артынан **ажғырып сабып килгән** ҡурҡыныс ҡартҡа ҡарап **һөрәнләргә тотондолар** (Р.Солтангәрәев «Хамбал»).*

Был миҫалдарҙа интенсивлыҡ, киҫкен ситуация, ҡыҙыу барған хәл-ваҡиғалар бер юлы ҡылымдың семантик, лексик-грамматик, грамматик категориялары аша реалләшә һәм йәнле булып, уҡыусының күҙ алдына килеп баҫа. Бында ҡылым формаларының роле ҙур, ҡылымдың күләм, заман, йүнәлеш категориялары синтезы берҙәй экспрессив функция үтәй.

Түбәндәге миҫалда ҡылымдың йөкмәтеү йүнәлеше образ тыуҙырыу функцияһын үтәй: *Хаммат ҡарт гел генә һыбай йөрөй, эйәренә бөксәйеп ултырып ала ла ташып торған аҡай күҙҙәре менән тирә-яҡҡа ҡарангылап бара. Башын бормай, тик **күҙҙәрен генә йүгертә** (Р.Солтангәрәев «Хамбал»).*

Тәбиғәт күренештәрен һүрәтләү өсөн ҡулланылған хәрәкәт ҡылымдарының күләм категорияһы формалары: Шул убаның ҡаҡ түбәһендә япа-яңғыҙ тирәк үҫә, ә тирәк түбөнән тиерлек урғып шишмә **сығып ята** (Р.Солтангәрәев «Хамбал»). Әллә күк көмбәҙе **ҡолап төшкәнме**? (Р.Солтангәрәев «Хамбал») һ.б.

Ҡылымдың төрлө семантик, лексик-грамматик һәм грамматик категория формалары бер ни тиклем комизм тыуҙырыуҙа ла әүҙем ҡулланыла:

*Эт тигәнең бүре булып сыҡты – табандары көнгә әйләнеп бөткән ун бер-ун ике йәшлек малайҙар, ҡыҙҙар йәлп иттереп ерҙә ятҡан усмаларын эләктерҙеләр ҙә, шырт ҡамылдан балтырҙарын һыҙыртып, төрлө яҡҡа* ***һыпырттылар*** *(Р.Солтангәрәев «Хамбал»). Әммә йонсоу бейә малайҙың сырылдауын әҙәмгә һанаманы, хәйер, малайҙарҙың хәҙер Хамбалда ҡайғылары юҡ, усмаларын эләктерҙеләр ҙә йырғанаҡ яғына* ***ысҡындылар*** *(Р.Солтангәрәев «Хамбал»). Шыйыҡ сыбыҡ килеште буғай үҙҙәренә,* ***эй йүгерәләр***, ***эй йүгерәләр***, *хатта бәләкәсе сатанлауын да онотто! (Р.Солтангәрәев «Хамбал»).*

*Малайҙар шулай һөрәнләй, үҙҙәре ауыҙҙарын ҡыйшайтып тегене үсекләй, урындарында* ***һикергеләй***. *Ҡарттар шым ғына ситкә* ***тая һала*** *(Р.Солтангәрәев «Хамбал»).*

Ғөмүмән, ҡылым үҙенең лексик-семантик, лексик-грамматик һәм грамматик формаларға бай булыуы, ҡатмарлылығы һәм ҡулланылыу киңлеге менән башҡа һүҙ төркөмдәренән шаҡтай ныҡ айырыла. Быының менән бергә, ҡылым сикләнмәгән экспрессив һәм эмотив көскә лә эйә. Шуның өсөн дә ул тормошто һәр яклап үҫештә, хәрәкәттә һүрәтләүгә мөмкинлек бирә. Элек-электән билдәле яҙыусылар әҫәрҙәрендәге хәл-ваҡиғаларҙы, тәбиғәт күренештәрен, геройҙарҙың холоҡ-фиғелен, уй-кисерештәрен, эшмәкәрлеген, яҙмышын, башҡаларға булған мөнәсәбәттәрен киң һәм ентекле тасуирлауҙа ҡылымдың мөмкинлеген киң ҡулланғандар. А.Н. Толстой: «Хәрәкәт һәм уны сағылдырыу, йәғни ҡылым тел нигеҙен тәшкил итә. Фразаға яраҡлы берҙәр-бер дөрөҫ ҡылым һайлау – фразаны хәрәкәткә килтереү тигән һүҙ», - тип билдәләп үтә. Әҫәрҙәрҙә сағылдырылған бөтә нәмә, күренеш, хәл-ваҡиға, кешеләр, уларҙың ҡылыҡтары, эшмәкәрлектәре, характер һыҙаттары динамикала, хәрәкәттә һүрәтләгәндә генә «йәнләнә».

Һәр телдең грамматик формаларын функциональ-стилистик нигеҙҙә өйрәнеүҙең лингводидактик әһәмиәте көслө. Тел сараларын стилистик нигеҙҙә өйрәнеү – уҡыусыларҙы тел берәмектәренең телмәрҙәге ҡулланылышы, уларҙың төрлө мәғәнә төҫмөрҙәрен белдереү үҙенсәлектәре менән таныштырыуҙы һәм ошо арҡылы балала төрлө коммуникатив шарттарға, ситуацияларға, жанрҙарға ярашлы тел берәмектәрен урынлы, дөрөҫ итеп ҡуллана белеү һәләтен формалаштырыуҙы күҙ уңында тота.

Грамматика өлкәһендәге стилистик күнегеүҙәрҙең асылы шунан тора:

– улар балаларға билдәле грамматик стилдәр тураһында белем бирә, тел сараларын көндәлек аралашыуҙа дөрөҫ һәм урынлы ҡулланырға өйрәтә;

– тел сараларының функциональ-стилистик һәм грамматик-стилистик үҙенсәлектәрен танырға өйрәтә;

– тел сараларының синоним варианттарын төрлө стилдәрҙә ҡулланыу күнекмәләрен бирә;

– ҡылымдың төрлө формаларын файҙаланыу үҙенсәлектәре менән таныштыра;

– ҡылымдың йүнәлеш формаларын ҡулланып, төрлө стилдә һөйләмдәр һәм текстар төҙөргә, уларҙы стилистик яҡтан камиллаштырырға өйрәтә.

Грамматика буйынса эш уҡыусыларға үҙ белемдәрен һөйләү һәм яҙыу телмәрендә файҙаланыу күнекмәләре бирергә тейеш. Дәрестә һүҙҙәрҙең үҙгәреү, һөйләмдә үҙ-ара бәйләнеү ҡағиҙәләренән тыш, теге йәки был ҡағиҙәне ҡулланыу, ҡылым формаларының синоним варианттарын телмәрҙә бер үк йөкмәткене биреү үҙенсәлектәре һәм ҡылымдың йүнәлеш формалары ҡулланылып яһалған синоним конструкцияларҙың мәғәнәүи һәм стилистик үҙенсәлектәренән сығып эш итеү законлылыҡтары ла өйрәнелә. Бындай типтағы эштәр уҡыусыларҙың орфографик, грамматик, стилистик грамоталылығын күтәрә, уларҙың телмәрен камиллаштыра.

## ӘҘӘБИӘТ

1. Аҙнағолов Р.F. Хәҙерге дәрес: уҡыу ҡулланмаһы. Үҙгәрешле, икенсе баҫма. – Өфө: БашДУ, 2011. – 155 бит.

2. Толомбаев В.З., Ғарипова И.И., Фәхриева Ф.Р. Профессор М.В. Зәйнуллин һәм һүҙ төркөмдәрен функциональ-стилистик аспектта өйрәнеү мәсьәләһе // Современная филология: проблемы и перспективы: Материалы Международной научно-практической конференции, посвященной Году башкирского языка, 85-летию со дня рождения доктора филологических наук, профессора, академика АН РБ З.Г. Ураксина и 85-летию со дня рождения доктора филологических наук, профессора, академика АН РБ М.В. Зайнуллина.– Уфа, 2020. – 492 с.

© Курбонов Н.Х., Тулумбаев В.З., 2023

**УДК 821**

*Кәримова Н.Н., студент*
*Ғилми етәксеһе: Әлибаев З.А., филол. ф. канд., доц.*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө к.*

## КҮБӘЛӘК ЫРЫУЫНЫҢ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ

**Аннотация.** В данной статье описываются история происхождения названий гор, рек, болот и т.п., история рода Кубеляк Абзелиловского района и связанные с ними легенды.

**Annotation.** This article describes the history of the origin of the names of mountains, rivers, swamps, etc., the history of the Kubalyak family of the Abzelilovsky district and related legends.

**Ключевые слова:** род, легенда, река, болото, гора, история рода.

**Key words:** genus, legend, river, swamp, mountain, history of the genus.

Күбәләк ырыуы ер-һыу атамалары араһында бик ҡыҙыҡлылары бар. Уның һәр бер ташы, йылғаһы, тауы үҙ тарихын һөйләп торған кеүек. Үҙ ерҙәрен күҙ ҡараһындай һаҡлаған, ер-һыу өсөн көрәшкән, яу сапҡан, ҡан ҡойған. Бына инде беҙ ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған изге ҡомартҡыларҙың хужаһы булараҡ, еребеҙҙең тарихын өйрәнергә, уны яратырға һәм һаҡларға тигән бурыс беҙҙең алдыбыҙҙа тора. Ә бит әлеге көндәрҙә ауылдағы таҙа һыулы шишмә-йылғалар, ғорур тауҙар, ошондай геүләп торған тормоштоң бер ҙур өлөшөн алып тора.

Күбәләк ырыуының ҡыҙыҡлы ер-һыу атамалары: Байым – Өйташ, Сусҡа һаҙы, Балтабай, Мунса һаҙы, Тирәк араһы, Кесе Ҡыҙыл, Соңғорҙоҡ һ.б.

Аһылай – Ҡолдобай, Янсыҡты, Өскөл, Мәрйәүлгән, Һайыҫҡан, Кесерткән,Ҡабыҫта, Ямангир, Нәлбикәташ, Кәбәнташ һ.б.

Рәхмәт – Мөхәббәт һаҙы, Һыуһар ҡойоһо, Тайбатҡан, Киләй, Ҡантүбә, Ҡутан

Яйҡар – Бисура һаҙы, Хәсрәт урамы, Әбей ҡойоһо, Әүлиә түбәһе һ.б.

Туйыш – Хәспи төбәге, Иҫке йорт, Төлкөтау, Ҡараташ, Ҡәҙермәт, Ҡалмаҡ һ.б.

Мораҡай – Бәлә, Кәзәосҡан, Ямантау, Көркәк тауы һ.б.

Атамалар иҫ китмәле күп, бөтәһен дә һанап бөтөрлөк түгел. улар ябай ғына атама түгел, һәр ҡайһыһы үҙенсә ҡыҙыҡлы ла, ғибрәтле лә булған тарих бәйән итә икән. Яҡын тирәләге ауылдарҙа күлдәр, йылғалар, шишмәләр ҙә етерлек кенә. Шуларҙың иң ҙурҙарының береһе: Кесе Ҡыҙыл йылғаһы. Йылға Белорет районы Мөхәмәт ауылынан баш ала, Әбйәлил районы территорияһы буйлап ағып, Силәбе өлкәһендә Яйыҡ йылғаһына барып ҡоя. Элек тулы һыулы, балыҡлы булған йылғаның йылдан-йыл һыуы кәмей. Тирә-яғы ла йәмһеҙләнә бара. Сөнки йылғаның ҡәҙере киткән, уны таҙартып тормағас һыуы бысраҡ, эргә тирәһендәге ағастары ҡырҡылып бөтөп барғанғамы, һыуы ла һай ғына булып ҡалған.

Шулай уҡ билдәлелек яулап өлгөргән күл – Ҡолдобай. Был исем ҡайҙан килеп сыҡҡан һуң?

Борон, ҡолдар булған ваҡытта йәшәгән, ти бер бай. Уның аттары өйөр-өйөр икән. Ул бер ҡасан да ҡолдарын ашатмаған, кейендермәгән. Бына яҙ еткән. Уның ерен һыу баҫҡан.

Бай шунда тороп ҡалған. Ул күпме генә “Ҡотҡарығыҙ!”, - тип ҡысҡырмаһын, ҡолдары уға ярҙамға бармаған. Бай шунда ятып үлгән. Шунан бирле ул күлде Ҡолдобай исеме менән Ҡолдобай күле тип йөрөтә башлағандар.

Был һоҡландырғыс күл Аһылай ауылында урынлашҡан. Был ауылда Ҡолдобай күле генә тугел, ә башҡа күлдәр ҙә бар (Өскүл, Янсыҡты). Ауылдың өс күле бар ,шуның өсөн дә яҡын тирәләге ауылдар, был ауылды "Өскүл" ауылы тип тә йөрөтәләр. Ауыл бөтө яҡтан да ҙур-ҙур тауҙар, урмандар менән уратылып алынған. Әммә әлеге ваҡытта күл эргәһендә ҙур төҙөлөштәр бара, күл эргәһендә йорттар төҙөлә. Матур ҙа ул, тик киләсәктә күл эргәһендә кәйеф-сара ҡороу урыны булып ҡалмаҫтыр бәлки.

Ҡыҙыҡлы ер-һыу атамаларына һәм уларҙың тарихтарына килгәндә.

**Мәрйәүлгән.**

Бер ваҡыт Күсәк исемле был тауҙа күрше урыҫ ауылының (Тайһары) бер мәрйәһе килеп аҙаша. Ул ҡатын алмашаланып йөрөгән була. Оҙаҡ ҡына йөрөй торғас, мәрйә шунда үлеп ҡала. Һуңынан уның уландары әсәһен килеп таба, тау башына тәре ҡатып ҡуялар. Ауыл кешеләре шунан һуң, Күсәк тауын Мәрйәүлгән тип йөрөтә башлай.

**Бисура һаҙы.**

Яйҡар ауылында ошондай исемле муйыллыҡ бар. Кантондар заманында был ауылға бер писарь эш менән килгән. Байтаҡ ваҡыт бында йәшәгән, ауылдың тәбиғәтен, кешеләрен үҙ иткән. Ҡайтыр ваҡыты еткәс, иҫтәлеккә тип, юл ашаһына күп итеп муйыл ағастары ултырта. Ағастар үҫкән, кешеләр муйыллыҡты үҙ телдәренә яраҡлаштырып Бисыр һаҙы тип атай башлайҙар. Тора-бара был һаҙ Бисура һаҙы булып киткән.

**Алдар йылғаһы.**

Был кескәй генә йылға Үтәсыҡ тауы араһынан килеп сыға ла Ҡыҙыл йылғаһына барып тоташа. Был йылғаның исеме есеменә тура килә: алдаҡсы йылға. Сөнки яҙғыһын, йә ямғыр яуһа, йылға иҫ китмәле таша, ә йәйгеһен бөтөнләй юғала.

**Бетте түбә.**

Байым ауылынан Яйҡарға табан киткән юлда Бетте түбә бар.Был ҡыҙыҡ атама ҡайҙан килеп сыҡҡан һуң? Борон ауыр замандар булған: кешеләр аслы-туҡлы йәшәгән, өҫтәренә кейергә лә булмаған. Һәм ошондай ауыр ваҡыттарҙа бала-сағаның бетләп китеүе лә ғәжәп күренеш булмаған. Йәйгеһен күмәк кешеләр бергәләшеп бесәндән ҡайтып килгәндәр. Ә инде алдағы бәләкәй генә түбәлә емешкә тип сыҡҡан бер әбей биҙрәһен ултыртҡан да, ҡыҙының башын тубығына һалып бетен сүпләй икән. Кешеләр ҡыҙыҡ күреп: ”Был түбәлә бет үрсей инде хәҙер,” - тип көлөшкәндәр. Һәм ошо ваҡиғанан һуң, был түбәгә Бетле түбә (ерле һөйләш буйынса Бетте түбә) атамаһы йәбешкән.

**Хәсрәт урамы.**

Яйҡар ауылында ошондай исемле урам бар. Был урам төпкөл, әммә бик матур ерҙә, ҡайындар араһында. Ә ниңә “Хәсрәт” тигәндәр һуң был урамды? Элегерәк бер уҫал ҡатын улы һәм килене менән бергә йәшәгән. Ҡәйнә килененә бер ҙә көн күрһәтмәгән. Шунан улар өй һалып башҡа сығырға булғандар. Килене уҫал ҡәйнәнән ҡасып өйҙө алыҫҡа, түбә ашаһына һалдыртҡан, ти. Яңы өйгә сыҡҡас, килендең күңеле йомшап китеп, ҡәйнәһен ҡунаҡҡа саҡырған. Ҡәйнә ҡунаҡ булып ҡайтырға сыҡһа, көн буранлап киткән. Ҡәйнә ҡайта алмай тағы 3 көн ятҡан, ти. Шунан ул: “эй, килеп етеп булмай, килһәң, ҡайтып булмай! Бына ҡайҙа ул, хәсрәт!”- тигән ти. Бына шунан һуң ҡалған был урам исеме. Хәҙер был матур урам ҙурайғандан ҙурая.

**Ҡупыев төбәге.**

Ғәбдин ауылы янында Ҡупыев төбәге бар. Революциянан алда был ауылға үҙенең дүрт ҡыҙын эйәртеп бер урыҫ байы килеп йәшәй башлай. Был Верхнеуральскийҙан Копьев тигән кеше була. Ул Ҡыҙыл йылғаһы ярында һыу

тирмәне төҙөтә. Революцияға тиклем ул ошо тирмәндә он һалдырта, ләкин революция башланғас та, тирмәнен боҙҙортоп, үҙ яғына ҡайтып китә. Шулай ҙа, уның тирмәне ултырған урынды ауыл халҡы һаман да Ҡупыев төбәге тип йөрөтә.

Дөйөм алғында, ер-һыу атамалары тураһындағы риүәйәттәре һәм легендалары ла, ҡиммәттәрен һис юғалтмай торған аҫыл мираҫ, беҙҙе оло быуын менән бәйләүсе изге сығанаҡ ул. Ә инде был сығанаҡ тәү сиратта беҙгә, үҫеп килеүсе быуынға кәрәк.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Гончарова Г. И. Имя отчей земли. – Уфа: Китап, 2011 . – С. 111-120.

2. Ҡульяҙмалар: Мөъмин Янһарин, Бәхтиәр Мансуров, Рәшиҙә Гайнуллина (Һаҡланған ере: Аһылай төп дөйөм белем биреү мәктәбе)

3. Башҡорт мәҙәниәте. Дәреслек. – Өфө: Китап, 2007.


© Кәримова Н.Н., Әлибаев З.А., 2023

**УДК 821**

*Ҡазыева С.Г., студент*
*Ғилми етәксеһе: Әлибаев З.А., филол. ф. канд., доц.*
*М.Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө к.*

## БАШҠОРТ УМАРТАСЫЛЫҒЫ ҺӘМ УНЫҢ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

**Аннотация.** В данной статье рассмотрены вопросы о возникновении бортничества среди башкирского народа, о качестве бортевого меда, этапах изучения бурзянской бортевой пчелы. Также приводятся доводы о необходимости расширения территории заповедника "Шульган-Таш" для сохранения бурзянской бортевой пчелы. Статья может использоваться в качестве информационного материала для научных работников, специалистов в области экологии, охраны природы, студентов биологических и сельскохозяйственных специальностей вузов.

**Annotation.** This article discusses the issues of the emergence of bee-keeping among the Bashkir people, the quality of the honey bee, the stages of studying the Burzyan bee bee. There are also arguments about the need to expand the territory of the Shulgan-Tash Nature Reserve to preserve the Burzyan bee. The article can be used as an informational material for researchers, specialists in the field of ecology, nature protection, students of biological and agricultural specialties of universities.

**Ключевые слова:** пчеловодство, Республика Башкортостан, бурзянская бортевая пчела, качество бортевого меда, Шульган-Таш, история пчеловодства.

**Key words:** beekeeping, Republic of Bashkortostan, Burzyansk bee, quality of honey bee, Shulgan-Tash, history of beekeeping.

1. Умартасылыҡтың ҡыҫҡаса тарихы

Ерҙә бал ҡорттарының барлыҡҡа килеүе тураһында аныҡ мәғлүмәттәр юҡ, һәр хәлдә, улар теркәлмәгән. Бал ҡорттарының ташҡа әйләнгән ҡалдыҡтары аҡбур осоро ҡатламдарында табылған, һәм уларҙың йәше бер нисә миллион йыл менән иҫәпләнә. Иң ышанысл ы ҡаяға төшөрөлгән һүрәттәрҙең йәше бал артынан 10 мең йылдан ашыу тәшкил итә. Испанияның Валенсия һәм Альбест провинцияһында бал табылған фреска фрагменттары табылған. Көнсығыш Европа биләмәһендә, атап әйткәндә, Хәҙерге Рәсәйҙең Европа өлөшөндә бал ҡорттары сигенеүсе боҙлоҡ артынан 10 мең йыл самаһы элек икенсел күсеп ултырыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән. Улар Бында Балҡан аша үтеп ингән, ә төньяҡ өлкәләргә – Үҙәк Европа аша.

Урман умартасылығы тәжрибәһен башҡорттар шартлы рәүештә бахмут тип аталған фин-уғыр ҡәбиләләренән үҙләштергән, тип иҫәпләнә. Башҡорттарҙың был кәсепте үҙләштереүенә, унда айырым камиллыҡҡа өлгәшеүенә һәм беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланыуына бер нисә фактор булышлыҡ итә. Тәү сиратта, был Башҡортостан община ерҙәрендә XIX быуат аҙағындағы Рәсәй Урман хеҙмәтенең норматив хоҡуҡи акттарын тормошҡа ашырыуҙың ҡыйынлығы. Был акттар менән ҡаҙна урмандарында солоҡсолоҡ тыйыла, ул урман янғындары сығанағы булараҡ ҡарала. Икенсе фактор – ул башҡорт халҡының менталитет үҙенсәлектәре,уға табыныу, ҡыйыулыҡ һәм оҫталыҡ, эшҡыуарлыҡҡа һаҡсыл мөнәсәбәт хас. Өсөнсөһө – Мәскәү университеты профессорҙары Г.А. Кожевниковтың борт бал ҡортона ҡыҙыҡһыныуы.

Тарихи сығанаҡтарҙан күренеүенсә, Ассирияла умартасылыҡ быға са булмаған сәскә атҡан. Улар бал ҡорто ғаиләһе менән тауыш ярҙамында идара итә алған. Билдәле бер тембрҙа һәм тауыш көсөндә күс умартаны ташлап китергә йәки ҡабат уға ҡайтырға мәжбүр итә.

2. Башҡорттар араһында солоҡсолоҡ

"Башҡорт" этнонимының барлыҡҡа килеүе буйынса төрлө ҡараштар бар. Легендаларҙың береһе буйынса мифик бүре бохаранан килгән ерҙәрҙе эҙләп бүрене ҡаршы алған һәм уның ярҙамында Уралда тыуған илен тапҡан башҡорттарҙың юлбашсыһы сифатында сығыш яһаған. Шул уҡ ваҡытта этнонимдың әһәмиәте "баш бүре", "бүре-вожак" тип тәржемә ителә. Күп тарихсылар шундай фекерҙә.

"Ҡорт" һүҙенең аҙаҡҡы өлөшө" бал ҡорто", "төп бал ҡорто", "бал ҡорто инә ҡорто" йәки "баш умартасы" мәғәнәһендә этноним тип аңлатылған версия ла популяр. Был осраҡта өҫтәмә дәлил сифатында башҡорттарҙың традицион шөғөлдәренең береһен – умартасылыҡты күрһәтәләр.

Башҡорттарҙың антропологик һәм этник составы бик ҡатмарлы һәм беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланған этник төркөмдәр араһында диалект һәм мәҙәни-көнкүреш айырмалыҡтары һиҙелә. Әммә мәҙәни-көнкүреш һәм тел яҡынлығы әлегә этник үҙаңдың формалашыуына һәм дөйөм этнонимдың барлыҡҡа килеүенә килтермәй.

Тарихсыларҙың иң популяр версияһы буйынса, Кама, Ағиҙел һәм Өфө йылғалары араһында солоҡсолоҡ б.э. V - VI быуаттарында шартлы рәүештә Бахмутин тип аталған урындағы фин-уғыр ҡәбиләләрендә барлыҡҡа килгән. Дөйөм алғанда, бахмут мәҙәниәте комплекслы хужалыҡ алып барған ултыраҡ урман мәҙәниәте булараҡ характерлана,унда төп ролде малсылыҡ һәм игенселек, һунарсылыҡ һәм балыҡсылыҡ уйнай. Күп һанлы һәм төрлө эш ҡоралдары үҫешкән һөнәр тураһында һөйләй. Был осорға солоҡсолоҡ һөнәр булараҡ барлыҡҡа килә лә инде.

Солоҡсолоҡ менән тау башҡорттары әүҙем шөғөлләнгән. XV быуат башында бөрйән ҡәбиләләре тау-урман зонаһына, Нөгөш һәм Ағиҙел йылғаларының үрге ағымына күсенә башлай, унда тәүге ауылдар барлыҡҡа килә. Башҡорт ҡәбиләләренең алыҫ күсмә тормош рәүешенә күсеүен көньяҡ Уралдың тау-урман зонаһында солоҡсолоҡ барлыҡҡа килеүе тип иҫәпләргә мөмкин. Был бик кәрәкле шарт, сөнки солоҡтар билдәле беренной бәйләй. Көньяҡ Уралда тау-металлургия сәнәғәтенең интенсив үҫеше периодында аҫабалар солоҡло участкаларҙы һаҡлаған һәм,завод төҙөлөшө өсөн ер биреп, солоҡ ағастарын һаҡлау шарттары һәм бал йыйыу хоҡуғы тураһында һөйләшкән.

Солоҡ умартасылығы Башҡортостандың тау-урман зонаһында бөгөнгө көнгә тиклем һаҡланған күпселек был төбәктең тәбиғәт комплекстарын үҙләштереүҙең уңайһыҙлығы арҡаһында.

3. Солоҡ балының сифаты тураһында

Солоҡ балы – Башҡортостандың уникаль тәбиғәте шарттарында булдырылған юғары ҡиммәтле аҙыҡ-түлек. Был балдың хуш еҫе,тәме, дауалау һәм диетик үҙенсәлектәре айырым әһәмиәткә эйә. Шулай килеп сыҡты әлеге ваҡытта солоҡ балы Башҡортостан Республикаһының Бөрйән административ районы сиктәрендә, Шулай уҡ Белорет, Ишембай һәм Мәләүез райондары биләмәләрендә етештерелә. Рәсәйҙең һәм донъяның башҡа төбәктәрендә солоҡ умартасылығы традициялары юғалтылған йәки башланғыс хәлдә.

Солоҡ балы ҡайһы бер күрһәткестәр буйынса рамлы умарталарҙың балынан отошло айырыла. Ул, ғәҙәттә, асыҡ көрән төҫтә, балауыҙ һәм һитә менән туйындырылған. Солоҡ балының айырыуса ҡиммәте өлгөрөүгә, күп миҡдарҙа микроэлементтарға, зарарлы ҡушылмалар булмауға ҡайтып ҡала.

Балдың сифатын билдәләгәндә органолептик ысул менән аромат объектив күрһәткес булып иҫәпләнә. Ул көсһөҙ, көслө, ағымлы, нескә, һәйбәт йәки насар еҫле булыуы мөмкин. Балдың тәме балдың тәмен тойоу өсөн нигеҙ була ала. Бал тәме стандарт буйынса татлы, тәмле, сит тәмһеҙ булырға тейеш. Тәбиғи сәскә балының тәме татлы һәм ауыҙ ҡыуышлығының лайлалы тиресәһен ҡуҙғыта, шул уҡ ваҡытта төрлө көсөргәнешлек һиҙелә. Тәме балды бракка сығарғанда объектив күрһәткес булып тора.

4. Башҡортостанда хәҙерге умартасылыҡ тураһында

Бал ҡорто ерҙә кешегә ҡарағанда иртәрәк барлыҡҡа килгән. Ғалимдар фаразлауынса, был хәл 200 миллион йыл элек булған. Тәбиғәт кешегә бал ҡорто

менән дуҫлыҡҡа юл асҡан. Боронғо бөжәк үҙен ҡулға өйрәтергә мөмкинлек бирә, һәм кеше һәр ваҡыт иң изге ризыҡ – бал ала.

Бөгөн бал ҡорттары бөтә донъя буйлап үрсетелә. Балды һәр илдә яраталар. Әммә башҡортостанда бал – аҙыҡ-түлеккә ҡарағанда, ә умартасы һөнәренә ҡарағанда күберәк. Умартасылыҡ – төп халыҡтың үҙенсәлекле мәҙәниәтенең бер өлөшө. Республика символына әүерелгән башҡорт балы һәм башҡорт бал ҡорто – матди ғына түгел, рухи ҡиммәттәрҙе лә, юғары кимәлдә әхлаҡи төшөнсәләрҙе лә үлсәне.

Бал ҡорттары менән генетик ғалимдар, селекционерҙар, биологтар эшләй һәм уларҙы өйрәнә. Умартасылыҡ тармағының координациялау үҙәге булараҡ Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге дәүләт бюджет учреждениеһы булараҡ ойошторолған. Умартасылыҡ Продукцияһын етештереүселәрҙең Һәм эшкәртеүселәрҙең төбәк-ара ассоциацияһына бер нисә шәхси фирма Һәм умартасы-фермерҙар, уңышлы эшләүсе, эшкәртеүсе Һәм умарталыҡ Продукцияһын һатыусы берләште, "Башҡортостан Умартасылары" йәмәғәт ойошмаһы эшләп килә. Республика райондарында һәүәҫкәр умартасылар йәмғиәттәре ойошторолған. Рәсәйҙә умартасылыҡ инвентары етештереү буйынса берҙән-бер завод эшләй, яһалма балауыҙ етештереүсе производство бар.

Умартасылыҡ күп кенә ауыл мәктәптәрендә, һөнәри лицейҙарҙа, колледждарҙа, техникумда уҡытыла. Һөнәре буйынса юғары белемде Башҡорт дәүләт аграр университетында алырға мөмкин.

Бөрйән солоҡ балы Роспатенттың 2011 йылдың 27 октябрендәге 122/1-се тауар урынының исемен файҙаланыу хоҡуғына таныҡлығы менән яҡланған. 2012 йылда ул "Рәсәйҙең 100 иң яҡшы тауары" конкурсы лауреаты булды. Бөрйән солоҡ бал ҡорто ла патент менән яҡланған. Рәсәйҙең дәүләт селекция ҡаҙаныштары реестрына ул урта рус тоҡомоноң тоҡом тибы булараҡ индерелгән.

5. "Шүлгәнташ" ҡурсаулығы биләмәһен киңәйтеү - Бөрйән солоҡ бал ҡортон һаҡлап ҡалыуҙың ышаныслы юлдарының береһе

"Шүлгәнташ" – Рәсәйҙең иң бәләкәй ҡурсаулыҡтарының береһе. Уның майҙаны ни бары 225 квадрат километр. Ул уҙған быуат уртаһында, дөрөҫөрәге, 1958 йылда, Башҡорт дәүләт ҡурсаулығы филиалы булараҡ ойошторолған. 1986 йылда үҙаллылыҡ ала. 2012 йылда ЮНЕСКО-ның "Башҡортостан Уралы" комплекслы биосфера резерваты составына инде

"Шүлгәнташ" тәүтормош кешеһенең һүрәттәре ярҙамында бөтә донъяға билдәле булды. Уларҙы ҡурсаулыҡтың бер мәмерйәһендә тапҡандар. Был картиналар галереяһына яҡынса 17 мең йыл. Таш быуаттың таш полотноларында мамонттар, аттар, башҡа хайуандар, серле геометрик фигуралар һәм башҡа бик күп нәмәләр төшөрөлгән.

Әммә ҡурсаулыҡ боронғо ҡаяға төшөрөлгән һүрәттәргә түгел, ә бында йәшәгән ҡара солоҡ бал ҡорто тыуыуына бурыслы.

"Шүлгән-таш" ҡурсаулығы, сағыштырмаса боҙолмаған мөхит менән тотороҡло айырым һаҡланған тәбиғәт биләмәһе булараҡ,майҙаның арттырыу шарттарында төп функцияларҙы гармониялы үтәргә, шул иҫәптән Башҡортостан Республикаһының милли символы булараҡ ҡабул ителгән уникаль мәҙәни-тарихи мираҫ объекттарын һаҡларға һәләтле.

Нөгөш менән Үрек араһында экологик яҡтан ҡиммәтле боронғо япраҡлы урмандар булыуын иҫәпкә алып, тәбиғәтте һаҡлау нормативтарын иҫәпкә алып, "Шүлгәнташ" ҡурсаулығы биләмәһен 36,6 мең гектарға киңәйтергә тәҡдим ителә. һөҙөмтәлә уның майҙаны 59,1 мең гектарға тиклем артасаҡ, был айырым һаҡланған тәбиғәт биләмәләре күләмен арттырыуға булышлыҡ итәсәк ландшафт кимәле, Бөрйән солоҡ ҡорто популяцияһына ғына түгел, ә Бында тейелмәгән Көньяҡ уралдағы киң япраҡлы урмандарға ҡарата бөтә биологик төрлөлөктө көйләү һәм һаҡлау процестарын тотоу мөмкинлеге.

Бал һынауҙарын үткәргәндән һуң, солоҡ балының хуш еҫле һәм тәмле булыуын билдәләнеләр, был, атап әйткәндә, редукциялаусы шәкәрҙәрҙең күп булыуына һәм диастаз һаны юғары булыуына, киреһенсә, сахароза һәм һыуҙың сағыштырмаса аҙ булыуына, уртаса әселеккә бәйле. Солоҡ балы айырыуса өлгөргәнлеге, һеркәһе һәм микроэлементтары күп булыуы, зарарлы ҡушылмаларҙың бөтөнләй булмауы менән айырылып тора.

Бөрйән солоҡ ҡорто Башҡортостан республикаһының ғына түгел, Рәсәйҙең дә милли ҡаҙанышы булып тора, шуға күрә солоҡ бал ҡорттарының биологик, хужалыҡ өсөн файҙалы, этологик билдәләрен, селекция-тоҡомсолоҡ күрһәткестәрен, экологик йәшәү шарттарын, бал ҡорттары ғаиләләренең үрсеү, күсенеү һәм һаҡланыу күрһәткестәренә йоғонто яһаусы яһалма торлаҡ параметрҙарын өйрәнеү теоретик позицияларҙан тыш, умартасылыҡ практикаһы өсөн дә мөһим әһәмиәткә эйә.

Тәбиғәтте һаҡлау нормативтарын иҫәпкә алып, "Шүлгәнташ" ҡурсаулығы биләмәһен 36,6 мең гектарға киңәйтергә тәҡдим ителә. Һөҙөмтәлә уның майҙаны 59,1 мең гектарға тиклем артасаҡ, был айырым һаҡланған тәбиғәт биләмәләре күләмен кимәленә тиклем арттырыуға, Көньяҡ Урал урмандарының биологик төрлөлөгөн көйләү һәм һаҡлау процестарын тотоу мөмкинлегенә, һис шикһеҙ, бөрйән солоҡ популяцияһына булышлыҡ итәсәк бал ҡорттары.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Юмагужин Ф.Г. История и современное состояние Бурзянской бортевой пчелы – изд-во Гилем, 2010 – С.12-15.
2. Вахитов Р. Ш. Пчелы и люди – Уфа, 1992 – 228 с. илл.
3. Косарев М.Н. Пчела: о башкирской бортевой пчеле. Уфа: Инеш, 2015. – 120с.


© Ҡазыева С.Г., Әлибаев З.А., 2023

**УДК 8**

*Ҡарасова З.Н.,*
*Сибай гимназия – интернатының*
*башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы*
*г. Сибай*

# БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ ДӘРЕСТӘРЕНДӘ ДАЛЬТОН ТЕХНОЛОГИЯҺЫ ҠУЛЛАНЫУҘЫҢ ЭФФЕКТИВ АЛЫМДАРЫ (ИННОВАЦИОН ЭШ ТӘЖРИБӘҺЕНӘН)

**Аннотация.** Дальтон – это город в США, где впервые была создана такая школа. Отсюда и произошло название. Американский педагог Хален Паркерхерст, изучив положение дел в школах, пришла к заключению о том, сто в них осуществляется насильственное обучение, подавляющее естественное желание детей свободно высказывать свои мысли, задавать вопросы, играть. Поэтому она поставила своей задачей найти новые подходы организации жизнедеятельности детей в общеобразовательном процессе. Паркерхерст разработала «Лабораторный план», имеющий своей целью научить детей жить в социуме, развивать ум, тело и дух. В основе технологии «Лабораторного плана» лежала идея объединения деятельности учителя и учащихся по достижению индивидуализированных целей обучения.

Сущность принципов технологии.

**Annotation.** Dalton is a city in the USA where such a school was first established. Hence the name. American educator Halen Parkerhurst, having studied the situation in schools, came to the conclusion that forced education is carried out in them, suppressing the natural desire of children to freely express their thoughts, ask questions, and play.

**Ключевые слова:** свобода , самостоятельность, сотрудничество.

**Key words:** freedom, independence, cooperation.

Бөгөн белем биреү системаһы, мәғариф өлкәһендәге үҙгәрештәр дәрестәргә яңы талаптар ҡуя. Улар Федераль дәүләт белем биреү стандарттарында асыҡ сағылыш таба, башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәре лә заман менән бергә үҫешә, камиллаша. Шуға күрә, уҡыусының һәләтен асыу,юғары технологиялы, конкурентлы тормошҡа әҙер шәхес тәрбиәләү төп маҡсаттарҙың береһе.

Ә хәҙерге заман уҡытыусыһының, бигерәк тә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһының, төп проблемаһы нимәлә һуң?

Беренсенән, балалар әҙәби әҫәрҙәр уҡымай! Ә ниңә уҡыһын ул? Информация былай ҙа етерлек кеүек: радио-телевидение, интернет селтәре һ.б. Ә икенсе проблема мөһимлеге буйынса тәүгеһенән ҡалышмай: балалар үҙ-ара аралаша, аңлаша белмәй. Шул уҡ СМС- сервистар, телефондар, скайп-бәйләнештәр заманы кешеләрҙе бер-береһенән алыҫлаштырҙы, матур итеп

аралашыу, бер-берендә тыңлай, ишетә, аңлай белеү һәләттәрен юкка сығарып бара.

Ошо проблемалар тураһында уйланыуҙар, эҙләнеүҙәр беҙҙе Дальтон технологияһы элементтарын ҡулланыуға алып килде. Дальтон – Америкалағы ҡала, бында беренсе тапҡыр ошо технологияға ҡоролған мәктәп төҙөлә. Ә хәҙерге көндә Рәсәйҙә был технология менән Мәскәү, С. Петербург ҡалаларында бер нисә мәктәп эшләй.

Америка педагогы Хелен Паркерхерст, мәктәптәрҙең эш алымын өйрәнеп, күп осраҡта мәктәптәрҙә балаларҙы мәжбүри уҡытыу бара, тигән һығымтаға килгән. Был технологияның актуаллеге нимәлә һуң? Ни өсөн ошо технологияның элементтарын ҡулланып уҡытыуҙы беҙ отошло тип һанайым.

Беренсенән, Дальтон технологияһы баланың шәхси психологик үҙенсәлегенә иғтибар итә, икенсенән, уҡыусының коммуникатив компетентлығын үҫтерә. Ә өсөнсөнән, белем алыу эшмәкәрлегендә әүҙемлек һәм яуаплылыҡ тойғолары тәрбиәләй.

Шулай уҡ был технологияның ыңғай яҡтарының береһе белем алыу процесында көсөргәнеш кәмеүе, сөнки һәр бала үҙенә индивидуаль эш темпы һайлай. Шуның һөҙөмтәһендә – уҡыуға ҡыҙыҡһыныу арта.

Дальтон технологияһын ҡулланғанда, уҡытыусының роле лә үҙгәрә. Ул берҙән-бер белем сығанағы булыуҙан туҡтай. Бала үҙ аллы уҡырға, уҡығанын аңларға өйрәнә.

Дальтон технологияһының **маҡсаты**:

- баланың индивидуаль үҫешенә булышлыҡ итеү, уның йәмғиәттә йәшәү тәжрибәһен булдырыу, уҡыу, белем алыу эшмәкәрлегендә үҙаллылыҡ тәрбиәләү.

**Бурыстары:**

1. Әҙәби әҫәр уҡырға йәлеп итеү.
2. Уҡыусыларҙы эҙләнеү эшенә ылыҡтырыу.
3. Үҙ-ара аралашыу мәҙәниәтен үҫтереү, толерантлыҡ тәрбиәләү.
4. Аудитория алдында сығыш яһарға өйрәтеү.

Беҙ Дальтон технологияһының элементтарын ҡулланып, 7-се йыл эшләйбеҙ. Был технология түбәндәге **принциптарға** нигеҙләнеп эшләүҙе талап итә:

1) ирекле булыу принцибы;
2) үҙаллылыҡ принцибы;
3) хеҙмәттәшлек принцибы;

Был принциптарҙы тормошҡа ашырыу өсөн беҙҙең интернат системаһы бик уңайлы, балалар янында һәр саҡ уҡытыусы йәки тәрбиәсе була, тәрбиәсе, китапханасы консультант ролен үтәй.

**Ирекле булыу,** тимәк, уҡыусы эш формаларын, эш темпын, белем алыу сығанаҡтарын, бергәләп эшләү өсөн партнерын үҙе һайлай.

**Үҙаллылыҡ принцибы** – уҡыусы үҙ аллы алған белем кимәленә һәм шул белеме өсөн яуаплы булыуҙы аңлата.

**Хеҙмәттәшлек принцибы** буйынса уҡыусы белем алыуҙың формаһын үҙе һайлай: индивидуаль, парлы, бәләкәй төркөмдәрҙә эшләү мөмкинлеге була.

Уҡыусы ярҙам һорап, кемгә теләй, шуға: үҙенең класташына, уҡытыусыға, тәрбиәсегә килә ала. Ә ярҙам итеү килеп тыуған һорауҙарға яуапты ҡайҙан һәм нисек эҙләргә икәнен күрһәтеүҙе аңлата.




Был технология Дальтон-план аша тормошҡа ашырыла. Календарь – тематик планда һәр яҙыусыға бер Дальтон – дәрес ҡаралған. Шулай итеп, 10-сы класта бөтәһе 12 Дальтон дәрес планлаштырылған.

Дальтон-пландың компоненттары:

1. Эштәр биреү;
2. Лаборатория – дәрес;
3. “Өй”.

**1.Биремдәр йәки үҙ аллы эштәр.**

Уҡыусыларға төрлө кимәлдәге һорауҙар (йәки эштәр) бирелә. Ошо этапта **технологик карта** ҡулланыу отошло (ҡушымта №1, №2 №3). Мин ул эштәрҙе 3 кимәлдә әҙерләйем:

– түбән (ябай) – еңел һорауҙар, уртаса кимәлдәге уҡыусыға.
– уртаса – үҙ аллы эшләй алған бала өсөн
– юғары – һәләтле уҡыусыға тәғәйенләнә.

Уҡыусылар үҙ мөмкинлектәренә ҡарап, төрлө кимәлдәге һорауҙарҙы үҙ аллы һайлайҙар.Хәҙер минең уҡыусыларым түбән кимәлдәге эштәрҙе бөтөнләй һайламайҙар, уларҙа уҡыуға ынтылыш артты. Артабан – үҙ аллы эш: һорауҙарға яуап эҙләү этабы башлана. Түбәндәге **хәтернамә** буйынса эшләйҙәр. Ул һәр береһендә бар.

**Хәтернамә**

***1. Тема буйынса эш алғас алғас, ваҡытыңды көндәргә дөрөҫ бүл (Ниндәй эште ҡасан үтәйһең?). Уҡыусының индивидуаль план картаһы( ҡушымта №4)***

***2. Үҙеңә партнерҙар һайла.***

***3. Эште яҡшы итеп уҡы, уның маҡсатын аңла.***

***4. Ваҡытыңды әрәм итмә, бер нәмәне лә һуңға ҡалдырма.***

***5. Уҡытыусы менән кәңәшләш, иптәштәрең менән үҙ-ара аралашып эшлә: уларҙа ла һинекенә оҡшаш заданиелар булыуы мөмкин. Башҡаларҙан һора, үҙең дә аңлат. Аңлатҡан һайын үҙең дә яҡшыраҡ төшөнөрһөң.***

***6. Китапханала эшлә, белешмәләр ҡуллан. Әҫәрҙе бик яҡшы итеп уҡып сыҡ.***

***7. Эште тапшырыу формаһын үҙең һайла: реферат, телдән яуап, сығыш, презентация һ.б.***

**Үҙ аллы** эш ваҡытында бала китаптар, һүҙлектәр, төрлө сығанаҡтар менән эшләргә өйрәнә. Иң беренсе сиратта ул әҙәби әҫәрҙе уҡый. Шунан эҙмә-эҙлекле рәүештә әҫәрҙе анализларға, образдарға характеристика бирергә, төрлө сығыштар әҙерләргә өйрәнә.

**2. Лаборатория.** Унда балалар эшләнгән эштәр буйынса отчет бирәләр, үҙ аллы эштә килеп сыҡҡан һорауҙар буйынса дискуссия үткәрәләр. Лаборатория: отчет-дәрес, коллектив дәрес, контроль тест, пресс-конференция, эссе һәм башҡа формалар ҙа була. Бындай дәрестәр бик мөһим роль уйнай: мин үҙаллылыҡ процессына ҡамасауламай ғына эшкә йүнәлеш биреүсе булам. Үҙемдең журналымда кластың һәм һәр баланың эше ниндәй кимәлдә барыуын билдәләйем. (ҡушымта №5,) Дәрес ваҡытында балаларҙың белемдәрен тикшереү өсөн уҡыусының **индивидуаль маршрут картаһын** ҡулланыу уңайлы. (ҡушымта № 6,7) Бында бер үк эш төрлө йүнәлештә бирелгән.

**3. «Өй» этабында** балаға өй шарттарына яҡын уңайлы эш урыны булдырыла. Беҙҙең интернатта һәр баланың үҙ урыны, шулай уҡ иркен китапхана, уҡыу залы, ял итеү бүлмәләре бар. Уҡыусыларға уҡырға, белем алырға бөтә шарттар, мөмкинселектәр бар. Ошо этапта алда әйтелгән эштәрҙе үтәйҙәр.

Шулай итеп, Дальтон технологияһын ҡулланып, 3-сө йыл эшләү осоронда уҡыусыларым ярайһы уҡ уңыштарға өлгәште: китапханаға ҙур теләк менән йөрөй башланылар. 8-се класта – 50 % бала китап уҡыһа, 9-сы класта – 75%, ә 10-сы класта – 83% барып етте (диаграмма). Күптәр әҙәби китаптар алып уҡыйҙар, ҡала китапханаһына ла йөрөйҙәр. Уҡыусылар үҙ-ара хеҙмәттәшлек итергә, аралашырға өйрәнделәр. Дальтон технологияһы белем сифатын күтәреүгә лә ыңғай йоғонто яһай. Шулай уҡ балалар үҙ аллы белем алырға, сығышт яһарға өйрәнделәр. Был технология менән эшләүемде артабан дауам итәсәкмен. Миҫал өсөн ошо ҡушымта килтерелде.( Ҡушымта №1)

Ҡушымта №1

**Юғары баһа өсөн**

| № | **Әҙерлек өсөн эштәр** | **Эш төрҙәре** | **Сығанаҡтар** |
|---|---|---|---|
| 1 | «Ҡарлуғас» драмаһын уҡырға, йөкмәткеһен үҙләштерергә | Уҡырға | «Әҙәбиәт» 10 кл. Хрестоматия |
| 2 | «Ҡарлуғас» драмаһы тәү тапҡыр ҡайҙа,ҡасан ҡуйыла? | Дәфтәргә яҙырға | М. Хәмиҙуллина “Б.Бикбай ижады” |
| 3 | Драманың нисә варианты бар? | Телдән әҙерләнергә | М. Хәмиҙуллина “Б.Бикбай ижады” |
| 4 | Драмаға анализ:<br>1.Драмала сағылдырылған тарихи осорға характеристика бир.<br>2.Темаһы<br>3.Драманың идеяһын асҡан урындарҙы табып билдәлә.<br>4.Төп конфликт<br>5.Образдар системаһы<br>-Ҡарлуғас менән Шатмораттың фольклорҙа прообраздары кем?<br>- башҡорт ҡатын –ҡыҙҙарының героик образын тыуҙырыу теләген Б.Бикбайҙа кем уята?<br>-драмала телгә алынған тарихи шәхестәр?<br>6. Драманың тел үҙенсәлектәре:<br>- мәҡәл-әйтемдәр<br>- сағыштырыу<br>- метафора<br>- йырҙар<br>7.Әһәмиәте<br>- ер һатыу проблемаһы менән ихтилалдың бәйләнешен аңлатырға;<br>- ер проблемаһының бөгөн дә актуаль булыуы. | Дәфтәргә яҙырға<br>Телдән әҙерләнергә<br>Миҫалдарҙы дәфтәргә яҙырға<br>Диспутҡа әҙерләнергә | «Әҙәбиәт»10 кл Дәреслек<br>«Йәшлек», «Киске Өфө» гәзиттәренән мәҡәләләр |

## ӘҘӘБИӘТ


1. Гусева Е.Ю. Дальтон-план как инновационный подход к преподаванию русского языка // «Наука и школа», 2014. – №6. – С. 38-39.
2. Жигалова, М.П. Современные педагогические технологии. // Традиционное и новаторское в преподавании литературы в школе и вузе. Ч. 1 – Брест, 2002.
3. Левитес Д.Г. Практика обучения: современные образовательные технологии. – Мурманск, 1997.
4. Новые педагогические и информационные технологии в системе образования / Под ред. Е. С. Полат. – М., 1999
5. Окунев А. А. Как учить не уча. – Спб., 1996.


© Ҡарасова З.Н., 2023

**УДК 821**

*Ҡорманаева А.З., студент*
*Ғилми етәксеһе: Әлибаев З.А., филол. ф. канд., доц.*
*М.Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

## ӘБЙӘЛИЛ РАЙОНЫНЫҢ ЛЕГЕНДАЛАРЫ ҺӘМ РИҮӘЙӘТТӘРЕ

**Аннотация**: Легенды и предания Абзелиловского района и важность их сохранения.

**Annotation.** Legends of the Abzelilovsky district and the importance of their preservation.

**Ключевые слова:** легенда, нравственное богатство, башкирское народное творчество.

**Key words:** legend, moral wealth, bashkir folk art.

Әбйәлил районы – легендаларға һәм риүәйәттәргә бай. Уларҙа башҡорт халҡының үткәне, көн-күреше, рухи байлығы, ижады сағыла. Матур тәбиғәткә бәйле, быуындан-быуынға килеп еткән бик күп легендалар бар. Уларҙы миңә өләсәйем – Кусимова Әминә Барый ҡыҙы һөйләне, һәм башҡорт халыҡ ижады китабының мәғлүмәттәре менән тулыландырҙым. Шул легендалар, риүәйәттәр менән таныштырып үткем килә.

Ҡыҙҙар ҡырсыны

Һомғол ҡыҙҙар йыйылғандай, баҫыу уртаһында өйөлөшөп үҫкән ҡайындар тирә-яҡҡа матурлыҡ өҫтәй, йәм бирә. Ауылдан яҡын баҫыу ситендәге оло юл янында урынлашҡан был урман бушҡа ғына "ҡыҙҙар ҡырсыны" тип аталмаған. Был урманда ҡыҙҙар киске уйынға йыйылғандар. Туйҙың иң мөһим йолаһы – ҡыҙ йәшереү бында атҡарылған. Нисә быуын тарихын, уй-кисерештәрен һаҡлаған матур урман, хәҙерге ваҡытта ҡороп барыуы күңелде әрнетә.

Сарғыэлгән

Ауыл янындағы болондо үткәс, Керәкә һаҙы бар. Уның ауыл янына етәрәк бер урынының үҙенең ҡыҙыклы исеме бар "Сарғыэлгән". Уның тарихы ябай ғына. Бер юлсы шул ташта ултырып ял иткән һәм аяғындағы сарығын сисеп шул ташҡа киптерергә ултыртҡан. Ни өсөндөр ул аяҡ кейемен онотоп ҡалдыра. Шунан бирле был таш шул исемде йөрөтә. Сарыҡ – иләнмәгән тиренән эшләнгән аяҡ кейеме. Көндәлек тормошта байрамдарға кейгәндәр.

Өлтөк ҡарағастар

Әбйәлилдә мөғжизәле өлтөк ҡарағастар бар. Көҙгөһөн билдәһеҙ кешеләр был тәбиғәт ҡомартҡыларының олононан ике яҡлап бысып кит кәйне. Әлеге хәл бөтә республиканы шаҡ ҡатырғайны, уларҙы һаҡлап ҡалыу өсөн бар халыҡ күтә релгәйне. Был мөғжизәле ағас тарҙың тарихы бик үҙенсәлекле. Ҡасандыр, меңәр йылдар элек, халыҡ ҡош юлы буйлап көньяктан төньяҡҡа йәки

киреһенсә күсеп йөрөгәнендә ярты юлды үтеү ҙәрен бөҙрә ҡарағастарға ҡарап билдә ләгән һәм ошонда туҡтап, ял итеп киткән, тигән легенда бар.

Икенсе төрлө тарихы ла Ҡужан ауылы халҡының хәтерендә тороп ҡалған. Был ерҙәрҙә бер бай йәшә гән. Тирмәләр ҡороп,байлыҡта-байманлыҡта йәшәгән был кеше матурлыҡ өсөн Австралиянан өлтөк ҡарағастарҙың үҫентеләрен алдырып ултыртҡан, имеш, тип тә һөйләйҙәр. Күрше Силәбе өлкә һенең Магнитогорск ҡала һынан килгән урыҫтар: «Библияла был ағастар «ожмах ҡап ҡаһы», тип яҙылған», тип тә әйттеләр.

Бындай ҡарағастар меңәр йылдар элек һыу аҫтында үҫкән. Беҙҙең ошо ерҙәрҙе диңгеҙ уратып алған булған, һәм улар шул замандан ҡалған, тигән фараз да бар. Бөгөн 11 төп ҡара ғастың унауһы йәшелләнеп ултыра. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, бер ағас терелә алмаған.

Яҡтыкүл

Борон Яҡтыкүлгә ҡараған тау биттәре тас ҡарағай урман булған. Башҡорттар рус дәүләтенә ҡушылғас, бер ваҡыт күлдец ситенә генә рус баярҙары йорт һалдыра башлаған. Рөхсәтһеҙ-ниһеҙ ҡылаиыуҙарына был тирәлә йәшәгән башҡорттарҙың асыуы килгән. Берҙән-бер көндө башҡорттар: «Былай эстән генә янып йөрөүҙән ни файҙа, ер китә бит», – тип йыйылышып кәңәшләшкәндәр ҙә тегеләрҙе фиран туҙҙырғандар. Ҡасҡаны ҡасып ҡотолған. Ҡасып өлгөрә алмағандарын үлтереп бөтәләр ҙә өйҙәренә ут төртәләр. Янғын бик көслө була. Тау буйындағы ҡарағастар ҙа янып бөтәләр. Тауҙың түше ҡап-ҡара булып ҡала. Аҙаҡтан күлдә балыҡсылап йөрөүселәр яр ситендә бер мунсалың ғына имен ҡалыуын күрәләр. Урыҫтарҙан күрмәксе, уны баня тип йөрөткәндәр. Күлдең исеме лә Банное озеро булып киткән. Күлдең иҫке исеме лә бар. Уны элек Мауыҙлы күле тип йөрөткәндәр. Ни өсөн шулай аталған, берәү ҙә әйтә алмаған, Яҡтыкүл исеме һуңғы осорҙа ғына бирелгән .

Мауыҙлы

Яҡтыкүлде элек халыҡ Мауыҙлы күл тип йөрөтә ине. Ул күл борон ҡара урман менән уратылған булған. Күлдең эйәһе – ялмауыҙы булған. Был яман мәскәй күлде өйрөлтөп йөрөткән. Күлтә януар, ҡош-ҡорт килергә ҡурҡҡан, һыу эсергә, килгән береһен асыулы сағында йотоп .алып торған. Хатта күл өҫләп һауанан осоп барған ҡошто ла тартып алған, тиҙәр. Шуға эйәле был күлде Мауыҙлы күл тип атағандар. Урыҫтар Банное озеро тиҙәр. Бында элек ниндәйҙер яу ваҡытында бер урыҫ ғәскәре туҡталып, мунса һалып, йыуынып киткән. Мунсаһы тороп ҡалған. Шунан урыҫтар Банное озеро тип исем ҡушҡандар. Хәҙер яңыса исем ҡуштылар: Яҡтыкүл тиҙәр. Уныһын күл һыуының тоноҡ булыуынан әйтәләрҙер инде. Күл һыуы бик тоноҡ, төбө үтә күренеп ята. Көндөҙ төбө лә яп-яҡты.

Тоҙлокүл

Был легендала бай ҡыҙы ғашыҡ булған ярлы егеткә ,ләкин унын атаһы уларҙың мөхәббәтенә ҡаршы була. Шуға улар икәүләп ҡасырға мәжбүр булғандар. Уларҙы атаһының хеҙмәтселәре баҫтырып барып тоталар, һәм ҡыҙының һөйгәнен ултерәләр. Егет ҡолаған ерҙә , уба килеп сыға . Шул убала

ҡыҙҙың әсе күҙ йәштәренән күл барлыҡҡа килә. Ул күл Мулдаҡ кул тип атала. Уның хәҙерге мәлдә һыуы тоҙло һәм шифалы.

Был легендаларҙы беҙ киләсәк быуынға еткерер өсөн яҙып, һөйләп, тарихҡа ҡалдырырға бурыслыбыҙ. Сөнки башҡорт халҡы үҙ тарихын, тәбиғәтен хаҡларға һәм яратырға тейеш.

## ӘҘӘБИӘТ

1. Нәҙершина Л.Ф. Башҡорт халыҡ ижады: риүәйәттәр, легендалар. Икенсе том . – Өфө: «Китап», 1997. – 440 бит.

© Ҡорманаева А.З., Әлибаев З.А., 2023

**УДК 821**

*Ҡотлобаева А.Р., студент*
*Ғилми етәксеһе: Әлибаев З.А., филол. ф. канд., доц.*
*М.Акмулла ис. БДПУ, Өфө к.*

## ҒАИЛӘ ҠИММӘТТӘРЕНЕҢ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕНДӘ САҒЫЛЫШЫ

**Аннотация**. В нашей жизни семья играет важную роль, потому что у каждого человека должно быть место, где он почувствует любовь, заботу и тепло в душе. Но, к сожалению, сейчас многие утратили понятие «семейные ценности», не дорожат, пренебрегают ими. И поэтому многие писатели, поэты раскрывают проблему сохранения семейных ценностей в своих произведениях. С этой целью проанализированы произведения Мустая Карима и Зайнаб Биишевой.

**Annotation.** In our life, the family occupies an important place, because every person should have a place where he will feel love, care and warmth in his soul. But, unfortunately, now many have lost these values, do not value them, neglect them. That is why many writers and poets reveal the problem of preserving family values in their works. For this purpose, the works of Mustai Karim and Zainab Biisheva are analyzed

**Ключевые слова**: герой, писатель, мысль, повесть, произведение, образ, проблема, роман, семейные ценности.

**Key words**: hero, writer, thought, novel, work, image, problem, piece, family values.

Ғаилә ҡиммәттәренә, һис шикһеҙ, иң беренсе, мөхәббәт, тоғролоҡ, яуаплылыҡ, ғаилә ағзаларының бер-береһенә яҡшы, ихтирамлы мөнәсәбәте, балаларының ата-әсәһенә изгелекле мөғәләмәһе, үҙ-ара татыулыҡ, яуаплылыҡ һәм хәстәрләү, зарарлы ғәҙәттәрҙән азат булыу, сәләмәт тормош алып барыуы инә. Туғандар араһындағы мөнәсәбәттәр, шул ҡиммәттәрҙе һаҡлауҙа ҙур роль уйнай, ә инде тап улар бер-береһе менән нисек мөғәләмә итә. Сөнки иң ауыр

минуттарҙа, ата-әсә эш менән мәшғүл булғанда, бер туған ҡусты йәки һеңле эргәлә булып ярҙам ҡулын һуҙа ала.

Ошо ҡиммәттәр ябай кеше өсөн иң мөһим булырға тейештер. Әммә, үкенескә ҡаршы, күптәр быны һанға һуҡмайҙар. Был бик актуаль проблема. Сөнки ғаилә элек-электән кеше тормошонда ҙур урын биләй. Ошо проблеманы асыҡлау, ғаилә ҡиммәттәрен һаҡлау өсөн бик күп хеҙмәттәр яҙылған. Төрлө быуын яҙыусыларының, шағирҙарының ижад иткән әҫәрҙәрендә,йәғни ижад емештәрендә, ошо ҡиммәттәр нигеҙ булып торалар.

«Беҙҙең өйҙөң йәме» повесында туғанлыҡ, үҙ-ара мөнәсәбәт,бер-береңә хөрмәт, ихласлыҡ ярылып ята. Ҡәрҙәштәрҙең мөнәсәбәттәрен сағылдырған әҫәрҙәге бер мәлде иҫкә төшөрөргә теләйем. Йәмил өйҙә булған саҡта, әсәһе Оксана исемле һеңлеһен алып килә, улынан Оксанаға сисенергә ярҙам итеүен һорай. Малай шунда уҡ Оксананы ҡосаҡлап, унан пальто ала. Йәмил һеңлеһенә уйынсыҡтар күрһәтә башлай, ләкин Оксана, башын түбән эйеп, өндәшмәй генә тора. Быға Йәмил, яҙ еткәс, уға әкиәттәге малайҙың йәшерелгән хазинаһын бүләк итәсәген әйтә. Көслө дауыл өсөн ҡапыл тәҙрә төбөндә шартлау яңғыраны. Оксана: «Ой!», «Ҡас тиҙерәк, Йәмил, ҡас, ана фашист килгән тышта! Ишетәһеңме, мылтыҡ ата бит! Ул уҫал! Ҡас тиҙерәк!». Йәмил, уйлап та тормай, мылтығын сығарып һеңлеһенә фашист атыуын түгел, ә ел булыуын аңлата. «Беләһеңме, Оксана, мин бар саҡта һин ҡурҡма, йәме?»,- тип һылыуын йыуата ул. Ағай менән һеңле араһында ошондай мөнәсәбәттәр булырға тейеш тип уйлайым.

Шундай уҡ мөнәсәбәт Зәйнәб Биишеваның «Кәмһетелгәндәр» романында сағыла:

«Сәрбиямал:

– Абау!.. Ҡәһәр һуҡҡыры! Тешең серегере!..– тип эҫе ҡарғанып Емеште иҙәнгә атып бәрҙе. Бының артынса һикереп тороп, тибеп тә ебәрәйем тигәндә, Бибеш, араға ташланып, һеңлеһе Емеште үҙ тәне менән ҡапланы. Сәрбиямалдың бейек үксәле ҡара итеге уның тап биленә тура килде. Ләкин был тупаҫ, ҡырағай ҡыланышҡа йөрәге һыҙлаған Бибеш ауыртыуҙы тойманы ла. Емеште күтәреп һөйә-йыуата тышҡа алып сығып китте. Йәнеш менән Иштуған да унын, артынан эйәрҙе. Уларға хәҙер был шыҡһыҙ үгәй әсәй түгел, кескәй туғандарын шулай ыҙаларға юл ҡуйып торған аталары ла ҡапыл ят, сит кеше һымаҡ тойолоп китте. Улар, аласыҡҡа инеп, был яңы ауыр тойғонан оҙаҡ ваҡыт телһеҙ ҡалып ултырҙылар. Ә өйҙә йәш ҡатын пыр туҙҙы».

Бында автор туғандарҙың бер-береһе өсөн борсолғандарын, яҡлағандарын күрһәтә. Романда өлкәндәр генә түгел, ә кеселәре лә ағай-апайҙарын йәлләйҙәр һәм нисек кенә булһа ла ҡыйын ваҡытта ярҙам ҡулын һуҙырға тырышалар. Шулай итеп, Емеш апаһын йәлләп ярҙам иткән өсөн табандары ҡанағансы һалҡын тышта ялан аяҡ тора: «– Йәнеш, бар утын әбин! Мейес яҡ! Күрмәйһеңме ни, көн кисләп килә!– тип екеренде Сәрбиямал. – Үҙем алып инәм, апай! – тине Емеш. Сәрбиямалдың яуабын да көтмәй, бер ҡат күлдәктән, ялан аяҡ, ялан баш көйө тышҡа, ялан кәртәгә йүгерҙе», «Ләкин Емеш хәҙер ул

турала түгел, өшөгән апаһына әҙ генә булһа ла йылынырға мөмкинлек биреү тураһында ғына уйланы».

Мостай Кәрим дә, Зәйнәб Биишева ла үҙҙәренең әҫәрҙәрендә бер туғандар араһындағы мөнәсәбәттәрен, бер-береһе хаҡында хәстәрлеген, ауыр ваҡытта ярҙам итеүҙәрен һәм яҡлауҙарын, бер-береһенә терәк булыуҙарын күрһәтте. Ғаилә ҡиммәттәре проблемаһына бағышланған башҡа күп төрлө әҫәрҙәр ҙә бар, әммә бергә үҫкән туғандар араһындағы ғаилә ҡиммәттәр проблемаһын был иҫ киткес әҫәрҙәрҙә күрергә мөмкин. Сөнки иң яҡын кешеләребеҙҙең береһе – бала саҡтан бергә үҫкән, төрлө ваҡыттарҙа гел янда булған беҙҙең ағайҙар һәм апайҙар.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Кәримов М.С. Беҙҙең өйҙөң йәм. Радость нашего дома: повесть/ Мостай Кәрим; [В.А. Осееваның рус теленә тәржемәһе.]. – Өфө: Китап, 2014. – 192 бит.

2. Биишева Зәйнәб. Кәмһетелгәндәр. Роман. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1990. – 432 бит.

3. Шакирова Р.М., Моталов А.Ғ. Сәләмәт бала. – Өфө: Белая река, 2013. – 120 бит.


© Ҡотлобаева А.Р., Әлибаев З.А., 2023

**УДК 821**

*Ҡотлоғәләмов Р.К., студент*
*Ғилми етәксеһе: Әлибаев З.А., филол. ф. канд., доц.*
*М. Акмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

## НӘБИ ТАРИХЫ – ИЛЕМ ТАРИХЫ

**Аннотация.** В этой статье рассказывается о том, как создавалась деревня Набиево, кто участвовал в это и когда произошло событие. А так же происхождение и род каждой фамилии жителей деревни.

**Annotation**. This article describes how the village of Nabievo was created, who participated in it and when the event occurred. As well as the origin of the genus of each surname of the villagers.

**Ключевые слова:** деревня, род, фамилия.

**Key words:** village, genus, surname.

Нәби ауылы бик матур урында, Ағиҙел йылғаһының ике яҡ ярында урынлашҡан. Тәүҙә кешеләр йылғаның һул яҡ ярында ғына йәшәгәндәр, һуңынан уң яҡ ярына ла күскәндәр. Ауылда өйҙәр һаны артҡан, тик ауылдың исеме булмаған. Бер мәл 6-сы, 9-сы кантондарҙың попечителе Иван Иванович Филатов ошо ауылға килеп сыҡҡан. Ауыл исемһеҙ икәнен белеп ҡалып, уға исем бирергә булған. Тиҫтер малайҙарҙы йыйып, уларҙы йүгертеп, ярыш үткәргән. Нәбиулла исемле малай беренсе килгән. Шунан алып, ауыл уның

исеме менән йөрөтөлә башлай. (Хисмәтуллин Зиннурҙан яҙылып алынды. Уға Хәйрулла олатаһы һөйләгән).

Тарих фәндәре кандидаты Әнүәр Зәкир улы Әсфәндиәров ауылдың барлыҡҡа килеү тарихын түбәндәгесә аңлата.

Йәүгәзе йылғаһы буйындағы утарҙарҙы Байназарҙар ауылға әйләндергән. Ауылға беренсе булып Нәбиулла Мәрәсов (1787 йылғы) күскән. Аҙаҡтан уның улдары: Әсәтулла, Ғәлиулла, Зиннәтулла һәм Хисмәтулла, ҡустылары Фәтҡулла һәм Рәхмәтулла ла.

1848 йылда Филатов ауылда булған. Ул өйҙәрҙең бер-береһенән 10-15 сажин алыҫлыҡта тороуын, ә ихаталарҙың араһында янғын хәүефһеҙлеге өсөн 12 сажин (24 метр) буш йылға, күл һәм йырын буйҙарында урынлашҡанын күҙәткән.

1845 йылда башҡорттарға ағас әҙерлеге, ишле ғаиләләргә икешәр өй төҙөргә бойорған. Яңы өйҙәр иҙәндән түбә таҡтаһына тиклем кәмендә өс метр бейеклектә, урам яҡ стенаһынан ике-өс тәҙрәле булырға тейеш булған. Бынан тыш, сыуал урынына мейес ултыртҡандар, сөнки сыуалға утын күп киткән һәм күҙҙәр өсөн төтөнө зарарлы булған.

Филатов ауылдарҙы ҡарап сығып, тиҙ арала ҡапҡалар эшләүен талап иткән. Ауыл барлыҡҡа килгәндә унда тик ун ғына өй булған, ә 1920 йылда өйҙәрҙең һаны етмеш туғыҙға еткән.

Нәби ауылы халҡы ҡарағай-ҡыпсаҡ ырыуына ҡарай. Ағасы – ҡарағай, ҡошо – ҡарсыға, тамғаһы – даға.

Ауылда йәшәгән кешеләр бер-нисә араға бүленә. Иң киң таралғаны – «Һатыбалдар». Уларҙың килеп сығыу тарихы түбәндәгесә. Ҡәнзәфәр исемле кешенең ике улы булған. Тик уның ир балалары оҙаҡ йәшәмәгән икән... Шуға күрә, ир бала донъяға килгәс, уны тәҙрә аша һатҡандар, шунан был бала үлмәй, үҫеп ир еткән. Был хәлдән һуң таралған кешеләр «Һатыбалдар» араһы тип йөрөтөлә Ә икенсе ир бала тыуғас та уны һауытҡа (этаяҡҡа) һалып, эт алдына биргәндәр. Эт балаға теймәгән. Был кешеләрҙән таралған заттарҙы «Эталмаҫтар» тип йөрөтәләр. Был араға Ҡотлоғәләмовтар инә.

Бынан тыш, ауылда «Ҡара табандар» араһы бар. Был араға Хисаметдиновтар, Мөфтәхетдиновтар инә.

Йәнсуриндарҙы «Һаҫыҡ бесәй» араһы тип йөрөтәләр, сөнки улар «Ҡара табандар» ҙан гел көлгәндәр. Быға яуап итеп, Йәнсуриндар йәйләүгә киткәс, «Ҡара табандар» улар йәшәгән өйгә үлгән бесәй таратҡандар. Йәйләүҙән ҡайтҡансы улар һаҫыған. Исем шунан килеп сыҡҡан да инде.

Абҙайҙар араһын икенсе төрлө «Йәшел кәртүктәр» араһы тип йөрөтәләр. Ул араға Теләүбаевтар инә, ә «Көҙәндәр» араһына – Сөләймәновтар, Туҡтамышевтар.

Ауылда, Ағиҙелдең уң яҡ ярында мәсет төҙөлгән. Уны 1914 йылда халыҡтан йыйылған аҡсаға Ғәзитулла исемле кеше төҙөткән. Мәсет ҙур, бейек манаралы булған. Яҙлы-көҙлө, Ағиҙел аша юл өҙөлгән мәлдә, ауылдың һул яғында, Теләүбаев Ғимадисламдарҙың өйө урынына биш намаҙлыҡ йорт

төҙөлгән. Ауыл кешеләре намаҙға шунда йөрөгән. Шулай итеп, ауылда ике мәсет булған. Мөһим ауыл мәсьәләләрен хәл итеү өсөн халыҡ мәсет янына йыйылған. Ул мәсет 1936 йылға тиклем ултырған. Һуңынан уҡытыусы Ҡөнәфин Хисаметдин етәкселегендә, мәсеттең манараһын алып ташлағандар. Йортон мәктәп иткәндәр, ә 1965 йылдарҙа иҫкергән йорттарын емергәндәр һәм утын итеп яҡҡандар. Ауылда указлы мулла итеп Мораҙым ауылынан килгән Үтәбаев Мәхмүтдин тигән кешене ҡуйғандар.

Ауылда халыҡты хеҙмәтләндереү өсөн Йәүгәзе йылғаһы буйында һыу тирмене ҡорғандар. Уны 1915 йылда Фәтҡуллин Ғүмәр исемле кеше төҙөткән. Ауыл халҡы тирмәндән он алған. Хаҡы килтерелгән ашлыҡҡа ҡарап алынған, ул «кәрсе» тип аталған. Тирмән 1928 йылға тиклем эшләгән. Әле лә Йәүгәзе йылғаһы буйында быуылған быуа эҙҙәре һаҡланып ҡалған.

Һуңынан 1939 йылдарҙа «Маяҡ» колхозы Айыуҙы йылғаһында тирмән төҙөткән. Ул тирмән 1957 йылға тиклем эшләгән.

Әлеге ваҡытта Нәбилә 400-500 кеше йәшәй. Ауылды матур бер мәсет биҙәй, төп урамдарына асфальт һалынды. Байҡаш һәм Ҡуян ауылдарында, Ағиҙел йылғаһы аша йөрөгән еңел машиналар өсөн күпер төҙөлдө, унан башҡа аҫмалы күпер ҙә бар. Киләһе йылдарҙа яңы мәктәп төҙөләсәк.

© Ҡотлоғәләмов Р.К., Әлибаев З.А., 2023

**УДК 821**

*Ҡотлоюлова Р.К., студент*
*Ғилми етәксеһе: Әлибаев З.А., филол. ф. канд., доц.*
*М. Акмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

## БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕНДӘ ТОРАТАУ ОБРАЗЫ

**Аннотация.** В данной статье рассматривается проблема образа горы Торатау в произведения башкирской литературы. Особое внимание уделено проблеме, которая была актуальна несколько лет назад, идея разработки горы Торатау Башкирской Содовой компанией.

**Annotation.** This article discusses the problem of the image of Mount Toratau in the works of Bashkir literature. Special attention is paid to the problem that has been relevant for several years, the idea of developing the Toratau Mountain by the Bashkir Soda Company.

**Ключевые слова:** Туратау, литература, башкир, производство, идея, автор, стих, поэма, Стерлитамак, книга.

**Keywords:** Tratau, literature, Bashkir, processing, idea, author, poem, Sterlitamak, book.

**Торатау** (шәжәрәләрҙә Тураҡ тағ) – Стәрлетамаҡ ҡалаһынан көнсығышта ҡалҡып торған һоҡланғыс тауҙарҙың береһе. Икенсе Шихан тип тә атайҙар.

Торатау – Юрматы ырыуының изге тауы. Борон Торатау эргәһендә «Туғарсалған» күле янында йөрөү тыйылған. Ул урындарҙа дини йолалар

үткәрелгән. Легендаларҙа әйтелеүенсә, Торатау мәмерйәләренең береһенә Диафетты (ул һылыуҡай булған) ҡаты бәғерле атаһы бикләп ҡуйған. Сөнки ул урыҫ сардарҙары менән ҡасмаҡсы булған. Мәмерйә ҡапҡаһын ҙур йылан һаҡлаған.

Сталин хакимлыҡ иткән осорҙа тау итәгендә "ГУЛАГ"тың бер зонаһы булған, унда рецидивист ҡатындар тотолған. Әлеге ваҡытта бараҡтарҙың диуарҙары һаҡланып ҡалған.

Торатауға арналған бик күп әҙәби әҫәрҙәр, поэмалар, шиғырҙар баҫтырып сығарылды: Әмир Әминев "Бер кәмәлә", Рауил Бикбаев "Һыуһаным-һыуҙар бирегеҙ", Яҡуп Ҡолмой "Ҡайтһам, Торатауым ҡаршы ала", "Торатауға", Рәшит Шәкүр "Тауҙар тауы-Торатау", Ғәлиә Кәлимуллина "Торатау рухы", Тамара Юлдашева "Торатау".

Эшкәртеү тураһында әйткәндәй, XX быуаттың уртаһынан алып шихандарҙв Башҡортостан сода компанияһы ошо идеяны алып килә.

Рауил Бикбаевтың "Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ" поэмаһының сюжеты – геройҙың Башҡортостан буйлап сәйәхәте. Төп герой Торатау түбәһен менеп ҡарай. Стәрлетамаҡ ҡалаһындағы завод мөрйәләре күренә, егет уларға ғәжәпләнеп ҡарай:

Хәүеф-һорауҙарҙың өнөн тыҡтыҡ:
Былдай ҡеүәт Европала юҡтыр!
Барыһы һәйбәт! Һис бер бәлә юҡ!
Стәрленән төтөн, йылға булып,
Туғайыңа һылаша, Һеләүек!
Баллы йүкәләргә ағыу һибеп,
Алыҫ армыттарға ҡағыла.
Сал Уралдың сабыр йөҙкәйенә
Ағыу яуа, һөрөм яғыла.

Шулай уҡ был поэмала Рауил Бикбаев сода компанияһы шихандарҙы эшкәртеү тураһында үҙ һүҙендә тороуын күрһәтә. Әммә поэмала ябай халыҡ ҡына түгел, ә уҡымышлы кешеләр ошо идеяға ҡаршы булалар:

Беҙҙең генә китеү китеүме ни -
Ер йөҙөнһән тауар китһәләр.

Әмир Әминевтың "Бер кәмәлә" повесында төп герой бер үҙе һунарсылыҡ, балыҡ тотоу ҡағиҙәләрен боҙған кешеләр менән һуғыша. Китаптағы һатлыҡ йәндәр, тыуған ерҙе ташлаған кешеләр улемгә дусар булалар. Улар үҙҙәренең телен оноталар,ололарҙы хөрмәт итмәйҙәр. Был повесть милли тамырҙарҙы, ата-бабаларҙы, тарихты онотмауы тураһында.

Торатау – изге ер. Бында кешеләр ауыр ваҡыттарҙа килеп тауҙан ярҙам һорайҙар, көс йыялар, ял итәләр, уйҙарын бер итеп йыялар. Кешеләр алыҫ яҡтарҙа йөрөп, тыуған еренә, Торатауына, һағынып ҡайталар. Тап шул турала Яҡуп Ҡолмойҙың "Ҡайтһам, Торатауым ҡаршы ала", Тамара Юлдашеваның "Торатау" шиғырҙарында яҙылған.

Ҡайһы бер яҙыусылар Торатауҙы иң бөйөк тау тип һынайҙар. Мәҫәлән, Рәшит Шәкүр "Таузар тауы – Торатау" шиғырында тап шулай итеп Торатау образын күрһәткән. Ә Ғәлиә Кәлимуллина "Торатау рухы" шиғырында, үҙенең рухын был тау менән сағыштыра.

Мин – Торатау!
Рухым Күккә ашҡан,
Йыһан, бына, баш осомда ғына.
Тын алышын уның белгең килһә,
Таштарыма ят та – Ерҙе тыңла…

Шулай итеп, быңдай һығымта эшләп була: элекке әҙәбиәттә Торатау тарихтың шаһиты булып һүрәтләнгән, ә элеге фольклорҙа һәм әҙәбиәттә (фәнни йәки художестволы) Торатау образы уны бөтөрөү янауы менән бәйле.

## ӘҘӘБИӘТ

1. Ханнанова З.М. Мин – башҡорт, тип танышығыҙ...: шиғырҙар, поэма/ Зөлфиә Ханнанова. – Өфө: Китап, 2018. – 224 бит.

2. Ғәлиә Кәлимуллинаның интернет селтәрендә ижады. [Электронный ресус] // Режим доступа: https://vk.com/public178411593. – Дата обращения: 10.01.2023.

3. Торатау тауы тураһында «Википедия»ла. [Электронный ресурс] Режим доступа: https://ru.wikipedia.org/wiki/Тратау. – Дата обращения: 14.01.2023.

© Ҡотлоюлова Р.К., Әлибаев З.А., 2023

**УДК 821**

*Ҡыҙрасова Н.А., студент*
*Ғилми етәксеһе: Әлибаев З.А., филол. ф. канд., доц.*
*М.Акмулла ис. БДПУ, Өфө к.*

# АЙЫУ ҠОҘОҒОНОҢ ҠУРАЙЫ

**Аннотация**. На просторах не только Башкортостана, но и нашей огромной страны и за ее пределами божественные напевы курая из Медвежьего колодца завораживают значителное количество людей. Многие известные личности в том числе и знаменитые кураисты радовались кураю из Медвежьего колодца в подарок. Богатство малой родины – это то чем действительно стоит гордиться!

**Annotation**. In the vastness not only of Bashkortostan, but also of our vast country and beyond, the divine melodies of the kurai from the Bear Well fascinate a significant number of people. Many famous personalities, including famous kuraists, rejoiced at the kurai from the Bear Well as a gift. The wealth of small homeland is something to be really proud of!

**Ключевые слова:** курай, родные края, природа, музыкальные инструменты, передача воспоминаний, искусство, Башкортостан, деревня.

**Key words:** kurai, native lands, nature, musical instruments, transmission of memories, art, Bashkortostan, village.

Тыуған ауылым Әбеш Хәйбулла районының иң матур, иң илаһи берөлөшөндә урынлашҡан. Киң даланың иркенлектәренә күҙ талдырып килә торғас, йәшел бөҙрә урманлы, бейек ҡая ташлы Шайтантау биләмәләренә килеп инәһең. Бында күңел ял итә, саф урман һауаһын һулап тын иркенәйә, офоҡтағы зәңгәр тауҙарҙы айҡап, сылтырап аҡкан терегөмөштәй Һаҡмарҙы күреп күҙ ҡыуана. Асылыр мәлен, өйрәнер балаһын көтөп, күпме серҙәр һаҡлай ул, ғәзиз тыуған төйәккәйем! Бына ошо тойғо мине әленән-әле ҡырҙарға алып сыға, тауҙарға алып менә, йылға-күл буйҙарын буйлата. Әсәйем география уҡытыусыһы булғанға күрә лә, бала саҡтан мине тыуған тәбиғәтебеҙҙең матурлығын күрергә, һакларға өйрәтте. Әле башланғыс класс уҡыусыһы булып ҡына, мин тыуған төйәгемдең матурлығын, уның ҡабатланмаç үҙенсәлекле үçемлектәр һәм хайуандар донъяһын тасуирлаусы тәүге фәнни- ғәмәли эшемде Сибай ҡалаһында яҡлап сығыш яһағаным хәтерҙә. Артабан был эшемде киңәйтә, тулыландыра барып, тыуған яҡтарымдың үҙенсәлекле урындарын тәрәнерәк итеп өйрәнеп, 5-се класта уҡығанда Өфө ҡалаһында сығыш яһаным. “Шайтантау заказнигы буйлап сәйәхәт” исемле был эшем республика кимәлендә еңеүсе булып сығыуы ҡыуандырҙы һәм ҡанатландырҙы. 6-сы кластан алып Ҡасим Дәүләткилдиев исемендәге республика һынлы сәнғәт гимназия-интернатында уҡыһам да, мин каникул ваҡытында тыуған ауылыма ҡайтып, илһам алыр, көс туплар өсөн тыуған яғым ҡырҙары буйлап йөрөп әйләнәм. Картиналарым өсөн эскиздар, һыҙмалар эшләйем. Ә тәбиғәт иç киткес матур. Һәр тауҙың, һәр болондоң, йылға, күлдең үҙ атамаһы, үҙ тарихы бар. Мин ҙур ғорурлыҡ менән беҙҙең ауыл эргәһендә генә урынлашҡан Айыу ҡоҙоғо тип аталған урын тураһында һәр саҡ һөйләйем. Һаҡмар йылғаһының арьяғында ҡуйы урманлы бейек тауҙың үҙәнендә урынлашҡан был серле лә, шомло ла урын башҡаса аталырға мөмкин дә түгел шул. Унда айыуҙар батшалыҡ итә. Ер-һыу атамалары тарихын күп белгән ҡартатайым Сәлим Нурый улы мин тыуғанда юҡ ине инде. Әммә әсәйем миңә һәр саҡ, “Ҡартатайың бына шулай һөйләй торғайны”-тип, төрлө хикмәтле лә, мажаралы ла тарихтар менән таныштыра ине. Әсәйем Айыу ҡоҙоғо яғына емеш тирергә барырға ниәтләнһә, ҡартатайым уны һәр саҡ иçкәрткән: “Ҡыҙым, яңғыҙ-ярпы йөрөмә, сейәлек, баланлыҡтан бигерәк, айыулыҡ ул ерҙәр!”-ти.

Айыулы ҡоҙоҡтоң ғорурланып һөйләй торғаны баланлыҡ, сейәлек кенә түгел. Моңло ҡурай, хатта иң моңло ҡурай төбәге ул! Эйе, эйе, уны мин түгел, ә мәшһүр ҡурайсы Ишмулла Дилмөхәмәтов әйткән! Ул йыл да, алыç араларҙы яҡын итеп Өфөнән килеп, ошо ерҙең ҡурайын бер ҡосаҡ итеп йыйып алған. “Был ерҙең ҡурайы кеүек моңло ҡурай бүтән бер ҡайҙа ла юҡ,”-тигән. Нәҡ Айыу ҡоҙоғо ҡурайҙары менән ул Париж, Токио халҡын таң ҡалдырып, һыҙҙырып башҡорт көйҙәрен уйнаған. Нисек ғорурланмайһың! Нисек шундай ғәжәйеп ҡурай кеүек моң сығанағы үçкән урман-ҡырҙарыңды яратмайһың

инде! Был хаҡта мин ауылыбыҙҙың арҙаҡлы ҡурайсыһы, бик күп халыҡ йырҙарын белеүсе, башҡарыусы Камил Ниғмәтйән улы Илембәтовтан һораштым. Ул йыл да Айыу ҡоҙоғона барып, ҡурай алып ҡайта. Беҙ мәктәптә уҡығанда бөтә малайҙарға ла эшләп бирер ине ул. Һәм үҙе уҡытҡан башҡорт теле һәм әҙәбиәте, Башҡортостан мәҙәниәте дәрестәре нәҡ ҡурай моңо менән башланыр ине: үҙе уйнай, уҡыусылары уйнай, оҙон көйҙәр дәртле көйҙәргә күсеп, рух аҙығы, күңел күтәренкелеге алып, парта артына таралышыр инек. Камил олатай уҡытҡан осорҙарҙа ҡурай уйнай белмәгән бер генә малай ҙа булманы мәктәптә. Тәнәфестәрҙә йүгереп шашып йөрөмәнек беҙ, малайҙар ҡурайҙа уйнарға өйрәнер ине, ә беҙ ҡыҙҙар, уларҙы тыңлай торғайныҡ. Бына ниндәй тормош дәресе алып үҫтек беҙ.

Айыу ҡоҙоғоноң ҡурайҙарын бүләккә алып ҡыуанған бик күп шәхестәрҙе беләм. Башҡортостандың ғына түгел, ҙур илебеҙҙең киңлектәрендә нәҡ Айыу ҡоҙоғо ҡурайынан ағылған илаһи моңдар күптәрҙең һағышын баҫалыр. Бына шулай, моңдо шифалы бүләк итеп тараҡан төбәктең балаһы мин.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Башҡортостан. – Өфө, 2014.
2. Амангильдина Х. География Хайбуллинского района, 1990.


© Ҡыҙрасова Н.А., Әлибаев З.А., 2023

**УДК 821**

*Ҡыуатова К.Я., студент*
*Ғилми етәксеһе: Әлибаев З.А., филол. ф. канд., доц.*
*М. Акмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

## САЛИХОВТЫҢ ТОРМОШ СЕРҘӘРЕ

**Аннотация.** Великая Отечественная война оставила след в семье каждого гражданина России. Данная статья является словом памяти моему прадеду – Салихову Губайдулле Зарифовичу.

**Annotation.** The Second World War left a mark on the family of every citizen of Russia. This article is a word of memory to my great-grandfather – Salikhov Gubaidulla Zarifovich.

**Ключевые слова:** война, командир, младший лейтенант, герой, товарищ, плен, стихи, Родина.

**Key words:** war, commander, sublieutenant, hero, fellow, captive, poems, Motherland.

Бөйөк Ватан һуғышы тамамланыуына бына инде тулы 76 йыл булһа ла, кешеләрҙең күңел яралары һаман да уңалмай әле. Быуындар алмашынып тора, көндән-көн был ваҡиғаларҙы үҙ күҙҙәре менән күргәндәр, бөтөн ауырлыҡтарҙы кисереп сыҡҡандар әҙәйә бара. Шуға ҡарамаҫтан был афәт, кешеләрҙең

ыҙалыҡтары, тыуған илебеҙҙе һаҡлаусыларҙың батырлыҡтары һис кенә лә онотолмай.

Бөгөнгө көндә йәш быуын Бөйөк Ватан һуғышы тураһында ишетеп кенә белә. Шул осор тураһында күп кинофильмдар төшөрөлгән, йырҙар һәм шиҙырҙар яҙылған. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы тарихты тулыһынса әйтеп бирә алған материалдар бик һирәк кенә осрай, әммә тап шундай яҙма сығанаҡтарҙың береһен миңә лә күреү бәхете тейҙе.

Сабый саҡтан уҡ ҡәрсәйем (өләсәйем) беҙгә уҙенең атаһы тураһында бик күп һөйләй торғайны. Ул ваҡытта беҙ эле йәш бала булыу сәбәпле, бәлки, күп нәмәне аңлап та етмәгәндербеҙ, әммә үҫә килә барыһына тулыһынса төшөндөк. Шуға ла инде ҡарт ҡартатайыбыҙҙың йәшәйешен дә, холҡон да, донъяға ҡарашын һәм хатта гел генә яратып йырлаған уҡытыусы тураһындағы йырын да бик яҡшы беләбеҙ.

Сәлихов Ғөбәйҙулла Зариф улы 1914 йылдың 23 августында Ырымбур губернаһы Орск өйәҙе Үҫәргән олоҫо Бикташ ауылы (хәҙерге Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районы Аҡбулат ауылында) ярлы крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килгән. 1921 йылда, аслыҡ ваҡытында, атаһы вафат була һәм шул уҡ йылда, ғаиләләренә ярҙам булһын өсөн, ҡарт ҡартатайымды Йылайыр кантоны Үрге Назар ауылында йәшәгән туғандары үҙҙәренә йәшәргә алалар. 1927 йылда Ғөбәй Зариф улы Сабатар ауылына мәктәпкә уҡырға китә. 18 йәшендә колхоз уны Башҡорт АССР-ы «Һаҡмар» совхозына ветеринарҙар курсын үтергә ебәрә. 1933 йылда ул Ленин коммунистар партияһы йәштәр ойошмаһына ҡушыла, Сабатар ауылында һатыусы булып эшләй.

Ҡарт ҡартатайым һәр саҡ белемгә ынтылып, киләсәккә ҙур маҡсаттар менән йәшәгән. Ул алдынғы ҡарашлы, иҫ киткес зирәк, үҙ заманына тура килмәгән уникаль кеше. Үҫмер сағында уҡ урыҫ телендә таҙа һөйләшер булған, ул ваҡытта ижад иткән күп яҙыусы һәм шағирҙарҙың әҫәрҙәрен яттан белгән. Шулай уҡ тарих, әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһынған. Ул ваҡытта хатта байҙарҙың балалары һирәк кенә мәҙрәсәнән һуң уҡыуҙарын дауам иткәндәр, әммә Ғөбәй Зариф улы ғилем тауына артабан менер өсөн 1935 йылда Ырымбур ҡалаһындағы Ҡарауан-Һарайға өс йылға уҡырға инә, нимес телен ятлап ала, шул уҡ ваҡытта башҡа төрлө һөнәрҙәрҙе лә үҙләштерә. Финансист курстарын үтә һәм Ейәнсура районында оло инспектор, һуңғараҡ «Ҡыҙыл-Таң» колхозында иҫәп белгесе булып эшләй.

Донъялар тыныс тормау сәбәпле, 1939 йылдың йәйендә ҡартатайым Тоцк ҡалаһында урынлашҡан офицерҙар мәктәбенә ебәрелә, унан бер йыл алда ул хәрби әҙерлек үтә. Сығышы менән ярлы крәҫтиән ғаиләһенән булыуы һис тә туҡтатмай уны, ул артабан бейек үрҙәр яулай, уҙен тик яҡшы яҡтан, һәр эштә профессионал итеп күрһәтә.

1939 йылдың 26 ноябрендә Советтар Союзы менән Финляндия араһында мөнәсәбәттәр боҙола һәм Совет-Фин һуғышы башланып китә. Яуға сыҡҡан ике ил һалдаттары ла ҡарһыҙ ҡышҡы һыуыҡта интегә – был хаҡта Карл Густав Эмиль Маннергейм уҙенең мемуарҙарында яҙа. Ҡартатайым һуғышҡа 1940

йылдың 8 ғинуарында алына һәм Саратов өлкәһе Петровск ҡалаһында 17-се запас полкында хеҙмәт итә, Эстония, Латвия, Литва илдәрен ирекләндереүҙә ҡатнаша. Шул уҡ йылдың сентябрь айында демобилизациялауға эләгә һәм тыуған ауылына ҡайтып колхозда бухгалтер булып эш башлай. Был ваҡытҡа инде уның кәләше Маһинур менән ике балаһы булған була. Ҡартатайым яңы йортҡа кусеп, бәхетле ғаилә ҡороп йәшәргә хыяллана, һәм тап шул хыял уға һуғыш яланында ятып ҡалырға ирек бирмәй.

Ил тыныслығы күбеһенсә батшаларҙың ҡулында. Нисек кенә ябай кеше уҙ яйына йәшәргә тырышмаһын, Тыуған ер ярҙам һорап оран һалһа, ил балаһы ҡорал тотоп яуға торасаҡ, үҙен намыҫлы тип һанаған әҙәмдең башҡа ҡарары ла, ҡасырға уйы ла юҡ.

1941 йылдың 22 июнендә Германия ғәскәрҙәре илебеҙгә баҫып инәләр. Ҡартатайым тәжрибәле кеше булараҡ 30 июнь Саратов өлкәһе Вольск ҡалаһындағы хәрби-химик училещеһына курсант булып алына. Уны тамалағас, Ғөбәй Зариф улына кесе лейтенант дәрәжәһе бирелә. Үҙенең көндәлегендә ул былай тип яҙа: «Әҙер офицерҙарҙы подразделенияларға булгәндә, 55 кешене взвод командиры итеп 12-се батальонға алдылар, улар араһында мин дә бар инем. Мин бында 1942 йылдың апреленә тиклем хеҙмәт иттем, яугирҙарҙы фронтҡа әҙерләнем. Тикшереү үткәндә шәхси составтың яҡшы әҙерлеге өсөн рәхмәт хаты алдым, был яңылыҡ шулай уҡ полк гәзитендә сыҡҡан мәкәләлә билдәләнде».

Ҡартатайым юҡҡа ғына командир булып китмәгән. Уның аҡыллы кәңәштәре һәм һабаҡтары, моғайын, куп кешенең ғүмерен ҡотҡарғандыр, ҡотолғоһоҙ хәлдә яңы һулыш биргәндер. Көндәлегендәге яҙыуы буйынса ул хатта ант бирә. «2 май көнө, фронтҡа китер алдынан, миңә ҙур һәм яуаплы ҡарар ҡабул итергә тура килде. Ҡайҙа ғына барып эләкһәм дә (фронтҡа, дошман тылына, әсирлеккә) Тыуған ил хаҡына, дошманды еңеү өсөн, һис бер нимәгә ҡарамай аҙаҡҡаса көрәшергә, үҙ эшемде еренә еткергәнсә башҡарырға һүҙ бирҙем. Быны раҫлап, үҙемдең ҡушаматым (Губанов) аҫтына мин ҡултамғамды ҡуйҙым.»

1942 йылдың июль айында ҡартатайым Воронеж фронтына барып эләгә. Был ерҙәрҙә аҙналап ҡаты яуҙар бара. Үҙ яғынан һалдаттар бер ниндәй ярҙам көтөп ала алмайҙар, ә дошман көслө ҡоралдары, бер туҡтауһыҙ авиация һөжүме менән баҫып килгәс, отряд ҡамалып ҡала. 5-11 июль араһында Ғөбәйҙулла Зариф улы контузия ала һәм фашист ҡапҡанына эләгә...

Көндәлектән алынған яҙма: «Ҡулға алғас, беҙҙе көнбайышҡа ҡыуҙылар. Касторна станцияһына килтереп һарайға яптылар. Йәйге эҫелә унда бик ауыр. Палачтар аҙыҡ та, хатта эсергә һыу ҙа бирмәй инеләр. Бандай шарттарҙа беҙҙе 6-7 көн тотҡандан һуң, бикле вагондарҙа артабан алып киттеләр. Бәләкәй генә урында әсирҙәр бик күп булғас, хатта ултырырға ла мөмкинлек юҡ, етмәһә танауға бәреп ингән һаҫыҡ еҫ сыға. Арып-талып бөткән һалдаттар берәм-берәм үлә башланылар, әҙерәк булһа ла хәлдәре ҡалғандар иптәштәренең, дуҫтарының мәйеттәрендә ултырып килдәр. Бер аҙ үткәс Житомир ҡалаһына (Украина)

килеп еттек. Лагерҙың махсус мөйөшөнә ҡыуып индереп колоннаға бишәр кеше теҙелергә мәжбүр иттеләр. Һуңынан ултырырға һәм баш кейемен сисергә ҡуштылар. Шул саҡ беҙ башкиҫәрҙәрҙең һәр бер аҙымын күҙәттек, пулемет атырын көттөк, әммә улар һәр береһенә бер үк һорау бирә башланылар

- “Йуден?”, “Иудаты?”.

Бына палачтар минең янға ла килеп еттеләр: “Һин йәһудме?”-тип өндәштеләр.

Мин баҫтым да:

- “Юҡ, мин башҡорт,”- тип урыҫ телендә яуап ҡайтарҙым”.

Берсә ышанманылар, сөнки сәсем сөм ҡара һәм бөҙрә ине ул саҡ. Бер кеше яныма килеп Мөхәммәт пәйғәмбәр кем булыуын һораны, белгәнемде әйттем. Минән ары киттеләр...»

Концентрацион лагерҙың тәртибе бик ҡырыҫ була. Көн һайын иртәнге аштан һуң, 2-3 сәғәт сүкәйеп йөрөргә ҡушҡандар. Астан, хәлһеҙлектән интеккән әсирҙәрҙе палачтар резина ҡамсылар менән туҡмар булғандар. Берәү «яман эш» ҡылып ғәйепле булһа, уны тимер-сәнскеле сымдар өҫтөнән шыуыштырғандар. Көн һайын башы киткән кешеләрҙе атып үлтерәләр. Аслыҡ, тиф, дизентерия лагерь эсендә ҡайнай. Ашарға серек картуфты тары йәки ҡарабойҙай ҡабығы менән бутап бирәләр. Ҡыҫҡаса әйткәндә – кешелекһеҙлектең юғары кимәленә етеүе.

1942 йылдың октябрь айында ҡартатайым Седлице (Польша) ҡалаһындағы лагерға барып эләгә. Ул көндәлегендә яҙа: «Бында мин Ырымбурҙан үҙемдең яҡташым, Татарстан шағиры Муса Йәлил менән таныштым. Мөмкинлек булғанда уның 6 шиғырын үҙемә яҙып алдым һәм бөгөнгө көндә уларҙы үҙемдә һаҡлайым («Дустым хисы», «Дустыма», «Сойгэн дустым», «Озатып калучы», «Туган ил сулары» һәм «Картлык»).

«1943 йылдың апрелендә беҙҙе Польшалағы Радом ҡалаһына ҡыуып килтерҙеләр. Яҡташым, гел бергә йөрөгән дуҫым инженер-химик Т.Карпенко Седлицела ҡалды, уның менән хушлашыу бик ауыр, сөнки икәүләп ут-һыу кисеп сыҡтыҡ, бар ауырлыҡтарҙы бергә үткәрҙек. Был лагерҙа мин 15 ай булдым. 1944 йылдың 20 июлендә мине һәм тағы ла 6 кешене ҡулға алдылар, яңы иптәшем менән бергә эләктек беҙ унда. Бер нисә көн бикләп тоттолар, обыск яһанылар, һуңынан Берлиндағы булған төрмәгә тыҡтылар». Германияла был ваҡытта Гитлерға ҡаршы сығыусылар була, ҡаршылыҡ күрһәткән ойошмалар килеп сыға башлай. Шуға күрә үҙҙәренә ҡурҡыныс тыуҙырған кешеләрҙе ҡалған әсирҙәрҙән алыҫ тоторға булалар, ҡартатайым тап шулар араһына инә. Бер ай артыҡ төрмәлә ултырғандан һуң уны Венаға (Австрия) «Венайзин» лагерына күсерәләр. Берлин да, Вена ла был көндәрҙә бомбардировкаларға дусар ителә, шуға ла көн һайын әсирҙәрҙе һаҡсылар менән ҡалаға сығарып урам таҙартырға ҡушалар. Ҡартатайым яҙа: «Барыбыҙ ҙа Советтар Союзы еңеү көнөнә яҡынлашҡанын белә инек, тышҡа сығарһалар юрамал ялҡауланып, бер эште әллә нисә тапҡыр яйлап эшләп, ҡайһы саҡ бөтөнләй боҙоп китә торғайныҡ. Янғындар һүндерергә, ауған вагондарҙы кире

тимер юлға ҡуйырға, килеп сыҡһа бомбаларҙы зарарһыҙландырыға палачтар беҙгә ҡуша инеләр.»

Ғөбәй Зариф улының концлагерҙарҙағы һуңғы туҡталышы Дунай йылғаһы буйындағы Ленце ҡалаһы була. Ул унда 1945 йылдың 5 майына тиклем була. Сәғәт көндөҙгө 2-лә Америка танктары тимер сымдарҙы өҙөп инә, ҡартатайым тыуған иленә ҡайта.

Советтар Союзы яугиры өсөн әсирлеккә эләгеү хурлыҡ тип һаналған. Ятып ҡалғансы, атып ҡал тигәндәй, ҡулға алыныуға ҡарағанда, кубеһенсә үлемгә улар өҫтөнлөк бирер булғандар. Ҡыҙғаныска ҡаршы пленда булһаң, тимәк һин һатлыҡ йән тип һаналғанһың... Тап шул уҡ ҡайғы ҡартатайымды ла урап үтмәгән. 3 йылдан һуң, ҡот осҡос ваҡиғаларҙы күреп ҡайтҡас, уны төрмәгә ултырталар. Ғөбәй ҡартайҙың уҡымышлы булыуы, нимес телендә таҙа һөйләшеүе барыһын да шиккә килтерә, шуның өҫтәүенә концентрацион лагерҙа булған,етмәһә тере ҡайтҡан! Төрмәлә бик оҙаҡ тикшереүҙәр бара, әммә тиҙҙән (1946 й.) ул тыуған ауылы, өс балаһы, ике тапҡыр уны һуғышҡа оҙатҡан ҡатынына әйләнеп ҡайта. Уға кесе лейтенант исемен ҡайтаралар, Коммунистар партияһынан сығармайҙар.

Һуғыштан һуң Ғөбәйҙулла Зариф улы Сәлихов колхозда бухгалтер булып эшләй. Ҡарт өләсәйем менән улар 7 бала үҫтергәндәр, һәр береһенә юғары белем биргәндәр. Кинйә улдары философия фәндәре докторы Сәлихов Ғафур Ғөбәйҙулла улы яҙа: «Атайым нимес телендә таҙа һөйләшә торғайны, концлагерҙарҙа йыш ҡына әсирҙәр файҙаһына тәржемә иткән, ғүмерҙәрен ҡотҡарған. Үҙенә оҡшамаһа ла, беҙ белһен тип һуғыш тураһында бик күп һөйләй торғайны. Ғөмүмән, ул бик күп нәмә белә торғайны, әйтерһең дә киләсәктә нимә булырын күргән. Хәҙер инде бөтөн әйткәндәре ысын барлыҡҡа тап килә. Ләкин ул заманда уға бик ышанмағандар, әммә ул барыбер яҡты киләсәккә өмөт итә ине һәм һәр саҡ: «Һеҙ минең менән ғорурланасаҡһығыҙ әле! »- тип әйтә торғайны...»

Ҡартатайым 1973 йылдың май айында автоһәләкәттә фажиғәле вафат булған. Үҙенән һуң ул күп йылдар буйына һаҡлап тотҡан ҡиммәтле мираҫын балалары, ейәндәре, хатта бүләләренә ҡалдырған.

2007 йылдың көҙөндә, Сәлиховтар ғаиләһенең иҫке йортон һүткән саҡта, өй башында күн портфель табалар. Уның эсендә фотоһүрәттәре, көндәлектәр һәм ҡасандыр Муса Йәлилдең үҙенән яҙып алған 6 шиғыры ятҡан була.

Муса Йәлил плендан үҙенең 3 дәфтәрен биреп ебәрә. Береһен 1946 йылда Татарстан яҙыусылар союзына әсирлектә булған Ниғмәт Тереғолов ҡайтара. Икенсе «Моабит дәфтәре» Бельгия кешеһе Андре Тиммерманста табыла. Өсөнсөһөн Ғаббас Шәрипов алып килгәне билдәле. Әммә Тереғолов та, Шәрипов та ҡайтыуҙары менән төрмәгә эләгә. Ниғмәт шунда уҡ улеп китә, ә Ғаббас 10 йыл зинданда үткәргәндән һуң, Волгоградта ҡала.

1946 йылдың ғинуарында Турция гражданы Казим Миршан тағы ла бер дәфтәрҙе Италиялағы Советтар Союзы илселегенә ебәрә. Шиғырҙар йыйынтығы Мәскәүгә әйләнеп ҡайта, ләкин шунда уҡ юғала.

Ҡартайым менән ҡайтҡан һәм быға тиклем бер кем дә белмәгән Муса Йәлилдең шиғырҙары тураһында һүҙ сыҡҡас, ҙур бәхәстәр, тикшеренеүҙәр башлана. Һөҙөмтәлә, уларҙы 2015 йылдың 28 августа Ҡазан ҡалаһындағы «Камал» театрында «Пар канатлар» радиопередачаһы уҙенең 25 йыллыҡ юбилейына арналған тамашаһында тәү тапҡыр уҡып ишеттерҙе. Был шиғырҙар бөтөн Европаны урап, шағирҙың тыуған еренә тик ҡартатайым ярҙамында ғына ҡайтып етә.

Үҙ донъябыҙ тик үҙебеҙҙең ҡулдарҙа. Туғанлыҡ сылбырҙарын белеү, ата-бабаларыбыҙҙың ҡомартҡыһын телдән-телгә еткереү, 21-се быуат кешеһенә бик мөһим. Тормошобоҙ яҡты, күгебеҙ аяҙ, илебеҙ тыныс булһын өсөн, беҙ тарихыбыҙҙы онотмаҫҡа, ғаилә ҡиммәттәрен , киләсәк быуындарға еткерергә тейешбеҙ!

## ӘҘӘБИӘТ


1. Солдаты Победы – вы навеки в памяти народной!, БГУ. – Уфа, 2015.
2. Яны Вакыт. – 2016. – №5.
3. Кызыл тан. – 2015. – №89-90.
4. Абсалямов А. Избранные произведения, т. 5. – Казань, 2009. – 520 с.
5. Наше достояние, август, 2015.
6. Наше достояние, сентябрь, 2015.
7. Наше достояние, январь, 2016.


© Ҡыуатова К.Я., Әлибаев З.А., 2023

**УДК 372.88**

*Мостаева Р.М.,*
*Өфө ҡалаһының милли*
*мәғариф бүлеге методисы*

## «БАШ ҠАЛАНЫҢ БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ ЙЫЛ УҠЫТЫУСЫҺЫ – 2023»

**Аннотация.** В данной статье говорится об особенностях организации конкурса «Учитель года башкирского языка и и литературы столицы Башкортостан». Автором дан подробный анализ и конкретные методические рекомендации по их организации.

**Annotation.** This article talks about the peculiarities of the organization of the competition "Teacher of the Year of the Bashkir language and literature of the capital of Bashkortostan". The author gives a detailed analysis and specific methodological recommendations for their organization.

**Ключевые слова:** конкурс, учитель года, башкирский язык и литература.

**Key words:** competition, teacher of the year, Bashkir language and literature.

*Уҡытыусы –*
*Ниндәй гүзәл исем!*
*Кеше итеп*
*Һине әҙерләй.*
*Тормоштоң ул*
*Көрәшсеһе итә,*
*Кескенәнән*
*Һөйә, кәҙерләй [1, 10]*

*(Рәми Ғарипов)*

Күптән инде матур йолаға әүерелгән «Баш ҡаланың башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы» ҡала конкурсы 2004 йылдан башлап үткәрелә. Ошо ваҡыт эсендә был конкурста баш ҡаланың 1200-ҙән ашыу башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы ҡатнашып үҙ көстәрен һынап ҡараны. Ҡатнашыусыларҙың етәүһе конкурстың төбәк-ара этабында еңеүсе, ун етеһе лауреат булды.

Бәйгенең талаптары йылдан-йыл яңынан-яңы үҙгәрештәр кисерә бара. Шулай ҙа уҡытыусының төп күрһәткесе ул – дәрес.

«Дәрес - ҡыҙыҡһыныусанлыҡ һәм әхләҡи инаныуҙар факелын тоҡандырыусы осҡон», - тип яҙған В.А. Сухомлинский [2, 119]. Һәр ваҡыттағыса быйылғы конкурста күрһәтелгән башҡорт теле әҙәбиәте дәрестәрендә лә башҡорт халҡының тарихына, мәҙәниәтенә һәм йолаларына, көнкүрешенә һәм ғөрөф-ғәҙәттәренә баҫым яһалды. Уҡытыусылар дәрестә виртуаль Miro таҡтаһы менән таныштырҙы, Wordwall, инофон ҡушымталары, мультимедиалы презентациялар күрһәтелде.

Быйылғы конкурста 13 конкурсант ҡатнаша, уларҙың өсәүһе йәш уҡытыусылар, улар «Педагогик өмөт» номинацияһында көс һынаша. Конкурста ҡаҙаҡ егетенең дә ҡатнашыуы бәйгебеҙгә мәртәбә өҫтәй. Сағынбек Ильяс Жарҡымбек улы Башҡорт дәүләт педагогия университетының аспирантураһында уҡый, Киров районының 9-сы мәктәбендә башҡорт телен уҡыта. Уны төрки телдәренә булған ҡыҙыҡһыныуы Ҡаҙағстандан Башҡортостанға алып килә. Ильяс Жарҡымбек улының дәрестәре яңы технологиялар менән байытылып бик ҡыҙыҡ үтә. Йырларға яратҡан уҡытыусы дәрестәрендә йырлап та, бейеп тә ебәрә. Уҡыусыларҙың башҡорт теленә ҡарата ҡыҙыҡһыныуҙары арта.

Беренсе тур ике конкурс һынауын үҙ эсенә ала: «Педагогик эшмәкәрлектең визит карточкаһы» һәм «Дәрес». Был конкурс һынауының маҡсаты: конкурсантҡа уҡытыу өлкәһендә методик компетентлығын һәм үҙ тәжрибәһен күрһәтә белеүе менән берлектә уҡыусыларға нисек тәрбиә биреүен дә асыҡлау.

Икенсе тур ике конкурс һынауын үҙ эсенә ала: «Ситуатив мәсьәләне хәл итеү» һәм «Оҫталыҡ дәресе». Тәҡдим ителгән педагогик хәлде анализлай алыу, уны педагогик мәсьәләгә әйләндерә һәм хәл итеү юлдарын тәҡдим итә белеү оҫталығын күрһәтеү – конкурстың төп маҡсаты булып тора.

Өсөнсө тур һынауҙарына конкурстың ике тур йомғаҡтары буйынса иң күп балдар йыйған ҡатнашыусылар сығарыла:

- 7 башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы: Әхмәдйәнова Фидания Тәфкил ҡыҙы «94-се лицей»; Бикташева Альбина Фәрит ҡыҙы «М. Исҡужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейы», Вәлиева Идалия Роберт ҡыҙы «48-се башҡорт лицейы», Вәлиуллина Гөлшат Радик ҡыҙы 24-се мәктәп, Ильясова Ләйсән Рафат ҡыҙы «161-се лицей», Нәбиева Гөлназ Рәис ҡыҙы «52-се лицей», Сирбаева Яҙгөл Айрат ҡыҙы «Айырым фәндәрҙе тәрәнәйтеп өйрәнеүсе 114-се белем биреү үҙәге».

- «Педагогик өмөт» номинацияһында ҡатнашҡан 2 башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы: Сағынбек Ильяс Жарҡымбек улы 9-сы мәктәп, Шаһабетдинова Элиза Тимур ҡыҙы 124-се мәктәп.

Өсөнсө тур «Түңәрәк өҫтәл» конкурс һынауын үҙ эсенә ала. Конкурс һынауының маҡсаты: лидерлыҡ потенциалын асыу, мәғарифты үҫтереүҙең стратегик йүнәлештәрен аңлауҙы күрһәтеү һәм педагогтар йәмәғәтселегенә мәғарифтың көнүҙәк мәсьәләләрен конструктив хәл итеүҙә үҙ ҡараштарын белдереү.

Һәр ваҡыттағыса быйыл да мәртәбәле конкурста ҡатнашыусы конкурсанттарҙың сығыштарын компетентлы жюри баһаланы. Уның составына М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты кафедра доценты Хәбибуллина Зөләйхә Әхмәт ҡыҙы, Өфө фән һәм технологиялар университеты кафедра доценты Ҡарабаев Мөнир Иҙел улы, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеү үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғалимдары Йәғәфәрова Гөлназ Нурфәйез ҡыҙы менән Хөсәйенова Гөлнур Рауил ҡыҙы, «Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)» аппараты етәксеһе Баянов Рөстәм Сәлим улы, «Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)» йәмәғәт ойошмаларының халыҡ-ара берлеге ҡарамағындағы Өфө ҡалаһы ҡала округының ата-әсәләр комиссияһы рәйесе Ҡолтаев Рәмил Наил улы, Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәтенең мәғариф идаралығы баш белгесе Торопҡолов Вильдан Ринат улы, уҙған йылдарҙағы профессиональ конкурс еңеүсеһе Ғәзизова Әлфиә Рәүеф ҡыҙы. Конкурс жюриһы рәйесе – республиканың «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналының баш мөхәррире Салауат Ғайса улы Кәримов.

Бөтә һөҙөмтәләр конкурсты ябыу тантанаһында 2023 йылдың 14 февралендә иғлан ителә.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Ғарипов Р.Й. Әҫәрҙәр. Өс томда, I том. Шиғырҙар, поэмалар. – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1996. – 448 бит.

2. Сухомлинский В.А. Сердце отдаю детям. — Киев: Радянська школа, 1974. – 119 бит.


© Мостаева Р.М., 2023

**УДК 811. 512.141**

*Мөхәмәҙиев Н.И., студент*
*Толомбаев В.З., филол. ф. канд., доц.*
*М.Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө к.*

# БАШҠОРТ РЕКЛАМА ТЕЛЕНДӘ МӨНӘСӘБӘТ ҺҮҘҘӘРҘЕҢ ФУНКЦИОНАЛЬ-СТИЛИСТИК ПОТЕНЦИАЛЫ

**Аннотация.** В статье исследованы функция и стилистические особенности модальных слов в башкирском рекламном дискурсе. В результате анализа рекламных текстов, систематизированы разряды модальных слов по частотности употребления и выражаемому ими значению. Выявлена их стилистическая окрашенность.

**Annotation.** The article examines the function and stylistic features of modal words in Bashkir advertising discourse. As a result of the analysis of advertising texts, the categories of modal words are systematized according to the frequency of use and the meaning expressed by them. Their stylistic coloring is revealed.

**Ключевые слова:** модальные слова, разряды, язык рекламы, стилистическая окраска.

**Key words:** modal words, categories, advertising language, stylistic coloring.

Хәҙерге лингвистикала реклама текстарын һәм уның телен өйрәнеү ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра, был билдәле, сөнки глобалләшеү шарттарында хәҙерге йәмғиәткә уның йоғонтоһо айырыуса ҙур. Һуңғы йылдарҙа Рәсәйҙәге реклама көнбайыш рекламаһы йоғонтоһонда ҡәтғи үҙгәрештәр кисерҙе, яңы статус алды һәм йәмғиәттә һиҙелерлек мәҙәни күренешкә әүерелде. Рекламаның хәҙерге заман кешеһенең тормош-көнкүрешенә йоғонтоһо киң, ул һатып алыуҙарҙы стимуллаштырыуҙан алып, йәшәү рәүешен һәм донъяға ҡарашты формалаштырыуға тиклемге диапазонды тәшкил итәлер. Сит ил һәм Рәсәй ғалимдарының рекламаға һәм уның теленә ҡыҙыҡһыныуы кәмемәй.

Шул рәүешле, был мәҡәләлә ҡаралған проблеманың актуаллеге реклама теленең милли үҙенсәлеген өйрәнеүҙең перспективалылығы һәм мөһимлеге, илдәге иҡтисади, сәйәси һәм социаль хәлдең үҙгәреүе шарттарында реклама тексының был мәҙәни киңлеккә лингвистик феномен булараҡ яраҡлашыу проблемалары, шулай уҡ махсус функциональ феномен булараҡ реклама теленең коммуникатив, прагматик, когнитив характеристикаларын асыҡлау зарурлығы менән билдәләнә.

Хәҙерге осорҙа ижад ителгән реклама текстары туған телебеҙҙе байытыу һәм уның биһәктәрен уҡыусыларға еткереүсе күркәм өлгөләр. Реклама телендә беҙ тел менән маҡсатлы һәм оҫта эш итеү рәүешен күрәбеҙ. Уны өйрәнеүселәр рекламаның төрлө тел күренештәренә ифрат бай булыуын күрһәтә. Ысынлап та, быҙдай текстар телендә беҙ һүҙ төркөмдәрен ҡулланып, төрлө мәғәнәләр белдереү образ тыуҙырыу үҙенсәлектәрен тоябыҙ.

Тикшереү эшендә хәҙерге башҡорт рекламаһы материалында мөнәсәбәт һүҙҙәрҙең функциональ потенциалы үҙәккә алынды. Һүҙ төркөмө булараҡ мөнәсәбәт һүҙҙәр башҡорт теленең синтаксик һәм морфологик төҙөлөшө, стилистик ҡоролошо өсөн бик ҡыҙыҡлы мәсьәлә.

Мөнәсәбәт һүҙҙәр тип һөйләүсенең һөйләмдә әйтелгән фекер менән объектив ысынбарлыҡ араһындағы бәйләнешкә реаллек һәм реаль түгеллек күҙлегенән булған мөнәсәбәтен белдереүсе һүҙҙәргә әйтәләр [3, 59]. Икенсе төрлө әйткәндә, мөнәсәбәт һүҙҙәр ысынбарлыҡта булған хәл-ваҡиғаны раҫлауҙы, дөрөҫләүҙе йәки инҡар итеүҙе, ул ваҡиғаның булыу-булмауы асыҡ түгеллеген һәм икеләнеүҙе, шулай уҡ теге йәки был эш-хәлдәрҙең башҡарылыуы хаҡында фараз итеүҙе, кәрәклекте һәм тейешлекте белдерәләр.

Хәҙерге көндә “Юлдаш”, “БСТ” радио- һәм телеканалдарында һәм гәзит-журнал сайттарында, биттәрендә сыҡҡан реклама текстарында мөнәсәбәт һүҙҙәрҙең ҡулланылышына анализ үткәрелде. Реклама телендә мөнәсәбәт һүҙҙәрҙең төрлө мәғәнә төркөмдәрен осратып була. Улар рекламаға хас телмәр ситуацияларында ҡулланылып, төрлө мәғәнә төркөмдәренә ҡараған мөнәсәбәт һүҙҙәрҙе туплай. Бигерәк тә, раҫлауҙы-дөрөҫләүҙе, кире ҡағыуҙы-инҡар итеүҙе, кәрәклек-тейешлекте, саҡырыуҙы, өндәүҙе белдереүсе һүҙҙәр күпләп ҡулланыла.

Раҫлау һәм кире ҡағыуҙы белдереүсе мөнәсәбәт һүҙҙәр төркөмө реклама телендә байтаҡ. Был төркөмсәгә түбәндәге мөнәсәбәт һүҙҙәр инә: *эйе, бар, әлбиттә, ысынлап, ысынлап та, ысындан, ысындан да, дөрөҫ, билдәле, һис шикһеҙ, һис һүҙһеҙ, асылда, яҡшы, ярай* һ.б.

Был төркөм мөнәсәбәт һүҙҙәр һөйләмдә бирелгән уй-фекерҙең ысынбарлыҡтағы факттарға, эш-хәлдәргә тап килеүен, уларҙың реаль булыуын дөрөҫләүҙе, раҫлауҙы белдерәләр.

*Ысынлап (ысынлап та), ысындан (ысындан да)* инеш мөнәсәбәт һүҙҙәре шулай уҡ һөйләмдә бирелгән уй-фекерҙең ысынбарлыҡтағы факттарҙың, хәл-ваҡиғаларҙың реаль булыуын, тап килеүен белдерә. Был мөнәсәбәт һүҙҙәр шулай уҡ әйтелгән фекергә баҫым яһау өсөн ҡулланылып, хуплау рәүешендә әйтелә. Миҫал:

*– Баяр ҡатынын ниңә рәнйеттең, йүнһеҙ бәндә?*

*– Ғәйеплемен, бик үкенәм!*

*– Нимә!? Үкенәһең имеш?! Бар, йүгер Динмика автоүҙәгенә! Унда 130 мең һумға еткән файҙа менән ҡышҡы резиналарҙы бүләккә биреү һәм иҫке автомобилде баҙар хаҡына тапшырыу шарты менән яңы автомобилдәр теҙелеп тора! Бар! Машинаның иң матурын һайла ла, бүләк ит!*

*– **Ысынлап та,** һуң булғансы автомобиль алып ҡалайым әле. Батша юҡты һөйләмәҫ ул!*

*Акция 31-се декабрьгә тиклем ғәмәлдә. Тулыраҡ мәғлүмәт һатыусы-консультанттарҙа. Адресы: Мәләүез ҡалаһы, Ленин урамы, 34. Телефон: 8-800-250-10-98. Кредит Совкомбанктан (“Юлдаш” радиоканалынан).*

***Эйе** мөнәсәбәт һүҙе һөйләмдә әйтелгән фактты дөрөҫләүҙе белдерә. Миҫалдар: **Эйе**, һеҙ тап ошо ташламаға лайыҡлы! “Зевс” матурлыҡ салонына рәхим итегеҙ! (“Юлдаш” радиоканалы).*

***Түгел*** мөнәсәбәт һүҙе башҡорт әҙәби теленең бөтә жанрҙарында ла актив ҡулланыла. Был мөнәсәбәт һүҙ, башлыса, ҡушма хәбәр составында килә һәм һөйләмдә бирелгән уй-фекерҙе инҡар итә. Миҫалдар: *Бөгөн ни эшләргә тип аптырап ултыраһы **түгел**. Хоккей һеҙҙе көтә. “Салауат Юлаев” сираттағы плей-офф уйындарында Ҡазандың “Аҡ барс” командаһы менән осраша. Ашығығыҙ, билеттар һанаулы. белешмә өсөн телефондар: 8 (347) 274-74-88 («Юлдаш» радиоканалы).*

Раҫлау, инҡар итеү мөнәсәбәт һүҙҙәре реклама телендә уҡыусыны ҡырҡа әйтеү аша һиҫкәндереү, экспрессия маҡсатында ҡулланыла. Был алым ярҙамында текст авторҙары кешене нимәнелер эшләргә өндәй, уның кәйефһеҙ сағын кире ҡаға, ял итергә саҡыра, һөйләм конструкцияһында үҙҙәре яһаған тәкдимдең дөрөҫлөгөн иҫбатлау мәғәнәһен бирә.

Хәҙерге башҡорт телендә үҙенсәлекле мөнәсәбәт формалары рәтенә тейеш һәм кәрәк мөнәсәбәт һүҙҙәре ҡушылып яһалған күп һанлы аналитик конструкциялар ҡарай. Был башҡорт реклама телендә лә актив урын алған.

Например, если при семантической классификации фразеологизмов кўзини сузмоқ, ўзига жалб қилмоқ, уруғи қуримоқ иштаҳаси карнай сема «лицо» является дифференциальной семой, то во фразеологизмах кўзини сузмоқ, қошини учирмоқини, лабинучи бурмоқ, књёдақзини, ўйнат сема «человек» выступает в качестве объединяющей семы.

Поскольку фразеологическая единица состоит из определенных формальных и семантических компонентов, она имеет внутреннюю структуру с обеих сторон. В семантической структуре фразеологизмов четко выделяются неотъемлемые стороны фразеологического значения. В качестве этого типа значений выступают категориальные, ступенчатые, подчеркивающие и частично одушевленно-неодушевленные значения фразеологических единиц (Дюков, 1972).

Например, фразеологизм кули узун (всемогущий) составляет одну семантическую группу с фразеологизмами кузи очилмок (понять наконец), тарвузи кулидан тушмок (опечалиться после чего-либо) по интегральной семе «человек». В то же время по семе «часть речи» этот фразеологизм различен. Если кули узун (всемогущий) входит в состав прилагательных, то кузи очилмок (понимать наконец), тарвузи кулидан тушмок (загрустить после чего-либо) относятся к глаголам-фразеологизмам. Более того, два фразеологизма кузи очилмок (понимать наконец) и кулида кутармок (уважать), находящиеся в одной парадигме в силу того, что они являются глагольными фразеологизмами, различаются тем, что первый выражает состояние, а второй выражает физическое действие. Компонент в структуре фразеологизма, значение которого не может быть определено с точки зрения современного узбекского языка, считается фразеологическим центром. Таким образом, фразеологический центр выполняет функцию опорного пункта для установления фразеологизма. Например, во фразеологизме кари тулки (хитрый человек) значение слова тулки (лиса) не совпадает со значением свободно употребляемого слова тулки.

Фразеологический и семантический центры – явления, связанные, требующие друг друга и обеспечивающие целостность фразеологизма. В то время как семантический центр предваряет фразеологизм к свободному

составлению, фразеологический центр предвосхищает его, к слову. По обоим центрам можно формировать фразеологические модели.

## ЛИТЕРАТУРА


1. Жуков. В. Семантика фразеологических оборотов в башкирском языке. Москва: Просвещение, 1978. – 160 с.
2. Новиков. А. Семантика текста и ее формализация. Москва: Наука. 1983. – 215 с.
3. Нурмонов. А. Узбекские тильшунослиги тарихи. Ташкент: Укитувчи. 2002.


© Умбаров С.Н., Хусаинова Л.М., 2023

**УДК 821**

*Ураков А.М., студент*
*Ғилми етәксеһе: Әлибаев З.А., филол. ф. канд., доц.*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

# МУЗЫКА ҺӘМ УНЫҢ ТЫЛСЫМЫ

**Аннотация.** У всех нас есть любимые композиции, музыкальные группы и исполнители, зачастую ассоциирующиеся с определенным этапом жизни. Беспорно, музыка влияет на человека, это доказывали великие умы на протяжении столетий. Оказалось, что различные ритмы могут по разному повлиять на организм человека. В данной статье я попробую подробнее объяснить данную тему.

**Annotation.** We all have favorite compositions, musical groups and performers, often associated with a certain stage of life. Undoubtedly, music influences a person, this has been proved by great minds for centuries. It turned out that different rhythms can affect the human body in different ways. In this article I will try to explain this topic in more detail.

**Ключевые слова.** музыка, ритмы, психология, влияние, гормоны, дофамин, картизол.

**Key words.** music, rhythms, psychology, influence, hormones, dopamine, cortisol.

Һеҙ берҙе булһа ла уйланғанһығыҙ бармы, ни өсөн музыка кешенең кәйефен билдәләй һәм ябай тауыштар комбинацияһы хис-тойғоларҙы принципта сағылдыра ала? Бер кем дә был һорауҙар менән мөрәжәғәт итмәй, сөнки музыка күптән беҙҙең ғәҙәти тормошобоҙға инде, ә ҡағиҙә буларак, бөтә ғәҙәти нәмәләр һорауға ҡуйылмай.

Йышлығы буйынса төрлө өндәр кешегә төрлөсә йоғонто яһай. Музыка йылдан-йыл көслөрәк һәм дәртлерәк була бара. Әгәр элек бейеү жанры тип «Твист» һәм «Степ» һаналһа, хәҙер ул – электрон музыка. Кеше яңы ритмға

күнекмәгән, организм был ритмдарҙа даими эшләй алмай. Әйҙәгеҙ төпкөл тикшереүгә күсәйек.

XIX быуатта Уҡ Ғалим Догель Иван Михайлович төрлө музыка йоғонтоһонда кешенең йөрәк мускулдары ҡыҫҡарыу йышлығы, ҡан баҫымы, тын алыу ритмы үҙгәреүен билдәләй. XX быуаттың 50-се йылдарында америка ғалимдары тикшеренеүҙәр үткәрә, улар яйлап, йомшаҡ музыка һатып алыусыларға кәштәләрҙәге магазиндарҙа тотҡарланырға булышлыҡ итеүен асыҡлай. Кешеләр тауарҙы ныҡлап өйрәнгән, әммә шул уҡ ваҡытта «тәжрибә уртаҡлашыусыларҙа» тәнҡитле фекерләү кәмегән.

Күп дәрестәрҙән айырмалы рәүештә, музыка тыңлауҙа мейенең бөтә бүлектәре лә ҡатнаша. Табиптар, көкөрт матдәһе күп булған пациенттар классик музыкаға өҫтөнлөк бирә, тигән һығымтаға килгән.

Кеше организмының эшмәкәрлеге туранан-тура гормондарға бәйле. Улар арҡаһында беҙҙең эмоциональ һәм физик торошобоҙ үҙгәрә. Төрлө гормондар барлыҡҡа килеүгә булышлыҡ итә. Тиҙ һәм көслө музыка кортизол кимәлен күтәрә, шуға күрә кеше асыулана һәм ярһый башлай.

Тауыш тулҡындары, структураһы буйынса төрлө, барабан ярылары аша үтә, механик тирбәлеүҙәргә әйләнә, ә артабан электр импульстары менән үҙәк ишетеү системаһы юлдары буйлап артабан эшкәртеү һәм таныу өсөн мейенең сикә өлөштәренә тапшырыла.

Мейе системаһында эйә ҡатнашҡан бәхет гормондарының береһе-дофамин. Яратҡан музыкаһын тыңлағанда дофамин ташлана, һөҙөмтәлә кәйеф күтәрелә.

Музыка менән шөғөлләнеү һәр йәштәлә кешенең үҫешенә ыңғай йоғонто яһай. Моторика, ярымшарҙар араһында психик функцияларҙың бәйләнеше һәм бүленеше, иғтибар туплау яҡшыра.

Кеше тәнендә шыйыҡсалар күп, улар тауыш тулҡындарын еңел ҡабул итә һәм яңы химик процестарҙы башлай. Шулай итеп, төрлө тулҡындарға уйнаған йырҙар, дөйөм алғанда, организмға төрлөсә тәьҫир итә.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Блум Ф. Лазерсон А., Хофстедер Л. Мозг, разум и поведение. –М: Мир. 2006 – 189 с.; с. 120-125.
2. Гольцев В. И. Восприятие рекламы. Маркетинг: теория, методика, практика. – М: 2001, 108 с.
3. Гарбузов Н. А. Зонная природа звуковысотного слуха. – М.: 1999. – 107 с.
4. Как музыка влияет на человека и его психику. [Электронный ресурс]. // Режим доступа: psylogik.ru. – Дата обращения: 13.12.2022.


© Ураков А.М., Әлибаев З.А., 2023

**УДК 811.512.141**

*Усманова М.Ғ., филол. ф. д-ры, Өфө ҡалаһы*

# ЗАМАН ЯЛҒАУҘАРЫ БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ ҺӘМ УНЫҢ ГРАММАТИКАҺЫНДА ЙӘКИ БЕҘ ДӨРӨҪ УҠЫТАБЫҘМЫ?

**Аннотация.** Сравнительное изучение образования временных форм глаголов изъявительного наклонения в башкирском общенародном языке по сравнению с теми, которые представлены в грамматике, позволило выявить существование некоторых отличий: в классической грамматике образование временных форм глаголов представлено пятью аффиксами (*-а, -ды, -ған, -ыр, -асаҡ* ), из них *-ды, -асаҡ* — выражают определенные прошедшее и будущее времена, а *-ған, -ыр* — неопределенность этих времен. О показателе настоящего времени *-а* в трудах ученых ничего не говорится.

Однако язык башкир представляет собой иную картину: 1) в нем для выражения определенности всех времен используются аффиксы *-а, -ды, -ған, -ыр* и специальные языковые средства, указывающие дату, время, модальные слова, частицы и др., выражающие сомнение, неопределенность; 2) настоящее время изъявительного наклонения имеет определенные и неопределенные формы.

**Annotation.** A comparative study of the formation of the tense forms of the indicative mood verbs in the Bashkir national language compared to those presented in grammar revealed the existence of some differences: in classical grammar, the formation of the tense forms of verbs is represented by five affixes (-a, -dy, -gan, -yr, -asaҡ), of which -dy, -asaҡ — express certain past and future tenses, a-gan, -yr — the uncertainty of these tenses. About the indicator of the present time -and nothing is said in the works of scientists. However, the Bashkir language presents a different picture: 1) in it, affixes -a, -dy, -gan, -yr and special linguistic means indicating date, time, modal words, particles, etc., expressing doubt, uncertainty are used to express certainty of all tenses; 2) the present tense of the indicative mood has definite and indefinite forms: Keywords: grammar, verb, present tense, past tense, future tense, affix, certainty

**Keywords:** Bashkir language, grammar, verb, present tense, affix, definiteness and indefiniteness.

**Ключевые слова**: башкирский язык, грамматика, глагол, настоящее время, аффикс, определенность и неопределенность.

XX быуаттың 60-сы йылдарынан алып башҡорт тел ғилемендә эш-хәлдәрҙең *билдәле* йә *билдәһеҙ* булғаны өс заманда (*үткән, хәҙерге* һәм *киләсәк* замандарҙа) *-а, -ды, -ған, -ыр, -асаҡ* аффикстары менән биреләә, шулар араһынан

*-ды, -асаҡ билдәле*, ә *-ған, -ыр — билдәһеҙ* булғанды белдерә тигән ҡараш йәшәй. Бында хәҙерге заман ялғауы тип һаналған ***-а***-ның *билдәле/билдәһеҙ* эш-хәлде белдереү/белдермәүе тураһында бер нәмә лә әйтелмәй. [Мансуров 1953, 135; Кейекбаев һ.б., 1983, 216-217; Зәйнуллин 2002, 139-144; Ишбаев һ.б., 2012, 373-375; В. Ш. Псәнчин, Ю. В. Псәнчин, 2001, 139-140]. Ә быға тиклем башҡорт теленең беренсе грамматикаһы төҙөлгәндән алып был формалар *1-се форма, 2-се форма* тип аталған була. [Кулаев 1930; Әхмәр 1941, 5-6; Дмитриев 2008, 181].

Тимәк, был тәғлимәт бына 90 йыл (*1930 йылдан алып*) башҡорт тел ғилемендә иркен йәшәй, бер ниндәй үҙгәрешһеҙ бер дәреслектән икенсеһенә күсә килә. Уларҙың тик авторҙары ғына үҙгәрә.

Халыҡ тормошо гөрләп торған эш-хәрәкәттәрҙән, төрлө хәл-ваҡиға, хәл-тороштар һәм төрлө күренештәрҙән тора. Ә ҡайнап торған был тормошта кеше үҙ-ара төрлө мөнәсәсәбәттә була: ул кемгәлер *эш куша – алып кил**ер**һең* әле, нимәлер тип *үтенә, ялбара – ҡарап тор**ор**һоң* әле, *өмөтләнә – килеп ет**әр*** ул, *биреп тор**ор*** әле һ.б. Күренеүенсә, халыҡ теле башҡа: унда ҡылымдың заман төшөнсәһен биргән  формаларҙың мәғәнәһе грамматикала күрһәтелгәнгә тап килмәй.

Башҡорттарҙың теленә, әйткән һөйләмендәге һәр һүҙенә, ундағы ялғауҙарҙың мәғәнәһенә иғтибар итеү, башҡорт теленең лексиконын һүҙ төркөмдәренә бүлеп, һәр береһенә лексик-семантик классификация яһау [Усманова 2009] һәм уларҙың морфологияла ҡулланылғанын ентекләп ҡарап сығыу, тормошта булған, булып яткан, була торған эш, хәл-ваҡиғаларҙы билдәле/билдәһеҙ булыу яғынан анализлау беҙҙе түбәндәге һығымталарға алып килде:

1. *Хәҙерге заманда* булып ятҡан эш-хәлдәрҙең дә һөйләүсегә *билдәле* йә *билдәһеҙ* булыуы бар: башҡорт телендә *билдәле хәҙерге заман* һәм *билдәһеҙ хәҙерге заман формалары* бар тигән ҡараштабыҙ;

2. Заманды белдергән *-а, -ған, -р, -сак* аффикстарының мәғәнәһен асыҡлап бөтмәү, шулай уҡ башҡорт телендәге билдәһеҙ булғанды, икеләнеүҙе, фараз итеүҙе, ваҡытты белдергән тел сараларын заман төшөнсәһен биргәндә иҫәпкә алмау халыҡ телен грамматикала боҙоп күрһәтеүгә алып килгән;

3. *-а, -ды, -ған, -ыр, -саҡ* аффикстары эш-хәл, ваҡиға, күренештәрҙең *билдәле* булғанын белдерә;

4. Башҡорт өс заманды *(үткән, хәҙерге* һәм *киләсәк*) ҡырҡа айырмаған, айыра ла алмаған, сөнки тел ул – тормош сағылышы. Тормошта төрлө хәл-ваҡиғаларҙың бер заманға ғына һыймауы, унық бер замандан икенсеһенә күсеүе, хатта өҙлөкһөҙ дауам итеүе йәки гел генә ҡабатланып тороуы бар. Шуға ла уның телендә ошо ваҡыт эсендә булған, булып ятҡан һәм киләсәктә була торған хәл-ваҡиғалар бәйләнешен — үткәндән хәҙергегә, хәҙергенән киләсәккә

булған күсешен күрһәткән, хатта өс заманда ла булғанды белдерә алған, ошо өс заман өсөн уртаҡ, дөйөм булған формалар бар. Башҡорт телендә улар — *-а, -ған, -р* аффикстары. Улар киң мәғәнәле (универсаль) аффикстар. Телдә улар ҡылымдың өс заманында ла булған эш-хәлдәрҙе лә белдереүҙә ҡатнаша. Был саҡта телмәрҙә ҡулланылған (йә аңда тотолған) ваҡытты белдергән һүҙҙәр, дата, ситуатив текст (бер ваҡиғаға ҡоролған хәбәр) мөһим роль уйнай;

5. *-а, -ған, -ыр* аффикстары күп мәғәнәле, һәр береһенең бер нисә мәғәнәһе бар; әммә уларҙың араһында *билдәһеҙ* булғанды белдергәне юҡ;

6. башҡорт телендә *билдәһеҙ булғанды* белдергән лексик-грамматик саралар бар. Улар *-а, -ды, -ған, -р* аффикстары менән бергә килгән һүҙҙәр, ваҡыт рәүештәре, даталар, ярҙамсы һүҙ төркөмдәренә ҡараған махсус тел саралары (*киҫәксәләр, мөнәсәбәт һүҙҙәр* һ.б.). Башҡорт телендә улар хәбәр ҡылымдың өс заманында ла *билдәһеҙ* булғанды белдереүҙә берҙәй ҡатнаша.

Тел саралары һөйләм киҫәктәренең барыһының да *билдәһеҙ* булғанын күрһәтә, мәҫәлән, *билдәһеҙ эйә, билдәһеҙ аныҡлаусы* һ.б. Был күренеш башҡорт теленең шул тиклем камил, төҙөк бер система тәшкил иткәнен асыҡ күрһәтә.

Артабан күп мәғәнәле булған *-а, -р, -ған* ялғауҙарының мәғәнәһе, үтәгән функциялары тураһында һүҙ алып барайыҡ.

**-а ялғауы** (варианты -ә/-й)

Мәғәнәһе, функцияһы:

1. *Хәҙерге заманды* белдереүе: *-а ялғауы* һөйләү мәлендә барған эш-хәлде белдерә, күп ваҡыт *бар-, ят-, ултыр-, йөрө-, башла-, ташла-, маташ-, ебәр-* һ.б. ярҙамлыҡ һүҙҙәр менән бирелә: Үҙем *китеп бар**ам***, үҙем ауыҙымдан әлеге “р” өнөн *сығарырға тырыш**ам***. (Сәғит Агиш); Күк тулы йондоҙ. Мин шуларға *ҡарап ят**ам***. (М.Кәрим);

2. *Үткән заманды* белдереүе: **-а** ялғауы эш-хәлдең һөйләү мәленән алда булғанды белдерә: Ж. Кейекбаев 1911 йылда Башҡортостандың Ғафури районы Ҡаранйылға ауылында крәҫтиән ғаиләһендә *тыу**а***;

3. *Киләсәк заманды* белдереүе: *-а* аффиксы һөйләү мәленән һуң булған, алда *мотлаҡ бул**а** тор**ған**, үтәлере шикһеҙ бул**ған** билдәле* эш-хәлде белдерә. Был башҡорт теленең төп үҙенсәлектәренең береһе: Мин *иртәгә* райкомға *бар**ам***. (Сәғит Агиш);

Ошо турала Н.К. Дмитриев үҙенең “Грамматика башкирского языка” тигән хеҙмәтендә былай тип яҙа: “Хәҙерге заман формаһының *(-а аффиксы* – М.У.) төп йөкмәткеһенә килгәндә, ул эшләнеү ваҡыты һөйләү (хәбәр итеү) менән бер моментҡа тура килгән эште (хәлде) лә аңлата, мәҫәлән, яҙам (хәҙер үҙем һөйләп торған ваҡытта яҙам), инглизсә I am writing, шулай уҡ ваҡыты һөйләү моментына тура килмәгән эште лә белдерә; ... быларҙан тыш ул *үтәлеше шикһеҙ булған киләсәк эште* лә белдерә *(башкорт телендә был айырыуса йыш ҡуллаңыла):* мин Өфөгә *бар**ам***, – был һүҙҙәрҙе әйткәндә

һөйләүсе әле бер ҡайҙа ла бармай, әлбиттә, ә ул турала уйлап ҡына тора. Һүҙ ыңғайында әйтеп үтәйек: ҡаҙаҡ телендә *барамын* тибындағы форманы ҡулланыу киләсәк заманға шул тиклем бәйләнгән, хатта уны ҡаҙаҡ телселәре *киләсәк заман* тип атап йөрөтә. [Дмитриев, 1950, 157–158].

Күренекле ғалим А.М. Щербактың фекере лә иғтибарға лайыҡ. Ул түбәндәгеләрҙе яҙа: "В современных тюркских языках, кроме огузских и некоторых других, форма на *-а* входит в парадигму изъявительного наклонения и выступает в значении настояще-будущего времени. Примеры: башк. кар., кирг., тат. *барам*, карач.-балк. *барама*, кум., ног. *бараман* "иду", "пойду". При этом в башкирском, казахском, татарском, узбекском и уйгурском языках наметилась тенденция к употреблению формы на *-а* в значении *будущего категорического*". [Щербак, 1981, 84].

4. *Дөйөм заманды* белдереүе: Конкрет заманға бәйле булмаған, һәр ваҡыт булған йә ҡабатланып торған эш-хәлде (йә үҙенсәлекте) белдерә: Ғәҙәтенсә, сәғәт алтыла *тор**а*** ла мал *ашат**а***, аҫтын *таҙарт**а***, утын *яр**а*** һ.б., ә әсәйем был ваҡытта иртәнге сәй *әҙерлә**й***. (Ә.Ә.); Әҙәмде өмөт *йәшәтә*, ғәм *ҡаҡшат**а***. (Мәҡәл).

**2) -р ялғауы** (варианты -ыр/-ер, -ор/-өр, -ар/-әр)

*Мәғәнәһе*. *-р* ялғауы – алда булған *билдәле* эш-хәлдәрҙе белдерә.

Был уның төп мәғәнәһе. Бынан тыш уның түбәндәге мәғәнәләре бар:

а) *өмөт мәғәнәһе, өмөт итеү:* Тора-бара бөтәһе лә *асыҡлан**ыр***. (И.Абдуллин); Эштәрҙе кеше күрһен һәм маҡтаһын өсөн түгел, файҙаһы булһын өсөн эшләгеҙ. Файҙалы эш бөгөн булмаһа ла, бер ваҡыт күҙгә *күрен**ер*** һәм аҡыл эйәләре тарафынан *баһаланыр*. (Ризаитдин Фәхретдинов);

б) *һүҙ биреү, вәғәҙә итеү (биреү):*

Әсәйем, күҙ нурым,

Көт мине, *ҡайт**ыр**мын*. (Йыр "Әсәйемә хат");

Мин һине әүәлге һымаҡ яратам һәм мәңге *ярат**ыр**ым*. (Ж.Кейекбаев);

– Улым! Аҙнаға ла ҡалмам, улыҡайым! Аттарҙың иң шәптәрен һайлап, елеп *килеп ет**ер**мен.* (М.Иҙелбаев);

в) *ниндәйҙер ҡарарға килеү, һығымта яһау:*

Юлда йырлатып, *һынап ҡара**р**быҙ* ҙа, ысынлап шулай шәп йырлаһа, ярышта *ҡатнаштыр**ыр**быҙ*, тибеҙ. (З.Биишева);

г) *кемгәлер, нимәгәлер хас үҙенсәлекте, билдәле хәҡиҡәтте белдерә*:

Ҡарағай ҙа *үҫ**әр*** ай йәм өсөн,

Бал ҡорттары *ос**ар*** бал өсөн. (Башҡорт халыҡ йыры"Йәйләүлек");

ғ) *икәү-ара (йә күмәкләшеп) һөйләшеп, кемгәлер йомош ҡушыу*:

Һин Сәлимәне таксиға ултыртып *ебәр**ер**һең*, ә мин бында ҡаршы *ал**ыр**мын*. Ҡайғырма. (*Һөйләшеүҙән*).

д) *кәтғи мәғәнә: ант итеү:*

Ауыҙ-морономдан ҡан китһә *китәр* – ышанысыҡыҙҙы аҡларға була барыһын да *эшлә**р**мен*, ҡәҙерлеләрем минең! (И.Насыри).

ҙ) *янау, ҡурҡытыу:*

*Сыға**р**ы**р**мын* мин һине, *сыға**р**май* ни. Ана ултыр, китабыңды уҡы! Тыңламаһаң, *кәрәгеңде бир**ер**мен!* Мин һиңә атаң түгел.

*Функцияһы*

*Хәбәр ҡылымда:*

1) *киләсәк заманды* белдереүе: Беҙҙә тамаҡҡа *аша**р**быҙ*, баянда тағы берәй көй уйнарға *өйрән**ер**беҙ* ҙә унан һуң һеҙгә *бар**ыр**быҙ*. (З.Биишева).

*2) дөйөм заманды* белдерә: эш-хәрәкәт конкрет затҡа ҡарамай:

Ҡол кеүек эшләһәң, хан кеүек *йәшәрһең*. (Мәҡәл).

Аҡылһыҙ башҡа алтын бүрек файҙа *бирмә**ç***. (Мәҡәл).

*Сифат ҡылымда:*

1) *хәҙерге заманды* белдереүе: Бер ерендә кеше *сыға**р*** урын юҡ, мисәтләнгән була бишек. (Сәйфелмөлөк эпосы);

2) *киләсәк заманды* белдереүе: Хажға килгәнемде аңлатҡас, дуçтарса арҡамдан ҡағып, *бар**ыр*** яҡты күрһәтеп ебәрҙе. (Г.Ситдиҡова).

3) *дөйөм заманды* белдерә: эш-хәрәкәт конкрет затҡа ҡарамай:

Тауҙар буйлар тауышлы, тәрәнлектәр **айкар** аһәңле йырсыларыбыҙ бар бит, Аллаға шөкөр! (Л.Абдуллина).

*Исем ҡылым* функцияһын үтәүе:

Рәтләп *кейеренә, ашарына* ла юҡ бит, ә балаларҙың күҙҙәрен асыу кеүек яҡшы теләккә тотонған! (Б.Бикбай).

**-ған ялғауы**

Мәғәнәһе. *-ған* ялғауы – күп мәғәнәле универсаль аффикс. Ул үткән, хәҙерге, киләсәк замандарҙы, шулай уҡ һәр ваҡыт булған (дөйөм заман), йә ҡабатланып торған эш-хәл, үҙенсәлектәрҙе белдерә.

Ул *билдәле* эш-хәлдәрҙе белдерә:

*-ған* ялғаулы исемләшкән һүҙҙәрҙә, исем ҡылымдарҙа заман төшөнсәһе һаҡлана.

*Функцияһы*

Хәбәр ҡылымда үткән заманды белдереүе: *-ған* ялғауы һөйләү мәленән алдан булған эш-хәлдәрҙе белдерә: Шул ҡарт эшсе минең кеүек ябай кешеләр менән һөйләшергә *ярата тор**ғайны***. (З. Биишева).

Башҡорт халҡы ете быуат ярым буйы сит баçҡынсыларҙың, тәүҙә – татарҙарҙың, шунан һуң рустарҙың аяуһыҙ иҙгәненә ҡаршы азатлыҡ яулап, милли суверенитет яулап *көрәш**кән***. (Әкрәм Бейеш);

*Хәҙерге заманды белдереүе:*

– Барыбыҙ ҙа йыйылып бөткәнбеҙ ҙә бөтөүен, Ялпаҡ йылғаның Килдебай ағай *килеп етмәгән* бит әле, уны бәләкәс көтмәйбеҙме ни? (Ғ.Дәүләтшин);

-*ған* аффиксы ниҙәндер үткәндә башланып (булып), уның хәҙерге заманда ла дауам иткәнен белдерә; хәҙерге заманға үҙенең үткән заман ялғауы -*ған* менән бергә күсә: Тик буйға ғына ул әллә ни *үҙгәрмәгән.* (З.Б.) (тимәк, ул буйға элек тә шулай булған, әле лә шулай).

Ғалим Н.К. Дмитриев фекеренсә, -*ған* ялғауын үткән заман формаһы тип кенә әйтеп булмай, бер үк кимәлдә хәҙерге заманға бәйле булғанын да сағылдыра. Ул был аффиксты *үткән-хәҙерге заман* формаһы тип атай [Дмитриев, 2007, 132, 134].

*Дөйөм заманды белдереүе:*

-*ган* ялғауы шулай уҡ бер заманға ла айырым ҡарамаған, тормошта ғөмүмән була торған (*ҡабатланып торған йә һәр ваҡыт булған*) эш-хәрәкәтте лә белдерә, йәғни ундағы мәғлүмәт өс (үткән, хәҙерге һәм киләсәк) заманға ла ҡарай: Беләге йыуан берҙе *йыҡҡан*, белеме булған меңде *йыҡҡан*.

Йән биргәнгә – йүн *биргән*.

Үтә буянғандан күңел *болғанған*. (Мәҡәлдәр).

*Сифат ҡылымда үткән заманды белдереүе:*

Ә йөҙҙәре *ағарып киткән* бисәләр кузовтан төшә-төшә уны ысынлап әрләй ине. (Р.Байымов).

*Хәҙерге заманды белдереүе:*Ҡамыт ҡайғыһы ла китте, тик *сығып барған* йөрәкте баҫырға ғына ҡарайбыҙ, һүҙ һөйләү юҡ. (Ғ.Дәүләтшин); Миңә *кәрәк булған* нәмәләр бында күп икән (*миңә ул нәмәләр әле кәрәк*); Юҡ, ул аҫылташ *баһалай белгән* әҙәм түгел. (Ф.Аҡбулатова).

*Киләсәк заманды белдереүе:* Ә хәҙер алда *булған* хәл-ваҡиғалар тураһында. (Н.Юнысов);

Музейға ансамбль концерттары *үткән* көндә йәки алдан яҙылып килергә мөмкин. (Б., 27.04.2018); Конкурс ике этапта үтә. Район кимәлендә еңеү *яулаған* команда ҡала бәйгеһендә ҡатнашыу хоҡуғын ала. (Т., 22.11.2019).

Һеҙҙе *1 майҙа булған* концертҡа саҡырам. *Бынан һуң сыҡҡан* дәреслектәрҙе яңы ҡағиҙә буйынса төҙөргә кәрәк (*сығасаҡ дәреслек* тип яҙыу дөрөҫ булмай);

*Дөйөм заманды белдереүе*: -*ған* аффиксы шулай уҡ һәр ваҡыт булып торған даими эш-хәрәкәтте, процесты, кемгәлер, нимәгәлер хас үҙенсәлекте сағылдыра: Ни өсөндөр бөгөн ғәҙәттәге *була торған* барлауҙар булманы. (Ғ.Дәүләтшин); Гәзит *алдырған* һәм *уҡыған* кеше донъянан бер аҙымға алда атлай, тип һәр саҡ әйтәм. (Б., 9.10.2020); *Арыған* ат соҡор һанай, *асыҡҡан* ат ҡолынды ялай, яраткан ат күҙеңә ҡарай. (Мәҡәл); *Ҡысыған* ерҙән ҡул китмәй, *һөйгән* йәрҙән күҙ китмәй. (Мәҡәл); Үҙең *ишеткең килмәгән* һүҙҙе кешегә һөйләмә. (Мәҡәл);

*Исемләшеүе*: Анһатты *уйлаған* әҙҙән буш ҡалған. (Ф.Н); Хәлеңдән *килмәгәнгә* тотонма. (Мәҡәл).

*Исем ҡылым булыуы:* Сәлих шунда уҡ һеңлеләренә ауыл күстәнәстәре *алып килмәгәнгә* үкенде. (С.Агиш); *Ялғандың* бото ҡыҫҡа. (Әйтем); Шунан бирле *барған* да юҡ. (Ғ.Дәүләтшин).

Шулай итеп, заманды белдергән *-а, -ған, -р, -саҡ* аффикстарының мәғәнәһен асыҡлап бөтмәү, шулай уҡ башҡорт телендәге билдәһеҙ булғанды, икеләнеүҙе, фараз итеүҙе, ваҡытты белдергән тел сараларын заман төшөнсәһен биргәндә иҫәпкә алмау халыҡ телен грамматикала боҙоп күрһәтеүгә алып килгән. *-а, -ды, -ған, -ыр* аффикстары эш-хәл, ваҡиға, күренештәрҙең *билдәле* булғанын белдерә. Ә билдәһеҙ булғанды *-а, -ды, -ған, -ыр* ялғаузары менән махсус тел саралары белдерә.

Тимәк, беҙ башҡорт балаһына башҡорт теле буйынса белемде дөрөҫ биреп еткермәйбеҙ булып сыға. Башҡорт теленең грамматикаһында яңынан ҡарайһы урындарҙың булыуы тураһында ғалимдар ҙа, халыҡ та әленән-әле яҙа, әйтә килә [Н.К.Дмитриев, Ж.Ғ.Кейекбаев, Н.Х.Ишбулатов Әкрәм Бейеш, Рәшит Шәкүр, В.И.Хажин, Н.Б.Сәлимов, Л.Абдуллина, Г.Ситдиҡова, М.Ғ.Усманова, Н.Хәмбәлиева һ.б.]. Был алда хәл итәһе етди мәсьәләләрҙең булғанын күрһәтә.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Дмитриев Н.К. Грамматика башкирского языка. – Л., 1948; М.: Наука, 2008.
2. Дмитриев Н.К. Башҡорт теленең грамматикаһы. – Л., 1950.
3. Зәйнуллин М.В. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле. Морфология. – Өфө: БДУ, 2002
4. Ишбаев К.Ғ. Ҡылым // Башҡорт теле. Юғары уҡыу йорттарының филология факультеты студенттары өсөн дәреслек. – Өфө: Китап, 2012. 353–396-сы б.
5. Ишбулатов Н.Х. Хәҙерге башҡорт теле. (Әҙәби телдең нормалар системаһы). – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1972. – 144-се бит.
6. Кейекбаев Ж.Ғ., Ғәләмов А.А., Фәритов Х.С., Аҙнабаев Ә.М., Сәйетбатталов Ғ.Ғ. Башҡорт теле. Педагогия училищелары өсөн дәреслек. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1983.
7. Мансуров Ә. Башҡорт теле грамматикаһы. I киҫәк. Фонетика һәм морфология. Ете йыллыҡ һәм урта мәктәптең V–VI кластары өсөн дәреслек. – Өфө: Башгосиздат, 1953.
8. Миңсылыу Усманова. Башҡортса дөрөҫ һөйләйек. Башҡорт теленең функциональ грамматикаһы. – Өфө: Акирус, 2020.
9. Псәнчин В.Ш., Псәнчин Ю.В. Әсә теле. 10-11 кл. Өфө: Китап, 2001.
10. Рәшит Шәкүр. Хәҙерге башҡорт матбуғаты һәм тел мәҙәниәте // Ағиҙел, 2011, №1. 181-186-сы б.
11. Сәлимов Н.Б. Шәхестәр иңендә халҡым яҙмышы. – Өфө, 2018.
12. Усманова М.Ғ. Телебеҙҙе кем боҙа? Үҙебеҙ!//“Башҡортостан” гәзите. 21.02.12; 16.03.12; 27.04.12; 25.05.12; 25.08.12; 14.09.12; 30.11.12;

21.02.13; 29.03.13; 3.05.13; 12.06.13; 23.08.13; Башҡорт грамматикаһы һәм халыҡ теле//“Ватандаш” журналы, №8-12 2019; №1-2, 2020; Причастие настоящего времени и способы его выражения в башкирском языке: новый взгляд на проблему//журнал Российская тюркология, 2018. №1-2 (18-19). – С.67-83; Причастие прошедшего времени и способы его выражения в башкирском языке: новый взгляд на проблему//журнал “Российская тюркология”. – М.: 2019. – С. 125-138.
13. Усманова М.Г. Башҡортса-русса тематик һүҙлек. – Өфө: Китап, 2009.
14. Хажин В.И. Дөрөҫ һөйләйбеҙме? // Ватандаш, 2001. № 1, 181– 183-сө б.
15. Щербак А.М. Очерки по сравнительной морфологии тюркских языков (глагол). Л.: Наука, 1981.
16. Әкрәм Бейеш. Тел хикмәттәре. – Өфө: Китап, 1999.
17. Әхмәр Ҡ. Башҡорт теле. Педучилищелар өсөн дәреслек. Өфө, 1941.

©Усманова М.Г., 2023

**УДК 372.88.**

*Фәтихова Л.Ф., студент*
*Ғәлина Ғ.Ғ., филол. Ф. канд., доц.*
*М.Акмулла ис. БДПУ, Өфө к.*

# ӘҘӘБИӘТ ДӘРЕСТӘРЕНДӘ МӘҠӘЛ ҺӘМ ӘЙТЕМДӘРҘЕ ӘХЛАҠИ ТӘРБИӘ БИРЕҮ САРАҺЫ БУЛАРАҠ ҠУЛЛАНЫУ ЮЛДАРЫ

Аннотация. В данной статье рассматривается важность изучения башкирских пословиц и поговорок как средства нравственного воспитания на уроках башкирской литературы. Предлагаются наиболее эффективные методы изучения пословиц в средних классах общеобразовательных организаций.

Annotation. This article discusses the importance of studying Bashkir proverbs and sayings as a means of moral education in the lessons of Bashkir literature. The most effective methods of studying proverbs in the middle classes of educational organizations are proposed.

Ключевые слова: нравтсвенное воспитание, пословицы и поговорки, нестандартный урок.

Key words: moral education, proverbs and sayings, non-standard lesson.

Уҡыусыларҙа уҡыу процесы барышында ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм шул уҡ арала тәрбиәүи маҡсатты ла тормошҡа ашырыу – мөһим бурыстарҙың береһе. Был бурысты үтәүҙә уҡыу процессында ата-бабаларабыҙҙың изге һүҙен, алтындан ҡиммәт мәңгелек хазинаһын, мәҡәл һәм әйтемдәрҙе, ҡулланыу ҙур әһәмиәткә эйә. Мәҡәлдәрҙе халыҡ тормошоноң энциклопедияһы, халыҡтың практик философияһы тип йөрөтәләр, тип яҙа үҙенең хеҙмәтендә Нәҙершина Фәнүзә Айытбай ҡыҙы. [1, 63].

Башҡорт әҙәбиәте дәрестәрендә мәҡәлдәрҙе һәм әйтемдәрҙе өйрәнеү халыҡ мәҙәниәтен, уның әхлағын аңлатыуҙан айырылғыһыҙ. Мәҡәл һәм әйтемдәр башҡорт әҙәбиәте дәрестәрендә өйрәнгәндә традицион методика төрлө алымдар тәҡдим итә. Барыһы ла уҡытыусының ижади фекерләүенә, уның дәрес планына бәйләнгән.

Мәҡәлдәрҙе һәм әйтемдәрҙе әхлаҡи тәрбиә биреү сараһы булараҡ стандарт булмаған уҡытыу методтарына таянып өйрәнеү ыңғай һөҙөмтәләр бирә. Былар барыһы ла стандарт булмаған дәрес (бигерәк тә дәрес-ярыш йәки дәрес-уйын) формаһы аша тормошҡа ашырылырға мөмкин. Ул үҙ эсенә алған уйындар, ҡыҙыҡлы һорауҙар уҡыусыларҙа уҡыуға ҡарата мотивация тыуҙыра, уларҙың ижади эшләүен дә тәьмин итә, әхлаҡи аңын да үҫтерә. Мәҫәлән, 5-се йәки юғарыраҡ кластарҙа мәҡәлдәрҙе һәм әйтемдәрҙе өйрәнгәндән һуң, кластан тыш эш булараҡ әйтемдәргә арналған «Мәҡәлдәрҙә - халыҡ аҡылы» тип аталған ярыш уҙғарылырға мөмкин. Дәрес - ярыш башланыр алдынан түбәндәге эштәр башҡарыла:

1. Уҡытыусы ярышты халыҡ ижады тураһында инеш һүҙ менән аса. Кисәнең темаһы эре хәрефтәр менән таҡтаға яҙып ҡуйыла.
2. Жюри һайлана. (кластан теләгән 3 кеше)
3. Командаға бүленеү процесы алып барыла.

Дәрес-ярыш разминканан башлана: Командаларға түбәндәге темаларға мәҡәлдәр әйтергә тәҡдим ителә: яҡшылыҡ һәм яманлыҡ, туған ер, белем, әҙәплелек һ.б.

Уҡыусылар, үҙҙәре теләп, яуаптарын әйтәләр, ә жюри балдар ҡуя бара. Бындай әйтештә иң күп әйтем тапҡан команда еңеүсе була.

Һуңынан ярыштың төп өлөшө башлана. Ул 7 ярыштан тора:

1-се ярыш «Аңлатып бир». Командаларға мәҡәлдәр яҙылған карточкалар таратып бирелә. Һәр карточкала алтышар мәҡәл. Уҡыусылар уларға эләккән мәҡәл йәки әйтемдең мәғәнәһен яҙырға тейеш. Аҙаҡтан командаларҙан бер уҡыусы сыға һәм яуаптарын уҡый.

2-се ярыш «Юғалған дауам». Әйтемдәрҙе дауам ит. Командаларға бер-бер артлы һорауҙар бирелә:

Ер ҡәҙере – игендә, кеше ҡәҙере - …(белемдә);
Уҡыған уңыр,…(уҡымаған туңыр);
Сит илдә солтан булғансы… (үҙ илеңдә олтан бул);
Башланған эш - … (бөткән эш);
Әҙәп барҙа…(оят бар);
Һүҙең менән эшең… (бер булһын);
Эшләгәнең кешегә, … (өйрәнгәнең үҙеңә) һ.б.
Был ярыштан һуң һәр мәҡәлдең мәғәнәһе асыҡлана.
3-сө ярыш «Нисә?». Был әйтемдәрҙә ниндәй һандар төшөп ҡалған?
…ҡат үлсә, …ҡат киҫ; (ете, бер)
… аҙым алға атла, ... тапҡыр артыңа ҡара (алтмыш, алты)
Егет кешегә … төрлө һөнәр ҙә аҙ (етмеш)

Унда уҡ юнмаған - … ҡылыс та ҡоймай. (утыҙ)

Бер ҡалған эш … йылға ҡалыр. (ҡырҡ) һ.б.

4-се ярыш «Мәҡәл әйтеш». Командалар бер-бер артлы мәҡәлдәр әйтешә. Улар ҡабатланмаҫҡа тейеш. Һәр команданан 7 мәҡәл яңғырағас, уйын тамамлана, Мәҫәлән:

**1**-се уҡыусы: Үҙ илең — алтын бишек.

**2**-се уҡыусы: Ятып ҡалғансы, атып ҡал, Әйтер һүҙен әйтеп ҡал.

**3**-сө уҡыусы: Егәрленең ҡулы ете. Һ.б.

5-се ярыш «Тылсымлы һүрәт». Һүрәт дүртмөйөштәргә бүленеп киҫелә. Һәр команда мозаиканы төҙөп, нимә килеп сыҡҡанын әйтә. Ошо һүҙ ингән мәҡәл йәки әйтем әйтелә. Ул сиселә һәм мәғәнәһе аңлатыла. Мәҫәлән: «йөҙ» - “Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын”.

6-се ярыш «Хата ҡайҙа» Мәҡәлдәрҙә хаталарҙы табып, төҙәтегеҙ. Уларҙың мәғәнәләрен аңлатығыҙ:

Эше барҙың ашы юҡ (Эше барҙың ашы бар).

Ҡурай халыҡ күңелен юрамай (Ҡурай халыҡ күңелен юрай)

Ҡалған эшкә ямғыр яуыр (Ҡалған эшкә ҡар яуыр)

Яңғыҙ ҡайынға ҡош ҡуныр ( Яңғыҙ ҡайынға ҡош ҡунмаҫ).

Эшләгәнең үҙеңә, өйрәнгәнең кешегә (Эшләгәнең кешегә, өйрәнгәнең үҙеңә).

Һүҙенән ҡайтҡан - ҡыҙ түгел (Һүҙенән ҡайтҡан - ир түгел)

Һүҙ күп ерҙә эш күп булыр ҺҺүҙ күп ерҙә эш аҙ булыр).

7-се ярыш «Пантомима». Командалрға өсөшәр мәҡәл яҙылған карточкалар таратыла ( мәҫәлән, «Әйткән һүҙ-атҡан уҡ», «Ҡарға һайрап, һандуғас булмаҫ», «Ат абынғанға ишәк ғәйепле» һ.б.). Улар уны ым-ишара ярҙамында, һүҙҙәр ҡулланмай, бер-береһенә аңлатырға тейеш:

Уйындар тамаланғас, уҡытыусы рефлексия үткәрә. Рефлексия барышынла түбәндәге һорауҙар ҡулланылырға мөмкин:

-Һеҙгә ниндәй уйын еңел булды, ә ҡайһыһы ауырлыҡтар тыуҙырҙы?

-Барлыҡ мәҡәлдәр ҙә һеҙгә таныш булдымы?

-Мәҡәлдәр һеҙҙе нимәгә өйрәтте?

-Был мәҡәлдәрҙе киләсәктә телмәрегеҙҙә ҡулланасаҡһығыҙмы? Ни өсөн? Иң аҙаҡтан жюри ярышты йомғаҡлай., еңеүсе команда билдәләнә

Шулай итеп, мәҡәлдәр һәм әйтемдәр менән танышыу балаларҙың күңел кисерештәренә йоғонто яһап ҡына ҡалмай, ә телмәр һәләттәренең үҫешенә лә этәргес көс бирә, балаларҙың образлы-эмоциональ аң эшмәкәрлеге активлаша, тирә-йүн ысынбарлыҡҡа үҙ мөнәсәбәте тыуа, уның бер нигеҙе сифатында телмәр эшмәкәрлеге ситуациялары тыуа. [2, 61-64]. Мәҡәлдәрҙе һәм әйтемдәрҙе айырым объект булараҡ өйрәнгәндә уҡыусыларҙың әхлаҡи аңын үҫтереүҙә байтаҡ алымдар ҡулланырға мөмкин. Был йүнәшештә бигерәк тә уйын формаһында үткәрелгән һәм төрлө класс балаларының әйтемдәрҙе һәм мәҡәлдәрҙе белеүен тикшереүгә йүнәлтелгән уҡыу алымдары уҡытыу-тәрбиә бурыстарына өлгәшергә ярҙам итә. Әммә афористик жанрға мөрәжәғәт иткәндә,

иң тәүҙә, уның йөкмәткеһендәге әхлаҡи төшөнсәнге уҡыусы аңына һеңдерергә, уйланырға мәжбүр итергә кәрәк. Тик ошо осраҡта ғына әҙәбиәт дәресендә әхлаҡи тәрбиә бурыстарына өлгәшергә мөмкин.


ӘҘӘБИӘТ

1. Нәҙершина Ф.А. Халыҡ һүҙе. – Өфө: Китап, 1997. – 255 бит.
2. Килсенбаева Ә.Ф. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәрҙе дәрестә өйрәнеү // Башҡортостан уҡытыусыһы. – 2012. – №5. – 61-64-се биттәр.


© Фәтихова Л.Ф., Ғәлина Ғ.Ғ., 2023

**УДК 373.31К.**

*Фәхретдинова К.И., студент*
*Етәксеһе: Дәүләтколова Г.Ш., өлкән укытыусы,*
*М. Акмулла ис. БДПУ, Өфө к.*

# УҠЫУСЫЛАРҘЫҢ БАШҠОРТСА ТЕЛМӘР КОМПЕТЕНТЛЫҒЫН ФОРМАЛАШТЫРЫУ ЮЛДАРЫ

**Аннотация.** В статье анализирются пути формирования речевой компетентности учащихся начальных классов на уроках родного (башкирского) языка, определяются цели и задачи развития речи. Приводятся виды упражнений для формирования речевой компетентности учащихся.

**Annotation.** The article analyzes the ways of forming the speech competence of primary school students in the lessons of their native (Bashkir) language, defines the goals and objectives of speech development. The types of exercises for the formation of students' speech competence are given.

**Ключевые слова:** речь, формирование, компетентность, упражнение, изложение, сочинение, учитель, урок, пути развития.

**Key words:** speech, formation, competence, exercise, presentation, essay, teacher, lesson, ways of development.

Бөйөк рус методисы К.Д. Ушинский телмәр һәләтлеген «белем шишмәһе» тип атаған. Уның фекеренсә, тел һәм телмәр – иң яҡшы уҡытыусы ла, аҡыл өйрәтеүсе лә, шул уҡ ваҡытта әйләнә-тирәләге тәбиғәт, кешеләр менән таныштырыусы ла. Шуның өсөн дә уҡытыусы башҡорт теле дәрестәрендә эш-күнегеүҙәрҙе уйлап, танып белеү теләген ҡәнәғәтләндерерлек итеп, йәнле, эҙмә-эҙлекле башҡарып, балаларҙы телмәр мәҙәниәтенә, аралашыу оҫталығына өйрәтергә тейеш.

Бала үҙенең фекерен, теләген, үтенесен бүтән кешеләргә телмәр аша еткерә. Уның телмәре ни тиклем үҫешкән, камиллашҡан булһа, ул үҙ фекерен башҡаларға еңелерәк еткерә һәм уларҙы ла тиҙерәк аңлай, фекер йөрөтөү

һәләтлеге лә йылдамыраҡ үҫә. Былар бөтәһе лә мәктәптә бөтә яҡлы, тәрән белем алырға ярҙам итә.

Ләкин, мәктәптәрҙә уҡыусыларҙың телмәрен үҫтереүгә тейешле иғтибар бирелеп етмәү осраҡтары күҙәтелә. Балаларҙың телмәрен үҫтереү һәм камиллаштырыу өсөн мәктәптә икһеҙ-сикһеҙ мөмкинлектәр булһа ла, ул ресурстар булыһынса файҙаланылмай ҡала. Шуға ла уҡыусы мәктәптән һуң юғары уҡыу йорттарына уҡырға килгәндә, уның телмәренең ярлы булыуы асыҡлана. Ул һөйләгәндә кәрәкле һүҙҙәр таба алмай яфалана, юғалып ҡала, әйтергә теләгәнен еренә еткереп һөйләй алмай, ошо арҡала күп уңайһыҙлыҡтарға осрай. Шуға күрә лә балаларҙың телмәр компетентлығын үҫтереү мәктәп алдында торған төп бурыс итеп билдәләнергә һәм баланың мәктәпкә тәү башлап аяҡ баҫҡан көнөнән үк башланырға тейеш.

«Телмәр ярҙамында бала үҙен уратып алған тәбиғәтте, уның күренештәрен һәм тормошто күҙәткәнде, уҡығанда барлыҡҡа килгән фекерен, уйын сағылдырыу өсөн кәрәк булған һүҙҙәрҙе табып ҡуллана, һүҙҙәрҙән һөйләм һәм бәйләнешле телмәр төҙөп, аныҡ, асыҡ, тәрән йөкмәткеле итеп әҙәби телдә яуап бирә», – тип билдәләй Т.Х. Аслаев. Беҙ ҙә уның менән тулыһынса килешәбеҙ һәм был проблеманың әһәмиәтлелеген күҙ уңында тотоп, махсус тикшеренеү темаһы итеп билдәләнек. Фәнни методик әҙәбиәткә нигеҙләнеп, алдынғы уҡытыусыларҙың эш тәжрибәләрен өйрәнеп, уҡыусыларҙың телмәр компетентлығын формалаштырыу, һөйләү һәм яҙма телмәрен үҫтереү системаһын билдәләүҙе маҡсат итеп алдыҡ. Был юҫыҡта тикшеренеүҙәр алып барғанда телмәр процесы – объект, башҡорт теле дәрестәрендә телмәр үҫтереү тикшеренеү предметы булараҡ сығыш яһай.

Башланғыс класс уҡыусыларының телмәр компетентлығын үҫтереү юлдарын билдәләгәндә һөйләү һәм яҙма телмәрен үҫтереүҙең урынын, ролен, фәнни нигеҙҙәрен өйрәнеүҙе, һөйләү һәм яҙма телмәр үҫтереү системаһын билдәләүҙе, үҙенсәлектәрен асыҡлауҙы күҙ уңында тотоу мөһим. Һайланған теманың актуаллеге ошо проблемаларҙы күтәреп сығыу һәм күпмелер кимәлдә хәл итергә ынтылыш яһауҙан ғибәрәт.

Телмәрҙең үҙенсәлектәре, төрҙәре, телмәргә өйрәтеү, уҡыусыларҙың бәйләнешле телмәрен үҫтереү мәсьәләләренә арналған хеҙмәттәр байтаҡ. Был өлкәлә айырыуса билдәле ғалимдар А.А. Акишина, В.В. Богданов, Е.М. Верещагин, Т.Г. Винокур, Л.С. Выготский, В.Г. Гак, Г.Г. Городилова, И.А. Зимняя, Д.И. Изаренков, В.И. Карасик, Ю.Н. Караулов, М.В. Китайгородская, В.Г. Костомаров, Л.П. Крысин, Е.С. Кубрякова, Н.А. Матвеева, О.Д. Митрофанова, Е.И. Пассов, Ю.Е. Прохоров, К.Ф. Седов, О.Б. Сиротинина, И.А. Стернин, С.А. Сухих, Д.Н. Узнадзе, Н.И. Формановская, Ф.Ф. Харисов, Е.Н. Ширяев, Т.В. Шмелева һ.б. күп көс һалған.

Башҡорт мәктәптәрендә рус телендә өйрәтеүҙә күренекле методист-ғалимдарыбыҙ Л.Г. Саяхова, К.К. Закирйәнов, Р.В. Әлмөхәмәтов, З.Г. Сәхипова, Ф.Ф. Аҙнабаева, Р.Г. Ишимова һ.б. хеҙмәттәре ҙур ярҙамсы булып тора.

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеү проблемалары ғалимдар һәм методистар Ф.Ғ. Хисамитдинова, Х.А. Толомбаев, Р.Ә. Абуталипова, З.М. Ғәбитова, М.С. Дәүләтшина, С.А. Таһирова һ.б. тикшеренеүҙәрендә ентекле яҡтыртылған.

Башланғыс кластарҙа телмәр үҫтереүгә иғтибар күберәк тел дәрестәрендә бирелә. Уҡыу дәрестәрендә лә балаларҙың телмәрен үҫтереүҙә бик күп төрлө эштәр башҡарырға мөмкин.

Яҙма телмәрҙең ике (төп һәм ярҙамсы) төрө була. Икеһе лә уҡыу дәрестәренең теләһә ҡайһы этабында йәки махсус телмәр үҫтереү дәрестәрендә ҡулланыла.

Яҙма телмәрҙең ярҙамсы эш төрҙәре һүҙлекте байытыуға һәм уҡыусыларҙың грамоталылығын күтәреүгә, ижади фекерләүҙе үҫтереүгә хеҙмәт итә. Бер төркөм ярҙамсы эш төрҙәре уҡыусыларҙың яҙыу мәҙәниәтен үҫтереү менән бәйләнгән. Уларға хәтерҙән яҙыу, билдәле бер маҡсат менән текстан өҙөктәр яҙып алыу һ.б. эш төрҙәре инә.

Бәләкәй генә тексты хәтерҙән яҙыу уны иҫтә ҡалдырыу, һөйләм ҡалыптарын хәтергә һеңдереү яғынан яҡшы. Бының өсөн программала яттан һөйләү өсөн күрһәтелгән текстар һайлана, шиғырҙар ҙа тәҡдим итергә мөмкин.

Телмәр үҫтереүҙең төп төрҙәренең береһе – изложение яҙыу. Ул уҡыусыны тыңларға, иҫтә ҡалдырырға һәм ҡабатлап яҙырға, фекерен эҙмә-эҙлекле, логик бәйләнештә еткерергә, хәтерен үҫтерергә ярҙам итә, һүҙ байлығын төрлө маҡсатта файҙаланырға, хикәйәләү, һүрәтләү, баһалау оҫталығын өйрәтә.

Изложение яҙырға әҙерлек эше 1-се кластан уҡ башлана. Таҡтаға яҙылған йәки китаптағы тексты уҡып һөйләү, үҙ аллы уҡыу, әҫәрҙәрҙе өлөштәргә бүлеп, план төҙөргә өйрәнеү кеүек күнегеүҙәр эшләнә.

Изложениелар бер нисә төргә бүленәләр. Шуларҙың береһе булған ижади изложениеларға бер аҙ асыҡлыҡ индерәйек.

Ижади изложениеларҙа йөкмәткене биреү менән бергә уны дауам итеп яҙып бөтөрөү, йәки тексҡа ҡарата мөнәсәбәт белдереү һорала. Мәҫәлән, А.Ғирфановтың «Ҡайын» хикәйәһен изложение итеп яҙғас, уҡыусылар хикәйәлә барған ваҡиғаның нисек тамамланыуын нисек теләһәләр – шулай яҙып бөтөрәләр.

Уҡыу дәрестәрендә башланғыс кластарҙа иң ҡатмарлы етди һынау, ауыр эш төрө – инша яҙыу. Был яҙмала уҡыусының аңлау дәрәжәһе, донъяға ҡарашы, тормошто аңлатыуы, рухи донъяһы сағыла. Инша яҙыу уның дәресте ни дәрәжәлә үҙләштергәнен дә, әҫәрҙе анализлай белеү-белмәүен, китап яратыу-яратмауын да күрһәтә.

Инша яҙыу башланғыс мәктәптең 1-се класынан уҡ башлана. Шуға күрә уҡытыусы үҙе уҡытҡан класта үткәреләсәк иншалар тематикаһын, уларҙы үткәреү алымдарын уҡыу йылы башында уҡ билдәләп ҡуйырға тейеш. Ҡайһы класта уҡытыуға ҡарамаҫтан, махсус рәүештә һүҙлек, фразалар, план төҙөү өҫтөндә эшләү инша төҙөргә өйрәтеүҙең нигеҙе булып тора.

Уҡыусыларҙың телмәр компетентлығын формалаштырыуҙа картиналарҙың роле лә ғәйәт ҙур. Был осраҡта уҡытыусы шуны иҫтә тоторға тейеш: картина йөкмәткеһе менән һәм ҡатмарлығы яғынан балаларҙың йәш үҙенсәлектәренә ярашлы, ҡыҙыҡлы булһын. Башланғыс кластарҙа ҡулланылған картиналарҙың сюжеты һәм композицияһы ябай булырға тейеш.

Шулай итеп, башланғыс класс уҡыусыларының телмәр компетенлығын формалаштырыу юлдары байтаҡ, тик уҡытыусы балаларҙың йәш үҙенсәлектәренә, телде белеү кимәленә, ҡыҙыҡһыныуҙарына ярашлыларын һайлап ҡулланғанда ғына маҡсатҡа ирешергә мөмкин.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Аслаев Т.Х. Башланғыс мәктәптә туған тел дәрестәрендә балаларҙың һөйләү телмәрен үҫтереү. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1977. –16-17-се бит.
2. Ахунйәнова А. Бәйләнешле һөйләм телен үҫтереү // Башҡортостан уҡытыусыһы. – 2000 – № 12. – 54-56-сы бит.
3. Искужина Ф. Бәйләнешле телмәр төҙөргә өйрәтеүҙең ҡайһы бер алымдары // Башҡортостан уҡытыусыһы. – 1999 – № 10. – 46-49-сы бит.
4. Сальникова Т.П. Методика обучения грамоте. – М., 1996. – 47-48-се бит.
5. Дәүләтшина М.С. Башҡорт телен уҡытыу методикаһы: башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған мәктәптәр өсөн. 1-се киҫәк. – Өфө: Китап, 2010. – 120 бит.


© Фәхретдинова К.И., Дәүләтҡолова Г.Ш., 2023

**УДК 811.161.1**

*Хамматова Г.И.,*
*учитель русского языка и литературы*
*МАОУ СОШ №3 ЗАТО, г. Межгорье*

## ЦИФРОВИЗАЦИЯ В СИСТЕМЕ ФИЛОЛОГИЧЕСКОГО ОБРАЗОВАНИЯ

**Аннотация.** Статья о читательской грамотности на уроках русского языка и литературы, использовании цифровых образовательных ресурсов, сервисов в процессе формирования и оценки читательской грамотности обучающихся.

**Annotation.** The article is about reader literacy in Russian language and literature lessons, the use of digital educational resources, services in the process of forming and evaluating students' reader literacy.

**Ключевые слова:** читательская грамотность, русский язык, цифровые образовательные ресурсы.

**Key words:** reader literacy, Russian language, digital educational resources.

О читательской функциональной грамотности мы уже давно наслышаны и формируем ее на каждом уроке, работая с текстом, а также на уроках смыслового чтения. И если в будущем наш выпускник сможет разобраться в инструкции или правильно понять условия заключаемого договора, значит, в школе была сформирована функциональная читательская грамотность!

А вот если тот же выпускник сможет составить инструкцию, правильно и грамотно ее сформулировав, или успешно пройти собеседование при устройстве на работу, правильно и без ошибок оформив заявление, следовательно, у него была сформирована языковая функциональная грамотность.

Так что же такое языковая функциональная грамотность и как она формируется в школе?

Языковая функциональная грамотность – это **владение** нормативным, эстетическим и этическим аспектами культуры речи.

Уместно будет вспомнить, что Культура речи, языковая культура – распространённое в советской и российской лингвистике понятие, объединяющее **владение** языковой нормой устного и письменного языка, а также «умение использовать выразительные языковые средства в разных условиях общения».

Сформированность языковой функциональной грамотности проявляется в:

– умении пользоваться фактами языка для реализации целей общения;

– соблюдении норм современного русского языка (орфоэпических, морфологических, словообразовательных, лексических, синтаксических и стилистических);

– соблюдении этикетных норм, правил речевого поведения, характерных для <u>конкретных</u> социальных условий, регулирующих употребление тех или иных речевых единиц;

– умении с помощью языковых средств грамотно выражать собственные мысли, решать конфликты с помощью слова;

– умении работать с лингвистической информацией, применять полученные знания в жизни.

Если мы проанализируем все вышеперечисленное, то придем к выводу, что эти умения и навыки перекликаются с УУД, которые являются требованиями ФГОС.

Таким образом, если мы будем работать в соответствии с Приказом Министерства Образования науки и культуры РФ №413 об утверждении Федерального Государственного образовательго стандарта среднего общего образования, мы и будем формировать языковую функциональную грамотность. Не изобретая ничего нового, лишь используя инновационные

образовательные технологии, мы формируем функциональную грамотность, в том числе языковую.

Добиться вышеперечисленных результатов поможет учителю использование современных инновационных технологий, которые позволят обучающимся саморазвиваться, самосовершенствоваться, самореализоваться путём осмысленного и деятельного усвоения нового социального опыта.

Обращение к информационно-коммуникационным технологиям существенно расширяет состав и возможности ряда компонентов образовательной среды. К числу источников учебной информации в этих условиях можно отнести базы данных и информационно-справочные системы, электронные учебники и энциклопедии, цифровые образовательные ресурсы Интернета и т.д. Как инструменты учебной деятельности можно рассматривать компьютерные тренажеры, контролирующие программы.

Использование электронных образовательных ресурсов имеет ряд особенностей:

1) повышение мотивации учащихся к обучению и самостоятельной учебной активности, благодаря увеличению разнообразия материала и усилению его интерактивности и наглядности;

2) повышение ритмичности уроков, благодаря возможности управления темпом обучения на основе интерактивной мультимедийной составляющей обучения;

3) возможность включения в учебную работу исследовательской составляющей на основе метода проб и ошибок: ученик не боится делать ошибки, так как на компьютере он имеет возможность вернуться назад, отменить ошибочный шаг и выполнить его заново правильно, достигнув тем самым педагогической цели – достичь в учебной ситуации правильного решения;

4) реализацию объективности в оценивании учебных достижений на уроке средствами компьютерных диагностических заданий, что снимает у детей психологическое напряжение, помогает сформировать у учащегося чувство критической самооценки выполненной работы;

5) обеспечивается возможность самостоятельной работы учащихся при выполнении домашних заданий и подготовки к урокам.

Сегодня в традиционную схему *«учитель – ученик – учебник»* вводится новое звено – компьютер, а в школьное сознание – компьютерное обучение.

| *Зачем нужно применение ЦОР учителю?* | *Что даёт ЦОР ученику?* |
| --- | --- |
| экономия времени на уроке | содействует росту успеваемости учащихся по предмету |
| глубина погружения в материал | позволяет учащимся проявить себя в новой роли |

| | |
|---|---|
| повышенная мотивация обучения | формирует навыки самостоятельной продуктивной деятельности |
| возможность одновременного использования аудио-, видео-, мультимедиа-материалов | способствует созданию ситуации успеха для каждого ученика |
| привлечение разных видов деятельности: мыслить, спорить, рассуждать | делает занятия интересными и развивает мотивацию, учащиеся работают творчески, становятся увереннее в себе в роли ученика |

**Сетевые инструменты:**

1) https://www.zipgrade.com/

ZipGrade – ресурс, который помогает создавать тесты и проверять их. В целом работа с сайтом бесплатная, но есть ограничения. В бесплатной версии можно проверить только 100 работ в месяц. Нужно ввести название теста, количество вопросов, дату создания и необходимые хештеги. Потом переходим в профиль создания ответов. Отмечаем все правильные ответы и сохраняем тест. Во всех бланках наверху идет графа с именем и дата. Ученик заполняет поля сам или вы можете предварительно распечатать бланки уже с именами, чтобы системе было легче определить данные во время сканирования. Дальше скачиваем необходимый вариант, распечатываем для каждого учащегося и раздаем для заполнения. После завершения теста необходимо отсканировать все листочки класса.

Преимуществами данного сайта является: автоматическая проверка тестов; автоматически высчитывается средний балл работы; показывается статистика работы всего класса по каждому вопросу.

https://quizlet.com/ru

Это бесплатный сервис, который позволяет легко запоминать любую информацию, которую можно представить в виде учебных карточек. Все что требуется – это найти в базе или создать интерактивный материал – собственные карточки, добавляя к ним картинки и аудиофайлы и затем выполнять упражнения и играть в игры, чтобы запомнить данный материал. В Quizlet можно отправлять ученикам ссылку на модуль/курс.

https://classtools.ru/index.html

Первый отечественный сайт-конструктор универсальных дидактических игр classtools.ru начал работу в сентябре 2013 года и постоянно развивается. Типов игр 5: «сортировка по категориям», «список лишнего», «продолжение ряда», «общий сбор» и «поиск пары». С их помощью предполагается многоаспектное освоение материала, а также развитие общих компетенций учащихся в соответствии с ФГОС. На данной платформе можно найти материал по всем предметам.

4) https://learningapps.org/

Данный сервиз – это своего рода конструктор для создания интерактивных учебных моделей по разным предметным дисциплинам для применения на уроках и во внеклассной работе. Онлайн-сервиз помогает создавать собственные упражнения, задания, приложения, сохранять их в различных формах, использовать готовые модули из библиотеки, свободно обмениваться информацией между пользователями, создавать классы, организовывать работу учащихся.

5) https://coggle.it/

Составление интеллект-карт – один из эффективных приемов работы по представлению информации в нелинейном виде. Это метод графического выражения процессов восприятия, обработки и запоминания информации, творческих задач, инструмент развития памяти и мышления. Строится на основе ассоциаций. Составлять интеллект-карты могут как учителя, так и ученики. Можно использовать на всех уроках.

У хорошей интеллект-карты три основные составляющие:

- центральный образ, передающий тему литературного произведения;

- толстые основные ветви, отходящие от центрального изображения. Эти ветви представляют ключевые темы, относящиеся к предмету изучения. Каждая из ветвей должна иметь свой цвет. В свою очередь, основные ветви делятся на более мелкие второго и третьего уровня, которые представляют подтемы;

- единственное ключевое слово или изображение на каждой ветви.

Данный сайт напоминает другой прием «облако слов».

Киләсәктә беҙ, уҡытыусылар, уҡыусыларҙың үҙ аллы уҡыу эшсәнлеген әүҙемләштерергә йүнәлтелгән мәғлүмәти технологиялар нигеҙендә яңы быуын уҡытыу материалдарын эшләргә бурыслыбыҙ. Ә дәрестәрҙә информацион технологияларҙы ҡуллана белеүсе яңы тип педагогтарҙы әҙерләү йәмғиәттең төп йүнәлештәренең береһе булыр тигән уйҙабыҙ.

Шулай итеп, бөгөн уҡытыусынан бик күп нәмә талап ителә: үҙ фәнеңде бик яҡшы белеү, балаларҙы яратыуҙан тыш, уларҙың фекерләү һәләтен үҫтереү, уҡыу-танып белеү эшмәкәрлеген ойоштороу, рухи һәм физик үҫешен тәьмин

итеү. Ә бының өсөн мөғәллимдән үҙ шәхесенә тәнҡит күҙлегенән ҡарау, яңылыҡҡа ынтылыу, заман һулышын тойоп, белемде өҙлөкһөҙ камиллаштырыу, уҡытыу-тәрбиә процесына ижади яҡын килеп эшләү һорала.

## ӘҘӘБИӘТ

1. Баһауетдинова М.И., Йәғәфәрова Г.Н. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән традицион булмаған дәрестәр: Методик ҡулланма.

2. Баһауетдинова М.И., Йәғәфәрова Г.Н. Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен заманса уҡытыу: уҡытыусылар өсөн ҡулланма. – Өфө: Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте, 2009. Өфө: Информреклама, 2013.

3. Ғималова М. Ғ. Урта мәктәптәрҙең IV – VII кластарында башҡорт әҙәбиәте уҡытыу методикаһы. – Өфө, 1982.

©Шайгарданова А.И., 2023

**УДК 811.512.141**

*Шайхисламова З.Ф., ф. ф. к., доц.*
*Башҡортостан Республикаһының*
*Мәғарифты үҫтереү институты*
*Мырҙағәлина Л.Ә., аспирант*
*М. Аҡмулла ис.БДПУ, Өфө к.*

# МӘҠӘЛДӘРҘӘ ОНОМАСТИК КОМПОНЕНТ БИРЕЛЕШЕ (БАШҠОРТ ХАЛЫҠ МӘҠӘЛДӘРЕ МАТЕРИАЛЫНДА)

**Аннотация.** В статье сделана попытка анализировать пословицы с ономастическим компонентом. Актуальность такого характера исследований связана и проблемой патриотического воспитания на уроках родного (башкирского) языка.

**Annotation.** The article attempts to analyze proverbs with an onomastic component. The relevance of this nature of research is also connected with the problem of patriotic education in the lessons of the native (Bashkir) language.

**Ключевые слова.** Пословицы, башкирский язык, ономастика, гидронимы, оронимы, патриотизм.

**Key words:** Proverbs, Bashkir language, onomastics, hydronyms, oronyms, patriotism.

Билдәле булыуынса, мәҡәлдәр һәм әйтемдәр шул телдә һөйләшеүсе халыҡтың бай фекерләү ҡеүәтен, һәләтен, улай ғына ла түгел, бай хыялын һәм шул халыҡтың боронғо мәҙәниәтен, телмәренең аҫыл биҙәген сағылдыра. Мәҡәлдәрҙә милләттең юғары рухи ихтыяждары тупланған. Мәҡәлдәрҙе төрлө яҡлап өйрәнеү һәр ваҡыт актуаль мәсьәләрҙең береһен тәшкил итеүе бәхәсһеҙ. Ошонан сығып, беҙҙең мәҡәләнең маҡсаты ла асыҡланды. Компоненты ономастикаға бәйле, ер-һыу атамаһынан булған мәҡәлдәрҙең үҙенсәлеген

барлау, мәғәнәләрен асыҡларға ынтылыш яһау. Әлбиттә, был бер мәҡәләгә һыйышлы бурыс, маҡсат түгел.

Мәҡәлдәр, барлыҡҡа килгән осорҙан алып, дидактик функция үтәй. Улар тормош-көнкүреш барышында халыҡтың күҙәтеү, һынауҙары аша тыуған ижад төрөнә ҡарай. И.М. Снегирев әйтеүенсә, мәҡәлдәр, әйтемдәр йөкмәткеһе яғынан бер халыҡтыҡы икенсе халыҡтыҡына оҡшаш, тик ул бер-береһенән күсереү түгел, ә тотош кешелек донъяһының уй-тойғоһона бер үк төрлө фекер һеңешкән булыуҙан килә [1, 7]. Мәҫәлән, рус телендәге "*В тихом омуте черти водятся*" мәғәнәһе башҡорт телендәге "*Тымыҡ күлдә ҡорт мыҙғый*" мәҡәленә тап килә. Әммә лексик берәмектәр айырыла. Был тәбиғи күренеш, сөнки һәр халыҡ үҙен уратып алған мөхитте үҙенсә ҡабул итеп, үҙенсә атай.

Мәҡәл һәм әйтемдәр араһында ер-һыу менән бәйле булғандары байтаҡ. Ғалимдар билдәләүенсә, мәҡәлдәрҙә кешелек йәмғиәтенең ижтимағи функцияһы асыҡ сағыла. Улар өгөт-нәсихәткә өйрәтеү, тормоштағы ябай ғына, ғәҙәти нормаларҙы һаҡлауға өндәү сараһын үтәгәндәр, бөгөнгө көндә лә ошо функцияларын юғалтмағандар. Ж.Ғ. Кейекбаев фекеренсә, «һәр бер халыҡтың (һәр телдең) мәҡәлдәрендә уның практик педагогикаһы тупланған» [2, 218].

Мәҡәлдәрҙә тәрән мәғәнә тупланған, улар бик боронғо замандарҙа алып кешеләрҙе тормошта әхләҡ нормаларына өйрәтеү өсөн ҡулланылған.

1. *Һыу*ға мөнәсәбәте булған, йәғни *гидроним* компонентлы мәҡәлдәргә иғтибар итәйек. Бындай төрҙәге мәҡәл-әйтемдәр, тормош тәжрибәһенән сығып, ер-һыуға ихтирам тәрбиәләү менән берлектә тәртип, әхлаҡ ҡағиҙәләрен һаҡлауға йүнәлтелгән. Мәҫәлән, 1) *Һыуын* эсер ҡойоға төкөрмәйҙәр. 2) Ташһыҙ *йылға* булмаҫ, баш алмаҫ *инеш* булмаҫ (башланған урыны). *3) Иҙел һыуы* бал булмаҫ, булһа илгә етмәҫ. 4) Үләһе мал *коҙоҡ* тирәһендә урала. *5) Иҙел* кисмәй ир булмаҫ. *6) Иҙел* менән боҙға таянма. *7) Ағиҙел* ҡаты аҡһа ла, ҡомо ҡалыр, хәсрәт үҙе баҫылһа ла, моңо ҡалыр. 8) Иҫеңә төшһә, *Иҙел* кисерһең. 9) *Күл* – ҡортһоҙ, ер үләнһеҙ булмай. 10) Иҙел кисмәй ил булмаҫ, ҡурҡаҡ егет ир булмаҫ. 11) Ир булһын да *Иҙел* кисмәһен (*Иҙел* кисмәҫ ир булмаҫ). 12) Илеңә таянһан *Иҙел* кисерһең, йәки Илгә таянған *Иҙел* кисер, һ.б.

Күреүебеҙсә, компоненты гидроним булһа ла, мәҡәл, әйтемдәрҙә кешенең эске донъяһы ла, кисерештәре лә сағылыш алған. Иҙел, Ағиҙел кеүек атамалар уларҙың географик адресы ролен үтәй.

2. *Тау*, йәғни *ороним* компонентлы мәҡәлдәргә күҙ һалайыҡ. Уларҙа ла тормош тәжрибәһе, тыуған ил, тыуған ергә һөйөү, кешенең эске кисерештәре тупланғанын күрәбеҙ. Мәҫәлән: 1) *Тау* билгеһе *таш* булыр. 2) *Тау* менмәгән *тауҙы* белмәҫ, *тау янында тау* күрмәҫ. 3) Тау ҡаяһыҙ булмаҫ. 4) *Таулы ерҙә* бүре булыр. 5) Ышанған *тауҙа* кейек юҡ. 6) *Тау артында* алтын бар, барһаң баҡыры ла юҡ һ.б.

Башҡортостан территорияһын географик яҡтан бик бай: йылға, күлдәр, тау, ҡалҡыулыҡтар, йырындар, урмандар, яландар.

3. Компоненты *урман (дримоним)* булған мәҡәлдәр шулай уҡ башҡорт халҡының дидактикаһы, фәлсәфәһе, тормош үҙенсәләегенә бәйле барлыҡҡа

килеүҙәре тураһында һөйләй: 1) *Урман* – иҫке тун. 2) *Ялан* – күҙ, *урман* – ҡолаҡ. 3) Бүренән ҡурҡҡан *урманға* бармаҫ һ.б.

4. Ономастиканың астронимика һәм космонимика бүлеге күк есемдәре, йыһан, галактика, һауа менән бәйле. Астронимик компонентлы мәҡәл, әйтемдәрҙә улар айырым урын биләй: *Күк*кә ҡара ла, *ер*ҙе уйла.

5. Йәки шундай мәҡәлдәр ҙә йыш осрай, йәғни, ер-һыуын һаҡлар кеше башта үҙен шул ил, еренә торошло итеп тәрбиәләргә тейеш:

1) Хикмәтле *ер* – михнәтле *ер*.

2) Батыр «*илем* » тип утҡа инер.

3) Батыр тыуһа – *ил* бәхете.

4) Батыр уртаҡ, *тыуған-үҫкән ил* уртаҡ.

5)Батыр – *илдең* ҡаҙығы.

6) *Ил* көйөнгәндә, көйөн, *ил* һөйөнгәндә, һөйөн.

7) *Үҙ ерең* – алтын бишек, йәки *Ил өҫтө* алтын бишек.

8) *Ер* ҡәҙерен белмәгән *үҙ еренә* ерекмәҫ.

9) *Ер туны – урман, тау, ил ҡулы* – ир-егет һ.б.

Башҡорт мәҡәл-әйтемдәрен ономастик компонентҡа бәйләп өйрәнеү халыҡтың элек-электән еренә ихтирамлы, иғтибарлы булғанлығы, үҙенең күҙәтеүҙәре аша ерҙе хәстәрләү, уны һаҡлау тик кешенең үҙенә бәйле булыуын өгөт-нәсихәттәр аша түгел, ә тормош тәжрибәһенә таянып килер быуынға тапшыра килгән. Ер-һыуыңды һаҡлау, ул уның урманын, үҫемлеген, йәнлектәрен, тау-ҡаяларын һаҡлау икәнен төшөндөрөргә тырышҡанлығы асыҡ сағыла. Мәҡәлдәрҙең күбеһен айырым төркөмсәгә генә ҡаратып булмай, сөнки уларҙағы бай мәғәнә урманға ла, тауға ла, тыуған ергә лә бәйле булыуы ихтимал. Мәҫәлән: *Ил* ҡупһа, *Иҙел* ҡубыр, *Иҙел менән Яйыҡ* ҡубыр.

*Ер* ҡәҙерен белмәҫ, ризыҡ тәмен тоймаҫ, йәки *Ер* ҡәҙерләмәгән – ашын юғалтҡан. *Ил* яҙмышы - ир яҙмышы. *Иленә* һыймаҫ – *Иҙелгә* батҡан *таш*.

Батыр көнө *ил* менән, ирҙең көнө *ер* менән.

*Ил* аралаған һынсыл, *ер* аралаған уҡсыл (уҡсы, яусыл).

*Яйыҡтың* ағаһы – *Иҙел*, *илдең* яғаһы – *Ағиҙел.*

Һәр *йылға үҙ төбәген* һаҡлар, ул йылғаны ир һаҡлар.

*Ере барҙы ер* тартыр, *ер* тартмаһа, ил тартыр.

*Ере* байҙың *иле* бай.

*Илгә* һыйыныр булһан, *ереңә* һыйын.

Илен бөлдөргән иленән бүлтерәк тә алалмаҫ ( бүлтерәк – йәйге бәрәс).

Көмөрө бейгә ҡол булам тиһәң, *илеңде* бөлдөр.

Бөлгән *илгә* һәр бөкөрө бей булыр.

Ҡолас *ерҙе ер* тимә, тибен аунар *ер* булһын (һүҙ ат көтөүе буйлаған иркен ер тураһында бара). *Ситтә* йөрөһәң – ситләшерһең.

*Сит илде* матур күрерһең, *үҙ илеңдең* кесеркәнендә ятып йоҡларға күнерһең. *Илде* онотмаһаң, и*лһеҙ* булмаҫһың.

Шулай итеп, мәҡәлдәрҙе ономастик компонентҡа бәйләп өйрәнеү, тикшереү – тел дәрестәрендә уҡыусыларҙың тормошто күҙәтеүен, һығымта

яһау ҡеүәһен арттырыуҙа уңышлы алымдарҙың береһе лә. Бөгөнгө көндө актуаль булған патриотик, йәғни илһөйәрлек тәрбиәләүҙә лә төп урында мәҡәлдәр тиһәк, яңылыш булмаç, беҙҙеңсә. Сөнки мәҡәлдәр, ғөмүмән, ниндәй ҙә булһа тәрбиәгә бәйле маҡсатты алға ҡуя. Мәҡәлдәрҙең телмәр оçталағына өйрәтеүҙә лә роле бик ҙур. Мәҡәлдәрҙе телмәрҙә урынлы ҡулланыу уны ылыҡтырғыс һәм зауыҡлы, хәтерҙә ҡалырлыҡ итә, йәғни мәҡәлдәрҙең уңышлы ҡулланылыуы телмәрҙе байыта, уға йөкмәткелелек өçтәй.

Мәҡәлдәрҙе топонимик система, ономастикаға бәйләп өйрәнеү –ҡыҙыҡлы тармаҡ. Был йүнәлештә эш башланған тиергә мөмкин. Мәçәлән, З.Ф.Шайхисламованың мәҡәләләре донъя күргән: [5, 282-287], [6, 28-39]. Башҡорт халыҡ ижадының ҙур бер тармағын тәшкил иткән мәҡәл, әйтем, һынамыштар – ул боронғонан алып бөгөнгө көнгә тиклем халыҡ аҡылының хазинаһы, һәм ул шулай артабан да йыйылып килер быуынға аманат итеп тапшырылыр. Сөнки улар донъяуи күренештәрҙе һүҙ аша асып биреүсе фактик материал хеҙмәтен дә үтәй.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Башҡорт халыҡ ижады. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1980. – 472 бит.
2. Кейекбаев Ж.Ғ. Ғилми хеҙмәттәр һәм һайланма әçәрҙәр йыйынтығы. II том. – Өфө, 2014.
3. Хәҙерге башҡорт теленең лекесикаһы һәм фразеологияһы / Жәлил Кейекбаев. – Өфө: – 260 бит.
4. Снегирёв И. М. Русские народные пословицы и притчи / Отв. ред. О. А. Платонов. – М.: Институт русской цивилизации, 2014. – 528 с.
5. Шайхисламова З.Ф. Некоторые когнитивные аспекты этнолингвистической интерпретации паремиологии тюркских языков (на материале башкирских пословиц и поговорок) // В сборнике: Гуманистическое наследие просветителей в культуре и образовании. материалы IX Международной научно-практической конференции. 2014. – С. 282-287
6. Шайхисламова З.Ф. Некоторые когнитивные аспекты этнолингвистической интерпретации паремиологии тюркских языков (на материале башкирских и казахских пословиц и поговорок) // В сборнике: Вопросы гуманитарных исследований. сборник научных статей. Министерство Образования и науки Республики Казахстан; Актюбинский региональный государственный университет им. К. Жубанова, Институт гуманитарных исследований. Актюбинск, 2015. – С. 28-39.


© Шайхисламова З.Ф., Мырҙағәлина Л.Ә., 2023

УДК 821

*Шараева Г.М.,*
*башкорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы*
*4-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе*
*Туймазы к.*

# УҠЫТЫУСЫМ ТУРАҺЫНДА ҺҮҘ

**Аннотация.** История из жизни о роли учителя в жизни ученика.
**Annotation.** A life story about the role of a teacher in the life of a student.
**Ключевые слова:** учитель, ученик.
**Keywords:** teacher, student.

Мин уҡытыусы, мин тел уҡытыусыһы. Уҡытыусы хеҙмәте ауыр ҙа, яуаплы ла, ҡыҙыҡлы ла. Уҡытыусы һөнәрен һайлау – тынғыһыҙлыҡ, эҙләнеү юлын һайлау, үҙ-үҙеңә һәм башҡаларға иҫ киткес талапсан булыу, көндәлек тырыш, эҙлекле хеҙмәт юлын һайлау тигән һүҙ ул.

Был һөнәр миңә бәләкәйҙән таныш, сөнки атайым да, әсәйем дә – уҡытыусылар. Был эштең көнө лә, төнө лә, ялы ла юҡ икәнен яҡшы беләм. Мәктәп эше, дәрестәр, тәрбиәүи саралар үткәреүҙән тыш, ауыл ерендә ул ваҡыттарҙа уҡытыусы агитатор ҙа, политинформатор ҙа, үҙешмәкәр артист та, колхозсылар араһындағы ярыш һөҙөмтәләре буйынса «Молния»лар сығарыусы ла. Атайым тел, ә әсәйем башланғыс кластар уҡытыусыһы. Бәләкәй саҡта уларға эйәреп (өйҙә ҡалдырырға кеше булмағандыр инде) дәрестәргә, йыйылыштарға, киске уйындарға йөрөй инем. Уларға ҡарап, мин дә ошо һөнәр тураһында хыялландым. Ә атайым ни өсөндөр һәр ваҡыт ҡаршы булды: «Тапҡанһың эш, ана экономист булырға кәрәк!» – тип ҡабатланы. Шуның өсөн мин 10-сы класты тамамлағас, ул документтарымды ауыл хужалығы институтының экономия факультетына тапшырҙы ла инде. Конкурстан үтмәнем. Һөйөнә-һөйөнә документтарҙы алып ҡайттым да, ауыл мәктәбендә эш башланым. Бер йыл тиҙ үтеп китте. Икенсе йылды үҙем педагогия институтына юл алдым. Миңә география фәне оҡшай ине. Документтарҙы география факультетына бирәм, тип торғанда, бер сибәр генә мөләйем апай: “Ҡыҙҙар, беҙгә уҡырға килегеҙ. Беҙ бит башҡорттар, телде, уның тарихын өйрәнербеҙ, рухланып йәшәрбеҙ, үҙебеҙ ҙә уҡырбыҙ, ә унан башҡаларҙы ла уҡытырбыҙ. Беҙҙең бүлектә уҡырға шул ҡәҙәр ҡыҙыҡлы. Яҙыусылар менән осрашып торабыҙ, театрҙарға барабыҙ. Йәй көнө экспедицияларға ла йөрөйбеҙ, беҙҙә бик күңелле”, - тигәнде ишеткәс, аптырап ҡалдым. Икеләнеп торҙом, ә унан документтарҙы алып ултырған ҡыҙҙан: “Кем был апай?”- тип һораным. Ул бер һүҙ менән генә яуап ҡайтарҙы: “Күбәләк!” Миңә шул Күбәләктең ене ҡағылды, ахырһы. Документтарҙы башҡорт филологияһына бирҙем дә, имтихандарҙы уңышлы тапшырып, уҡырға инеп киттем.

Ысынлап та, теге апайҙың әйткән һүҙҙәре хаҡ булды. Беренсе курста уҡығанда уҡ, Мостай Кәрим менән осрашыу булды. Ул ваҡытта минең түбәм күккә тейҙе. Беренсе тапҡыр ысын яҙыусы менән осрашыуҙа ҡатнашабыҙ бит. Һорауҙар ҙа биреп, әңгәмәлә ҡатнашырға, китабы булһа, автограф та алырға мөмкин, тинеләр. Шул тиклем күңелле булды, унан тағы бер ай был осрашыуҙан һуң хисләнеп йөрөнөм әле мин. Бындай осрашыуҙар йыш була торғайны. Шағир йәки яҙыусының үҙен күреп, шиғырҙарын уҡығанда, үҙҙәре тураһында һөйләгәнде тыңлап, иҫтә ҡалдырырға тырышып, шиғырҙарын уларса уҡырға тырыша инек.

Тағы ла Рәшит Шәкүр менән осрашыу иҫтә ҡалды. Ул туған тел, уны һаҡлау, яҡлау, киләһе быуында рух тәрбиәләү тураһында һөйләне. Беҙҙең, туған тел уҡытыусыларының, ата-әсәләр, йәш быуын алдындағы бурысыбыҙҙы аңлатты. Ә осрашыуҙың аҙағын: “Ҡыҙҙар, әле кейәүгә сыҡмаған булһағыҙ, һеҙгә бер үтенесем бар – үҙебеҙҙең башҡорт егеттәрен һайлағыҙ. Үҙебеҙҙең илебеҙҙә башҡорттар күберәк булһын, ғаиләләрегеҙҙә туған телдә һөйләшегеҙ”, – тип бөтөрөп ҡуйҙы. Ул ваҡытта йәш булғанмын. Был һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлап бөтмәгәнмен, ваҡыт үтеүе кәрәк булған.

Һуңғараҡ Күбәләк менән яҡындан таныштым. Күбәләк ырыу атамаһы булып сыҡты. Шуға күрә Хисаметдинова Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙын, ошо ырыу вәкилен, Күбәләк тип йөрөткәндәр. Минең күңелемә ул уттай янып торған, бер баҫаһын биш баҫып йөрөгән, матур, ыҫпай үҙенә килешле кейеме, ҡыңғырау кеүек сыңлап торған тауышы менән инеп ҡалды. Ул һөйләгәндә ауыҙына ҡарап ултыра торғайным. Һөйләй-һөйләй ҙә, ҡапыл берәй һорау биреп, уға яуап әйтә алмаһаң: “Тыңлап ултыраһың кеүек. Яңы шул турала һөйләнем бит”,- тип шелтәләп ала торғайны. Ә уның көмөш алҡаларын һәм беләҙектәрен күрһәгеҙ! Ҡыҙҙар менән хатта бәхәсләшеп китә торғайныҡ. “Был яңы алҡаһы, бындайҙы таҡҡаны булманы”,- тип. Ысын башҡорт ҡатын-ҡыҙы образы, беҙҙең өсөн өлгө булды.

Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы үҙенең дәрестәрендә боронғо китаптар, Болғар, Орхон-Йәнәсәй яҙмалары менән таныштырҙы, диалектология курсын уҡыны. “Һин татар телендә һөйләшәм тип ултырма. Был башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты. Бына һеҙгә миҫал, Гүзәл шул диалектта һөйләшә, ” - тип аңлата ине. Ә шәжәрәләр тарихын ниндәй мауыҡтырғыс итеп һөйләй. Минең дә үҙ ғаиләбеҙҙең шәжәрәһен табып, өйрәнәһем килде. Каникулға ҡайтҡас, атайым менән шул турала һөйләшеп ултырҙыҡ. Атайым:“Олатай кулак ине, бай булғандар.Ул заманда кулактар менән ниҙәр булғанын беләһең бит. Шул ваҡыттарҙа беҙҙең шәжәрә юғалған, ҡыҙым”, -тигәс, биргән һорауыма үкенеп тә ҡуйған инем.

Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы беҙҙең өсөн уҡытыусы ғына түгел, әсәй ҙә, апай ҙа, кәңәшсе лә. Ул әрләшмәне, тик шундай итеп, күҙеңә тура ҡарап, ҡайҙа уҡығанлыҡты, был һөнәрҙең үҙенсәлектәрен ҡәтғи рәүештә тағы иҫкә төшөрөп ҡуя ине. Зачет, имтихан ваҡыттарында ҡыйынлыҡтар килеп тыуһа, студенттарына һәр саҡ ярҙам итте. Хәтеремдә, философиянан имтиханды бирә

алманым (уның үҙ сәбәптәре булды). Әллә ун тапҡыр барҙым. Барған һайын уҡытыусы Лениндың яңы эштәрен һорай ҙа ҡуя. Шунан олораҡ курс ҡыҙҙары Фирҙәүес Ғилметдиновна янына барырға кәңәш иттеләр. Тыңланы ла: “Хәл итәрлек, тик әҙерләнеп, уҡып бар”, - тип йыуатып ҡайтарып ебәрҙе. Ә икенсе көндө барғас, мин имтиханды бирҙем. Үҙ ғүмерендә күпме кешегә шулай ярҙам итеп, күпме кеше уға рәхмәтле булды икән? Бына шундай кешелекле, ярҙамсыл сифаттары Ф.Ғ.Хисаметдинованы тағы ла нығыраҡ матурлай. Минең уйлауымса, уҡытыусы шундай булырға тейеш. Яҙмыш шундай кеше менән осраштырғанға мин бәхетле. Рәхмәт һеҙгә, Фирҙәүс Ғилметдиновна!

Күп йылдарҙан һуң уҡытыусым менән осрашырға тура килде. Бер үҙгәрмәгән, әллә ҡайҙан танып, исемләп өндәшеп тора. Үткәндәрҙе иҫләп байтаҡ һөйләштек. Ул һаман да шулай уҡ мөләйем, дәртле, ҙур пландар менән янып йөрөй. Уҡытыусылар ҡартаймай, тиҙәр. Бик хаҡ һүҙҙәр.

Уҡытыусы - уҡыусыларының уңыштарына ысын күңеленән һөйөнә белгән, көслө ихтыярлы, сабыр аҡыл эйәһе бит ул. Бала күңеленә изгелек орлоҡтарын сәскәндә бөтә тормош һабаҡтарын, белемен балаларға бирә, рухи яҡтан байыта, күңел йылыһын өләшә. Туған телемә ҙур ҡыҙыҡһыныу уятып, үҫтереп, миңә уҡытыусы булырға ярҙам иткән Фирҙәүс Ғилметдин ҡыҙы тап шундай Уҡытыусы булып һаҡлана күңелемдә.

© Шараева Г.М., 2023

**УДК 821**

*Шарипова Г.Ш., студент*
*Ғилми етәксеһе: Әлибаев З.А., филол. ф. канд., доц*
*М.Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

## БӘНДӘБИКӘ МЕНӘН ЕРӘНСӘ-СӘСӘН

**Аннотация.** В данной статье говорится о башкирских народных легендах и преданиях. В качестве примера приводятся легенда «Бэндэбика и Ерэнсэ сэсэн». В легенде представлены исторические факты, а также башкирские народные обычаи.

**Annotation.** This article talks about Bashkir folk legends and legends. As an example, the legends are given under the name “Bandebika and Yerense sessen". The legend presents historical facts, as well as Bashkir folk customs.

**Ключевые слова:** жанр, легенда, народные обычаи, фольклор, народное творчество, герои.

**Key words:** genre, legends, folk customs, folklore, folk art, heroes.

Башҡорт халҡында фольклорҙың төрлө жанрҙары бик күп. Бигерәк тә уларҙың ер-һыу атамалары менән бәйләләре лә етерлек. Легенда, риүәйәттәрҙе фәнни яҡтан өйрәнеп, туплап китап итеп эшләгән ғалимдар араһында Ф.А. Нәҙершина, Кирәй Мәргән һәм башҡа фольклорсылар бар. Минең үҙем тыуып

үҫкән төбәктә йәшәгән «Бәндәбикә менән Ерәнсә-сәсән» легендаһы тураһында һөйләп киткем килә. Башҡортостандың төрлө райондарында үҙҙәренең билдәле легендалары бар. Был мәҡәләлә Күгәрсен районының «Бәндәбикә менән Ерәнсә-сәсән» легендаһы тураһында һүҙ барасаҡ. Легенданы 1911 йылда Мөхәмәтша Боранғолов яҙып алған. Элеке ваҡыттарҙан уҡ ул көньяҡ райондарҙа телдән телгә күсенеп йөрөгән. Шуға күрә яҙыусы Тәлғәт Ишемғолов Күгәрсен районындағы легендаларҙы йыйып ала һәм «Бәндәбикә» тип аталған повесть сығара. [ 1,2,3 ]

Бәндәбикә менән Ерәнсә-сәсән урта быуаттарҙа хәҙерге Башҡортостандың көньяғында йәшәгән. Ул ваҡыттарҙа башҡорт халҡы менән ҡаҙаҡтар араһында яуҙар булған. Бәндәбикә бик аҡыллы һәм көслө ҡатын, шуға күрә ул ҡаҙаҡ халҡы менән һөйләшеүҙәр үткәргән һәм шул ваҡыттан уҡ был ике халыҡтар дуҫ йәшәй башлаған.

Бәндәбикә күрәҙәсе булараҡ, уға һәр саҡ кәңәш артынан бик күп кешеләр йыйылған. Ул Ерәнсә-сәсәнгә ҡарағанда күпкә олораҡ һәм аҡыллыраҡ булған, сөнки Ерәнсә уның вафат иренең ҡустыһы булған һәм Бәндәбикә уға кейәүгә сыҡҡан. Ваҡыт үтеү менән Ерәнсәлә дан ҡаҙаныу теләге тыуа, һәм ул ҡаҙаҡ халҡына ҡаршы барырға йыйына башлай. Әммә Бандәбикә уның яуҙа үлеп ҡалыуын алдан уҡ күреп, был хәлгә ҡаршы тормаҡсы була. Ерәнсә, ҡатынын тыңлап та тормайса, яуға сығып китә. Яуҙа ул еңелеп ҡала. Ҡаҙаҡ яугиры уны үлтереү өсөн ҡоралын күтәргәс, Ерәнсә ҡапыл көлә башлай. Ҡаҙаҡтар уның көлкөһөнөң сәбәбен һорағас, Ерәнсә уларға: «Ҡатыным Бәндәбикәнең алдан ниндәй хәл булыр икәнен күргәне тормошҡа ашты». Ҡаҙаҡтар уны әүлиәнең ире икәнен аңлап, кире өйөнә ҡайтаралар.

Өйөнә ҡайтышлай, сәсән Бәндәбикәнең үлгәнен белеп ҡала ла үҙе бейек ҡаянан ырғып вафат булып ҡала. Бөгөнгө көндөрҙә, был ҡаяны Үрген ауылында йәшәүселәр «Кәмшәткә тауы» тип йөрөтәләр, ошо тау аҫтында Ерәнсә-сәсәндең ҡурғаны урынлашҡан.

Ә Бәндәбикә васыяты буйынса үҙ өйөндә ҡәберләнгән. Өйҙөң башын таш һәм ер менән күмеп ҡалдырғандар. Һуңғараҡ был урында кәшәнә төҙөп ҡуйғандар. Шул ваҡыттан алып был урынды «Бәндәбикә кәшәнәһе» тип йөрөтә башланылар. 2007 йылда был урында яңы кәшәнә төҙөйҙәр. Урындағы халыҡ Бәндәбикә ҡалдыҡтарын урынына кире ҡайтарыуын һәм иҫке кәшәнәне реставрациялауға өмөтләнеп йәшәйҙәр.

Был легенданың мәғәнәһе шунан ғибәрәт, кеше дан тураһында түгел, ә үҙ халҡының именлеге тураһында уйларға тейеш.

Бәндәбикә көслө һәм тәүәккәл кеше булған, кеше яҙмышына йоғонто яһарға һәләтле, шулай уҡ ҡыпсаҡ ырыуы менән идара итеүсе кеше булған. Был сифаттары өсөн уны башҡорттар ғына түгел, хатта ҡаҙаҡтар ҙа хөрмәт иткән. Улар күп осраҡта уны «Ил инәһе» тип йөрөткәндәр. Ул һуғышты туҡтатыусы ғына түгел, шулай уҡ күршеләре араһында оҙаҡ тыныслыҡ урынлаштырыусы аралашсы булып сыға. Бәндәбикәнең даны быуаттар буйы һаҡланып килә һәм уның тураһында хәтер башҡорт һәм ҡаҙаҡ халыҡтары араһында күп йылдарға

һаҡланып ҡала. Ә Ерәнсә-сәсәндең шиғри мираҫында «Ерәнсә-сәсәндең Әбелхәйер ханға әйткәне» һәм «Асҡар тауҙың үлгәне» ҡобайырҙары ҡарай. Тапҡыр һүҙлеге, хәйләкәрлеге, һәм аҡылы Ерәнсә-сәсән исемен уртаҡлыҡ исемгә әйләндергән.

Был легенда үҙенең ғаиләнде һәм яҡындарыңды хөрмәт итергә өйрәтә. Ул үҙ ғорурлығыңа буйһонмаҫҡа, ә киреһенсә, тирә-яҡтағыларҙың фекеренә ҡолаҡ һалырға әйҙәй. Үҙ халҡының һәм ырыуының именлеге тураһында хәстәрлек күргән кеше генә данға һәм ихтирамға лайыҡ була – башҡорт халҡы шулай иҫәпләгән.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Нәҙершина Ф.А. Риүәйәт һәм легендаларҙа халыҡ тарихы. Тулыландырылған баҫма. – Өфө: Китап, 2011, – 360 бит.

2. Башҡорт халыҡ ижады. 2-се том. Риүәйәттәр, легендалар. – Өфө: Китап, 1997, – 440 бит.

3. Нәҙершина Ф.А. Халыҡ хәтере. 2-се баҫма. – Өфө: Ғилем, 2006. – 320 бит.


© Шарипова Г.Ш., Әлибаев З.А., 2023

**УДК 373.1**

*Шарипова З.Р., студент*
*Толомбаев В.З., филол. ф. к., доц*
*М. Акмулла ис. БДПУ, Уфа ҡ.*

## БАШЛАНҒЫС КЛАСТАРҘА ЭТНОМӘҘӘНИ КОМПЕТЕНЦИЯ ФОРМАЛАШТЫРЫУ ТЕХНОЛОГИЯЛАРЫ ҺӘМ МЕТОДТАРЫ

**Аннотация.** Статья посвящена вопросу о поликультурном и этнокультурном образовании в начальных классах в условиях глобализации культуры. В статье раскрывается сущность этнокультурного образования, рассматриваются способы формирования этнокультурной компетенции с применением различных методов и технологий.

**Annotation.** The article is devoted to the issue of multicultural and ethno-cultural education in primary classes in the context of cultural globalization. The article reveals the essence of ethno-cultural competence, examines the ways of forming ethno-cultural competence using various technologies and methods.

**Ключевые слова:** этнокультурное образование, этнокультурная компетенция, метод, педагогическая технология.

**Key words:** ethno-cultural education, ethno-cultural competence, method, pedagogical technology.

Бөгөнгө көндә, мәҙәниәт глобалләшеүе арҡаһында, полимәҙәни һәм этномәҙәни белем биреү тураһында мәсьәлә киҫкен тора. Бында этномәҙәни белем биреүгә айырым урын бирелә.

Уҡыусыларға этномәҙәни белем биреү мәсьәләһе хәл итеүҙең мөһимлеге башланғыс дөйөм белем биреүҙең Федераль дәүләт стандартында билдәләнә: «Стандарт тәьминәткә йүнәлтелгән: Рәсәй федерацияһының күп милләтле халҡының мәҙәни төрлөлөгөн һәм тел мираҫын һаҡлау һәм үҫтереү, күп милләтле Рәсәй халҡының рухи ҡиммәттәрен һәм мәҙәниәтен үҙләштереү... ». Мәҫәлән, башланғыс дөйөм белем биреүҙең төп белем биреү программаһын үҙләштереүҙең шәхси һөҙөмтәләренә ҡарата 2-се бүлектә патриотик тәрбиә биреү процесын әүҙемләштереү һәм граждандыҡ нигеҙҙәрен булдырыу, этник һәм милли сығышын, тарихҡа һәм башҡа халыҡтарҙың мәҙәниәтенә ихтирамлы мөнәсәбәтен булдырыу кәрәклеге талаптары ҡуйылған.

Уҡытыу стандарттарының нигеҙендә белем алыуҙы социализация институты булараҡ күҙаллау тора һәм йәмғиәт уҡып сығыусы шәхес характеристикаһына ошондайыраҡ талаптар ҡуя: донъяүи ҡиммәттәрҙе ҡабул итеү, икенсе милләттең ҡиммәттәрен ихтирам итеү, үҙеңде граждандыҡ һәм этник идентификациялау, конструктив мөнәсәбәттәр теҙә алыу, үҙ аллы эшмәкәрлеккә әҙерлек һ.б. [1, 6]

Дөйөм алғанда, этномәҙәни компетенцияларҙа этник-ара, үҙ-ара аңлашыуға һәм үҙ-ара йоғонто яһауға булышлыҡ итеүсе оҫталыҡ, шул оҫталыҡ һәм тәртип моделе аша тормошҡа ашырылған теге йәки был мәҙәниәт тураһында белем һәм объектив күҙаллауҙар йыйылмаһында сағылған шәхестең үҙенсәлеген аңлайбыҙ.

Этномәҙәни компетенцияның тәбиғәте ике яҡлы. Бер яҡтан ул социаль аралышыу продукты һәм баланың йәмғиәткә инеү шарты булып килә, ә икенсе яҡтан ул щәхестең үҙ үҫешенән тора. Шул арҡала этномәҙәни компетенция социаль һәм шәхси ихтыяждарҙы ҡәнәғәтләндерә.

Күренекле ғалим Поштарева этномәҙәни компетенцияны түбәндәге субкомпоненттарға бүлә: мәҙәни компонент (төрлө милләттәргә характерлы ҡиммәттәрҙе, үҙенслектәрҙе белеү һәм ҡабул итеү.

Беренселәрҙән булып бала менән этник ҡағылышын аңлауҙы швейцар ғалимы Ж. Пиаже ҡараған. Ул өс этап билдәләй:

Беренсе этап (6-7 йәш): этнос тураһында системаһыҙ, бәйләнешһеҙ белемдәр менән характерлана, сөнки ғаилә иң мөһим урында тора.

Икенсе этап (8-9 йәш): бала үҙен конкрет этник төркөмгә индерә, милләтен һәм телен билдәләй.

Өсөнсө этап (10-11 йәш) бала тулыһынса үҙен этник идентификациялай, тарихи һәм мәҙәни үҙенсәлектәрен аныҡ билдәләй. [4, 20, 37-41, 59]

Этномәҙәни компетенция формалашыу кимәлдәре:

Түбән кимәл. Мәҙәниәт, йолалар һәм ғөрөф-ғәҙәттәр тураһында тулы булмаған белем. Уларҙы ҡулланыуҙа ҡыйынлыҡтар тыуа, бындай уҡыусыларҙың һорауҙарға яуаптары асыҡланманған, аргументланмаған була.

Уртансы кимәл. Тулы түгел, әммә етәрлек белем. Һорауҙарға яуаптар тулы түгел, хаталар ебәрергә мөмкин, шул уҡ ваҡытта үҙ аллылыҡ бар. Уҡыусы эшен анализлай, планлаштыра, эҙмә-эҙлекле башҡара ала.

Юғары кимәл. Тулы белем, етәрлек дәрәжәлә белемен ҡуллана, айыра һәм сағыштыра ала, эштәрен дөрөҫ башҡара. Практикала ҡуллана, тулы, аныҡ, аргументлы яуаптар бирә.

Этник белемдәр дөйөм белемдәр алыу һәм уларҙың киңәйеүе аша үҫешә. Тәүҙә ул кеше ҡиәфәте, материаль культура (ашамлыҡтар, кейемдәр һ.б.), йолалар тураһында ябай белемдәр менән күрһәтелә. Үҫә бара уҡыусы белемдәрен дөйөмләштерә, анализлай һәм интерпретациялай башлай. Артабан ошо белемдәрен тарих һәм дин менән бәйле элементтар аша байыта.

Этномәҙәни компетенция формалашыу процесын булдырыусы педагогик механизмдар тип артабанғыларҙы билдәләргә мөмкин: тәрбиәләү, уҡытыу, эшмәкәр, аралашыу. Уҡытыу процесындағы характерлы билдәләүселәр булып тарих тураһында, тарихи шәхестәр, мәҙәниәт, йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр, хужалыҡ алып барыу рәүеше, сәнғәт, милли байрамдар һ.б. тураһында белемдәр килә. Тәрбиәләү процесс ында күрһәткестәр – әхлаҡи сифаттар, тәртиплелек, үҙ-ара ыңғай мөнәсәбәттәр. Эшмәкәрлек – төрлө сараларҙа ҡатнашыу дәрәжәһе. Аралашыу – үҙ-ара конструктив эшмәкәр алып барыу.

Башланғыс кластарҙа этномәҙәни компетенция формалаштырыу юлдарының береһе – ул этномәҙәни йүнәлешле технологиялар ҡулланыу. Тәрбиәләү процесының төп йүнәлештәрен тормошҡа ашырыу формалары: уйын-дәрестәр, сәйәхәт-дәрестәр, кластан тыш саралар, класс сәғәттәре. Был процеста шулай уҡ түбәндәгеләрҙе күҙ уңында тоторға кәрәк:

- Мәҙәни мөхит (театр, музейҙар һ.б.);
- Мәктәптең мәҙәниәт үҫтереү мөхите (этник күргәҙмәләр, мәғлүмәт стендтары, төрлө кластан тыш эшмәкәрлек, театр эшмәкәрлеге);
- Этноматериалдар ( биҙәү-ҡулланма сәнғәте, милли уйындар, уйынсыҡтар һ.б.).

Бындай технологияларҙы ике төркөмгә бүләләр. Беренсе төркөм уҡыу дисциплиналары, курстар, төрлө факультативтар, йәки дәрес йөкмәткеһенә ҡушылған материалдар менән күрһәтелә. Икенсе төркөм ул кластан тыш эшмәкәрлек. Уны маҡсаттарына ҡарап шулай уҡ түбәндәгесә бүлеп була:

1. Социаль йүнәлешле формалар (түңәрәк өҫтәл, конференциялар, класс сәғәттәре, тарихсылар, мәҙәниәт эшселәре, этнографтар менән осрашыу, иҫтәлекле көндәрҙә байрамдар үткәреү һ.б.)
2. Мәғлүмәти формалар (этнографик эксурсиялар, походтар, мәҙәниәт көндәре, фестивалдәр, тематик кисәләр, секция, түңәрәктәр һ.б.)
3. Практик йүнәлешле формалар (тренингтар, ролле уйындар, хәйриә эшмәкәрлек һ.б.)
4. Күңел асыу йүнәлешле формалар (кисәләр, милли байрамдар, фольклор концерттары, театрлаштырылған сығыштар, милли уйындар буйынса ярыштар һ.б.)

Этномәҙәни компетенция формалаштырыу методтары:

1. Тарихи метод. Халыҡтың тарихын өйрәнеү аша уның мәҙәниәтенә инеү.

2. Эмоциональ ҡабул итеү методтары (эмпатия методы, контраст методы, рефлексия методы).

3. Проектлау методы. Уҡыусыларҙың, халыҡтың тарихын, мәҙәниәт үҙенсәлектәрен, йолаларын, көнкүрешен, психологияһын асыҡлаған мәғлүмәтте йыйыуға, өйрәнеүгә, анализлауға һәм ҡулланыуға йүнәлгән эҙмә-эҙлекле эшмәкәрлеген ойштороу.

4. Моделләү һәм реконструкциялау методы. Дәрестәрҙә халыҡтың төрлө көнкүреш яҡтарын, йолаларын, һөнәрҙәрен уйын аша күрһәтеү.

5. Күргәҙмәле методтар. Төрлө һиҙеү органдарына йоғонто яһаған саралар аша күргәҙмә материалдарын ҡулланыу.

6. Актив уҡытыу методтары – этномәҙәни компетенция формалаштрыуҙа иң мәғлүмәтле һәм һөҙөмтәле методтар булып килә. Был методтар аша уҡыусылар белемдәрҙе үҙ аллы ҡабул итә, ҡулланырға өйрәнә.

Этномәҙәни компетенция формалашыу критерийҙары:

- География, тәбиғәт, тормош шарттары, тарих, күренекле шәхестәр, йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр, фольклор, сәнғәт, һөнәр, дин, милли уйындар, әхлаҡ нормалары, милли кейем тураһында белемдәр;
- Мәҙәниәт үҙенсәлектәрен ҡабул итеү һәм аңлау;
- Менталитетты аңлау, милләт кешеләре менән конструктив аралашыу алып бара белеү, шулай уҡ этник үҙенсәлекле оҫталыҡтар.

Шулай итеп, этномәҙәни компетенция формалашыу процесы тере, ҡыҙыҡлы, шәхестең үҙенә йүнәлешле, һөҙөмтәле булһын өсөн төрлө технология һәм методтар ҡулланыуы мөһим.

## ӘҘӘБИӘТ

1. А.Г. Асмолов, Г.В. Бурменская, И.А. Володарская и др.; под ред. А.Г. Асмолова. Как проектировать универсальные учебные действия в начальной школе : от действия к мысли: пособие для учителя / – М. : Просвещение, 2008. – 151 с.

2. Афанасьева А.Б., Формирование этнокультурной компетентности в системе высшего педагогического образования. [Электронный ресурс]: // КиберЛенинка. – Режим доступа: https://cyberleninka.ru/article/n/formirovanie-etnokulturnoy-kompetentnosti-v-sisteme-vysshego-pedagogicheskogo-obrazovaniya/viewer. – Дата обращения: 23.01.2023

3. Поштарева Т.В. Формирование этнокультурной компетентности //Педагогика. – 2005. – № 3. – С. 35–42.

4. Тайчинов М. Г., Развитие национального образования в поликультурном, многонациональном обществе // Педагогика.– 1999. – № 2.

5. Цаллагова З.Б. Этнопедагогическая афористика. М., 1997 С. 222

6. Тагирова С.А., Хусаинова Л.М. Лингводидактические основы формирования языковой личности обучающихся на уроках родного языка посредством регионоведческого материала // Традиции и инновации в национальных системах образования: Материалы Национальной научно-практической конференции 22 ноября 2018 г.. – 2018. – С. 108-111.
7. Тагирова С.А., Давлеткулова Г.Ш. Формирование лингвокультурологической компетенции учащихся на материале башкирских народных обычаев. Тагирова СЛ., Давлеткулова Г.Ш. В сборнике: КОНЦЕПТ "СЧАСТЬЕ" В ТЮРКО-МОНГОЛЬСКОЙ ЯЗЫКОВОЙ КАРТИНЕ МИРА. Ответственные редакторы Н. В. Ерленбаева, С. Б. Сарбашева. 2021. С. 62-69.

© Шарипова З.Р., Толомбаев В.З., 2023

**УДК 811.512.141**

*Шаяхметова Р.С., учитель*
*башкирского языка и литературы,*
*ГБОУ Республиканский центр дистанционного*
*образования детей-инвалидов, г.Уфа*

## ИСПОЛЬЗОВАНИЕ ЭЛЕКТРОННОЙ ОБРАЗОВАТЕЛЬНОЙ СРЕДЫ MOODLE НА УРОКАХ БАШКИРСКОГО ЯЗЫКА И ЛИТЕРАТУРЫ

**Аннотация.** В статье рассматриваются пути дистанционного изучения башкирского языка. В данной статье авторы дистанционного курса по башкирскому языку, разработанного с использованием средств системы дистанционного обучения Moodle, дают подробное описание данной системы по эффективному ее использованию.

**Annotation.** the article discusses the ways of distance learning of the Bashkir language. In this article, the developers of the distance course in the Bashkir language, developed using the Moodle distance learning system, give a detailed description of this system for its effective use.

**Ключевые слова:** информационные технологии, ресурс, система Moodle.

**Key words:** information technology, resource, Moodle system.

Современный мир неразрывно связан с процессом информатизации, и поэтому использование на уроках различные формы и методы информационных технологий является неотъемлемой частью нашей работы. Использование на уроках башкирского языка различные формы и методы информационно-коммуникационных технологий, поможет сформировать у обучающихся интерес к изучению языка, будет способстовать обогащению словарного запаса, способствовать и самостоятельности.

Я работаю в республиканском центре дистанционного образования, где обучаются дети с ограниченными возможностями здоровья (ОВЗ).

Дистанционная форма обучения как нельзя лучше подходит для того, чтобы дети с ОВЗ получили более качественное образование и успешно адаптировались в обществе. Включение в систему образования учащихся с ОВЗ технология дистанционного обучения позволяет не только усовершенствовать и повышать качество образования, но и дает детям возможность виртуального общения, знакомства и обмена мнениями в компьютерной сети, т.е. содействует их интеграции в социум посредством Интернет технологий. Для ребенка с ОВЗ это открывает путь в новый мир, дает возможность реализовать себя, преодолеть свое одиночество.

Неоценимую помощь в обучении нам и нашим детям оказывает система Moodle. Moodle – это система дистанционного обучения, включающая в себя средства для разработки дистанционных курсов. В системе можно создавать и хранить электронные учебные материалы и задавать последовательность их изучения. Электронный формат позволяет использовать в качестве «учебника» не только текст, но и интерактивные ресурсы любого формата от статьи в Википедии до видеоролика на YouTube.

Дистанционный курс по башкирскому языку, разработанный с использованием средств системы дистанционного обучения Moodle состоит из следующих элементов:

1. Теоретическая часть:

- Страница (текст, видео, картинки, медиа);
- Гиперссылка (ссылка на сторонние сайты);
- Файл (файл, который можно скачивать потом);
- Лекция (изучение в виде квеста, кнопочный переход по страницам лекции).

2. Практическая часть:

- Задание (задание, на которое ученики могут отправить ответ в виде текста или файлом).

3. Домашнее задание:

- задание;
- тест.

1. Теоретическая часть.

Элемент «Страница» служит для отображения какого-либо текста (есть возможность вставки изображений, таблиц, встроить видеоурок или презентацию) в рамках курса. На главной странице будет выведена ссылка на созданную страницу. Удобно использовать для публикации как лекций, так и небольших заметок. В данном разделе размещены биографии и творчество поэтов, писателей. А также разработанные автором дополнительные материалы по темам уроков и материалы из электронного учебника (Приложение 1)

Например, тема 1 урока «Биография Рами Гарипова и стихотворение «Родной язык»».

Элемент «URL-ссылка» – это ссылка на любой внешний или внутренний ресурс сети Интернет. Ссылки очень удобно использовать, можно

поделиться с учащимися объемным видеороликом, интересной страницей какого-либо сайта и др. В разделе URL-ссылка представлены материалы из сайта YouTube. Например, документальный фильм о народном поэте Башкортостана Рами Гарипове.

С помощью элемента «Файл» можно загрузить в курс любой файл (например, презентацию, электронную таблицу, документ, аудио или видеозаписи и др.) и сделать его доступным для скачивания пользователям курса.

В ресурсе «Файл» размещены презентации. (Приложение 2)

Элемент «Лекция» строится по принципу чередования страниц с теоретическим материалом и страниц с обучающими тестовыми заданиями и вопросами.

Например, теоретический материал по теме «Синтаксис». Данный раздел можно использовать и для самостоятельного изучения новой темы. (Приложение 3)

2. Практическая часть.

Элемент «Задание» позволяет учителю ставить задачи, которые требуют от учеников ответа в любом формате в виде текста или файлом. Элемент Задание позволяет оценивать и полученные ответы.

В разделе размещены практические задания, упражнения из учебника, ответы на вопросы.

3. Домашнее задание

Элемент «Тест» позволяет создавать наборы тестовых заданий. Тестовые задания могут быть с несколькими вариантами ответов, с выбором верно/не верно, предполагающие короткий текстовый ответ, на соответствие и др. Все вопросы хранятся в базе данных и могут быть в последствии использованы снова в этом же курсе (или в других). (Приложение 4 и 5)

В разделе домашнее задание учащимся предлагаются тесты, интерактивные задания из образовательного сервиса LearningApps.org (Приложение 6)

Таким образом, использование интернет-сервисов на уроках башкирского языка является эффективным средством для формирования информационной культуры и УУД у учащихся, развивает их творческий взгляд. Учащиеся становятся активными участниками образовательного процесса.

## ЛИТЕРАТУРА

1. Система электронного обучения и тестирования Moodle: обзор возможностей [Электронный ресурс]: Режим доступа: https://www.ispring.ru/elearning-insights/moodle. – Дата обращения: 21.01.2023.

2. Нурисламова Ю.М. Инструкция для учителя по работе в ЭОР Moodle. ГБОУ РЦДО., 2018 – 26 с.

3. Змеев М.В., Камалов Р.Р., Макурин А.И. Дистанционное обучение в программной среде Moodle: от урока до курса (учебное пособие для учителей и

преподавателей). – Глазов: АНО Центр НИОКР «Универсум», 2018. – 118 с.: ил.

Приложение 1







Приложение 2



## Приложение 3



В начало / Мои курсы / Родной язык и литература 9 класс / Синтаксис / Синтаксис тураһында дөйөм төшөнсә

### Синтаксис тураһында дөйөм төшөнсә

Синтаксис һәм пунктуация

Синтаксис синтаксик берәмектәрҙең төҙөлөшөн һәм мәғәнәһен өйрәнә. Синтаксис, морфология кеүек үк, грамматиканың бер бүлеге булып һанала. Тыныш билдәләрен ҡулланыу ҡағиҙәләренең йыйылмаһы пунктуация тип атала.

Синтаксистың төп берәмектәре – һүҙбәйләнеш һәм һөйләм.

Һөйләм һүҙҙәрҙән һәм һүҙбәйләнештәрҙән тора. Һүҙбәйләнеш – ул мәғәнәүи һәм грамматик яҡтан үҙ-ара бәйле ике йәки бер нисә һүҙ. Һүҙбәйләнештәр бер бөтөн уйҙы, фекерҙе аңлатмайҙар, уларҙың тамамланған интонацияһы ла булмай.

һүҙбәйләнеш һөйләм

– кәмендә ике һүҙҙән тора; – бер һүҙҙән (Ҡыш.)

йәки һүҙбәйләнештәрҙән

тора;

## Приложение 4



### Контроль диктант

рыто от студентов

Контроль диктант "Ер майының тарихы."

### Хаталар өҫтөндә эш. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм йомғаҡлау.

Хаталар өҫтөндә эш

Тест

Скрыто от студентов

Приложение 5




Приложение 6




© Р.С. Шаяхметова, 2023

**УДК 372.881.161.1**

*Эркинбаева А.К., магистр пед. наук,*
*учитель русского языка и литературы*
*Назарбаев Интеллектуальной школы*
*химико-биологического направления*
*г. Алматы, Республика Казахстан*

# ИСПОЛЬЗОВАНИЕ ПРИЕМА ТАСК-АНАЛИЗА ТЕКСТОВ НА УРОКАХ РУССКОГО ЯЗЫКА В ОСНОВНОЙ ШКОЛЕ

**Аннотация.** В данной статье представлены примеры использования методического приема под названием «ТАСК-анализ» для развития у учащихся основной и старшей школы навыков критического мышления. Приведенные примеры рассмотрены в системе преподавания русского языка в классах с русским языком обучения.

**Annotation.** This article presents examples of using a methodological technique called «TASK-analysis» to develop critical thinking skills in the middle and high school students. The given examples are considered in the system of teaching the Russian language as a native language.

**Ключевые слова:** анализ текста, тезис, аргумент, антитезис, контрутверждение, критическое мышление.

**Key words:** text analysis, thesis, argument, antithesis, counter-assertion, critical thinking.

Развитие критического мышления учащихся – одна из важнейших функций современной школы. Используя приемы развития критического мышления, мы учим учеников не просто устанавливать ход событий, видеть «цепочку» действий, но и понимать причинно-следственные связи этих событий, учим их не доверять каждой информации, которую они получают, а уметь думать над одним и тем же вопросом «под разными углами». Так и прием технологии развития критического мышления ТАСК-анализ помогает учащимся осмысливать текст с разных точек зрения, относительно разных его компонентов. Именно поэтому считается, что этот прием может способствовать формированию у учащихся навыка по определению и формулированию идеи текста. Известно, что школьники нередко путают понятия «тема», «идея», «цель», а также и их формулирование.

Название приема подразумевает собой аббревиатуру, которая расшифровывается следующим образом: Тезис – Анализ – Синтез – Ключ. Главное – определить сам «ключ», который необходимо найти. Особенность приема ТАСК-анализ заключается в том, что он помогает учащимся найти доказательство или опровержение того или иного утверждения, сформулировать тезис и антитезис, увидеть связи между компонентами текста, сделать умозаключение. Достичь этого можно, применяя на уроке несколько

последовательных вопросов. Обычно количество ограничивается 7-10 вопросами. Некоторые источники утверждают, что суть приема состоит в 10 вопросах, заданных в определенной последовательности: метод этот представляет собой 10 последовательно заданных вопросов, над которыми в ходе чтения текста предстоит размышлять. Наиболее рационально ответы на вопросы занести в специально сконструированную таблицу. Здесь можно встретить культуру вычленения тезисов и антитезисов того или иного текста [1].

Как было ранее сказано, главное – определить искомый ключ: идея, цель, целевая аудитория, стилевые или языковые особенности. Таким образом, можно выделить следующий алгоритм работы ТАСК-анализа:

1. Определить ключ, который необходимо найти;
2. Определить тему текста;
3. Определить основное утверждение текста;
4. Предположить контрутверждение против выдвинутого ранее основного утверждения;
5. Найти в тексте подтверждающие аргументы для основного утверждения и контрутверждения;
6. Провести оценку приведенных аргументов, определить «слабые» места (не самые убедительные аргументы, спорные моменты);
7. Сформулировать вывод на основе выдвинутых тезисов и аргументов.

В начале работы с приемом ТАСК-анализ для выполнения пункта №7 учащимся можно предложить формулировку: *Несмотря на то, что ... (укажите контрутверждение либо один из самых сильных доводов в его защиту), ... (основное утверждение), поскольку ...(главные причины, побуждающие верить в истинность основного утверждения).* Рассмотрим на примере. На уроке русского языка в 9 классе (с русским языком обучения), где в качестве цели обучения являлось «Определить основную мысль текста», учащиеся получили задание сформулировать идею текста в виде утверждения на тему «Беспроводная связь». В данном задании ключом является идея текста, которую учащимся необходимо определить и сформулировать.

Так как тема текста уже дана, учащиеся приступают к формулированию основного утверждения на основе прочитанного текста. 88% учащихся в классе выделили его примерно одинаково: «Интернет позволяет передавать любой вид информации. Это ускоряет процесс коммуникации». Однако выдвинутые учащимися контрутверждения (или антитезисы) не совпадали:

- иногда передаваемые объекты обладают большими размерами, и обмен ими вызывает определенные трудности у пользователей;
- качество сети иногда затрудняет передачу данных;
- в отдаленных уголках страны присутствует проблема с подключением к интернету в целом, что делает электронную передачу данных невозможной.

Если к выдвинутому антитезису в тексте невозможно найти подтверждающие аргументы (даже спорные), то учащиеся предполагали другое контрутверждение, аргументы к которому имелись в тексте.

Таким образом, некоторые учащиеся в классе нашли «ключ» урока в следующей формулировке: «Несмотря на то, что интернет позволяет ускорить процесс коммуникации, передачу различных файлов, документов, сообщений, все же такой способ вызывает трудности у пользователей, заключающиеся, например, в большом объеме, так как беспроводная связь должна поспособствовать все-таки повышению скорости передачи информацией, чем просто передаче информации».

Рассмотрим другой пример. В случае, если искомым ключом являются стилевые особенности текста, то предложенный алгоритм следует дополнить пунктом «Найти в тексте непонятные, сложные, «перегруженные» слова и выражения, пояснить их» [2]. Как известно, стилевые особенности текста выражаются не только в структурной и жанровой организации текста, в их цели и целевой аудитории, но и с помощью определенных слов и выражений, присущих определенному пласту лексики, стилю речи. Таким образом, алгоритм работы будет выглядеть так:

1. Определить ключ, который необходимо найти;
2. Определить тему текста;
3. Определить основное утверждение текста;
4. Предположить контрутверждение против выдвинутого ранее основного утверждения;
5. Найти в тексте подтверждающие аргументы для основного утверждения и контрутверждения;
6. Найти в тексте непонятные, сложные, «перегруженные» слова и выражения, пояснить их;
7. Провести оценку приведенных аргументов, определить «слабые» места (не самые убедительные аргументы, спорные моменты);
8. Сформулировать вывод на основе выдвинутых тезисов и аргументов.

Например, прочитав текст, учащиеся решили, что текст написан публицистическим стилем – это определение основного утверждения. Однако имеются сомнения, поэтому выдвигают антитезис – текст может быть написан и в научном стиле. Для подтверждения тезиса и антитезиса здесь можно выдвигать все, что ученики определят: цель/жанр/целевая аудитория/структура. Приступая к шагу №6, учащиеся выписывают непонятные им слова и выражения, ищут им определения в словаре, стараются дать обоснование использования автором именно этих слов (для придания особого художественного образа или наиболее точной передачи смысла понятия в виде термина, например). Таким образом, на начальном этапе работы по данному приему шаблон для формулировки вывода по стилевым особенностям текста можно предложить такой: «Несмотря на присутствующие в тексте признаки научного стиля, например, термины, стиль данного текста является

публицистическим, поскольку текст в большей степени содержит в себе такие особенности данного стиля, как … (перечисляется)».

Как видно, ТАСК-анализ – универсальный прием, который можно использовать на уроках при работе с текстом: уроки не только языка, но и литературы, возможно, подойдет и к урокам истории, географии. В зависимости от цели урока, полагаясь на свое педагогическое мастерство, учитель вправе добавлять шаги, убирать лишние, дополнять имеющиеся, главное – сохранить суть приема – тезис – антитезис – аргументы к каждому тезису. Всё это приведет к развитию критического мышления учащихся.

**ЛИТЕРАТУРА**

1. Богданова М.А. Методы и приемы технологии критического мышления [Электронный ресурс]. // – Режим доступа: https://nsportal.ru/shkola/obshchepedagogicheskietekhnologii/library/2012/11/21/metody-i-priemytekhnologii. – Дата обращения:10.10.2020.

2. Галактионова Т. Технология развития критического мышления. Методы работы с текстовыми источниками информации [Электронный ресурс].// – Режим доступа: http://www.schoolnano.ru/node/8964. – Дата обращения: 10.10.2020.

© Эркинбаева А.К., 2023

**УДК 821**

*Әлибаев З.А., филол. ф. канд., доц.*
*М. Акмулла ис. БДПУ, Өфө к.*

## Ә. ӘМИНЕВ ХИКӘЙӘЛӘРЕНЕҢ ЖАНР ТӘБИҒӘТЕ

**Аннотация.** В статье анализируется рассказы народного писателя РБ А.Аминева. Он является самым маститым мастером национального рассказа. Обьектом исследования стали десятки рассказы А.Аминева. Цель исследования заключается в выявлении особенностей жанра в творчестве писателя. Для достижения поставленной цели были сформулированы следующие задачи: проанализировать весь спектр рассказов, рассмотреть жанровое своеобразие в динамике, исследовать сопоставляя с рассказами других авторов, дать обьективную картину развития башкирского рассказа.

**Annotation.** The article analyzes the stories of the national writer of the Republic of Belarus A. Aminev. He is the most venerable master of the national story. The object of the study was dozens of stories by A. Aminev. The purpose of the study is to identify the features of the genre in the writer's work. To achieve this goal, the following tasks were formulated: to analyze the entire range of stories, to consider the genre originality in dynamics, to study it in comparison with the stories of other authors, to give an objective picture of the development of the Bashkir story.

**Ключевые слова:** жанр, рассказ, автор, герой, персонаж, творчество, публикации, книга, характер, система образов.

**Key words**: genre, story, author, hero, character, creativity, publications, book, character, system of images.

Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Әмир Әминев үҙенең 70 йәшлек юбилейын ҙур ҡаҙаныштар, ижади уңыштар менән ҡаршы ала. Уның “Ҡайын япрағы”(1981), “Йәшлек моңдары”(1989), “Сөңгөл”(2001), “Ҡапҡа”(2003), “Китай-город”(2007), “Ҡәләмдәштәргә һүҙ”(2011), “Ҡар кешесе”(2013), “Бер кәмәлә”(2016), “Хикәйәләр”(2021), ”В одной лодке”(2021) Өфө, Ҡазан, Мәскәү ҡалаларында донъя күргән. Айырым хикәйәләре һәм повестары “Дружба народов”, “Наш современник” кеүек үҙәк журналдарҙа, “Современная литература народов России” антологияһында, Татарстандың “Казан утлары”, Марий Элдың “Ончыко”, Калмыкияның “Теегин Герл”, Кабардино-Балкарияның “Менги Тау”, үҙебеҙҙең “Белские просторы” журналдарында баҫылды. Әмир Әминев халыҡ яҙыусыһы Талха Ғиниәтуллиндың “Тыуған тупһа янында”(1994), “Тау артында ниҙәр бар” (1997), “Һин аҡ ҡайын янында тора инең” (2007) китаптарын, А.Платонов, В.Белов, В.Распутин, К.Йыһаншин, Ш.Хәжиәхметов һәм башҡаларҙы башҡорт теленә тәржемә иткән. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре (1993), Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре (2014), “Китай-город” китабы өсөн Рәсәйҙең Ҙур премия лауреаты (2012).

Әмир Әминев ижады күп ҡырлы, төрлө-төрлө. Ләкин яҙыусы, миңә ҡалһа, милли әҙәбиәттең йөҙөн билдәләрлек хикәйә оҫтаһы булып ҡала. Шуға ла юбилярҙың бер-нисә хикәйәһенә туҡталып китһәк, яҙыҡ булмаҫ.

« Сөңгөл » хикәйәһенең сюжеты бай һәм бик үҙенсәлекле. Яҙыусы Шамил (Шамбы) образының ҡатмарлы күңел кисерештәрен, кеше булмышының трагик мәлдәрен, бөгөнгө ауылдағы йәштәрҙең хафалы, тетрәндергес яҙмыштарын күҙаллай. Шамил армиянан хеҙмәт итеп ҡайтҡан, әсәһенең күҙ терәп торған берҙән-бер таянысы. Ниәттәре лә изге генә, юғары уҡыу йортона уҡырға инергә әҙерләнә. Тик ғәҙәти ауыл тормошо – ҡунаҡҡа саҡырылып «һыйланыуҙар» , «зәмзәм һыуы» менән мауығыу, шунан килеп ирһеҙ бисә Мәрйәмдең ҡосағында булыу - ниәттәрен пыран-заран килтерә. Хатта тәҡдиренең һуңғы нөктәһенә лә әүерелә. Автор сюжет һыҙыҡтарын йәнәш ойоштора. Был иһә характерҙың асылына төшөнөргә ярҙам итә. Шамил йылға аша кисеп, Мәрйәмгә ҡунырға йөрөй. Кисеүҙән аҫтараҡ ҡына сөңгөл урын, унда төшһәң – эш харап. Тәбиғәт сөңгөлө һәм кеше күңелендәге сөңгөлдәрҙе яҙыусы һәр саҡ йәнәш үҫтерә. Шамилдың Мәрйәмгә өйләнеүе, уның ҡыҙы Гүзәлде мыҫҡыҫ итеүе – кешелек сифаттарын юҡҡа сығара бара.

«Эйе, әсәһе менәм йәшәп, ҡыҙын баҫыу һымаҡ хәлде, иптәш, һин генә түгел, байтаҡ кеше ишеткәне-күргәне юҡ был тирәлә. Ғәжәп бер ваҡиға, оҙаҡ йылдар телдән төшмәй һөйләнер тарих булып ҡалыр инде ул. Йыуаштан йыуан

сыға тигән һымаҡ, Шамилдан быны һис көтмәгәндәр ине. Ә ул эшләне лә ҡуйҙы».

Шамил баҫҡан яңылыш юл бик хәтәр. Мәрйәм өйҙән ҡыуып сығарғас, ул, уйынса: «...Үҙенә тиклем башҡаларҙың йөрөгәнен ишеткәйне бит, уға ла бер аҙ файҙаланырға ла ташларға кәрәк булған. Шуны эшләй алманы Шамил, көсө, характеры етмәне, Мәрйәмдең сөңгөлөнә батты ла ҡуйҙы».

Гүзәл менән йәшәй башлағас та аралары өҙөлмәй Шамил менән Мәрйәмдең. Тап шул кисеү аҫтындағы сөңгөл дә, Шамилдың киҫекһеҙлеген туҡтатыр өсөн, ғүмерен ала. Ә Гүзәлде ошо мәлдә балаға тулғаҡ тота башлай. Яҙыусы Шамил характерының көсһөҙ яҡтарын төрлө-төрлө ваҡиғалар аша ныҡлы асып биргән. Ҡатмарлы образ уйландыра ла, һағайта ла.

Т.Ғиниәтуллиндың «Баҙ » хикәйәһендәге Барыйға бик яҡын, икеһе лә тормош сөңгөлөндә батып ҡалған кешеләр.

Ә.Әминевтең хикәйәләренең күбеһендә әхлаҡи-этик проблемалар ята. «Бүре балалары» әҫәрендә был проблема ике юҫыҡта: кешеләр һәм хайуандар донъяһында бөрөләнә. Әммә улар бер-береһе менән бик яҡын, хатта бәйле лә. Автор кеше һәм тәбиғәт мөнәсәбәттәренең бәйләнештәрен ғәҙәти генә күренештәрҙән башлап ебәрә лә, артабан улар араһындағы ҡаршылыҡтарҙы ҡырҡыулаштыра. Яҙыусы халыҡтың милли йөҙөн, рухи башланғысын юғалта барыу кеүек үтә лә ҡырҡыу һәм көнүҙәк мәсьәләне тормошсан ваҡиғалар аша һүрәтләй. Хикәйәләге ауылда яңғыҙ ҡалған Сәкинә менән кәнтәй эттең яҙмышында уртаҡлыҡ бар һәм уны автор бик оҫта уйната, бүреләр менән командировкаға килеп киткән Иван араһында ла психологик бәйләнештәр әҫәрҙе уҡымлы иткән. Халҡыбыҙҙа «бүрене бүреккә һалһаң да, урманға ҡарай» тигән мәҡәл бар. Әҫәрҙең идеяһы ла шуға ҡайтып ҡала. Сәкинә күҙ нурындай тәрбиәләп үҫтергән улы Альбертты Тамбовҡа атаһына алып китәләр. Көсөктәре бүреләргә эйәрен киткән, ә үҙе шым ғына солан аҫтымда ятып ҡалған кәнтәй генә Сәкинәнең хәлдәрен аңлай кеүек. Үкенес, әммә был ҡәтғи ысынбарлыҡ.

«Ҡар кешеһе» хикәйәһендә әхлаҡи-этик һәм мифологик проблемалар бер үҙәккә бәйләп бирелгән. Ысынбарлыҡ һәм ижади хыял аша автор йәшәйешебеҙҙәге экологик мәсьәләнең ҡырҡыу яҡтарын сағылдыра. Автор ҡарт һунарсы Йомағол һәм ҡар кешеһе образдарын тәрән психологик күренештәрҙә генә һүрәтләп ҡалмай, ә мәсьәләне улар ярҙамында бар тулылығында асыуға өлгәшә. Хикәйәлә ҡулланылған композицион алымдар (төш, иҫләүҙәр, юрауҙар) әҫәрҙе һәр яҡлап байыта, ә ҡуйылған мәсьәләнең ҡырҡыулығын күтәрә, Ә.Әминев «Ҡар кешеһе»ндә өр-яңы форма табыуы ижадының яңы баҫҡысы. Был юҫыҡтағы эҙләнеүҙәре образлы фекерләүҙең яңы үҙенсәлектәрен күрһәтеп кенә ҡалмай, ә новаторлыҡ киңерәк даирәне яулай барыуы хаҡында ла һөйләй. Донъя әҙәбиәтендә С.Айтматовтың әҫәрҙәрендә лә ошоға яҡын йүнәлештәрҙе күрергә мөмкин.

Ә.Әминевтең «Ҡорт» һәм «Өс ете» хикәйәләре Мәхмүт һәм Билал образдарының күңел кисерештәрен сағылдыра. Сюжеттағы динамикалы

хәрәкәт персонаждарҙың характер үҙенсәлектәрен, уларға нигеҙләнгән эске ҡаршылыҡты тәрән фекерҙәр аша уҡыусыға еткерә.

«Ҡорт» та ир һәм ҡатын араһындағы мөнәсәбәттәрҙең бер генә яғы - көнләшеүҙең көлкөлө һәм ҡурҡыныс ваҡиғаларға барып сығыуын төҫмөрләйбеҙ.

«Өс ете» күберәк фәлсәфәүи уйланыуҙарға, ретроспектив алым аша Билал образының характерына иғтибарҙы туплай. Яҙыусы һандарҙың серлелеген художестволы деталь кимәленә күтәреп, төп герой образын асыуҙа бик оҫта ҡуллана. «Яҙмыштан уҙмыш юҡ» әйтеме лә Билал ҡарт характерына тура килә. Йәшәү һәм үлем араһында кешенең уй-кисерештәре, башҡаларға мөнәсәбәттәре йыйнаҡ ваҡиғалар аша сағылып, тос фекерҙәр менән ҡоршалған.

Яҙыусының «Ҡытайгород», «Усман ташы», «Танкист», «Бер кәмәлә», «Мең дә бер ғазап», «Һуңлаған бүләк», «Йондоҙ сәскә» повестары заманыбыҙҙың төрлө проблемаларына арналған. «Ҡытайгород» повесы композицион яҡтан бай алымдары һәм форма йәһәтенән яңылығы менән айырылып тора. Хатта исеме лә традицион түгел, ә һиҫкәндереп ебәрерлек. Ә.Әминев заманабыҙҙың байтаҡ актуаль провлемаларын повестың нигеҙе итеп ала ла ҡатмарлы характерҙар аша сағылдыра. Композицион яҡтан повесть бик йыйнаҡ, сюжет һыҙыҡтары әллә ни тармаҡланмай, ваҡиғалар бер тирәлә бара. Ә.Әминев «Ҡытайгород» повесында тос фекер, сағыу образдар менән эшләп, бик йыйнаҡ, яңы формалағы яңы әҫәр ижад иткән. Ниндәйҙер кимәлдә Б.Рафиҡовтың «Ғәрәп» повесы менән форма яҡынлығы ла бар.

«Мең дә бер ғазап» документаль повесының геройы Сәйфулла Мәжитов фашист лагерҙарында ыҙа сиккәндән һуң, ҡасып, Белоруссия партизандарына ҡушылып, артабан көрәшә.

Башта уҡ шуны билдәләргә кәрәк, яҙыусының «Усман ташы» повесының сюжет үҫешендә полифоник ҡараштар ярылып ята. Улар араһында автор фекере, персонаждар хәрәкәте һәм йәмғиәт ҡарашы айырылып тора. Тап ошо өс ҡараш ерлегендә повестың конфликт ебе төйөнләнә, артабан ваҡиғалар хәрәкәте тәрәнерәк аң даирәһен яулап ала.

Ә. Әминев ошо уҡ алымды үҙенең «Ҡытайгород» повесында ла бик оҫта ҡулланғайны. Ваҡиғалар сылбырын йылдам үҫтереп, үҙәк сюжет һыҙығын тулыландырыусы художестволы деталдәр, йәнәшәлектәр композицияны байытып ҡына ҡалмай, фекер даирәһенең киңлеген һәм тәрәнлеген тәьмин итә. Шуға ла Кострома үгеҙенә бәйле сюжет һыҙығы повестың драматик яғын ҡырҡыулаштыра. Ишара аша төп мәғәнәне тәрәнәйтә. Әйткәндәй, Мостай Кәрим трагедияларында ишараның ғәйәт ҙур роль уйнауы бөтәбеҙгә лә мәғлүм. «Усман ташы»нда персонаждар һаны әллә ни күп булмаһа ла, һәр образдың үҙенә генә хас ҡылыҡ-һыҙаттары, телмәре, булмышы менән әҫәр проблемаһын тейешле кимәлдә яҡтыртырға ярҙам итә.

Автор заман проблемаһын күрһәтерҙәй конфликтты ике йүнәлештә: эске (психологик) һәм тышҡы ваҡиғалар хәрәкәте аша күҙаллай. Миңә ҡалһа, тәүгеһе күпкә тәрәнерәк һәм уңышлы ла, сөнки повестың төп геройы Рамаҙан

ҡарт ғәзәти ауыл кешеһендәй генә күренһә лә, сабыр холҡо, төплө фекере һәм һәр нәмәгә ныҡлы ҡарашы булған ир-уҙаманды тормош тағы ла бер һынау алдына ҡуя. Эйе, эйе – һынау. Һынауҙың да ниндәйе әле!? Уҡытыусылар башлығындағы ҡатын-ҡыҙҙар делегацияһы сигенер, ситкә тайпылыр урын ҡалдырмағас, нәҫел шәжәрәһен, күңел донъяһын ҡат-ҡат аҡтарырға мәжбүр. Тормош фәлсәфәһе шулай, әҙәм затын йыш ҡына һынауҙар алдына баҫтыра ла, ситтән генә күҙәткән төҫлө. Ә уның артында еңеүме, еңелеүме – билдәһеҙ. Автор ҙа был дилемманы оҫта уйнатып ҡына ҡалмай, ә ысынбарлыҡты художестволы сағылдырыуҙа ярайһы уҡ ҡыҙыҡлы ысулды таба. Шуға ла ваҡиғалар сентименталь ҡараштарҙан алыҫ тора, ә сатирик пафос өҫтөнлөк итә. Яҙыусы үткер социаль, әхлаҡи мәсьәләләрҙе лә күңел һыҡтауҙарынан иламһырап түгел (күп кенә ҡәләмдәштәрендә тулып ята), әсе ирония аша ҡабул итергә ярҙам итә.

«Усман ташы» повесының поэтикаһы ваҡиғаларҙың динамик ағышы аша үҙенсәлекле характерҙарҙы, замандың актуаль мәсьәләләрен художестволы сағылдырыуҙа ғәйәт ҙур роль уйнай. Форма яңылығы, композицион алымдар геройҙарҙың халыҡсанлығын, образдарҙың тослоғон, социаль-әхләҡи проблеманың үткерлеген асып бирергә ярҙам итә. Яҙыусы фекере лә повестың нигеҙенә бәйле психологик йүнәлештә тәрәнәйә бара. Был иһә хәҙерге башҡорт прозаһының юғары кимәлен күрһәтһә, повестың авторы Әмир Әминевтың ижади оҫталығының бер һыҙаты.

Ошо йәһәттән Әмир Әминевтың «Танкист» повесы заман проблемаларын бик ҡыйыу күтәреүе, фәлсәфәүи яҡтан тәрәнлеге, уйланырлыҡ итеп биреүе менән һуңғы йылдарҙағы әҫәрҙәренән айырылып тора. Композицион яҡтан йыйнаҡ, әҫәрҙә күтәрелгән мәсьәләләрҙе бер төйөнгә төйнәрлек характерҙы динамикалы хәрәкәттә барлыҡ сюжет ептәре менән бәйләй. Әмир Әминевтың «Танкист» повесында йәмғиәт һәм шәхес проблемаһы күберәк ҡыя (вертикаль) яҫылыҡта, кешеләрҙең психологияһы аша динамикалы хәрәкәттә сағылыш таба. Әхлаҡи, социаль мәсьәләләр геройҙың тәрән күңел кисерештәре, драматик ваҡиғалар, үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙең ҡырҡыу ҡараштарынан туҡыла.

## ӘҘӘБИӘТ

1. Алибаев З.А. Поэтика современных башкирских романов.-Уфа: Самрау, 2020.-286 с.
2. Күзбәков Ф.Т. Рухиәт ҡотҡарыр.- Өфө: Китап, 2011.- 196-208 бб.
3. Әлибаев З.А, Һүҙ ҡөҙрәте.- Өфө: Китап, 2022. -224 бит.
4. Әминев Ә.М. Сөңгөл.- Өфө: Китап, 2011.-224 бит.
5. Әминев Ә.М. Ҡәләмдәштәргә һүҙ.- Өфө: Китап, 2011.-264 бит.
6. Әминев Ә.М .Бер кәмәлә.- Өфө: Китап, 2016.-444 бит.
7. Әминев Ә.М. Хикәйәләр.- Өфө: Китап, 2021.-272 бит.

© Әлибаев З.А., 2023

**УДК 821**

*Әминева Р.Х., студент*
*Ғилми етәксеһе: Әлибаев З.А., филол. ф канд., доц*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө к.*

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ӘКИӘТТӘРЕНДӘ БАТЫР ОБРАЗЫ

**Аннотация.** Данная статья посвящена образу батыра в башкирских народных сказках. Понятие мужества во все времена соприкасалось с такими нормами, как честь и совесть, человечность и человечность. В качестве примера анализируются башкирские народные сказки о батырах “Акьял батыр”, “Урал батыр”, “Умурзак батыр”, “Кыркатар батыр”.

**Annotation.** This article is devoted to the image of the batyr in Bashkir folk tales. The concept of courage has always been in contact with such norms as honor and conscience, humanity and humanity. As an example, Bashkir folk tales about batyrs “Akyal Batyr”, “Ural Batyr”, “Umurzak batyr”, “Kyrkatar batyr” are analyzed.

**Ключевые слова:** башкирские народные сказки, сказки о батырах, образ батыра, мужество, герой.

**Key words:** Bashkir folk tales, tales about batyrs, the image of a batyr, courage, hero.

Батырлыҡ төшөнсәһе һәр заман өсөн намыҫ һәм выждан, кеселек һәм кешелек кеүек нормалар менән йәнәш килә. Башҡорт халҡы өсөн батырлыҡ тыуған ерҙе һаҡлау һәм яҡлау, халыҡты ҡурсалау кеүек тәғлимәттәрҙән башлана. Батырлыҡ һәр осор өсөн дә актуаль күренеш булып ҡала. Беҙҙә батырлыҡты ир-егет, ат образдарына бәйле күҙаллайҙар.

Башҡорт халыҡ әкиәттәрендә батыр образын асыҡлау; балаларҙа үҙ халҡына һәм мәҙәниәтенә ҡарата мөхәббәт, ихтирам һәм ғорурлыҡ тәрбиәләү; йәш башҡорт быуында башҡорт халыҡ әкиәттәренә һөйөү һәм ҡыҙыҡһыныу уятыу; балаларҙа башҡорт халыҡ әкиәттәренең мәғәнәһен, идеяларын тыңлай һәм аңлай белеүҙе тәрбиәләү.

Әкиәттәр – халыҡ ижадының бик боронғо һәм киң таралған жанры. Халыҡ араһында уны «ҡарһүҙ» тип тә йөрөтәләр. Ул ҡарттарҙан ҡалған «аҡыллы һүҙ» тигәнде аңлата. Ғәҙәттә, «борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер әбей менән бабай» тип башлана. Йөкмәткеһенә ҡарап, башҡорт халыҡ әкиәттәре өс төркөмгә бүленә: тылсымлы, тормош-көнкүреш, хайуандар һәм батырҙар тураһындағы әкиәттәр.

Башҡорт халыҡ әкиәттәрендә иң сағыу һәм әүҙем ҡатнашыусы образдарҙың береһе – ул батыр. Ғөмүмән, уларҙы төп образ, тип әйтергә лә мөмкин.

Мин үҙем был эштә дүрт әкиәтте сағыштырҙым.

## Аҡъял батыр әкиәте

“Аҡъял батыр” әкиәтендә өс батыр бар, әммә төп герой - Аҡъял батыр. Урман батыр һәм Тау батыр, Аҡъял батыр образын асыҡлап килә тип әйтергә була. Әммә улар ҙә батыр итеп һүрәтләнгән. Был әкиәттең төп мәғәнәһе - ысын дуҫлыҡ һәм хыянат, шулай уҡ яуыз көстәргә һәм кешелекһеҙ бәндәләргә ҡаршы көрәшеүсе геройҙарҙың нисек итеп идеаллаштырылыуын был әҫәр асыҡлай.

Аҡъял батыр – оҙон ҡуңыр сәсле егет. Был герой әкиәт башынан уҡ үҙен ғәҙел һәм изгелек яҡлаусы кеше итеп күрһәтә. Ата-әсәһе яҡты донъянан киткәс ул бер үҙе тороп ҡала һәм халык нисек көн итә икәнен күреп, белер өсөн ил гиҙергә була. Иң беренсе уның юлына Тау батыр осрай, һуңынан – Урман батыр.

Тау батыр – бер тауҙы икенсе урынға күсерә. Урман батыр – урман ҡуйырып киткән урындарҙан ағастарҙы күсереп ултырта.

Был ике батырға алдашыу һәм ҡурҡыу хас икәнен иң беренсе беҙ иргәйел ҡарт менән осрашыу ваҡытында күрәбеҙ. Улар кәмһетелеүҙән һәм хурлыҡтан ҡурҡып, яуыз иргәйел ҡарт барлығы тураһында Аҡъял батырға һөйләмәйҙәр. Һуңынан, Аҡъял батырҙы ер аҫтында ҡалдырып, ул үҙ көсө менән ярлылар өсөн яулаған байлығын, Урман һәм Тау батырҙар үҙ итмәксе булалар.

Шулай итеп, әкиәт һуңында Аҡъял батыр ҡуркыу белмәгән, ғорур кеше булып ҡала һәм дә ул уҙенең батырығы арҡаһында бөйөк данға һәм ихтирамға лайыҡ була. Ә Урман һәм Тау батырҙар көнләшеү, яуызлыҡ менән үҙҙәрен хурлайҙар. Аҡъял батыр үлтерер тип ҡурҡып ҡына, улар үҙгәрергә риза булалар: Тау батыр, тауҙарҙың бөтә байлыҡтарын табып, кешеләргә бүләк итер, ә Урман батыр, үҙенең көсөн аямяйынса, кешеләр рәхәт йәшәһендәр өсөн, урмандар үҫтерер, баҡсалар ултыртыр...

## Урал батыр әкиәте

“Урал батыр” әкиәтендә лә барлыҡ кешелек сифаттарының төрлөлөгөн күҙәтә алабыҙ: Шүлгән батыр – кеше һүҙенә ышанып, атаһының әйткәнен тыңламай, ҡомһоҙлоҡ арҡаһында үҙе үҙенең башына етә; ә Урал батыр образы был әкиәттә кешене тәбиғәттең иң көслө бөйөк заты, төрлө яуыз көстәрҙе еңеп сығыр, донъяла ғәҙеллек, ирек, иркенлек урынлаштыра торған ҡеүәт эйәһе итеп күрһәтә.

Урал батыр образы яҡшылыҡтың бер өлгөһө итеп күрһәтелә, ағаһы Шүлгән яманлыҡтың ғибрәтле бер һыны итеп бирелә. Урал атаһының һүҙен тота, үҙендә тик яҡшылыҡ ҡына тәрбиәләй, ә ағаһы Шүлгән үҙ һүҙле, тиҫкәре булып яуыз көстәр менән дуҫлаша.

Урал – бик көслө батыр. Уның көсөнә бер ниндәй аждаһалар ҙа, дейеүҙәр ҙә ҡаршы тора алмай. Ул ата-әсәһен тыңлай, аҡһаҡалдарҙың кәңәшенә ҡолаҡ һала. Урал батыр ғәҙеллекте, хаҡлыҡты яҡлай. Ул кешеләргә ирек, бәхет килтерә. Ер-һыуҙың, кешеләрҙең үлемһеҙлеге өсөн үҙен ҡорбан итеп, тереклек һыуын тирә-йүнгә бөркә. Уның бөтә тырышлығы кешеләргә тик изгелек эшләргә арналған.

**Оморҙаҡ батыр әкиәте**

Был әкиәттә Оморҙаҡ батыр, уның улы һәм ейәне хаҡында һүҙ бара, улар барыһы ла батыр итеп асыҡлана. Оморҙаҡ батыр образынан башлап, уның ейәненә тиклем беҙ батырҙарҙың көс үҫешен күҙәтәбеҙ.

Оморҙаҡ үҙ ғаиләһендә үҫмәй, ә бер байҙа малайлыҡта бала сағын үткәрә. Егет булып үҫеп еткәс, батша ойоштороған байрамда, батшаның иң көслө бәһлеүәнен еңеп, батша ҡыҙын кәләш итеп алып, батша булып китә. Уның улы, аждаһаны көрәштә еңеп, күрше батшалыҡтағы батшаның батырын еңеп, шулай уҡ, батша ҡыҙына өйләнеп, батша булып китә. Ә инде Оморҙаҡтың ейәне, дейеүҙәрҙең батшаһы булып китә. Шулай итеп, был әкиәт, беренсенән - яҡшылыҡ һәр ваҡыт донъяла өҫтөнлөк итә икәнлеген күрһәтә. Кеше хатта дейеүҙәр батшаһы була ала. Икенсенән, көс-ҡеүәт быуындан быуынға күсеп, артып килә. Бер ғаиләнән башланып, был көс-ҡеүәт халыҡ көсөнө, уның берҙәмлегенә әүерелә. Шулай уҡ, был әкиәттә кесене идеаллаштырыу ысулы күренә,- ул менән ейәндәрҙең ата һәм олатайҙан көслөрәк булып сығыуы асылда эстетик законға бәйләнә.

**«Ҡырҡатар батыр» әкиәте**

Был әкиәт боронғо ғөрөф-ғәҙәттәрҙе сағылдыра. Ҡырҡатар кәләш алған өсөн, кешеләр уны күралмаҫ булалар. Батыр түҙмәй һәм ҡатынын алып, бер йылға буйында, ырыуҙан тыш, икеһе генә йәшәй башлайҙар.

Был дәүерҙә бер ырыу ирҙәре икенсе ырыуҙағы ҡатын-ҡыҙҙар менән генә никахлаша алған. Бер ырыуҙа булған ҡатындар һәм ирҙәр айырым тороп булғандар. Ҡырҡатар был йоланы боҙа. Әммә ошо тәүтормош-община көнкүрешендә ҡанунлашҡан ғөрөфкә үҙ ихтыярын ҡаршы ҡуйып, ул рухи батырлыҡ күрһәтә. Тап ошо ҡылығы арҡаһында Ҡырҡатар ырыу коллективында ғәҙәттән тыш шәхес булып алға баҫа.

Ырыу алдында үҙ ҡарашын күрһәтә алһа ла, ҡанға һеңгән ғәҙәттәрҙән ул аша сыға алмай һәм ҡатыны менән бер өйҙә тормайҙар. Улар һыу буйында ҡара-ҡаршы һалынған ике өйҙә йәшәйҙәр.Ҡырҡатар батыр үҙе теләгәнсә йәшәмәксе, әммә тормошта тамыр йәйгән ғөрөфтәрҙән ҡасып ҡына ҡотолоп булмай икәнен ул яҡшы аңлай. Был образ аша беҙ элекке тормошта иҫке ғөрөф-ғәҙәттәр яңы ҡараштар, ҡаршылыҡтар менән алмашына башлауын күрәбеҙ.

Батырҙар тураһында әкиәттәрҙә персонаждар ҡапма-ҡаршы ҡуйылып, ике төргә бүленә, сюжет улар араһындағы бәхәскә ҡарата ҡорола.

Әкиәт батыры оло маҡсаттар өсөн тыуа. Уның тыумышы ла, бала сағы ла һис ғәҙәттәгесә түгел, ә серле һәм мөғжизәле. Йыл үҫәһен ай үҫкән, ай үҫәһен көн үҫкән батырҙар, үҫмер саҡтарынан уҡ үҙҙәренең иҫ киткес ғәйрәтле булыуҙарын күрһәтәләр. Батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙең айырмалы һыҙаттары булып батырҙарҙың серле-мөғжизәле тыуыуҙары, уларҙың ғәҙәттән тыш бала саҡтары, илгә афәт алып килеүсе яуыз көстәргә ҡаршы тороуҙары, илдә тыныслыҡ һәм ғәҙеллек урынлаштырыуҙары тора.

Аҡъял батыр, Урал батыр һәм башҡа әкиәт батырҙары береһе лә ҙур данға, бөйөклөккә ирешеүҙе маҡсат итеп ҡуймағандар.

Әкиәт батырҙары ғәҙәттә ҡалаларҙы һәм халыҡты аждаһа, иргәйел, дейеү ҡоллоғонан ирекккә сығаралар, дошман яуын тар-мар итәләр, яуыз батшаларҙы батшалыҡтан ҡолаталар, юғалған ҡатын-ҡыҙҙарҙы, малдарҙы табалар. Иң мөһиме шуға иғтибар итергә кәрәктер: батыр ниндәй генә маҡсат менән ата йортонан сығып китмәһен, әкиәт аҙағында тейешле ҡатын табып, ғаилә ҡороп, бәхетле тормош күрә, йә иһә унан һуң бөтмәҫ даны ҡала.

Хәҙерге фольклористикала, батырҙар әкиәте, тылсымлы әкиәт кеүек үк, тәүтормош община йәмғиәтенең тарҡалыу осоронда тамырлана. Был ырыу коллективынан көслөрәк характерлы айырым шәхестәр бүленеп сыға башлауға, уларҙың үҙаңдары үҫеү процесына, яңы бурыстарға һәм теләктәргә бәйләнгән. Һөҙөмтәлә, әкиәт батыры ғәҙәттән тыш көскә эйә булған кешенең идеаллаштырылған образынанан килеп сыға. Батырҙар әкиәтендә герой шәхесе, уның үҙенең мөмкинлектәре идеаллаштырыла.

Батырҙар әкиәтендә конфликт мәсьәләһе лә геройҙың, төрлө мифик заттар йөҙөндә дөйөмләштерелгән тәбиғәт көстәренә, кешенең үҙ иркен тотҡарлап торған, социаль үҫештәре һәм талаптары менән тап килмәгән ғәҙәттәр ҡаршы сығыуына бәйләнгән.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Аслаев Т.Х., Атнағолова С. В Әкиәттәр – Өфө: Башҡортостан Китап нәшриәте, 1996. – 320 бит.
2. Зарипов Н.Т Йәшәгән, ти, батырҙар. Башҡорт халыҡ әкиәттәре – Өфө: Башҡортостан Китап нәшриәте, 1990. – 536 бит.


© Әминева Р. Х., Әлибаев З.А., 2023

**УДК 821**

*Әминова А.Ф., студент*
*Ғилми етәксеһе: Әлибаев З.А., филол. ф. канд., доц.*
*М. Акмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

## ИГЛИН РАЙОНЫ ТАУ АУЫЛЫ ДИАЛЕКТЫ

**Аннотация.** Диалект – это разновидность языка, которая распространена на определённой местности. Данная статья посвящена изучению диалекта Иглинского района села Тау. Изучены фонетические особенности разговорной речи села Тау. В качестве примеров автор привел оригинальные тексты, показывающие особенности речи местных жителей. Автор также сравнил диалектные и литературные слова.

**Annotation.** A dialect is a type of language that is common in a certain area. This article is devoted to the study of the dialect of the Iglinsky district of the village

of Tau. The phonetic features of the colloquial speech of the village of Tau have been studied. As examples, the author cited original texts showing the peculiarities of the speech of local residents. The author also compared dialect and literary words.

**Ключевые слова:** диалект, речь, фонетические особенности диалекта, говор.

**Key words:** dialect, speech, phonetic features of dialect, dialect.

Тау – бик боронғо ауыл. Профессорҙар билдәләүенсә, 1740 йылдарға тиклем ауыл Кәмбрәк тип аталған. Кәмбрәк ауылы халҡы Ләмәҙ йылғаһы ярында йәшәгән, шуға күрә ауылды һәр яҙ һайын һыу баҫҡан. Был бәләнән ҡотолор өсөн, ауыл халҡы тау башына йәшәргә күскән. 1764 йылдан алып Кәмбрәк ауылы архивтарҙа Тау тип йөрөтөлә башлаған.

Тау ауылы халҡы Әйле ырыуына инә. Улар үҙҙәренең алсаҡлығы, ябайлығы, ҡунаҡсыллығы менән айырылып торалар. Ололар менән һөйләшкәндә әңгәмәләремде яҙып барҙым. Мәҫәлән, 1934 йылғы Наил бабайым ауыл тураһында түбәндәгеләрҙе һөйләне: (бабайымдың телен үҙгәртмәй яҙам) «Был ауылта ситтән килеп йәшәгәннәр ҙә бар. Ауыл халҡы умарта менән шөғөлләнә. Бәрәңке, емеш-еләк, йәшелсә утыртабыҙ. Байтаҡ халыҡ мал тота. Ауылыбыҙ зурая, яңы урамнар барлыҡҡа килә. «Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!», «Һабантуй», «Ҡарға бутҡаһы» кеүек байрамнар үткәрелә. Ауылта башҡортлар, татарлар, урыҫлар ҙа бар. Килен булып та төшәләр, күрше Мына Гара ауылынан та күстеләр. Ул ауыл бик күптәнке түгел, башҡортларҙан урыҫлар ер һатып алғаннар. Башҡортлар урыҫларға: «Мына һеҙгә гора», – тип күрһәткәннәр».

80 йәшлек Һарунов Илтүзәр бабай ҙа ауыл халҡы тураһында бына нимәләр һөйләне: «Ауыл халҡы мынта Мәсетле районы яғынан килеп утырыға тейеш. Хәҙерге гәзитләрҙә Салауат Юлаевны, йәнәһе мынтағы Тәкәй ауылынта тыуған, тип яҙалар. Был дөрөҫ түгел. Беҙнең ата- бабаларыбыҙ аларны тиргәрләр иҙе.» Илтүзәр бабайҙың әле йәшәгән йорто 1916 йылда һалынған. Өй бүрәнәһенең бер ерендә «Казакская белая гвардия» тигән яҙыу бар.

«Мин үҙем бөтөннәй икенсе ауылта тыуғанмын. 1937 йылта әтәйемне ҡулға алғас, ошо йортҡа нәнәйем менән күсеп килгәнбеҙ. Шунан бирле ошонта йәшәйем. Нәнәйем һөйләүе буйынса, иң беренсе мынта аҡлар килгән. Алар бай булған, нәнәйҙән әпәй һалтырғаннар. Балалар күп булған, алар күпме әпәй алһалар ҙа аҡлар асыуланмағаннар. Аҙаҡ быларны ҡыуып, ҡыҙыллар килеп еткән. Ҡыҙыллар ярлы-ябаға халыҡтан булған бит инте. Тупый ғына әпәй алһалар ҙа, шул кешене үлтергәнсе туҡмағаннар», –- тип һүҙен тамамланы әңгәмәсем.

Артабан мин Тау һөйләшенең фонетик үҙенсәлектәрен өйрәндем.

Һөйләштең сиге **нт, ңт, мт, лт, нк, ңк, мҡ, мк** диссимилятив өн ҡушылмаларына ҡарап билдәләнә.

**Л, м, н, ң** талғын тартынҡыларынан һуң яңғырау **д** урынына **т** ҡулланыла:

1. Һүҙ менән ялғау араһында: *бынта (бында урынына), ауылта – ауылда, тамты – тамды һ.б.*

2. Һүҙ менән киҫәксә араһында: *һин тә, мин тә, ул та, барайалмағантаһа – бара алмаған дабаһа.*

3. Һүҙҙәрҙең нигеҙендә һәм ҡатмарлы ялғауларҙа: *ҡонтоҙ – ҡондоҙ, юлташ – юлдаш, өнтәшеү – өндәшеү.*

**М, н, ң** талғын тартынҡыларынан һуң **ғ** һәм **г** урынына **ҡ** һәм **к** килә:

1. Һүҙ менән киҫәксә араһында: *һин кенә – һин генә, аҫтан ҡына, аҫтан ғына.*

2. Һүҙҙәрҙең нигеҙендә һәм ҡатмарлы ялғауларҙа: *ямҡыр – ямғыр, сәңкелтәк – сәңгелдәк, еңкә – еңгә һ.б.*

Ғөмүмән, диссимилятив өн ҡушылмалары – боронғолоҡ ҡалдығы. Улар Орхон–Енисей яҙмаларында ла осрайҙар. Тау һөйләше **һ–ҫ** өндәрен ҡулланыу буйынса әҙәби телдән ныҡ айырылмай. Тик һүҙ уртаһында ҫ ҡулланылыусан. Мәҫәлән, *туҡҫан – туҡһан, һарымҫаҡ – һарымһаҡ, турҫайыу – турһайыу.*

Ҡайһы бер һүҙҙәрҙең беренсе ижегендә **о** урынына **у** ҡулланыла: *ҡумкан,ҡумаҡ,ҡумартҡы һ.б.*

Һандарҙың яҙылыштары ла бик үҙенсәлекле: *еҙе, еде – ете, ун еде – ун ете, едмеш – етмеш.*

Һүҙ уртаһында көньяҡ–көнсығыш һөйләштәрҙәге кеүек **ңғ/нг** урынына ң килә: *һаңрау, яңрау, ҡуңыр.*

**М, г** өндәренән башланған ялғауҙар ҡушылғанда, ҡылым тамырының аҙағындағы л төшөп ҡала*: һа(л)ған, ҡа(л)ған һ.б.*

Ҡайһы бер һүҙҙәр фонетик варианттар бирәләр: *мәшкәк – бәшмәк, марйа – мәрйә, йылай – илай, үрәнә – өйрәнә һ.б.*

Ауылым халҡы һөйләшендә түбәндәге морфологик үҙенсәлектәр билдәләнем.

Исемдең үҙгәртеүсе ялғауҙары түбәндәгесә бирелә: *башҡортлар – башҡорттар, атлар – аттар, малайлар – малайҙар, ҡыҙлар – ҡыҙҙар, халыҡлар – халыҡтар һ.б.* Мәҫәлән, әбейем Гөлирә Әхмәт ҡыҙының биргән мәғлүмәттәрендә был асыҡ сағыла:

*«Малайлар-һалайлар, сүплектәге ҡалайлар,*

*Ҡыҙлар-быҙлар, һауаҙағы йондоҙлар».*

Иркәләү-кесерәйтеү ялғауҙарынан **-ҡай, -сай, -саҡ, -анай һ.б.** ҡулланыла: *сыбарҡай, күксәй, ҡолонҡай, аҡанай.*

Күрһәтеү һәм берлектәге зат алмаштары төбәү килештәге **-ныңа, (-неңә һәм -ңа) ңә** ялғауҙарын ҡабул итәләр: *минеңсә, аныңа(аңа, мыныңа), мыңа, шуныңа/шуңа.*

Башҡа төрлө алмаштарҙан шуларҙы күрһәтергә мөмкин*: һәр ҡайһыһы, әлләмә (әллә нимә), әллә нинтәй, әлләмәкәй (әллә нәмәкәй), берәй кем, берәй ҡалай, берәй нисек һис нәмәкәй.*

Һорау киҫәксәһе киң һуҙынҡылар менән ҡулланыуы мөмкин: *ҡайтаңмы, киләңме, йөрөйөңмө.*

Ололар менән һөйләшкән ваҡытта бик күп терминдар яҙып алдым, уларҙың лексик үҙенсәлектәре бик ҡыҙыҡлы. Йәмле Ләмәҙ йылғаһы буйында йәшәгән халыҡ элек-электән малсылыҡ, ҡортсолоҡ, балыҡсылыҡ менән шөғөлләнгәнлектән, ошо хужалыҡтарға бәйле терминдар үҫешкән. Шуларҙың ҡайһы берҙәре менән таныштырып китәм.

| **Диалект** | **Әҙәби тел** |
|---|---|
| Абзый, абый | Ағай |
| Әннә, инәй | Әсәй |
| Әттә, әтәй | Атай |
| Түтәй | Апай |
| Еңкә | Еңгә |
| Әбей | Ҡәйнә |
| Бабай | Ҡайны |
| Нәнәй | Өләсәй |
| Ҡарттай | Олатай |
| Ала һыйыр | Сыбар һыйыр |
| Ҡыҙғылт ат | Ерән бейә (ат) |
| Дүңгәк айыу | Бәләкәй айыу |
| Дәү айыу | Ҙур айыу |
| Ташбаҡа | Гөбөргәйел |
| Әрмәнде | Тәлмәрйен |
| Ҡолоҡай, ҡолонсаҡ | Ҡолон |
| Көтөк | Эт балаһы |
| Ҡорған | Шаршау |
| Мендәр | Яҫтыҡ |
| Утырғыс | Ултырғыс |
| Һике | Карауат |
| Үрҙәк | Өйрәк |
| Ҡаҙлар | Ҡаҙҙар |
| Сепешләр | Себештәр |
| Әпәй | Икмәк |
| Тупый икмәк | Бәләкәй икмәк |
| Асытҡы | Әсе икмәк |
| Гөмбә | Ҡарама ағастарында үҫкән бәшмәк |
| Тупар еләге | Ер еләге |
| Күкәй | Йомортҡа |
| Бәрәңке, бәрәңге | Картуф |
| Һыуған, çуған | Һуған |
| Һарымçаҡ | Һарымһаҡ |
| Сөгөндөр | Сөгөлдөр |

Ауылым халҡы һөйләшен өйрәнеү минең өсөн бик ҡыҙыҡлы эш булды. Үҙем өсөн күп яңы асыштар таптым. Минең уйлауымса, башҡорт кешеһе ниндәй генә диалектта һөйләшһә лә, ул мотлаҡ матур әҙәби телен дә белергә тейеш.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Тикеев Ф. С., Старухина В. Г. Край родной, Иглинский – 2-е изд., доп. – Уфа: Гилем, 2009. – 320 с.
2. Зинуров Р. Н., Миниханов И. И. Верхние, Средние и Нижние Лемезы – история, родословные, судьбы... (XVIII – XX века) – СПб: Сатори, 2021. – 343 с.


© Әминова А. А., Әлибаев З.А., 2023

**УДК 821.512.141**


*Әхмәтйәнова Л.А., студент*
*Научный руководитель: Нәбиуллина Г.М., филол. ф. канд., доц.*
*М.Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*


## БӨГӨНГӨ КӨНДӘ РУХИ-ӘХЛАҠИ ТӘРБИӘ БИРЕҮҘЕҢ РОЛЕ


**Аннотация:** В статье затрагивается проблема духовно-нравственного воспитания в условиях образовательного учреждения. Особое внимание уделено законам и программам в сфере образования, которые трактуют необходимость воспитания личности. Представлены примеры духовно-нравственного воспитания на уроках башкирской литературы по произведениям Н. Гаитбаева.

**Annotation:** This study aims to investigate the role of the problem of spiritual and moral education in an educational institution. Particular attention is paid to the laws and programs in the field of education, which interpret the need to educate the individual. Examples of spiritual and moral education at the lessons of Bashkir literature based on the works of N. Gaitbaev are presented.



**Ключевые слова:** духовно-нравственное воспитание, ценности, идеалы, Н. Гаитбаев.

**Key words:** spiritual and moral education, values, ideals, N. Gaitbaev.


Бөгөнгө көндә рухи-әхлаҡи тәрбиә биреү иң мөһим мәсьәлә булып тора. Ул XXI быуаттағы актуаль проблемаларҙың береһе, сөнки хәҙерге донъяла изгелек менән яуызлыҡ төшөнсәләренең сиктәре юйылған, материаль байлыҡ ысын рухи кимәттәрҙән өҫтөнлөк итә. Йәмғиәт алдында «нисек юғалған быуынды үҫтермәҫкә» тигән мәсьәлә тыуа. Был мәсьәләне хәл итеү күбеһенсә уҡытыусының эшмәкәрлегенән тора.

Йәмғиәттең прогрессив үҫеше, халыҡтың матди яҡтан етешлеге менән генә түгел, тәү сиратта, уның рухи үҫеше менән бәйле. Бының өсөн үҫеп килгән быуынды әхлаҡи яҡтан тәрбиәү, уның әхлаҡи аңын һәм әхлаҡи тәртибен формалаштырыу ҙур әһәмиәткә эйә. Шуға күрә, яңы быуын федераль дәүләт белем биреү стандарттары уҡыу йорттары алдына: үҙ ҡарашы һәм фекере

булған, үҙ Ватанын һөйгән, кешелекле йәмғиәт төҙөргә ынтылыусы шәхестәр тәрбиәләүҙе иң беренсе бурыстар рәтенә ҡуя.

«Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында»ғы закон менән билдәләнеүенсә, «белем биреү йөкмәткеһе раса, милли, этник, дин, һәм социаль урын биләгәненә ҡарамаҫтан кеше араһында, халыҡ араһында үҙ-ара аңлашыуға һәм хеҙмәттәшлеккә булышлыҡ итергә, донъяға ҡараштың төрлөлөгөн иҫәпкә алырға, уҡыусыларҙың үҙ фекерен һәм инаныуҙарын ирекле һайлау хоҡуғын тормошҡа ашырыуға булышлыҡ итергә, ғаиләлә һәм йәмғиәттә ҡабул ителгән рухи-әхлаҡи һәм социомәҙәни ҡиммәттәргә ярашлы һәр кешенең һәләттәрен үҫтерергә һәм уның шәхесен формалаштырырға тейеш«» [1, 12]. Шулай итеп, Рәсәй граждандарының рухи-әхлаҡи үҫеше хәҙерге мәғариф системаһының төп маҡсаты булып тора һәм мәғариф өсөн социаль заказға эйә [4, 13].

Дөйөм белем биреү мәктәптәрендә уҡыусыларға рухи һәм әхлаҡи яҡтан тәрбиә биреүҙе ойоштороу системаһының хоҡуҡи һәм методологик нигеҙҙәре: «Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында»ғы һәм «Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында»ғы закондары, Яңы быуын федераль дөйөм белем биреү стандарттары, «Рәсәй граждандарын рухи һәм әхлаҡи яҡтан шәхес булараҡ үҫтереү һәм тәрбиәләү концепцияһы».

Был документтар ярашлы балаларҙа формалаштырыласаҡ рухи һәм әхлаҡи ҡиммәттәр:

- һәр кешенең ирке, хоҡуғы дәүләт тарафынан яҡлаулы булыуын, башҡарған эше, тәртибе өсөн башҡалар алдында яуаплы икәнлеген аңлатыу;
- ғаилә ҡиммәттәре тураһында төшөнсә биреү;
- Ватанға ҡарата һөйөү, тормошта уңышлы, бәхетле булыуға ынтылыш уятыу;
- тирә-яҡ мөхиткә, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш, вайымһыҙлыҡҡа, битарафлыҡҡа ҡаршы көрәш сифаттарын тәрбиәләү;
- әхлаҡи һәм рухи ҡиммәттәр тураһында төшөндөрөү, уларҙы үҙендә тәрбиәләү теләге тыуҙырыу.

Был ҡиммәттәрҙе белем биреү процесына индереү ҙур социаль әһиәмиәткә эйә. Сөнки хәҙерге заманда уларҙың юғалтыу тенденцияһы күҙәтелә. Хатта балаларҙың иң ҡамил өлгөләре юҡ. Әммә идеаль кеше образы әхлаҡи тәрбиә биреүҙә мөһим роль уйнай. Яҡшы өлгө кешеләргә һәр ваҡыт һәм һәр эштә бик кәрәк, шулай ҙа ул балаларҙың күңел олоғайыуыға булышлыҡ итә. «Иң ҡамил өлгө кеше тормошо һәм тәртибе өсөн йүнәлеш булып хеҙмәт итә, ул кешеләрҙең эшмәкәрлегенә етәкселек иткән юғары маҡсат булып тора» [2, 469]. Шуға күрә һәр дәүерҙә шағирҙар һәм яҙыусылар, ғалимдар һәм рәссамдар үҙҙәренең әҫәрҙәрендә әхлаҡи идеалдың төрлө образдарын, идеаль шәхесте, идеаль социаль төркөмдө, идеаль йәмғиәтте, үҙенсәлеге буйынса кешеләрҙең идеаль тәртибен сағылдыра.

Замана балаларына нисек лайыҡлы өлгө күрһәтеп була? Мәҫәлән, Н. Ғәйетбаевтың күпселек әҫәрҙәрендә идеаль кеше образы айырым-асыҡ күренмәй, йәғни, уҡыусылар яуызлыҡты һәм изгелекте үҙҙәре билдәләргә

тейеш. Был идеал тышҡы ҡиәфәт менән түгел, ә кешенең эске донъяһы менән бәйле. «Шуныһы ҡыуаныслы, Н. Ғәйетбаев геройҙарын схемаларға ғына ҡормай, ә сюжет ҡоролошонда уларҙың ысынбарлығын күрһәтә ала,» [8, 337] – тигән юлдар аша Әлибаев З.А авторҙың герой образдарына ҡылыҡһырлама бирә. Һәр кеше хаталанырға һәләтле, әммә кризис хәлдәрҙә кешенең ысын йөҙөн күрергә мөмкин. Шулай уҡ, Н. Ғәйетбаевтың «Иҫке һүҙҙәр» хикәйәһендә төп герой Зариф Мифтахович дуҫының ике йөҙлө булыуын күрә. Уны эше буйынса Өфөгә күсерәләр, уның урынына Зиннур Яруллин исемле баш инженерҙы ҡуялар. Төп геройға был егет оҡшай, ул уға үҙенең улына ҡараған һымаҡ ҡарай. Ысын күңелдән Ярулинға ярҙам итергә тырыша, әммә ул егеттең Зариф Мифтаховичҡа мөнөсәбәттәре икенсе төрлө. Башта автор Яруллиндың тышҡы ҡиәфәтен иҫ киткес итеп һүрәтләй: «Оҙон кәүҙәле, киң яурынлы, бөҙрәләнеп торған ҡуйы сәсле, мөләйем был йәш егет Зариф Мифтаховичҡа бер ҡарауҙа уҡ оҡшаны» [9, 166]. Төп геройға был егет идеал кеше һымаҡ күренә, ул уны маҡтай, өлгө итеп ҡуя. Зиннурҙың эске торошо хикәйәнең һуңғы биттәрендә күрәнә: «Әҙәплелек, ғәҙеллек... – Яруллин ялҡау ғына көлдө. – Беҙҙең заман өсөн иҫке һүҙҙәр улар... » [9, 173]. Шул ваҡытта Зариф Мифтахович Яруллинды икенсе күҙлек аша күрә, ул ҡәнәғәтһеҙлек кисерә: «... Яруллиндың ошондай икәненә бер йыл ышанмай йәшәне. Ләкин яңы аңланы: яңылышҡан ул... »[9, 174]. Шулай итеп, хикәйә буйы идеал образының боҙолоуы күренә.

Күренеүенсә, К.Д. Ушинскийҙың: «Тәрбиә биреүҙең төп бурысы – әхлаҡи йоғонто» [3, 125] тигән фекере Н. Ғәйетбай әҫәрҙәре геройҙары яҙмышы аша раҫлана.

В А. Сухомлинскийҙың (1988) шәхестең эмоциональ-әхлаҡи үҫеше педагогик идеяһындарында, Ш.А. Амонашвилиның (1996) гуманлы педагогикаһында, И.П. Ивановтың (1990) тәрбиәүи мөнәсәбәттәр теорияларында рухлылыҡ һәм әхлаҡ барлыҡҡа килеүе нигеҙ булып тора.

«Уҡытыу алдынан тәрбиә биреү алып барылһа ғына педагогик процесс яҡшы була ала, сөнки ул тыуҙырған рухи көстәр уҡыусыларҙың уҫешенә һәм шәхесен формалаштырыуна мөһим булған белемде аҙыҡ булараҡ туплаясаҡ» [6, 201]. Д.И. Менделеев әйткәненсә «Тәрбиәһеҙ белем – аҡылһыҙ кеше ҡулында ҡылыс» [5, 102].

Уҡыусыларҙың рухи-әхлаҡи үҫешендә башҡорт теле һәм әҙәбиәт дәрестәренең роле ҙур. Нәфис һүҙ баланың аңына ғына түгел, ә хис-тойғоларға ла, ҡылыҡтарға ла тәьҫир итә. «Һүҙ баланы ҡанатландыра, яҡшыраҡ булырға һәм яҡшы эш эшләргә теләк уята, кешеләрҙең мөнәсәбәттәрен аңларға, тәртип нормалары менән танышырға ярҙам итә» [2, 469].

Н. Ғәйетбаев әҫәрҙәрендә рухи ҡиммәтәрҙе һаҡлау, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү проблемалары өҫтөнлөк итә. Мәҫәлән, «Ҡапҡан» повесында ул тәбиғәт тураһында шундай юлдар яҙа: «Тәбиғәттең ҡанундарын боҙорға ярамай! Кем үҙен тәбиғәттән көслөрәк, аҡылдыраҡ һанай, кәрәкмәгән ергә тығыла, тәбиғәт уны язалай!» [7, 205].

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте – беҙҙең милләттең ғорурлығы һәм намыҫы, рухи-әхлаҡи тәрбиә биреүҙең нигеҙе.

Уҡытыу эшмәкәрлегендә рухи-әхлаҡи тәрбиә биреү уҡыусыны төрлө яҡлап үҫтереү өсөн айырылғыһыҙ бер өлөш булып тора. Был мәсьәләне тормошҡа ашырыуҙың бер ысулы – әҙәби әҫәрҙәр өйрәнеү, улар аша баланың эске һәм рухи донъяһына йоғонто яһау. Ғөмүмән, әҙәби әҫәрҙәр быуын-быуын кешеләр өсөн рухи-әхлаҡи ориентир булып тора. Сөнки улар кешелеккә хас иң яҡшы һыҙаттарҙы тәрбиәләргә тейешле: намыҫ, үҙеңде аңлау һәм тота белеү, хистәр тәрәнлеге, рухилыҡ, гражданлыҡ.

Шулай итеп, бөгөнгө көндә рухи-әхлаҡи тәрбиә биреүҙең роле ҙур. Хәҙерге заманда бөтә йәшәйеш өлкәләрендә, шул иҫәптән мәғариф өлкәһендә лә, бөйөк үҙгәрештәр күҙәтелә. Тормош ҡиммәттәрен, тамырҙарын һаҡлап ҡалыу өсөн, беҙгә белем менән берлектә киләһе быуынға рухи-әхлаҡи тәрбиә бирергә кәрәк.

**ЛИТЕРАТУРА**


1. Федеральный закон «Об образовании в Российской Федерации» от 29.12.2012 N 273-ФЗ (последняя редакция) // [Электронный ресурс]: Режим доступа: https://www.consultant.ru/document/cons_doc_LAW_140174/.
2. Агибалова, С. В. Духовно-нравственное воспитание на уроках русского языка и литературы как основа формирования общечеловеческих ценностей [Электронный ресурс]: // Молодой ученый. – 2015. – № 2 (82). – С. 468-471. – Режим доступа: https://moluch.ru/archive/82/14937/. – Дата обращения: 07.02.2023.
3. Ушинский К. Д. Человек как предмет воспитания. М.: Педагогика, 1973. – 350 с.
4. Адамова А.Г. Духовно-нравственное воспитание младших школьников во внеучебной деятельности на основе системного подхода [Текст]: дис. …канд.пед.наук – М., 2008. – 174 с.
5. Основы гуманной педагогики. В 20 кн. Кн. 1. Улыбка моя, где ты?/Шалва Амонашвили. – 4-е изд. – М.:Свет, 2017. – 304 с.
6. Основы гуманной педагогики. В 20 кн. Кн. 6. Педагогическая симфония. Ч. 3. Единство цели / Шалва Амонашвили. – 2-е изд. – М.: Свет, 2017. – 304 с.
7. Ғәйетбай Наил. Ҡапҡан: Мажаралы фантастик повестар. – Өфө: Башҡортостан “Китап” нәшриәте, 1993. – 208 бит.
8. Әлибаев З.А. Башҡорт романдарының поэтикаһы / Зәки Әлибаев. – Өфө: Китап, 2017. – 344 бит.
9. Ғәйетбаев Н.Ә. Буран. Повестар һәм хикәйәләр. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1983. – 200 бит.


© Әхмәтйәнова Л.А., Нәбиуллина Г.М., 2023

**УДК 821**

*Әхтәрйәнова А.М., студент*
*Ғилми етәксеһе: Әлибаев З.А., филол. ф. канд., доц.*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө к.*

# МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ ИЖАДЫНДА ҺУҒЫШ ТЕМАҺЫ

**Аннотация.** Данная статья посвящена изучению темы войны в творчестве великого башкирского писателя и поэта Мустая Карима. В качестве примеров анализируются стихи поэта на тему войны.

**Annotation.** This article is devoted to the study of the theme of war in the works of the great Bashkir writer and poet Mustai Karim. As examples, the poet's poems on the theme of war are analyzed.

**Ключевые слова:** Мустай Карим, поэзия, стихотворение, тема войны, творчество, сборник.

**Key words:** Mustai Karim, poetry, poem, theme of war, creativity, collection.

Мостафа Сафа улы Кәримов 1919 йылдың 20 октябрендә Келәш ауылында ябай крәҫтиән ғаиләһендә тыуа. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша, шул уҡ ваҡытта шиғырҙар ижад итә. Фронттан ҡайтҡас, Мостафа Кәримов үҙен Мостай Кәрим тип исемләй. Башҡортостандың бөйөк яҙыусыһы булып таныла.

Башҡорт әҙәбиәтенең классигы, Башҡортостандың халыҡ шағиры, С. Юлаев исемендәге премия лауреаты – М. Кәримдең ижадын монографик планда Ғайса Хөсәйенов («Мостай Кәрим») [6], Тимерғәли Килмөхәмәтов («Мостай Кәрим драматургияһы») [4], Әхмәт Сөләймәнов («Беҙҙең илдең йәме») [5], Ильяс Вәлиевтар («Педагогика Мустая Карима») [2] өйрәнә һәм фәнни конференцияларҙа, ваҡытлы матбуғатта, Рауил Бикбаевтың «Шағир һүҙе - шағир намыҫы» [1] йыйынтығында ла төплө тикшерелә.

Мостай Кәримдең ижады Бөйөк Ватан һуғышы осоронда ныҡлап формалаша. Шуға ла уның әҫәрҙәрендә был тема үҙәк урынды биләй. XXI быуатта ла халыҡ-ара һуғыш афәте һаман да беҙҙе һағалап тора.

Ер йөҙөндәге кешеләр һуғыш һәм тыныслыҡтың мәғәнәһен аңламайынса, үҙгәрештәр булмаясаҡ. Шуға ла Мостай Кәримдең фронт осорондағы шиғриәте бөгөнгө көндә лә актуаль.

Бөйөк Ватан һуғышы башланғас уҡ, Мостай Кәрим фронтҡа юллана. Һөйөклө тыуған иленә, яратҡан ата-әсәһенә һәм милләттәштәренә «Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!» шиғырын бағышлай:

Эйәрләне атай, ялын үреп,
Аҡбуҙаттың ярһыу, ап-ағын,
Әсәм һуҙа дәһшәт ҡылысының
Ҙур яуҙарҙа еңеп ҡайтҡанын.
Мин фронтҡа китәм, иптәштәр! [3]

Шағир уҡыусы менән ҡыҙыҡлы диалог алып бара һәм шуның аша һуғыш йылдарына ҡыҙыҡһыныу уята. Автор тыуған илен күтәрә, халҡыбыҙҙың еңелмәҫлегенә ышаныс һәм өмөт менән ҡарай. Тыуған яғына булған хис-тойғоларын бик эмоциональ һүрәтләй:

Ышан, атай, һин эйәрләп биргән
Аҡбуҙатым минең абынмаҫ,
Йәшең тамған был ҡылысты, әсәй,
Һуғарырмын дошман ҡанында. [3]

Шиғырҙың һуңғы юлдарында тыныс миҙгелдәр һәм киләсәк быуын тураһында һөйләй. Шиғыр-мөрәжәғәт формаһы бик ҡулай һәм был өндәшеүҙә киләсәккә өмөт, яҡты тормош яңғырай:

Атасаҡ таң, киләсәк яҙ өсөн,
Яҙын япраҡланыр гөл өсөн,
Тыуыр балам, йырланыр йыр өсөн,
Йыр өсөн һәм тыуған ер өсөн —
Мин фронтҡа китәм, иптәштәр! [3]

Был, буласаҡ бәхет символы, тыуған илебеҙҙең киләсәге булып тора.

Автор лексик ҡабатлау алымын ҡуллана: «Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!». Шулай итеп, автор ҡабатланып килгән һөйләмгә баҫым яһай, уға экспрессивлыҡ өҫтәй һәм бер үк ваҡытта тексҡа ритм бирә. Ҡабатлау, шиғри ижадта, фольклорҙа, телмәрҙә биҙәү алымы булараҡ киң ҡулланыла.

Шиғыр 1941 йылдың «Яҙғы тауыштар» шиғырҙар йыйынтығының икенсе баҫмаһына инә. «Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!» – шағирҙың һуғыш лирикаһының эскерһеҙлеген, ябайлығын һәм кешелеклеклелеген күрһәтә, ғөмүмән, хайран ҡалдыра.

Мостай Кәримдең шиғырҙары уйҙар һәм хис-тойоғолар төрлөлөгө, образлылыҡ һәм нескә лиризм, тыуған төйәккә һөйөү менән айырылып тора.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Бикбаев Р.Т. Шағир һүҙе - шағир намыҫы. – Өфө: Китап, 1997.-512 бит.
2. Валеев И.И. Педагогика Мустая Карима. –Уфа: Китап, 2003.-224 с.
3. Карим М.С. Әҫәрҙәр I том: шиғырҙар. – Өфө:Китап, 2009.-512 бит.
4. Килмөхәмәтов Т.А. Драматургия М.Карима. – Уфа: Китап, 1979.-196 с.
5. Сөләймәнов Ә.М. Беҙҙең илдең йәме.- Өфө: Китап, 2009.-190 бит
6. Хөсәйенов Ғ.Б. Мостай Кәрим.- Шәхес. Шағир. Драматург. Прозаик Өфө: 1994.-416 бит.


© Әхтәрйәнова А.М., Әлибаев З.А., 2023

**УДК 372.8**

*Юлбарисова Л.Ф., магистрант*
*Научный руководитель: Тагирова С.А.,канд. пед. наук., доц.*
*БГПУ им. М. Акмуллы, г. Уфа*

# ИГРОВЫЕ ОБУЧАЮЩИЕ ПЛАТФОРМЫ КАК АКТИВНЫЙ МЕТОД ОБУЧЕНИЯ КИТАЙСКОМУ ЯЗЫКУ

**Аннотация.** В данной статье показана роль игровых обучающих платформ на занятиях китайского языка. Так как игра – это эффективное средство активизации не только на младшем, но и на старшем этапе обучения, она очень часто используется для обучения деловому китайскому языку и терминологии. Цель такого обучения заключается в формировании и развитии навыков и умений делового общения средствами китайского языка, в подготовке студентов к будущей профессии.

**Abstract.** This article shows the role of game learning platforms in Chinese language classes. Since the game is an effective means of activation not only at the junior, but also at the senior stage of training, it is very often used to teach business Chinese and terminology. The purpose of such training is to form and develop the skills and abilities of business communication by means of the Chinese language, to prepare students for their future profession.

**Ключевые слова:** китайский язык, методы обучения, игровые платформы, карточки.

**Keywords:** Chinese language, teaching methods, gaming platforms, flashcards.

В настоящее время для обучения китайскому языку активно используются дистанционные методы обучения, такие, как средства интернет-технологий, веб 2.0. (блог, форум, чат, скайп и др.), мультимедийные средства. В настоящее время активно используют методы геймификации, как оффлайн, так и в онлайн обучение. Эти методы близки и понятны студентам, минимизируют напряжение и повышают мотивацию к процессу обучения. Среди таких средств можно отметить игровые обучающие платформы.

Игровые обучающие платформы на китайском языке – отличный способ выучить китайский язык. Подходят для изучения терминологической системы иностранного языка, помогают выучить новые слова в легкой доступной форме [5, 132].

Исследования показывают, что тестирование себя с помощью карточек более эффективно, чем перечитывание заметок. От математики до медицины и современных языков Quizlet используется учащимися более чем по 100 различным предметам. В 2005 году Эндрю Сазерленд создал учебное пособие, которое помогло ему успешно сдать словарный тест по французскому языку. Он справился. И поделился этим со своими друзьями. И теперь, более десяти

лет спустя, 60 миллионов студентов и учащихся ежемесячно используют Quizlet для любых целей, в том числе и для изучения китайского языка [3, 79].

Quizlet – это сайт, который даёт возможность отработать лексику с помощью карточек. Можно создавать/находить готовые наборы карточек, отправлять ссылки ученикам и отслеживать их результаты. Есть 5 вариантов отработки лексики и 3 игры. Также можно экспортировать лексику списком и использовать на других сайтах/в своих упражнениях [2, 150].

Онлайн-платформа Quizlet построена на основе цифровых flash-карточек, на которых преподаватель демонстрирует различные лексические единицы, выражения, фразы и/или предложения, и их русские эквиваленты.

Двухсторонние карточки со словами (flashcards) – проверенный опытом и временем инструмент для заучивания слов. Несмотря на свою простоту, он очень эффективен, гибок и удобен, с его помощью можно быстро набрать базовый словарный запас, выучив самые употребительные слова в языке. Особенно удобен этот инструмент становится в электронном виде. Перепробуя различные сервисы по заучиванию слов, можно сделать вывод, что на сегодня Quizlet – одна из самых удобных и функциональных [4, 67].

В Quizlet есть не только модули с лексическими единицами, но и сгенерированные тесты, тренировка правописания, работа в команде над решением общей задачи в виде интерактивных игр. Quizlet предлагает преподавателям и обучающимся шесть различных режимов обучения и игр, позволяя по-разному взаимодействовать с учебными карточками, приобретая разнообразный опыт[1, 98].

Режим Flashcards – основной режим обучения, который позволяет обучающимся просматривать каждую из обучающих карточек и переключаться между термином, понятием и определением. Можно перетасовывать их и просматривать в произвольном порядке, а также включать звук. В режиме обучения есть возможность отследить, какие ответы были ошибочными, а какие – правильными, чтобы лучше понять, на каких нужно сосредоточиться.

Режим Speller подходит для терминов, в которых имеет значение орфография, так как в этом режиме аудио используется для предоставления термина, произносимого вслух. В тестовом режиме будет предоставлен случайно сгенерированный тест, основанный на выбранном наборе флеш-карт, тему которого определяют до того, как начинают пользоваться программой Quizlet. В режиме Scatter можно сыграть в хронологическую игру с терминами на карточках, где их перетаскивают и сопоставляют с определениями. Наконец, существует режим «Космическая гонка», в котором участник вводит ответ, когда термины и определения движутся по экрану.

Преподаватели имеют доступ к дополнительному режиму игры под названием QuizletLive, который создан специально для классов. Перед тем как пользоваться приложением Quizlet в этом режиме, преподаватели предоставляется код соединения, чтобы все могли играть вместе. Обучающиеся определяются по командам, которые соревнуются друг с другом, чтобы

победить. QuizletLive поощряет точность и большую скорость, неправильные матчи требуют, чтобы команда начала все сначала. Этот игровой режим помогает развить навыки сотрудничества, общения и словарного запаса у обучающихся.

Преимущества онлайн-платформы Quizlet:

– Отслеживание прогресса активности студентов. Любой, кто обновился до пакета QuizletTeacher, имеет возможность отслеживать успехи обучающихся. Можно просматривать имена пользователей каждого человека, который изучил созданный набор.

– Вседоступность. Если у обучающихся есть ссылки на материалы курса на веб-сайте Quizlet, они могут самостоятельно учиться дома или использовать превосходный полнофункциональный мобильный веб-сайт Quizlet или бесплатное приложение, чтобы учиться на ходу.

– Использование для создания бумажных раздаточных материалов, флеш-карт или игровых материалов.

- Возможность создания групп обучающихся в сервисе и отслеживание успеваемости.

Недостатки онлайн-платформы Quizlet:

– Является дополнительным инструментом для изучения лексики.

– Однообразные формы тестов.

– Нет возможности практиковать произношение.

– Не все режимы есть в приложении для телефонной версии.

Таким образом, игровая платформа Quizlet имеет свои достоинства и недостатки. Тем не менее, ее можно эффективно использовать для развития у студентов интереса к изучению китайского языка и облегчения процесса усвоения китайской терминологии. То, что начиналось как простой инструмент, выросло в семь различных режимов обучения, инструменты, помогающие учителям получать максимальную отдачу от своих учеников, и мероприятия, помогающие классам учиться и веселиться вместе.

## ЛИТЕРАТУРА


1. Волков К.В. Современные методики обучения китайскому языку: анализ практического опыта // Международный журнал экспериментального образования. – 2017. – № 4-2. – С. 96-99
2. Гурулева Т.Л. Педагогические технологии интеграции иностранных студентов в образовательное пространство вуза (на примере студентов из КНР) // Высшее образование в России. – 2016. – №3. – С. 144-153.
3. Гурулева Т.Л., Радус Л.А. Педагогические технологии обучения иностранным языкам: интерактивные методы и информационные средства (из опыта работы кафедры дальневосточных языков) // Научно-методический бюллетень Военного университета МО РФ. – М.: ВУ, 2015. – С. 74-80.
4. Демина Н.А. Методика преподавания практического китайского языка. – М.: Вост. Лит., 2006. - 88 с.

5. Пассов Е.И. Концепция коммуникативного иноязычного образования (теория и ее реализация): методическое пособие. – СПб.: Златоуст, 2007. – 200 с.

©Юлбарисова Л.Ф., Тагирова С.А., 2023

**УДК 81**

*Юлдашева Д.Ю., аспирант*
*Научный руководитель: Хусаинова Л.М., д-р филол. наук, проф.*
*БГПУ им. М. Акмуллы, г. Уфа*

# БАШКИРСКАЯ ПОЭТИЧЕСКАЯ ОНОМАСТИКА

**Аннотация.** Данная статья посвящена изучению башкирской поэтической ономастики. Сделан обзор работ в области башкирской поэтической ономастики.

**Annotation.** This article is devoted to the study of Bashkir poetic onomastics. A review of works in the field of Bashkir poetic onomastics is made.

**Ключевые слова:** башкирский язык, ономастика, поэтическая ономастика.

**Key words:** bashkir language, onomastics, poetic onomastics.

Поэтическая ономастика является малоизученной темой в башкирском языкознании, литературе. Имена собственные являются неотъемлемым компонентом любого произведения. Каждое имя собственное несет в себе особую информацию, с помощью которой читатель воспринимает текст. С помощью имен собственных автор закладывает уникальный смысл в персонажа или место. Таким образом, имена собственные, используемые в произведениях башкирских авторов, несут уникальную информацию о башкирском народе, о его менталитете, верованиях, культуре.

Н.В. Подольская определяет термин «поэтическая ономастика» как «раздел ономастики, изучающий любые имена собственные (поэтонимы) в художественных литературных произведениях: принципы их создания, стиль, функционирование в тексте, восприятие читателем, а также мировоззрение и эстетические установки автора» [1, 54].

В данный момент поэтическая ономастика рассматривается как самостоятельная научная дисциплина, имеющая собственный объект исследования и собственные методы анализа. Она развивается совместно с поэтикой, лексикологией, стилистикой, семиотикой и лингвистикой текста [2, 198].

Башкирская ономастика сама по себе развивается достаточно активно. Известны труды Дж.Г. Киекбаева, З.Г. Ураксина, Р.З. Шакурова, Ф.Г. Хисамитдиновой, М.Г. Усмановой, Г.Х. Бухаровой и других ученых в данной

области. Однако исследований в области башкирской поэтической ономастике довольно мало. Рассмотрим некоторые из них.

Статья А. Ш. Султановой «История становления и развития башкирской поэтической ономастики» посвящена изучению истории становления поэтической ономастики на примере произведений известного башкирского поэта, писателя и драматурга М. Карима. Автор статьи определяет необходимость системного описания имен собственных в данных произведениях и отмечает, что онимическая лексика является носителем обширной информации исторического, этнографического, этнического, религиозного характера. Это происходит на фоне растущего интереса к лексическим традициям в целом, на фоне апелляций к этническим истокам в контексте возрождения родных языков и литератур.

Кроме того в статье проведен анализ работ ученых-лингвистов, сделан обзор истории и современного состояния изучения ономастики в башкирском языке, рассмотрены идея и содержание, значение имен собственных в произведении М. Карима «В ночь лунного затмения».

В данном исследовании предпринята первая попытка комплексного исследования имен собственных в произведениях с исторической, социальной и культурной точек зрения. Автор выявляет особенности использования собственных имен в произведениях М. Карима, их роль в создании художественных образов и отражении основных этапов в развитии башкирского языка [4].

Подводя итог, можно отметить, что М. Карим внес весомый вклад в развитие башкирской ономастики. Его произведения наполнены большим количеством ономастических единиц, сформированных под влиянием башкирского фольклора и литературы. Данное исследование полезно при изучении закономерностей развития системы башкирского языка, а также особенностей башкирской поэтической ономастики.

Следующим анализируемым трудом является исследование С.Р. Кудашевой и М.И. Карабаева «Поэтонимы в поэзии Шайхзады Бабича: семантика, структура и функции». В нем поэтонимы рассматриваются на примере творчества башкирского поэта Шайхзады Бабича. Авторы отмечают, что данная проблема актуальна в связи с недостаточной изученностью поэтонимов башкирского языка в художественном тексте. Авторы дают определение понятию «поэтоним», анализирует место имени собственного в художественном тексте, выделяют разряды поэтонимов в поэтическом ономастическом пространстве.

В статье также отмечено то, что поэтонимы в произведениях Ш.Бабича представляют собой систему, отражающую национальную картину мира. Примечательно, что Ш.Бабич использовал в творчестве традиционную тюркскую и арабо-персидскую антропонимию, особенно в стихотворениях-посвящениях. Авторы привели в пример такие имена, как Гульнур, Марьям, Салават [3].

Таким образом, можно утверждать, что имена собственные действительно выполняют особую роль в составлении образа героя произведения, они позволяют построить целостный и богатый сюжет, отражающий все тонкости, присущие определенному народу.

Творчество Ш. Бабича отличатся самобытностью, своеобразным национальным колоритом. Его произведения – отражение культуры башкирского народа. Изучение поэтонимов на материале произведений поэта имеет большую ценность для башкирской поэтической ономастики.

Таким образом, нами были проанализированы две статьи в области башкирской поэтической ономастики. Нужно отметить, что работ в этой области не так много, данная тема требует более активного изучения ввиду важной роли поэтической ономастики в составлении полной картины мира башкирского народа.

**ЛИТЕРАТУРА**

1. Подольская Н.В. Словарь русской ономастической терминологии. Изд. 2-е, перераб. и доп. / Н.В. Подольская – М.: Наука, 1988. – С. 152.
2. Сызранова Г.Ю. Ономастика: учебное пособие / Г. Ю. Сызранова; М-во образования и науки Российской Федерации, Тольяттинский гос. ун-т, Гуманитарно-пед. ин-т. – Тольятти : Изд-во ТГУ, 2013. – 247 с.
3. Кудашева С. Р., Карабаев М. И. Поэтонимы в поэзии Шайхзады Бабича: семантика, структура и функции. [Электронный ресурс] // – Режим доступа: ПОЭТОНИМЫ В ПОЭЗИИ ШАЙХЗАДЫ БАБИЧА: СЕМАНТИКА, СТРУКТУРА И ФУНКЦИИ – тема научной статьи по языкознанию и литературоведению читайте бесплатно текст научно-исследовательской работы в электронной библиотеке КиберЛенинка (cyberleninka.ru). – Дата обращения: 15.01.2023.
4. Султанова А. Ш. История становления и развития башкирской поэтической ономастики. [Электронный ресурс] // – Режим доступа: История становления и развития башкирской поэтической ономастики – тема научной статьи по языкознанию и литературоведению читайте бесплатно текст научно-исследовательской работы в электронной библиотеке КиберЛенинка (cyberleninka.ru) – Дата обращения: 15.01.2023.

© Юлдашева Д.Ю., Хусаинова Л.М., 2023

**УДК 821**

*Юнусбаева Г.И., студент*
*Ғилми етәксеһе: Әлибаев З.А., филол. ф. канд, доц.*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ,Өфө к.*

## БЫУЫНЫМ ШӨҒӨЛӨ – ҠОРТСОЛОҠ

**Аннотация.** В данной статье автор раскрывает акутальную проблему соверменности – проблему незнания молодежью своего рода, его происхождения. Автор доказывает свою точку зрения, приводя в пример историю своего рода.

**Annotation.** In this article, the author reveals the acute problem of modernity – the problem of ignorance by young people of their kind, its origin. The author proves his point of view by giving an example of the history of his kind.

**Ключевые слова.** «Малая» Родина, прадедушка, дедушка, прабабушка, бабушка, пчеловодство, отец, семья.

**Keywords**. «Small» Homeland, grandfather, grandfather, grandmother, grandmother, beekeeping, father, family.

Абруйын илдең юғары тотор,
Башкортостандың данын балҡытыр
Умартасының уңған ҡулдары,
Еребеҙ ҡото – башҡорт бал ҡорто!

Башҡорт халҡы борон-борондан ҡортсолоҡ менән шөғөлләнә.

Минең быуынымдың да төп шөғөлө булып ҡортсолоҡ килә. Был эш бик ауыр. Шуға ҡарамаҫтан, беҙ ғаиләбеҙ менән был һөнәрҙе ташламайбыҙ.

Ни өсөн мин был теманы һайланым? Теманың акуаллеге нимәлә? Хәҙерге вакытта, ғаилә тарихын өйрәнеү бик кәрәк һәм актуаль, тип уйлайым. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, әлеге заман кешеләренең күбеһе, үҙ ғаиләһенең тарихын, ата-бабаларын белмәйҙәр. Үҙенең илен, халҡын, туған-тыумасаларын хөрмәт иткән һәр кеше үҙенең шәжәрәһен белергә бурыслы, тип уйлайым. Шуға ла был мәҡәләлә нәҫел тармаҡтарын барларға булдым.

**Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ**

Һәр кешенең ҙур һәм бәләкәй тыуған иле була. Минең тыуған илемдең олоһо – Башкортостан, ә кесеһе хозур тәбиғәтле Һаҡмар буйында урынлашҡан Йомаш ауылы. Тыуған ауылымдың төрлө фән, сәнғәт, әҙәбиәт һәм башҡа өлкәләрҙә билдәлелек яулаған кешеләре күп.

Йомаш ауылында тыуып үҫкән Юнысбаев Рәфҡәт Вәли улы ауылыбыҙҙың иң тәжрибәле умартасыһы булып һанала. Ҡартатайым үҙ ғүмерендә бик күп эштәр башҡарып өлгөрә, 40 йыл колхозда эшләп, 13 йыл бал ҡорттарын үҫтерә. Юнысбаев Рәфҡәт Вәли улы 1937 йылдың 14 февралендә Баймаҡ районы Йомаш алыныда тыуып үҫә. Ғаиләһендә 9 бала була, тик, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында аслыҡтан улар дүртәүһе генә тороп ҡала: Мәғәфүр, Рабиғә, Шәфҡәт һәм Рәфҡәт. Ҡартатайымдың атаһын Юнысбаев Вәли ҡартты 1940 йылда һуғышҡа оҙаталар. Ләкин 1942

йылда «пропал без вести» тигән өсмөйөшлө хат килеп төшә. Әсәләре Фатима көндәр буйы колхозда һауынсы булып эшләй. «Хеҙмәт көнө өсөн бирелгән бер нисә генә грамм икмәкте яулыҡ осона төрөп кенә алып ҡайтып йөрөй торғайны» тип иҫләй ҡартатайым. Һуғыш бөткәс, ҡарт ҡәртәсәйем Фатима. бер үҙе балаларҙы үҫтерә алмағас, улы Шәфҡәтте Темәс балалар йортона алып барып ҡалдыра, ә Рабиғә исемле ҡыҙын 16 йәштән кейәүгә бирә.

Ҡартатайымдың бала сағы бик ауыр була. Үҫмер йәшендә Йомаш ауылының 7 йыллыҡ мәктәбен тамамлай һәм артабан Баймаҡ ҡалаһына тракторист һөнәренә уҡырға инә. Уҡыуҙы тамамлағас, тыуған ауылына ҡайтып 10 йыл тракторист һәм 7 йыл көтөүсе булып эшләй. Артабан тормош һуҡмаҡтары ҡартатайымды Юнысбаева Салиха Фәтхулла ҡыҙы менән бәйләй. (Ғаилә архифынан алынған мәғлүмәттәр)

**Минең ҡартәсәйем**.

Минең ҡартәсәйем Юнысбаева Салиха Фатхуллла ҡыҙы 1940 йылдың 17 ноябрендә Баймаҡ районы 1-се участка Торф ауылында ғаиләлә беренсе бала булып донъяға килгән. Атаһы Аралбаев Фатхулла Ғайнулла улы 1903 йылғы, Баймаҡ районы Ямаш ауылынан, ә әсәһе Сайфуллина Ҡәмәриә Айытбай ҡыҙы 1918 йылғы, Шырмай ауылынан. Улар өйләнешкәс, Торф ауылына торф ҡырҡыусы булып эшкә урынлашҡандар, ул торфты Баймаҡ ҡалаһында машзаводта утын урынына ҡулланғандар. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, һуғыш афәте Аралбаевтар ғаиләһен дә урап үтмәй. 1942 йылдың август айында ҡартәсәйемдең атаһы (ҡарт ҡартатайым) һуғышҡа алынған. 1944 йылдың авгусында ғаиләгә «Хәбәрһеҙ юғалды» ҡағыҙы килә...

«Атайымдың бер генә фотоһүрәте лә ҡалмаған. Әсәйемдең хәтерләүе буйынса олпат кәүҙәле, асыҡ йөҙлө булған ул. Атайым һуғышҡа алынған ваҡытта миңә ике йәш тә тулмай ҡалған, мин дә барам, тип илап тороп ҡалғанмын. Атайым һуғышҡа киткәс, өйөбөҙ, мал-тыуарыбыҙ янып киткән. Шунан Баймаҡҡа күсеп килгәнбеҙ, әсәйем райсоветтан эш һорап барған, иҙән йыуыусы булып эшкә урынлашҡан. Тутыя инәйемдә өйҙәш булып йәшәп киткәнбеҙ. Һуғыш бөтөп 1947 йылдарҙа хәбәрһеҙ юғалған атайым өсөн аҡсалата ярҙам бирелгән булған, шул аҡсаға Кәкреауылда яңы өй һалып ингәнбеҙ. Түңгәкле урындар, землянка ғына өйҙәр була торғайны ул заманда. Аҙаҡ әсәйемдең Күлйорттауҙа шахтала көрәк тотоп эшләгәнен хәтерләйем. 4-се класҡа тиклем Кәкреауылда уҡыным, өҫ һәм аяҡ кейеме булмағанлыҡтан, аслыҡ-яланғаслыҡ хөкөм һөргән осорҙа ҡыш миҙгелдәрендә уҡыуҙы туҡтатып, ҡара ергә аяҡ баҫҡас ҡына дауам итә торғайным. Атайлы балалар ғаиләһенә еңелерәк булғандыр инде, сөнки уларҙың етешерәк йәшәүен күреп үҫтем мин. Күрше ҡыҙға уйнарға ингәндә, бәләкәс кенә икмәк киҫәгенә ымһынып ҡарап торған саҡтарым иҫтә уйылып ҡалған». «Башланғыс класты тамамлағас, артабан уҡыуҙы Баймаҡ ҡалаһына йөрөп уҡый башланым, 8-се класты яҡшы тамамлағас, документарҙы Белорет ҡалаһына педагогия училищеһына ебәрҙем. Ләкин документтарым кире әйләнеп ҡайтманы»,- тип әсенеп хәтерләй ҡартәсәйем.

1963 йылда ҡәртәсәйем Йомаш аулылына оҙатылып килә. Балалар баҡсаһында хисапсы, ашханала ашнаҡсы, фермала һауынсы һымаҡ төрлө колхоз эштәрендә эшләргә тура килә. Артабан 1971 йылдар тирәһендә, ауылда Ғәлиәхмәт олатай ғына бал ҡорто тота торған булған, шул олатайҙан бер оя бал ҡорто һатып алып, шул шөғөл менән мауығып киттәләр. 1973 йылда ҡартатай эш һөнәрен һәм белемен арттырыу йәһәтенән Стәрлетамаҡ ҡалаһында умартасылыҡ һөнәрен үҙләштерә, артабан йәш ғаиләне хужалыҡ умартасылығына эшкә саҡыралар. 13 йылға яҡын улар ошонда эшләй. Ҡәртәсәйем ҡартатайымдың уң ҡулы була, бал ҡорттарын тәрбиәләүҙә лә, бал һығыуҙа ла хатта күс алыуҙа ла ул ҡартатайым менән бергә була. Һөҙөмтәле эшләгәндәр улар хатта 360 күскә тиклем бал ҡорттарын үрсеткән мәлдәре лә була.

13 йыл эшләү дәүерендә 7 тапҡыр «Район чемпионы» дәрәжәһендә булып, күп тапҡырҙар «Маҡтау ҡағыҙы» менән бүләкләнәләр. Мәскәүҙә ВДНХ күргәҙмәһендә ҡатнашыуында ҡартәсәйемдең менән ҡартатайымдың көсө әйтеп бөткөһөҙ, әлбиттә. Яҡшы хеҙмәттәре өсөн күп тапҡырҙар Сочи ҡалаһында, Янғантау ял йортонда юлланма менән ял итергә лә тура килә уларға. «Умартасылыҡта эшләгәндә пакет һанын 310-ға еткерә торғайныҡ»,- тип хәтерләй ҡартәсәйем. Мал-тыуар, ҡош-ҡорт ҡына аҫырап ҡалмай дәртле Юнысбаевтар ғаиләһе, йылҡы малы ла, йорт ҡуяндары ла, аҡ төлкөләр ҙә аҫырап ҡарай улар йәш саҡта.

Хатта йылы яҡта ғына үҫкән ҡарбуз да үҫтереүгә өлгәшәләр минең өсөн бик ҡәҙерле кешеләрем. Ҡартәсәйем илле, ә ҡартатайым алтмыш йәштә дингә баҫалар, икәүе лә хаж ҡылып ҡайталар, ауылдың ихтирамға лайыҡ, абруйлы хажи, хажиәһе булалар улар. Ҡәртәсәйемдең яратып башҡарған шөғөлдәре лә бихисап. Ҡул эштәренән ултырғыс түшәктәре бәйләй. Ағинәйҙәр түңәрәгендә йөрөгәндә милли күлдәк, камзул тегеп кейә, иҙеү, һаҡал, ҡашмауҙарын да үҙе эшләп ала,.Эргәһендәге ейәнсәрҙәренә лә төрлө бейеү күлдәктәре тегеп кейҙереп дәртләндереп ултыра. Гөл-сәскә үҫетерергә лә, шиғыр яҙырға ла бик ярата ҡартәсәйем.

Һандуғастар һайрай икән
Сүрт-сүрт итеп талдарҙа,
Һаҡмар буйына йәм биреп,
Тора икән улар ҙа.
Һаҡмар буйы йәмле була
Муйыл сәскә атҡанда.
Беҙ йыябыҙ муйылын
Күңелебеҙ тулғанса.

Ҡартатай менән ҡартәсәй ҡулға-ҡул тотоношып, 53 йыл бергә ғүмер итеп, алтын туйҙарын билдәләнеләр. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ҡартатайым 6 йыл элек мәрхүм булып ҡалды. Дүрт ҡыҙ һәм бер улға ғүмер биреп, уҡытып, оло тормош юлына сығарҙылар. Хәҙерге ваҡытта һәр ҡайһының үҙ ғаиләләре, балалары

бар. 15 ейән-ейәнсәрен, 6 бүлә-бүләсәләрен һөйөү бәхетенә эйә бөгөнгө көндә ҡартәсәйем. («Атайсал» газетаһынан статья №23 05.06.2020й.)

**Атанан күргән уҡ-юнған, әсәнән күргән-тун бескән**.

Хәҙерге көндә ата-әсәйҙән күреп үҫкән шөғөлдө улдары, минең атайым Илфат Рәфҡәт улы дауам итә. Ул 1975 йылдың 27 ғинуарында Йомаш ауылында тыуа. Атайым 4 йәшенән уҡ бал ҡорттары менән ҡыҙыҡһына. Ҡаратайым һөйләүҙәре буйынса, ҡартатайым умарта ҡараған ваҡытта, атайым«мин дә өрҙөртөшәм, ярҙам итешәм», – тип эргәһендә йөрөгән.

Мәктапте тамамлағас, Учалы ҡалаһына бухгалтер курсына уҡырға инә. Уҡып бөткәс, Йомаш ауылына ҡайтып председателдән бухгалтер эшенә эш һорай, ләкин атайымды Михайловкаға умартасылыҡ курсына уҡырға ебәрәләр.

Сөнки был ваҡытта ҡаратайым эштән сыҡкан була һәм уның урынына икенсе кеше эшләгән. Ул кеше бал тапшыра алмағас, ҡарататайымды кире ҡуйыуға уйлайҙар, ләкин ҡартатайым ризалашмаған. Шуның өсөндә атайымды бал ҡортосолыҡ курсына уҡырга ебәрәләр. Шулай итеп атайым 7 йыл колхозда бал ҡорттарын үҫтерә. Артабан атайым Октябрьский мәҙрәсәһендә уҡытыусы һөнәренә уҡып сығып, Баймаҡ ҡалаһында 3 йыл уҡытыусы булып эшләй. Шул ваҡытта ул әсәйем Юнысбаева Гөлшат Сафа ҡыҙы менән танышып өйләнешәләр. Улар ике ҡыҙ һәм бер улға ғүмер биреп үҫтерәләр. Әлеге ваҡытта атайым КФХ-ла глава булып эшләй, унан башҡа беҙ 35-40 оя бал ҡорттарын тотабыҙ. «Мәшәкәтле лә, яуаплы ла был эште яңғыҙ ғына алып барыу бик ауырға тура киләлер?» – тигән һорауыма, – «Төп ярҙамсыларым ҡатыным һәм балаларым», – тип яуапланы атайым. Әсәйем менән атайым ҡулға ҡул тотоношоп, күп тапҡыр конкурстарҙа ҡатнашып призлы урындар алып тора. 2017 йылда «Урал аръяғы» конкурсында 2-се урынға лайыҡ булдылар. 2018 йылда Өфө ҡалаһында үткәрелгән конкурста 3-сө урынды яуланылар. Тирә-яҡтарҙан килеп беҙҙең балды һатып алалар. Тимәк, яратҡан шөғөл ғаиләгә өҫтәлмә табыш сығанағы ла булып тора. («Йүнселдәр» Баймак ТВ 2015 йыл.)

**Быуындар сылбыры өҙөлмәһен.**

Миндә ғаилә шөғөлөнән һис тә тайпылмайым. Бала-саҡтан атайыма умарта ҡарашырға, күс тоторға, бал һығырға ярҙам итәм. Тағы ла балдың шифалы яғын өйрәнәм, төрлө шифалы эсемлектәр, дарыуҙар яһайым.

Шулай итеп, беҙҙең ғаиләне ҡортсолар династияһы тип тә атап була. Быға тиклем белмәгән яңы факттарҙы астым. Киләсәк быуын өсөн бик күп кәрәкле мәғлүмәттәр йыйҙым. Тарихта эҙен ҡалдырған, милләттең рухи байлыҡтарын киләсәк быуындарға тапшырыуҙа үҙ өлөшөн индергән ғаиләм менән сикһеҙ ғорурланам.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Юнусбаева Г.И. Атайсал // Һуғыш йылдары балалары -2020. -.№23.
2. Йүнселдәр Баймак ТВ -2015 йыл.
3. Ғаилә архивынан алынған мәғлүмәттәр.
4. Ҡәртәсәйемдең көндәлеге.


© Юнусбаева Г.И., Әлибаев З.А., 2023

**УДК 821**

*Янбаева И.И., студент*
*Ғилми етәксеһе: Әлибаев З.А., филол. ф. канд., доц.*
*М. Акмулла ис. БДПУ, Өфө к.*

# ШӘЖӘРӘ – ҒАИЛӘМ КӨҘГӨҺӨ

**Аннотация.** Статья посвящена родословной семьи Янбаевых. В генеалогическом дереве отражается история башкирского народа, быт и обиход предков. В научной статье описаны отличительные черты и особенности шежере семьи Янбаевых.

**Annotation.** The article is devoted to the genealogy of the Yanbayev family. The family tree reflects the history of the Bashkir people, the way of life and everyday life ancestors. The scientific article describes the distinctive features and peculiarities of the shezhere family of the Yanbaevs.

**Ключевые слова:** родословная, дерево, история, Янбаевы, архивные документы, башкирский народ, семья, отражение истории.

**Key words:** pedigree, tree, history, Yanbaevs, archival documents, Bashkir people, family, reflection of history.

Кеше, оло тормошҡа аяҡ баҫып, шәхес булараҡ үҫешә башлаған та үҙенең кем икәне тураһында уйлана башлай. Үҙ тамырҙары, ғаиләһенең тарихы ҡыҙыҡһындыра. Борон-боронда уҡ шәжәрә төҙөү – оло йола тип һаналған, ата-бабаларыбыҙ үҙ туғандары, йәшәү рәүеше тураһында күп мәғлүмттәр яҙып ҡалдырған. Хәҙерге заманда был изге йола айырыуса кәрәк. Сер түгел, фәнни-техник прогресс арҡаһында кеше үҙ ваҡытын күберәк интернет селтәрҙәрендә үткәрә, һөҙөмтәлә алыҫ туғандары менән генә түгел, хатта яҡындары менән дә аралашыу һирәгәйә. Быуындар бәйләнеше юғала. Ҡайһы бер кешеләр хатта үҙҙәренең олаталарын һәм өләсәләрен белмәйҙәр. Тик барыбер, ваҡыт үтеү менән, кешелә үҙ туғанлыҡ тамырҙары тураһында белеү ихтыяжы күтәрелә.

Башҡорттарҙа ғына түгел, ә башҡа халыҡтарҙа ла үҙ шәжәрәңде белеү – изгеләрҙең береһе. Борон заманда беҙҙен олатайҙар ырыу-ҡәбиләне, нәсел-нәсәпте, ата-бабаларыбыҙҙың исемдәрен ағас рәүешендә тармаҡландырып яҙа барғандар. Шәжәрә ғәрәпсә – "ағас”. Ни өсөн ағас һымаҡ төшөргәндәр? Ағас – боронғо башҡорттарҙа һауаны, ерҙе, ер аҫтын берләштереүсе билдә булған. Шул уҡ ваҡытта халыҡтың тормошон да сағылдырған. Тамыры – үткәнебеҙ, олоно – бөгөнгөбөҙ, ботаҡтары – киләсәгебеҙ. Ағас ни тиклем нығыраҡ, сыҙамлыраҡ булһа, ботаҡтары ла көслө була. Бына ни өсөн халҡыбыҙ шәжәрәне ағас рәүешендә яҙып ҡалдырған. Шәжәрә – оло хазина. Улар быуындан быуынға ҡәҙерле әйбер булараҡ күсә килгән.

Теманың актуаллеге. Ата-бабаларыбыҙҙың килеп сығышы һәм тамырҙары хаҡында мәғлүмәттәрҙе шәжәрә формаһында туплап, киләһе быуынға тапшырыу мөһим. Шәжәрә туғанлыҡ быуындарын бер-береһе менән бәйләй,

кешегә рухи көс өҫтәй. «Шәжәрә – сал тарихҡа бағыр тәҙрә, » – тип яҙа Ҡәҙим Аралбаев.

Теманың өйрәнеү тарихы. Беренсе шәжәрәләр борон уҡ барлыҡҡа килгән. Иң тәүгеләре булып болғар осорондағылар һанала, ҡайһы бер шәжәрәләргә меңдән ашыу йыл. Шәжәрә төҙөү йолаһы патриархаль-ырыу нигеҙҙәре дәүерендә барлыҡҡа килгән. Тәүҙә ул башҡорттарҙың ырыу экзогамияһы принцибына бәйле була. Икенсе һүҙҙәр менән әйткәндә, үҙеңдең туғандарыңды белеү мөһим, сөнки туғандар араһында никах тыйылған.

Беҙгә тиклем килеп еткән шәжәрәләрҙең күбеһе XVI – XIX быуатҡа ҡарай. Тикшереүселәр иҫәпләүенсә, яҙып алғанға тиклем шәжәрә фрагменттары халыҡ ауыҙ-тел ижады өлгөләре булараҡ һаҡланған. Шәжәрәләр бик күләмле булып киткәс, уларҙы хәтерҙә тотор өсөн яҙа башлағандар. Башҡорттарҙың генеалогик яҙмалары исламды ҡабул иткәндән һуң «шәжәрә» тигән ғәрәп һүҙе менән атала башлай. Алтын Урҙа ваҡытында һәм һуңыраҡ шәжәрәләр ырыу ярлыҡтарына оҡшаш ярым рәсми документҡа әүерелә. «Бының менән ҡайһы бер башҡорт шәжәрәләренең Сыңғыҙханға барып тоташҡаны иҫбат ителә. Башҡорт шәжәрәләре ниндәйҙер кимәлдә ер һәм азатлыҡ өсөн Ҡазан, Себер хандарына һәм Нуғай мырҙаларына ҡаршы көрәште һүрәтләй», –тип яҙа Ғайса Хөсәйенов.

Шәжәрәлә сағылыш тапҡан тағы ла бер ҙур тарихи факт – Башҡортостандың Рус дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылыуы һәм Иван Грозныйҙан ер биләмәләренә хужа булыуға грамоталар алыуы. Был шәжәрәләр аҫабалыҡ хоҡуҡтарын нығытҡан юридик документ һыҙаттарына эйә. Раил Кузеев билдәләүенсә, күп шәжәрәләргә рус батшаларының башҡорттарға яҙған хаттарының текстары индерелгән.

XIX –XX быуаттар дауамында Башҡортостанда генеалогия фәне бик күп материалдар туплай. Ләкин Бөйөк Октябрь социалистик революцияһынан һуң илдә совет режимы урынлашҡас, шәжәрәләр үткән заман ҡалдығы тип иҫәпләнә башлай. Ә баҫылып сыҡҡандары шул осорҙоң сәйәси ысынбарлығына ярашлы ҡыҫҡартыуҙар һәм мөхәррирләүҙәр менән нәшер ителгән. Кешеләргә феодаль аҡһөйәккә эйә булған туғандарын асыҡлауы ҡатмарлы булған.

Беҙҙең заманға тиклем 150 боронғо башҡорт шәжәрәләре һаҡланған. Улар Өфө, Ырымбур, Санкт-Петербург, Мәскәү дәүләт архивтарында һәм китапханаларҙа, шәхси коллекцияларҙа һаҡлана.

Был өлкәлә эшләгән ғалимдар байтаҡ. Уларҙың араһында Рәил Кузеев, билдәле ғалим-этнограф, тап ул шәжәрәне тәү өйрәнеүселәрҙең береһе тип һанала. Уның яҙмаларында шәжәрә – «генеалогик йылъяҙма» тип бирелә. Ғайса Хөсәйенов та башҡорт шәжәрәләренең өйрәнеүә ҙур роль индергән, үҙенең монографияларында ул үҙ милләтебеҙҙең яҙмаларын ғына түгел, ә башҡа төрки халыҡтар шәжәрәләренең дә үҙенсәлектәрен өйрәнгән. Тикшереүсе Әлфирә Фәттәхетдинова, әҙәбиәтсе Миңлеғәли Нәҙерғолов үҙ фәнни эштәрендә шәжәрәләрҙе классификацияларға бүлеп тикшергәндәр. Ҡәҙим Аралбаев, Әхәт Сәлихов, Зөфәр Толомғужиндың да китаптарын өйрәндем.

Быуаттар төпкөлөнән килгән төрлө шәжәрәләр йөкмәткеһе һәм формаһы буйынса бер төрлө түгел. Тышҡы билдәләре буйынса башҡорт шәжәрәләре ике төп төргә бүленә:

1) Номиналь (ябай) шәжәрәләр, унда шәжәрә генеалогия ағасы рәүешендә яҙыла. Ырыу башлыҡтарының исемлеге хронологик эҙмә-эҙлелектә урынлашҡан һәм бер уртаҡ тамырҙан килә. Шәжәрәнең был төрө йышыраҡ осрай.

2) Нарратив (ҡатмарлы).

Шәжәрә – быуындар йылъяҙмаһы, ырыу, ҡәбилә тарихы. Шәжәрә – борон-борондан килгән ырыу-араның документы, икенсе төрлө әйткәндә, бер туған кешеләрҙең дөйөм танышмаһы ла булып һанала. Башҡорттар элек-электән туғанлык юлдарын, үҙ тарихи ваҡиғаларын шәжәрәгә теркәп барған. Халыҡ әйтеүенсә, ағас – тамырһыҙ, кеше тарихһыҙ булмай. Һәр кешенең дә үҙ үткәне, быуаттар менән бәйләнеше бар. Шулар тураһында беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ҡая-таштарға уйып, шәжәрәләргә яҙып, теркәп ҡалдырған. Ләкин быуындар алмашыныуы хаҡында күп мәғлүмәт онотолған һәм юғалтылған. Шулай ҙа ҡайһы бер ғаиләләрҙә шәжәрәләр барлыҡ быуындары менән һаҡланған, архивтарҙан мәғлүмәттәр йыйылған. Был заманында үҙ тарихына битараф булмаған атай-олатайҙарҙың хеҙмәте – киләһе быуындар өсөн ысын хазина. Мәҡәләнең киләһе өлөшөндәге мәғлүмәт – Янбаевтар шәжәрәһе тураһында барасаҡ. Архив документтарын ҡуҙғатып, шулай уҡ минең ҡартайым – Янбаев Камил Әбделхаҡ улы менән әңгәмәләшеү барышында үҙ ата-бабаларымдың кем булыуына һәм ниндәй йәшәү рәүеше алып барыуына төшөндөм, төп үҙенсәлектәрен билдәләнем.

Янбаевтар Үҫәргән ҡәбиләһенең боронғо ырыуҙарының береһе һанала, уның атрибуттары булып ҡош – торна, тамға – ятаға, оран – туҡһаба килә. Архив материалдарында Янбаевтар нәҫелен документаль һүрәтләү бар, мәҫәлән:

1) «Ырымбур губернаһының 26-сы көнөндә һәм уның 9-сы Башҡорт кантоны ҡарамағындағы Этбаҡ ауылы старшинаһы Рыздәүләт Супанов командаһының ревизия әкиәте»;

2) "Ырымбур губернаһының һәм Этбаҡ ауылының 2-се Башҡорт кантонының 1859 йылдың 29 майындағы ревизия әките", Ырымбур һәм Өфө ҡалаларының дәүләт архивтарында һаҡлана.

Ревизия әкиәте – халыҡ иҫәбен алыу тигәнде аңлата.

Этбаҡ ауылы – хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Ейәнсура районы Башҡорт Үргене ауылының тәүге тарихи исеме. Был ауылда шәжәрәне изге мираҫ итеп быуындан быуынға тапшырыусы ата-бабаларым йәшәгән.

Кәримғол Ябаев, 1778 й. Документаль яҡтан раҫланған 7-се быуындағы ҡартатайым, Ябай ҡарттың дауамы. Фамилиябыҙ «Ябай» тигән исемдән барлыҡҡа килгән.

Кәримғолдоң 1859 йылда 2 ҡатындан 6 улы була.

Кинйәбикә Ураҙгилдина – тәүге ҡатыны, 1787 йылғы (62 йәш). Улдары:

1. Хоҙайбирҙе – 1816 йылғы;
2. Мөхәмәтшәриф – 1818 й.;
3. Ғәбиҙулла – 1824 й.;
4. Әбделшәриф – 1827 й.;
5. Әбделбасир – 1838 й..

Мөхибъямал Толомғужинанан –икенсе ҡатыны (44 йәш). Улдары:

6. Мөхәмәтғәли – 1849 й.

1859 йылдың 29 майына ҡарата ревизия әкиәте мәғлүмәттәре буйынса, Кәримғолдоң 3 ейәне һәм 4 ейәнсәре булған.

Кәримғолдоң өлкән улы – Хоҙайбирҙе – 1816 йылғы, 6-сы быуындағы ҡартатайым. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уның ғаиләһе тураһында тулы мәғлүмәт юҡ. Билдәле булыуынса, уның ҡатыны – Хәнифә Мырҙаҡаева (1819 йылғы). Уларҙың улдары- Әҙелмырҙа.

Әҙелмырҙа Ябаев– 1838 йылда тыуған, 5-се быуын ҡартатайым.

Ҡатыны – Ғәбиҙә Хәлитова(1840 йылғы). Улдары:

1. Ишмырҙа – 1858 й. ;
2. Бикмырҙа – тыуған йылы билдәһеҙ;
3. Әхмәтғәлим – тыуған йылы шулай уҡ билдәһеҙ;
4. Исхаҡ - 1878 й.

Исхаҡ Янбаев – минең 4-се быуын ҡартатайым. Документтар тултырған саҡта өйәҙ писары хаталаныуы сәбәпле ырыуҙың фамилияһы үҙгәрә.

1878 йылда тыуған һәм 1962 йылда 84 йәшендә вафат булған.

Исхаҡ Янбаевтың мөлкәте 1920 8йылда ауыл хужалығы иҫәбен алыуҙың шәхси картаһында теркәлгән. Ул ваҡытта Исхаҡтың 2 ҡаҙы, 2 тауығы, 1 быҙауы, 1 һыйыры һәм 6 берәмек ере булған.

Тормош иптәше Зөләйха менән 5 ул һәм 3 ҡыҙ тәрбиәләп үҫтергәндәр. Улдары:

1) Әбделхаҡ – 1909 й. ;
2) Әбделәхәт – 1914 й. ;
3) Вәлиәхмәт – 1918 й. ;
4) Ғәлиәхмәт – 1923 й. ;
5) Әбделхәй – 1925 й.

Бишенсе улы фронтҡа киткәс, ул ауылдаштар йыйылышында сығыш яһап, «Кәрәкһә, үҙем дә фронтҡа китәм», – тигән.

Әбделхаҡ Янбаев – 3-сө быуын ҡартатайым, Исхаҡ Янбаевтың өлкән улы. Әбделхаҡ ҡартай 1909 йылда тыуған, 1919 йылда тыуған Сәрбикәмал Монасиповаға өйләнгән. 1935 йылдың 18 сентябрендә уларҙың өлкән улы Камил тыуған. 1939 йылда Әбделхаҡ ҡартайым һатыусылар курсын тамамлай һәм һуғышҡа тиклем ауылда кибет һатыусыһы булып эшләй. 1941 йылдың 3 июлендә Әбделхаҡ ҡартайҙы һуғышҡа саҡыралар. Ул фронтҡа киткәндән һуң 7 ай үткәс, 1942 йылдың 1 апрелендә, икенсе улы Йәмил тыуа. Уға атаһын күрергә яҙмаған. Әбделхаҡ Янбаев коммунист була, Калинин фронтында фашистарға ҡаршы ҡаты һуғыштарҙа ҡатнаша. Күрһәткән батырлыҡтары өсөн

(1944 йылдың 1 ғинуарындағы фронттан һуңғы хатына ярашлы) «Ҡыҙыл Йондоҙ» хәрби орденына лайыҡ була. Әммә һуғышта, сатлама һыуыҡ көндә, 1944 йылдың 8 ғинуарында эсенә ауыр яра ала һәм 9 ғинуарҙа госпиталдә үлә.

Ҡартатайым Калинин өлкәһенең Ивач станцияһында, граждандар зыяратында, беренсе рәттә, беренсе урында ерләнгән. Быны Оборона министрлығының Архив белешмәһе раҫлай.

Камил Янбаев – ҡартайым, 1935 йылдың 18 сентябрендә Башҡорт Үргене ауылында тыуған. Уның бәхетле бала сағын ауыр һуғыш йылдары урлай. Ул бәләкәйҙән үк колхозда эшләй башлай, шуға ла 20 йәшендә генә мәктәпте тамамлай. Мәктәпте тамамлағас Салауат ҡалаһының һөнәри-техник училищеһында слесарь-монтажсы һөнәрен үҙләштерә. Шунан тыуған колхозында эшен дауам итә. Ете бала атаһы булараҡ, 1976 йылда икенсе училищены ҡыҙыл дипломға тамамлай һәм тимерсе – электр һәм газ менән иретеп йәбештереүсе белгеслеге ала. Пенсияға тиклем ошо һөнәр буйынса эшләй, уның дөйөм эш стажы – 42 йыл. Ҡартайым ауылда колхоздың тимерсе сварщигы булып 20 йыл эщләгән. Ауылда ҡартай ҡулы менән яһалған хужалыҡ кәрәк-яраҡтары булмаған бер ғаилә лә юҡ. Ул төрлө бысаҡтар, көрәктәр, һәнәктәр, матыгтар, күсәрҙәр, самауыр торбалары, һауыттар, эскәмйәләр, ҡапҡалар, мейестәр һәм башҡа әйберҙән оҫтаһы. Камил ҡартайға 2023 йылдың сентябрендә 88 йәш тула, әлеге ваҡытта ул ауылыбыҙҙың оло йәштәге кешеләренең береһе.

1940 йылда тыуған ҡәрсәйем – Лиза Хәсән ҡыҙы менән 66 йыл бергә йәшәйҙәр, 7 бала – 4 ул һәм 3 ҡыҙ тәрбиәләп үҫтергәндәр. Бөгөнгө көнгә ҡартайым менән ҡәрсәйемдең 18 ейән-ейәнсәре һәм 23 бүлә-бүләсәре бар.

Улдары:

1) Фәнил – 1960 й. ;
2) Венер – 1965 й.;
3) Илшат һәм Илфат – 1971 йылғылар, улар игеҙәктәр.

Илфат Янбаев – минең атайым, ғаиләлә 7-се бала, 1971 йылдың 22 майында тыуған. Ул – ғаилә усағын һаҡлаусы, бик оҫта ҡуллы кеше, уның тарафынан күп өҫтәл-ултырғыстар һәм башҡа әйберҙәр яһалған. Әлеге ваҡытта ул себерҙә эшләй. Әсәйем, Собханғолова Венера Әмир ҡыҙы менән 1993 йылда өйләнешәләр, 3 бала тәрбиәләйҙәр – Әлфир (1994 йылғы), Илсур (1998) һәм мин (2004).

Шулай итеп, минең шәжәрәм ябай төргә ҡарай. Ата-бабаларымдың үткәндәрен өйрәнеү бик ҡыҙыҡлы булды һәм был – ҙур эштең башы ғына.

## ӘҘӘБИӘТ

1. Толомғужин, З. Ғ. Шәжәрә тәрбиәгә эйә [Текст]/ З. Ғ. Толомғужин. – Өфө: Ғилем, 2007. – 462 бит.

2. Толомғужин, З. Ғ. Шәжәрә тәрбиәгә эйә [Текст]: икенсе китап/ З. Ғ. Толомғужин. – Өфө: Ғилем, 2009. – 352 бит.

3. Хусаинов Гайса. Шежере и книга//Литература. Фольклор. Литературное наследие. Кн. 1. Уфа: БГУ. 1975, с. 177-192 4)

4. Башкирские родословные /Сост., предисл., поясн. к пер. на рус. яз., послесловие и указатели Р. М. Булгакова, М. Х. Надергулова. – Уфа: Китап, 2002. – Вып. 1. Издание на рус. яз. – 480 с

5. Башкирские шежере /Сост., авторы вступ. статей М. Х. Надергулов, А. Г. Салихов; отв. ред. Ф. Г. Хисамитдинова. – Анкара: Анкамат, 2009. – 186 с. (на башк. и турец. яз.).

© Янбаева И.И., Әлибаев З.А., 2023

**УДК 821.161.1**

*Яубасарова А.Р., студент*
*Научный руководитель: Давлеткулова Г.Ш., ст. преп.*
*БГПУ им.М.Акмуллы, г. Уфа*

# БАШКОРТОСТАН В ПРОИЗВЕДЕНИЯХ РУССКИХ ПИСАТЕЛЕЙ И ПОЭТОВ

**Аннотация.** В данной статье анализируются произведения Л.К. Татьяничиной, И.Г. Эренбурга, Г.Б. Гофмана о Башкортостане. Отмечается мастерство авторов в описании пейзажа, подвигов башкирского народа, о героях Великой Отечественной войны, описании красоты родного края.

**Annotation.** This article analyzes the works of L.K. Tatyanichina, I.G. Ehrenburg, G.B. Hoffman about Bashkortostan. The skill of the authors in describing the landscape, the exploits of the Bashkir people, the heroes of the Great Patriotic War, the description of the beauty of their native land is noted.

**Ключевые слова:** Башкортостан, природа, произведения, русские писатели, поэты, произведение, подвиг, статья, стилистические фигуры.

**Keywords:** Bashkortostan, nature, works, Russian writers, poets, work, feat, article, stylistic figures.

Башкортостан – это одно из самых прекрасных мест на земле. Он известен своей дивной природой. К примеру, соприкасающиеся с голубым небом Уральские горы, живописные озёра Асылыкуль, Талкас, таинственная пещера Шульган-таш. Башкортостан также имеет многовековую историю, в страницах которой запечатлены бесчисленные подвиги наших батыров. Частью этой истории является также славные сыны и дочери Башкортостана, прославившие свою Родину своими открытиями, плодотворной работой.

Башкортостан являлся и до сих пор является источником вдохновения для многих известных людей. Не стали исключением и русские писатели. Среди них были Л. Н. Толстой, А. С. Пушкин, С. Т. Аксаков и многие другие. Они

делились своими впечатлениями о Башкортостане в своих очерках, статьях, посвящали целые рассказы, повести, стихотворения.

К числу писателей, очарованных Башкортостаном, относилась и Людмила Константиновна Татьяничева. Она родилась в 1915 году в городе Ардатове Республики Мордовии. В 1926 году Татьяничева осталась без матери, после чего её радушно приняли родственники по отцовской линии, которые жили на Урале. [5, 28]. Именно тогда она познакомилась с Башкортостаном, вдохновилась её природой, культурой. Людмила Константиновна посвятила ряд стихотворений этому чудесному краю. Среди них было и стихотворение «Юрюзань». Она с помощью различных стилистических фигур смогла передать всю красоту этой реки. В нём поэтесса сначала описывает родник, похожий на «тончайшую нить» [1, 10]. Он вытекает из горы и позже превращается в ручей. Его течение поэтесса сравнивает с «конём», потерявшим узду, и скачущим густохвойной тайгой. После ручей становится сильной, бурлящей рекой, волны которой «гудят, как шмели». Журчание этих волн похоже на песню, которое никого не оставит равнодушным. Она не только успокаивает, но и оживляет сердца людей.

Илья Григорьевич Эренбург – известный поэт, писатель, который родился в 1891 году в Киеве. Илья Григорьевич большую часть своей жизни жил за границей, но иногда возвращался в Россию. В 1920 годы он совершил путешествие по русской глубинке [4, 45]. Писатель увидел жизнь и быт жителей Урала и Сибири, после написал книгу «Хлеб наш насущный», где описывались впечатления, которые он испытал от увиденного. Он также написал статью «Башкиры». В данной статье Илья Григорьевич даёт характеристику башкирскому народу, написав, что они очень хорошие люди: «башкиры мирный и добрый народ», «башкиры умеют любить». [2, 3]. «Однако, когда их родине угрожает опасность, когда их свободу пытаются отнять, они не будут стоят в стороне. Это подтверждают подвиги, которые они совершали в различных войнах». В данной статье Илья Григорьевич описывает в основном Великую Отечественную войну, в ходе которой выходцы из Башкортостана бесстрашно сражались с врагом. Он также проводит параллель с Отечественной войной 1812 года, после окончания которой их прозвали «северными амурами», цитирует высказывание французского мемуариста Дюпюи: «Нас особенно угнетали отряды башкир, вооружённых копьями и луками». Другими словами, в поездка на Урал, башкирский народ и его история очень впечатлили И. Г. Эренбурга.

Башкортостан, как уже говорилось, имеет не только дивную природу и богатую историю, но и известных личностей. Одному из них и посвятил свою повесть Генрих Борисович Гофман.

Генрих Борисович Гофман родился в 1922 в городе Иркутске. Был участником Великой Отечественной войны. В 1944 году удостоен звания Героя Советского Союза. В литературу пришёл в 1958 году. Главная тематика его произведений – жизнь военных лётчиков и подвиги участников подпольных

антифашистских организаций в годы Великой Отечественной войны. Повесть «Чёрный генерал» посвящена уроженцу Башкортостана – Даяну Баяновичу Мурзину.

Даян Мурзин – это советский солдат, партизан, прошедший войну от начала до конца и совершивший множество подвигов. После освобождения СССР от фашистских захватчиков, в августе 1944 года, его и многих партизан перебросили в Чехословакию, чтобы помощь освободить эту страну. Именно эти и последующие события описываются в данной повести. Тогда ему было всего 22 года: «а ему, молодому советскому офицеру, которого командование считало уже старым и опытным партизанским командиром, было только двадцать два года» [3, 80]. На вопрос генерала, справятся ли они с этой задачей, Даян Баянович уверенно дал положительный ответ. В ходе партизанской войны в Чехословакии он смог найти общий язык с народом, со своими товарищами. Генрих Гофман описал его также как мудрого и рассудительного командира. Во время одного из наступлений Даян Мурзин смог сохранить жизни оставшихся людей из отряда и вывести их из окружения. Его имя до сих живёт в устах людей, а его подвигами восхищаются множество поколений.

Таким образом, тема Башкортостана заняла особое место в произведениях русских писателей и поэтов. Благодаря им люди знакомятся с жизнью, историей башкир, видят глазами авторов всю красоту Башкортостана.

## ЛИТЕРАТУРА

1. «Поэты Урала. Сборник стихов. Редколлегия: М. Гроссман и др. – Челябинское книжное издательство, 1954. – 140 с.

2. И.Эренбург . Статья газеты «Красная звезда». Москва 1942. – №273. – 16 с.

3. М.Г. Рахимкулов, С.Г. Сафуанов, С. А. Халфин. «Башкирия в русской литературе» 5 том. – Уфа: Китап, 2001. – 512 с.

4.Фрезинский. Б. Я. «Об Илье Эренбурге: Книги, люди, страны: [избранные статьи и публикации] – Москва: Новое литературное обозрение, 2013. – 902 с.

5. Ханбеков, Л. В. Судьба – это мы: Очерк творчества поэтессы Л. К. Татьяничевой / Л. В. Ханбеков. – Челябинск: Юж.-Урал. кн. изд-во, 1984. –142с.

© Яубасарова А.Р., Давлеткулова Г.Ш., 2023

*Научное издание*

# Родной язык, культура и литература в системе образования: традиции и инновации

Материалы Всероссийской (с международным участием)
научно-практической конференции


**Редакционная коллегия:**

Гареева С.А. – канд. биол. наук, проректор по научно-исследовательской работе БГПУ им. М. Акмуллы

Хусаинова Л.М. – д-р филол. наук, проф., декан факультета башкирской филологии БГПУ им. М. Акмуллы

Тагирова С.А. – канд. пед. наук, доц., зав. кафедрой башкирского языка и литературы факультета башкирской филологии БГПУ им. М. Акмуллы

Галина Г.Г. – канд. филол. наук, доц. кафедры башкирского языка и литературы, заместитель декана по научной работе факультета башкирской филологии БГПУ им. М. Акмуллы

Набиуллина Г.М. – канд. филол. наук, доц. кафедры башкирского языка и литературы факультета башкирской филологии БГПУ им. М. Акмуллы

Тулумбаев В.З. – канд. филол. наук, доц. кафедры башкирского языка и литературы факультета башкирской филологии БГПУ им. М. Акмуллы

Давлеткулова Г.Ш. – ст. преп., заместитель декана по учебной работе факультета башкирской филологии БГПУ им. М. Акмуллы

Юлбарисова Л.Ф. – ассистент, лаборант кафедры башкирского языка и литературы факультета башкирской филологии БГПУ им. М. Акмуллы


*Статьи публикуются в авторской редакции*


Подписано в печать __.02.2023
Формат 60Х84/16. Компьютерный набор. Гарнитура Times New Roman.
Отпечатано в ризографе. Усл. печ. л. – ____ Уч.-изд.л. – ____
Тираж ____ экз. Заказ № ____

Отпечатано в типографии ИП Копыльцов П.И.
394052, Воронежская область, г. Воронеж, ул. Маршала Неделина, д. 27, кв. 56.
Тел.: 89507656959. E-mail: Kopyltsow_Pavel@mail.ru
ИНН 366411965235, ОГРНИП 319366800098472